Ҡ.З. Әхмәров

# Башҡорт яҙыуы тарихынан



**Рәсәй фәндәр академияһы Өфө ғилми үҙәге**
**Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының**
**80 йыллығына арнала**

К. З. Ахмеров

# Из истории башкирской письменности

(История алфавита и орфографии башкирского литературного языка)

*Издание второе*

КИТАП

Уфа • 2012

Ҡ. З. Әхмәров

# Башҡорт яҙыуы тарихынан

(Башҡорт әҙәби теленең
алфавиты һәм орфографияһы тарихы)

*Икенсе баҫма*

КИТАП

Өфө • 2012

УДК 003 (470.57)
ББК 70 (2 Рос.Баш)
Ә 85

Яуаплы мөхәррире филология фәндәре докторы
Ф. Ғ. Хисамитдинова

*Төҙөүсеһе* Р. Н. Кәримова

**Әхмәров Ҡ. З.**

Ә 85 Башҡорт яҙыуы тарихынан / Ҡ. З. Әхмәров [яуаплы мөх. Ф. Ғ. Хисамитдинова] ; РФА ӨҒҮ Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты. — Өфө: Китап, 2012.

ISBN 978-5-295-05619-2

Китапта башҡорт халҡының яҙыу тарихы тасуирлана. Башҡорт алфавитының, орфографияһының төҙөлөү һәм үҫеү юлдары күрһәтелә.

Был китап уҡытыусылар, студенттар, тел ғилеме өлкәһендә эшләүселәр һәм, ғөмүмән, халҡыбыҙҙың тел тарихы менән ҡыҙыҡһыныусылар өсөн файҙалы ҡулланма буласаҡ.

УДК 003 (450.57)
ТП – 138/12 ББК 70 (2 Рос.Баш)

ISBN 978-5-295-05619-2

© РФА ӨҒҮ Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты, 2012
© Башҡортостан Республикаһының Зәйнәб Биишева исемендәге Башҡортостан «Китап» нәшриәте дәүләт унитар предприятиеһы, 2012

*К. З. Әхмәров*

# БАШҠОРТ ЯҘЫУЫ ТАРИХЕНӘН

ӨФӨ — 1972

## ИКЕНСЕ СЫҒАРЫЛЫШҠА ИНЕШ ҺҮҘ

Ҡасим Закир улы Әхмәровтың исеме башҡорт тел ғилеме тарихы менән тығыҙ бәйләнгән һәм күп һанлы хеҙмәттәренең әһәмиәте бөгөнгө көндә лә баһалап бөткөһөҙ.

Ҡасим Әхмәрҙең «Башҡорт әҙәби теленең алфавиты һәм орфографияһы тарихы» хеҙмәте 1967 йылда уҡ баҫырға әҙерләнгән була. Авторҙың һәм яуаплы мөхәррирҙең вафат булыуы һәм башҡа сәбәптәр арҡаһында уны баҫтырып сығарыу оҙаҡҡа һуҙыла, бары тик 1972 йылда ғына донъя күрә. Бөгөн был һирәк библиографик баҫма башҡорт тел ғилемендә генә түгел, дөйөм төрки тел ғилемендә лә мөһим урын тотҡан хеҙмәттәрҙең береһе. Монография «Башҡорт яҙыуы тарихынан» тип аталһа ла, Ҡасим Әхмәр яҙманың кешелек тарихында тотҡан урынын, төрки халыҡтарының яҙыу тарихын да ентекле тикшерә.

Был сығарылышҡа Ҡ. З. Әхмәровтың биографияһы, хеҙмәттәренең исемлеге, башҡорт яҙыуына ҡағылышлы ҡайһы бер материалдар үрнәктәре лә өҫтәп бирелде.



**Доктор филологических наук, профессор**
**Касим Закирович Ахмеров**
*(1900—1969 гг.)*

## Касим Закирович Ахмеров

Доктор филологических наук, профессор Касим Закирович Ахмеров — один из тех ученых-башкироведов, с именами которых связано зарождение и развитие башкирского языкознания как самостоятельной отрасли науки.

К. З. Ахмеров родился 7 ноября 1900 года в с. Бураево (ныне Бураевский район Республики Башкортостан) в семье служителя мусульманского культа. Получив образование в медресе «Расулия» в г. Троицке, он с 1921 года работает преподавателем родного языка и литературы в различных учебных заведениях Башкирии.

Научная деятельность К. З. Ахмерова начинается с 1928 года, когда он становится сотрудником Научного общества по изучению быта, истории и культуры башкир. Это был период становления башкирского литературного языка, создания национальной письменности и введения башкирского языка в различные сферы общественной жизни. Поэтому развитие башкирского языкознания, естественно, было связано с практическими задачами языкового строительства в республике. К. З. Ахмеров принимается за создание программ, руководств и школьных учебников по башкирскому языку. Его первый учебник для начальных классов по родному языку появился в 1932 году. В последующие годы им было выпущено более десятка учебников, учебных пособий для школ и педагогических училищ. Его книга по синтаксису башкирского языка для средней школы выдержала несколько изданий и по сей день используется в качестве учебника.

С 1938 года К. З. Ахмеров стал научным сотрудником Башкирского научно-исследовательского института языка, литературы и истории им. М. Гафури при Совете министров БАССР,

переименованного затем в Институт истории, языка и литературы Башкирского филиала АН СССР. В разные годы возглавлял он здесь сектор языка, направлял усилия языковедов на решение актуальных задач башкирской лингвистики.

Весьма плодотворно трудился К. З. Ахмеров в области изучения грамматического строя башкирского языка. В 1946 году за диссертационную работу «Современный башкирский язык (Части речи)», которую в свое время высоко оценивал член-корреспондент АН СССР Н. К. Дмитриев, ему была присуждена ученая степень кандидата филологических наук.

К. З. Ахмеров опубликовал серию статей по различным аспектам синтаксиса и создал две крупные монографии о строении простого (1958) и сложносочиненного (1960) предложения в современном башкирском языке. В этих работах была наиболее полно и всесторонне изучена структура простого и сложносочиненного предложений, раскрыты специфические особенности членов предложения, интонации и порядка слов. За исследования в области синтаксиса башкирского языка К. З. Ахмерову в 1963 году присуждается ученая степень доктора филологических наук.

Большой вклад внес К. З. Ахмеров в разработку орфографических норм башкирского литературного языка. Начиная с 30-х годов и до последних лет своей жизни он постоянно занимается вопросами совершенствования правописания, публикует статьи, пособия для школ по орфографии и пунктуации. Составленный им «Орфографический словарь башкирского языка» издавался дважды (1942, 1952).

Развитие башкирской лексикографии также связано с именем К. З. Ахмерова. Немало труда было вложено им при подготовке первых больших двуязычных словарей («Русско-башкирский», 1948; «Башкирско-русский», 1958; «Русско-башкирский», 1964), в которых он участвовал в качестве составителя и члена редколлегии. Под его же редакцией выпущен терминологический словарь по химии. Названные словари сыграли определенную роль в развитии литературного языка, в унификации терминов, в дифференциации значений слов и уточнении их форм, одновременно вырабатывались научные основы башкирской лексикографии.

К. З. Ахмеров вел большую работу по редактированию языковедческих и историко-этнографических работ. Под его редакцией вышли в свет «Башкирские шежере», широко

известная в тюркологии «Грамматика башкирского языка» Н. К. Дмитриева на башкирском языке и многие другие. Он являлся также одним из авторов первой сопоставительной грамматики русского и башкирского языков.

В последние годы К. З. Ахмеров занимался исследованием истории башкирского литературного языка, написал монографический очерк по истории башкирской письменности (алфавит и орфография). В этой книге дана характеристика древнетюркской (или орхоно-енисейской) письменности, высказаны мысли о связи некоторых башкирских тамг с графическими знаками этого письма. Автору удалось подробно охарактеризовать и проанализировать разновидности письменности у башкир, основанные на арабской, латинской и русской графиках, показать степень отражения ими фонетического строя языка.

Задуманная автором большая монография по истории башкирского литературного языка осталась незавершенной. Разработана лишь первая часть монографии, в которой исследован литературный язык башкир до революции — взаимоотношение общенародного разговорного языка и языка произведений народного творчества, охарактеризован письменный язык тюрки, которым башкиры пользовались до начала XX века.

За 40 лет неутомимой и кропотливой работы на поприще науки Касим Закирович Ахмеров создал более 90 научных работ, среди которых есть и крупные монографии по самым актуальным проблемам башкирского языкознания, представляющие несомненный интерес для тюркологии статьи, популярные брошюры, учебники и учебные пособия.

К. З. Ахмеров был вдумчивым ученым. Благодаря постоянной работе над собой он смог шагать вровень с бурно развивающейся наукой о языке.

Заслуги К. З. Ахмерова были по достоинству оценены правительственными наградами — орденом «Знак Почета», медалями, Почетными грамотами Президиума Верховного Совета Башкирской АССР.

Касим Закирович пользовался заслуженным авторитетом среди своих сослуживцев и учеников, оставаясь чрезвычайно скромным и трогательно добрым человеком.

***З. Г. Ураксин***

## ИНЕШ

Яҙыу — телдең аралашыу даирәһен киңәйтеүсе график формаһы. Яҙыуҙың барлыҡҡа килеүе һәм үҫеше ижтимағи тормош талаптарына бәйләнгән. Кешеләргә үҙҙәренең уй-фекерҙәрен, һөйләгән һүҙҙәрен алыҫҡа илтергә, яҙыуҙа беркетергә, нығытырға, хәҙерге һәм киләсәк быуын өсөн онотолмаҫлыҡ итеп һаҡларға кәрәк булған. Шуның һөҙөмтәһендә яҙыу килеп тыуған.

Яҙыуҙың башланғысы ниндәй ҙә булһа бау йәки материяға төйөндәр бәйләү, нимә лә булһа аңлатыу өсөн теге йәки был предметты ебәреү һ. б. шуның һымаҡ шартлы әйберҙәрҙә күренә. Мәҫәлән, Төньяҡ Америка индеецтары һуғыш иғлан итеүҙе белдереү өсөн томагавк[1] ебәрер булғандар. Томагавкты илсе алып килеп ергә ҡуйған: әгәр томагавкты дошман яҡ ерҙән алһа, был һуғышты ҡабул итеүҙе белдергән. Ҡайһы бер халыҡтарҙа тыныслыҡ символы булып төрөпкә хеҙмәт иткән; тыныс йәшәүҙе белдереү өсөн бер-береһенә дошман булған ҡәбиләләр шул төрөпкә менән сиратлап тәмәке тартҡан. Суматра утрауында йәшәүселәр дуҫлыҡ билдәһе итеп тоҙ, дошманлыҡ билдәһе итеп борос ебәрер булғандар. Геродоттың яҙыуына ҡарағанда, бер ваҡыт скифтар фарсыларға тәлмәрйен, сысҡан, ҡош һәм биш уҡ ебәргәндәр. Был предметтар: «Әгәр һеҙ, фарсылар, ҡош шикелле һауала оса, тәлмәрйен шикелле һаҙлыҡтарҙа һикерә, сысҡан шикелле ер аҫтына йәшенә белмәһәгеҙ, беҙҙең уҡтарҙан бөтәгеҙ ҙә һәләк булаһығыҙ», — тигән мәғәнәне белдергән[2].

---

[1] *Томагавк* — Төньяҡ Америка индеецтарында тимерҙән эшләнгән оҙон һаплы балта формаһындағы һуғыш ҡоралы.

[2] *Истрин В.А.* Развитие письма. М., 1961. 68—69-сы биттәр.

Көньяҡ Америкала йәшәүсе боронғо перу халыҡтары төрлө төҫкә буялған йәки буялмаған төйөндәр ҡулланғандар. Был төйөндәрҙән һәр бер төҫ үҙенә айырым мәғәнә белдергән. Ҡара төйөн — үлем, аҡ — көмөш йәки тыныслыҡ, ҡыҙыл — һуғыш, һары — алтын, йәшел — икмәк. Әгәр төйөн буялмаған булһа, ул һанды белдергән: бер төйөн унды, ике төйөн — йөҙҙө, өс төйөн меңде аңлатҡан.

Индеецтарҙың горун һәм ирокез ҡәбиләләрендә төйөн урынына төрлө төҫтәге ҡабырсаҡтарҙан яһалған төймәләр ҡулланылған. Ҡабырсаҡтарҙы, ваҡ ҡына киҫәктәргә бүлеп, епкә теҙгәндәр. Бында ла ҡара төҫ ниндәй ҙә булһа бер ҡайғыны аңлатҡан, мәҫәлән, үлем, бәхетһеҙлек, ҡурҡыныс; аҡ — тыныслыҡ, һары — алтын, ҡыҙыл — һуғыш. Был төҫтәр хәҙерге көндә лә үҙҙәренең мәғәнәләрен юғалтмаған. Мәҫәлән, ҡара — ҡайғы, аҡ флаг — тыныслыҡ тәҡдим итеү һ. б. Ҡайһы бер халыҡтар киртләсләгән ағас киҫәктәре — биркалар ҡулланғандар. Мәҫәлән, бурысҡа әйбер алғанда биркаға бурысҡа алынған әйбер һанынса киртләстәр яһала ла, бирка урталайға бүленеп, бер яртыһы бурысҡа биреүсе ҡулында, икенсеһе бурысҡа алыусыла ҡала. Шулай итеп, был бирка расписка хеҙмәтен үтәгән.

Австралиялағы һәм Африкалағы ҡайһы бер ҡәбиләләр тимер таяҡ (жезл) ҡулланған. Бер ҡәбиләнән икенсе ҡәбиләгә илсе булып барған кешеләргә бирелгән был таяҡ ике төрлө роль уйнаған: беренсенән, ул илсегә ҡәбилә тарафынан вәкәләтлек бирелгәнлекте раҫлаһа, икенсенән, уға төшөрөлгән киртләстәр барғас һөйләргә тейеш булған һүҙҙәрҙе илсенең иҫенә төшөрөү билдәһе булып хеҙмәт иткән. Австралияла урындағы ҡәбиләләрҙең ҡайһы берҙәрендә оҙонса түңәрәк таҡталар (чуринги) ҡулланылған. Был таҡтаға түңәрәктәр, ярым түңәрәктәр төшөрөлөп, улар предметтарҙың һанын белдергәндәр. Шуның менән бергә был түңәрәк һәм ярым түңәрәктәрҙең урынлашыу тәртибе һәм ҙурлығы, бәләкәйлеге билдәле бер мәғәнә аңлатҡан.

Бирка, төйөн яҙыуы һәм башҡа шуның кеүек шартлы яҙыу ҡалдыҡтары беҙҙең халыҡ араһында әле революцияға тиклем һаҡланып килде. Мәҫәлән, шундай ғәҙәт бар ине: мастерға тире иләргә биргәндә, ағасты киртләсләп икегә яра торғайнылар, шуның береһе мастерға бирелгән тирегә тағыла, икенсеһе тире иләргә биреүсе ҡулында ҡала. Тире әҙер булғас, тире иләргә биреүсе кеше ағастың үҙендәге яртыһын алып килеп, мастер, уны үҙендә ҡалған яртыһына ҡуйып ҡарағас, уның киртләсе тап килһә, тирене хужаһына бирә торғайны.

Академик И. Лепёхин 1770 йылда Башҡортостанда йөрөгән сағында халыҡ араһында төйөн яҙыуының киң рәүештә ҡулланылышын күрә. Хатта хөкүмәт органдарының да айырым осраҡтарҙа төйөн яҙыуын файҙаланыуын әйтә. И. Лепёхин үҙенең көндәлектәрендә шундай бер ваҡиғаны һөйләй: улар, бер башҡорт ауылына килгәс, ылау алыу өсөн, үҙҙәренең документтарын күрһәтәләр, документ ике телдә — рус һәм төрки телдәрендә яҙылған булһа ла, унда төйөндәр булмаған, башҡорттар ризаһыҙлыҡ белдерә. «Сөнки, — ти академик Лепёхин, — Башҡортостанда уҡый-яҙа белеүселәр бик һирәк осрағанға, юл йөрөү документтарына күпме ылау бирелергә тейеш булһа, шул тиклем төйөндәр төйнәлгән бау беркетелә, был төйөндәр башҡорттарҙа, губернаторҙарҙың, воеводаларҙың мөһөр баҫҡан документтарына ҡарағанда, мөһимерәк һанала»[3].

Башҡорт халҡының гүзәл ҡыҙы, күренекле яҙыусы Һәҙиә Дәүләтшина ла үҙенең «Ырғыҙ» романында шартлы яҙыу ҡалдыҡтарына бәйле бер ваҡиғаны яҙып китә: Гөлйөҙөм Айбулатҡа бүләктәр ебәрә, ул үҙенең Айбулатты һөйөү хистәрен хат менән түгел, ә бүләк итеп ебәрелгән әйберҙәрҙәге билдәләр менән белдерә, Һәҙиә Дәүләтшина быны түбәндәгесә тасуирлай: «Ул үҙенең ҡайнар һөйөү хистәрен эсенә йыйған матур бүләктәр ебәргән: бына үткән яҙҙы тәүге осрашҡанда үҙе ябынған ал кешмир яулыҡтың ике бөртөк сәскәһе. Ул шуны өҙгән дә, яндырылған шырпының бер башына ҡош йөнө бәйләп, ошо ал сәскәләргә ураған. Тимәк, Өсҡайын төбө уның бөгөнгөләй хәтерендә. Яулыҡтың ике бөртөк сәскәһе — уларҙың шундағы икәүләп осрашыуҙарының билдәһе, Гөлйөҙөм дә, бына ошо янған шырпы һымаҡ, янып, көйөп, йәйҙе үткәргән, ләкин осоп барыр өсөн, ошо күк күгәрсен ҡауырһыны кеүек, еңел ҡанаттары булмаған. Етмәһә, матурлап тороп, төрлө йөндән ситтәренә ваҡ ҡына сулпылар төйөп суҡлаған, йәшел атлас менән ҡыҙыл бәрхәттән ҡорап яһаған тәмәке тоҡсайы. Был — ҙур вәғәҙә. Киләсәктәге яҡты бәхеттәр тураһында, ҡауышыу тураһында йылы өмөттәр бирә торған теләктәр билдәһе»[4].

Был миҫалдар башҡорт халҡының борон замандарҙа яҙыу урынына шундай төрлө шартлы билдәләрҙе ҡулланғанын күрһәтә.

---

[3] Продолжение дневних записок путешествия академика и доктора медицинских наук Ивана Лепехина по разным провинциям Российского государства в 1770 г. Спб, 1802. 40-сы бит.

[4] *Һәҙиә Дәүләтшина.* Ырғыҙ. Өфө, 1961. 159-сы бит.

Лəкин былар бөтəһе лə ысын мəғəнəһендə яҙыу булмай. Беренсе яҙыу **пиктографик** (латин һүҙе *picto* — рəсемгə төшөрəм, грек һүҙе *grapho* — яҙам, туп-тура əйткəндə, «һүрəт яҙыуы») яҙыуҙан башланып китə. Был типтағы яҙыу беҙҙең эранан VI—VIII мең йылдар элек барлыҡҡа килə.

Пиктографик яҙыу айырым һүрəттəрҙəн тора, улар айырым өндəргə, һүҙҙəргə бүленмəй, һəр бер һүрəт ниндəй ҙə булһа бер нəмə тураһында белдерə.


1 2 3 4 5 6 7 8 9 10 11 12

*1-се һүрəт.* Пиктографик яҙыу. Юл журналы

Бына был һүрəттəр—Аляска ярымутрауында йəшəгəн эскимостың юл журналы. Һүрəттəр фил һөйəгенə төшөрөлгəн. Һүрəт яҙыуы түбəндəгелəрҙе аңлата: 1 — һөйлəүсе бер ҡулы менəн үҙен, икенсе ҡулы менəн алыҫты күрһəтə, йəғни «киттем» тигəн мəғəнəне белдерə; 2 — юғары күтəрелгəн ишкəк — «кəмəлə» тигəнде; 3 — башына ҡуйылған ҡулы «йоҡланым» тигəнде аңлата; күтəрелгəн ҡулындағы бер бармаҡ «бер төн» мəғəнəһен бирə; 4 — түңəрəк эсендəге нөктə — «уртаһында йорт булған утрауҙа»; 5 — «мин алыҫҡа киттем». Быны белдергəндə, һөйлəүсе бер ҡулы менəн үҙен, икенсе ҡулы менəн алыҫты күрһəтə; 6 — «кеше йəшəмəгəн утрауҙа»; 7 — «унда ике төн йоҡланым»; 8 — «ҡулда гарпун»[5], йəғни «гарпун менəн һунарға йөрөйөм»; 9 — «тюлендəргə»; 10 — «уҡтан атам»; 11 — артҡа боролған кəмə, ике ишкəк, йəғни «икенсе кеше менəн ҡайтам»; 12 — «йортома килеп етəм».

2-се һүрəттə Төньяҡ Америка индеецтарының сауҙа килешеүе. Был һүрəттең уң яғында утыҙ таяҡ, ҡондоҙ һəм мылтыҡ һүрəте төшөрөлгəн, «һунарҙа атып алынған 30 ҡондоҙ тиреһе» тигəн һүҙ. Урталағы крест «алмашырға» тигəн мəғəнəне аңлата. Уң яҡта нəмəлəргə алмашырға икəнлеге күрһəтелə: бизонға, ҡамаға һəм һарыҡҡа.

---

[5] Диңгеҙ хайуандарын аулағанда, бауға бəйлəп ырғытыла торған һөңгө һымаҡ ҡорал.



*2-се һүрәт.* Пиктографик яҙыу. Сауҙа килешеүе



*3-сө һүрәт.* Пиктографик яҙыу. Индеецтарҙың ғаризаһы

3-сө һүрәттә Төньяҡ Америка индеецтарының Америка Ҡушма Штаттары президентына 1849 йылда яҙған ғаризаһы. Был ғаризала улар үрге күлдән күрше күлгә күсергә рөхсәт һорайҙар. Яҙыу түбәндәгесә аңлатыла: «индеецтарҙың ете ырыуы бөтәһе лә һорай» — һәр бер ырыуҙың үҙенең символы бар: балыҡ, кеше, ҡондоҙ, көнгөрә, торна һ. б. Баштарҙы, йөрәктәрҙе бергә тоташтырған һыҙыҡтар үҙҙәренең һорауҙарын «тулы ризалыҡ һәм бер фекерҙә тороп ебәрәбеҙ» тигән мәғәнәне аңлата. Торна ырыуы башлығының күҙе бер үк ваҡытта ике яҡҡа ҡараған: береһе — бөйөк кешегә, йәғни президентҡа, икенсеһе ғаризала әйтелгән күлдәргә йүнәлдерелгән.

Пиктографик яҙыу ҡайһы бер осраҡтарҙа хәҙерге көндә лә ҡулланыла (мәҫәлән, ҡала урамында йөрөү ҡағиҙәләрен белдергән күрһәткестәр, төрлө оҫтаханалар һәм ателье алтаҡталарындағы), йәштәр, үҙ-ара шаярып хат яҙышҡанда, йыш ҡына пиктографик яҙыу ҡулланалар.

Рәсәй социаль-сәйәси дәүләт архивында йәш Володя Ульяновтың (В. И. Ленindың) үҙенең иптәше Боря Формаковскийға яҙған пиктографик хаты һаҡлана. Туҙға яҙылған был хат (4-се һүрәт) Төньяҡ Америка индеецтарының Америка Ҡушма Штаттары президентына яҙған билдәле ғаризаларын (3-сө һүрәт) хәтерләтә. Алты һүрәт (самауыр, ҡыҫала, тауис һ. б.) балаларҙың үҙ-ара шаярып ҡушҡан ләҡәп исемдәре булырға тейеш; был һүрәттәрҙең баштарын, йөрәктәрен бергә ҡушҡан һыҙыҡ фекер берлеген күрһәтә; был һыҙыҡтар һыу ҡойоноп ятҡан ҡара һаҡаллы кешегә барып тоташҡан, балаларҙың һорауы шул кешегә йүнәлдерелгәнлеген аңлата булһа кәрәк; балаларҙың нимә һорауҙары хаттың уң яғындағы һүрәттәр менән белдерелә: һунарсылар булып уйнап асыҡҡан балалар (ҡоралы алты кеше фигураһы һәм айыу һүрәте) һыу ҡойоноп ятҡан кешенән өйгә ҡайтып (өй һүрәте) үҙҙәрен ашатыуҙы һорайҙар (колбаса, кувшин, икмәк; эйелеп, шул ашамлыҡтарға аңшайып ҡарап торған алты бала йөҙө, һорау билдәһе). Хаттың юғары өлөшөндә ятҡан бала, әгәр балаларҙың һорауы ҡабул ителмәһә, шундай хәл булыуы мөмкинлеген күрһәтә[6].

Һүрәттәр йыш ҡулланыу арҡаһында бара-бара айырым һүҙҙәрҙе (йәки уның мәғәнәле киҫәктәрен) белдерә башлау менән пиктографик яҙыу идеографик (икенсе төрлө әйткәндә, иеро-

[6] *Истрин В. А.* Возникновение и развитие письма. М., 1965. 79—80-се б.



*4-се һүрәт.* Йәш Володя Ульяновтың (В. И. Ленындың) үҙенең иптәше Боря Формаковскийға Америка индеецтарының пиктографияһына оҡшатып яҙған хаты

глифик, логографик) яҙыуға әйләнә. Идеографик яҙыу (грекса *idea* — төшөнсә, *grapho* — яҙам, туп-тура әйткәндә, «төшөнсәләр яҙыуы») беҙҙең эраға тиклем IV—III мең йылдар элек барлыҡҡа килә.

Ҡайһы бер телселәр идеографик яҙыуҙың пиктографик яҙыуҙан төп айырмаһы итеп һүрәттәрҙең шартлы билдәләргә әйләнеүен алалар. Әлбиттә, йыш ҡулланыу арҡаһында пиктографик яҙыуҙағы һүрәттәр ябайлаша баралар һәм күп ваҡытта шартлы билдәләргә әйләнеп китәләр. Ләкин төп айырма билдәләрҙең формаһында түгел, ә шул билдәләрҙең ниндәй мәғәнә аңлатыуҙарына бәйләнгән. Идеографик билдәләр, үрҙә әйтелгәнсә, айырым һүҙҙәрҙе йәки уның мәғәнәле киҫәктәрен белдерәләр. Быға миҫал итеп хәҙерге көндә ҡулланылған идеограммаларҙы (фәнни-техник билдәләрҙе) күрһәтеп китеү ҙә етә (√ — тамыр, O — кислород, ⊕ — атом ядроһы h. б.).

Бынан дүрт мең йыл элек төҙөлгән ҡытай яҙыуы идеографик системаға ҡоролған. Ҡытай телендә «кеше» тигән һүҙ 人 билдәһе менән (ике аяҡ), ауыҙ — 口, ишек 目 билдәһе менән аңлатыла. Абстракт төшөнсәләр конкрет предметтарҙы белдерә торған билдәләрҙе бергә ҡушыу менән аңлатыла. Мәҫәлән, шул уҡ ҡытай телендә 人 (кеше) һәм 木 (ағас) билдәләре бергә

ҡушылһа, «ял итеү» мәғәнәһен белдерә (ғәҙәттә, ағас күләгәһендә ял итәләр)[7].

Идеографик яҙыу системаһында билдәләр, бара-бара үҙгәреп, бөтөнләй танымаҫлыҡ хәлгә килергә мөмкин. Мәҫәлән, ҡытай телендә «ҡош» мәғәнәһендә йөрөтөлгән  билдәһе ҡошҡа бөтөнләй оҡшамаған тиерлек.

Идеографик яҙыу ҡулланыу өсөн уңай түгел, сөнки бик күп һандағы билдәләр яҙыуҙы үҙләштереүҙе ҡатмарлаштыра.

Йәмғиәттең үҫеше барышында яҙыу менән файҙаланыусыларҙың даирәһе киңәйеү менән, идеографик яҙыуҙың үрҙә әйтелгән етешһеҙлектәре бигерәк тә һиҙелә башлай, шул арҡала идеографик яҙыуға ҡарағанда уңайлыраҡ ижек яҙыуы барлыҡҡа килә.

Ижек яҙыуында һәр бер билдә бер ижекте йәки ижек яһаусы өндәрҙе (мәҫәлән, һуҙынҡы өндәрҙе) белдерә. Мәҫәлән, кипр яҙыуында 𐠀 билдәһе — *а*-ны, 𐠰 билдәһе — *sa*, 𐠱 билдәһе — *se* ижеген, брахми яҙыуында 𑀇 билдәһе — *i*-ҙе, 𑀯 — *va*, 𑀦 — *na* ижектәрен белдерә[8].

Дөйөм тарихи планда алғанда, ижек яҙыуы идеографик яҙыуҙан һуң барлыҡҡа килә. Иң боронғо идеографик яҙыуҙарҙан шумер, египет һ. б. яҙыуҙар беҙҙең эранан 3—4 мең йыл элек барлыҡҡа килгән булһалар, ә иң боронғо ижек яҙыуы булған крит, кипр, брахми, кхароштi яҙыуҙары беҙҙең эранан 1—2 мең йыл элек кенә барлыҡҡа килгәндәр.

Ижек яҙыуы идеографик яҙыуға ҡарағанда файҙаланыу өсөн уңайлыраҡ. Бында билдәләр һаны аҙ. Идеографик яҙыуҙа билдәләр меңәрләп иҫәпләнһә, ижек яҙыуында — 35—40, иң күбеһе 200-ҙән (эфиоп һәм маньчжур яҙыуҙары) артмай. Шуның менән бергә, ижек яҙыуы телде, бигерәк тә уның фонетикаһын дөрөҫөрәк сағылдыра, һүҙҙәрҙең грамматик формаһын айырыуға мөмкинлек бирә.

Ләкин шуның менән бергә ижек яҙыуының да ҙур ғына етешһеҙлектәре бар. Шулай ҙа әле ижек яҙыуында билдәләр күп, үрҙә әйтеп киткәнсә, 200-гә барып етә. Икенсенән, ижек яҙыуында эргәләш һәм һүҙ аҙағындағы тартынҡыларҙы биреү ҡыйын, сөнки ижек яҙыуының бик күптәрендә билдәләр

---

[7] *В. А. Истриндың* күрһәтелгән хеҙмәтенән, 147-се бит.

[8] *В. А. Истриндың* күрһәтелгән хеҙмәтенән, 216, 232-се биттәр.

һуҙынҡынан ғына торған йәки тартынҡы менән башланып, һуҙынҡыға бөткән ижектәрҙе генә белдерәләр.

Шуға күрә ижек яҙыуына ҡарағанда уңайлыраҡ булған хәреф яҙыуы барлыҡҡа килә. Ул үҙенең составы һәм ундағы билдәләрҙең мәғәнәһе яғынан төп ике төргә бүленә: 1) консонант-өн яҙыуы (консонанто-звуковое), бындағы хәрефтәр тартынҡы өндәрҙе генә белдерәләр. Хәреф-өн яҙыуының был төрө беҙҙең эраға тиклем икенсе мең йыллыҡтың һуңғы яртыһында барлыҡҡа килә; 2) вокализацияланған өн (вокализованно-звуковое) яҙыуы, бындағы хәрефтәр тартынҡы өндәрҙе лә, һуҙынҡы өндәрҙе лә белдерәләр. Хәреф-өн яҙыуының был төрө беҙҙең эраға тиклем беренсе мең йыллыҡтың баштарында барлыҡҡа килә.

Консонант-өн яҙыуы үҙе тағы икегә бүленә: а) саф консонант-өн яҙыуы; б) һуҙынҡы өндәр хәрефтәр аҫтына йәки өҫтөнә төрлө билдәләр өҫтәү менән белдерелгән консонант-өн яҙыуы.

Иң боронғо хәреф-өн яҙыуҙарынан египет һәм финикий яҙыуы саф консонант-өн яҙыуы була.

Һуҙынҡы өндәр өсөн айырым хәрефтәрҙе алфавитҡа тәү башлап гректар индерәләр (беҙҙең эраға тиклем беренсе мең йыллыҡтың башында).

Ф. Энгельс, «цивилизация»ға тиклем булған «варварлыҡ» дәүеренең төрлө баҫҡыстарын характерлап, былай тип яҙа: «3. Юғары баҫҡыс. Тимер рудаһы иретеүҙән башланып, хәрефле яҙыуҙы уйлап табыу һәм уны телдән һөйләнеп килгән ижадты яҙыу өсөн ҡулланыу аша цивилизацияға күсә»[9].

Дөрөҫ, Ф. Энгельс, йәмғиәт тарихын Л. Морган схемаһы нигеҙендә дәүерҙәргә бүлеү менән бер үк ваҡытта, яңы материалдар өҫтәлеп, был бүленешкә үҙгәреш индерелеү мөмкинлеген дә иҫкәртеп китә[10].

Хәҙерге ваҡытта фән, тәүтормош йәмғиәте тарихын өйрәнгәндә, Л. Морган тәҡдим иткән схеманы ҡулланмай, сөнки Л. Морган тәүтормош йәмғиәте тарихын дәүерҙәргә бүлеү схемаһында тик мәҙәниәт баҫҡысын ғына сағылдырып, етештереү һәм етештереү мөнәсәбәттәре үҫеше процесын сағылдырмай[11].

---

[9] *Энгельс Ф.* Семьяның, хосуси милектең һәм государствоның килеп сығыуы. К. Маркс, Ф. Энгельс. Һайланма әҫәрҙәр. II т., Өфө, 1961. 196-сы бит.

[10] Шунда уҡ. 189-сы бит.

[11] Большая Советская Энциклопедия, статья «Дикость», II изд., том 14, М., 1952. 342-се бит.

Мәҙәниәт тарихын ғына алғанда ла, халыҡтарҙың «цивилизация» дәүеренә күсеүен хәреф-өн яҙыуы ҡулланыу менән бәйләү дөрөҫ булмаҫ ине. Был ваҡытта хәҙерге көндә лә ижек яҙыуы ҡулланған һиндтарҙы, япондарҙы, идеографик яҙыу ҡулланған ҡытайҙарҙы «цивилизациялы түгел» тип иҫәпләргә тура килер ине. Ф. Энгельс үҙенең хеҙмәтен, башлыса, Европа, Америка һәм Австралия халыҡтарының тарихи материалдарына таянып яҙған, ә Урта һәм Алыҫ Көнсығыш халыҡтарының тарихи материалдарын бөтөнләй тиерлек файҙаланмаған. Ысынлап та, бында йәшәгән ҡайһы бер халыҡтар өсөн, мәҫәлән, япондар өсөн, ижек яҙыуы хәреф-өн яҙыуына ҡарағанда уларҙың тел үҙенсәлектәренә тулыраҡ яуап бирә. Ҡытай теле үҙенсәлектәре лә ҡытай яҙыуын идеографик яҙыуҙан хәреф-өн яҙыуына күсеүгә тотҡарлыҡ итә.

Әлбиттә, хәреф-өн яҙыуы донъялағы бик күп халыҡтар өсөн, һис шикһеҙ, иң уңайлы яҙыу булып иҫәпләнә. Был телдәрҙә өндәр һаны ижектәр һанына ҡарағанда бик күпкә аҙ. Шуға күрә хәреф-өн яҙыуы бик аҙ ғына һандағы билдәләр ярҙамында был халыҡтарҙың телдәрен дөрөҫ итеп биреүҙе тәьмин итә, яҙыуға өйрәнеүҙе, грамота таратыуҙы еңеләйтә. Шулай итеп, хәреф-өн яҙыуы барлыҡҡа килеү донъялағы халыҡтарҙың күбеһенең мәҙәниәт үҫешендә ҙур роль уйнаны.

Бөтә хәреф-өн яҙыуҙарының, икенсе төрлө әйткәндә, хәҙерге алфавиттарҙың боронғо бабаһы булып финикий яҙыуы иҫәпләнә[12].

Хәреф-өн яҙыуы ике йүнәлеш менән тарала. Көнсығышта финикий яҙыуы нигеҙендә арамей яҙыуы, ә арамей яҙыуы нигеҙендә Азия халыҡтарының яҙыуҙары барлыҡҡа килә[13].

Көнбайышта финикий яҙыуы нигеҙендә — грек яҙыуы, ә грек яҙыуы нигеҙендә Европа халыҡтарының яҙыуҙары барлыҡҡа килә.

---

[12] Финикийлылар бынан 3000 йыл элек Төньяҡ Сирияла Ливан менән Урта диңгеҙ ярҙары буйында йәшәгәндәр.

[13] Арамейҙарҙың беренсе ватаны Сирия һәм Месопотамияның көньяғындағы ғәрәп далаһы була. Шунан улар беҙҙең эраға тиклем икенсе мең йыллыҡтың уртаһында Сирияға, Палестинаға һәм шунан Месопотамияға күсеп киләләр. Шул халыҡтың яҙыуы арамей алфавиты тип йөрөтөлә. Башта арамей алфавиты финикий алфавитынан бөтөнләй айырылмай тиерлек, ләкин һуңынан — беҙҙең эраға тиклем беренсе мең йыллыҡтың икенсе яртыһында — арамейҙар финикий алфавитына бер ни тиклем үҙгәреш индерәләр.

Хәреф-өн яҙыуы бөтә донъяла тиерлек икенсе бер халыҡтарҙың яҙыуын үҙләштереү, файҙаланыу юлы менән тарала. Бының сәбәбе хәреф-өн яҙыуының бик ябай, төрлө телдәрҙә яҙырға бик еңел яраҡлаштырып булыуҙан һәм халыҡтар араһында сауҙа, мәҙәниәт һ. б. бәйләнештәрҙең киң таралыуынан килә. Боронғо система хәреф-өн яҙыуҙарының таралыуына шулай уҡ уларҙың төрлө дини тәғлимәттәрҙең рәсми теле булып китеүе лә (мәҫәлән, ғәрәп яҙыуының — ислам дине, латин яҙыуының — көнбайыш христианлыҡ, грек яҙыуының көнсығыш христианлыҡ аша таралыуы) ярҙам итте. Ҡайһы бер хәреф-өн яҙыуының таралыуына боронғо һәм урта быуатта ойошҡан эре дәүләт берләшмәләрендә (мәҫәлән, Рим империяһында, ғәрәп хәлифәлегендә, Византияла) рәсми тел булып файҙаланыуы сәбәп булды.

### Арамей яҙыуы нигеҙендә барлыҡҡа килгән яҙыу системаларының генеалогик схемаһы

(Үҫеш юлы шулай булыуы фараз ителгән яҙыу системалары өҙөк һыҙыҡ менән күрһәтелә)



Икенсе бер халыҡтың хәреф-өн яҙыуын ҡабул иткәндә, һәр бер халыҡ уны үҙ теленең өн составына яраҡлаштырып үҙгәртеп ала. Тел яғынан ҡәрҙәш халыҡтар бер-береһенең яҙыуын бер төрлө лә үҙгәрешһеҙ ҡабул иткәндәр. Мәҫәлән, еврейҙәр һәм арамейҙәр финикий яҙыуын бөтөнләй үҙгәртмәй алғандар.

Икенсе халыҡтың яҙыуын ҡабул иткәндә, етмәгән хәрефтәр түбәндәгесә яһала:

1) бер нисә хәрефте бергә ҡушыу. Мәҫәлән, *ш* өнө француз телендә — *ch*, инглиз телендә — *sh*, поляк телендә — *sz*, итальян телендә — *se*, норвег телендә — *cj*, немец телендә *sch* хәрефтәре менән бирелә.

2) алфавитта булған хәрефкә өҫтәлмә билдәләр ҡушыу. Мәҫәлән, башҡорт телендә *ҡ, ҙ, ҫ* өндәре өсөн рус алфавитындағы *к, з, с* хәрефтәренә һыҙыҡтар өҫтәп алыу.

3) бер хәрефте бер нисә өн өсөн файҙаланыу. Мәҫәлән, немец телендә 5 хәрефенең *з* һәм *с* өндәре, башҡорт телендә *е* хәрефенең өс өн урынында ҡулланылыуы (ер, белем, техника).

4) икенсе алфавиттарҙан алыу (мәҫәлән, рус телендә боронғо еврей алфавитынан — *ц*, *ш*, башҡорт телендә латин алфавитынан *h* алынған).

5) алфавитта булған хәрефтәрҙең формаһын үҙгәртеү (рус алфавитында *в* хәрефенең формаһын үҙгәртеп, *б* хәрефе яһау, башҡорт алфавитында *э* хәрефенең формаһын үҙгәртеп, *ә* хәрефе яһау, *у* хәрефенән *ү* яһау).

6) яңы хәрефтәр арттырыу (мәҫәлән, рус алфавитында *ч*). Төрлө тип яҙыуҙың һәр береһе хәҙерге көндә ер йөҙөндәге халыҡтарҙың күпмеһе тарафынан ҡулланылыуы мәсьәләһенә килгәндә, түбәндәгесә бүленә: ер йөҙөндәге халыҡтың 25 процентҡа яҡыны (Ҡытай, Японияның бер өлөшө) идеографик яҙыу, 25 процентҡа яҡыны (Һиндостан, Һинд-Ҡытай, Тибет, Цейлон, Японияның бер өлөшө) ижек яҙыуын, ҡалған 50 процент халыҡ хәреф-өн яҙыуын ҡуллана.

Хәреф-өн яҙыуы, әлбиттә, үҙенең беренсе осоронда әле һөйләү телен тулыһынса сағылдырып бөтөрә алмаған. Телдәге өндәр, бигерәк тә һуҙынҡы өндәр яҡынса ғына белдерелгәндәр, ныҡлы яҙыу ҡағиҙәләре эшләнмәгән, хәреф формалары бик үк төҙөк булмаған. Ләкин бара-бара ул камиллашҡан, хәреф формалары төҙөкләндерелгән, матур шәкелле хәрефтәр, аныҡ, эҙмә-эҙлекле яҙыу ҡағиҙәләре — хәҙерге заман алфавиты һәм орфографиялары барлыҡҡа килгән.

## Грек яҙыуы нигеҙендә барлыҡҡа килгән яҙыу системаларының генеалогик схемаһы

(Грек йәки латин яҙыуы өлөшсә тәьҫир иткән яҙыу системалары өҙөк һыҙыҡ менән күрһәтелә)




Иҫкәрмә: Был схемалар В. А. Истриндың «Возникновение и развитие письма» тигән хеҙмәтенән алынды. М., 1965. 305, 352-се биттәр.

Алфавит тип ниндәй ҙә булһа бер телдең билдәле тәртиптә урынлаштырылған хәрефтәр системаһына әйтелә (был һүҙ грек алфавитының беренсе ике хәрефе исеменән «альфа» һәм «бета» һүҙҙәренән алынған). Хәрефтәрҙең телдәге өндәргә ни дәрәжәлә тура килеүен һәм уларҙың формаларын тел фәненең графика тигән бүлеге өйрәнә (*graphike* — грекса «һыҙылған»).

Орфография (грекса *orthos* — дөрөҫ һәм *grapho* — яҙам һүҙҙәренән) — дөрөҫ яҙыу ҡағиҙәләре системаһы. Орфография — әҙәби телдең яҙыу нормаһы.

Орфографияның маҡсаты шул телдә яҙыусыларҙың һәм уҡыусыларҙың бөтәһенә, бер төрлө яҙыуҙы билдәләү нигеҙендә, теләһә ниндәй тексты ла тиҙ, еңел уҡыуға һәм яҙыуға мөмкинлек биреүҙән тора.

Был маҡсатты үтәү өсөн, беренсенән, орфография бер булырға, уның ҡағиҙәләре шул телдә яҙыусы кешеләр тарафынан дөйөм ҡабул ителгән булырға тейеш, һәр бер кеше өсөн айырым орфография була алмай.

Икенсенән, орфографияла системалылыҡ, эҙмә-эҙлелек булырға тейеш. Бер үк һүҙҙе ике төрлө яҙыуға юл ҡуйылырға тейеш түгел, орфографияла яҙылыуы хәл ителмәгән, ныҡ билдәләнмәгән моменттар булмаҫҡа тейеш.

Өсөнсөнән, орфография киң халыҡ еңел үҙләштерә алырлыҡ итеп төҙөлөргә тейеш.

Һәр бер орфография билдәле бер принциптарҙан сығып төҙөлә.

Орфография төҙөү принциптарының һаны тураһында төрлө авторҙар төрлөсә әйтәләр. Мәҫәлән, А. А. Реформатский алты принцип күрһәтә: фонематик, фонетик, этимологик, тарихи-традицион, морфологик һәм символик принцип[14].

Авторҙың аңлатыуынса, әгәр яҙыу, хәҙерге тел фактын сағылдырмайынса, уның үткәнен сағылдыра икән, был этимологик принцип була (миҫал итеп ул рус телендәге *пшенный, пошел* һүҙҙәренең, *о* менән яҙылмайынса, *е* менән яҙылыуын ала). Телдә бер төрлө әйтеп йөрөтөлгән ике һүҙҙе бер-береһенән айырыу өсөн яһалма рәүештә ике төрлө яҙыу — символик принцип була (компания, кампания).

Профессор В. А. Богородицкий 4 принцип ала: фонетик, морфологик, тарихи һәм дифференциацион принцип[15].

---

[14] *Реформатский А. А.* Введение в языкознание. М. 1947. 134—137-се биттәр.

[15] *Богородицкий В. А.* Очерки по языковедению и русскому языку. М., 1939. 85—87-се биттәр.

В. А. Богородицкий А. А. Реформатскийҙың символик принцибын дифференциацион принцип тип атап йөрөтә. В. А. Истрин өс принцип барлығын әйтә: фонетик, фонематик-морфологик һәм тарихи-традицион, ә этимологик һәм символик принциптарҙы ул шул төп өс принциптың айырым күренештәре итеп кенә иҫәпләй[16].

Татар телсеһе Х. Курбатов төп дүрт принцип күрһәтә: фонетик, морфологик, тарихи-традицион һәм график принциптар. Шуларға тағы өҫтәмә итеп дифференциацион принципты ала[17].

М. И. Матусевич та дүрт принцип күрһәтә: фонетик, этимологик-морфологик, традицион һәм иероглифик принцип[18].

Орфография принциптарының исемен һәм уларҙың һанын төрлө авторҙар төрлөсә йөрөтһә лә, нигеҙҙә, улар өс төп принципҡа ҡайтып ҡалалар: фонетик, фонематик-морфологик, тарихи-традицион. Шуға тағы график принцип менән дифференциацион принципты өҫтәргә мөмкин, былар төп принцип булып тормайҙар.

Фонетик принцип — һүҙҙәр хәҙерге телдә нисек әйтелә, шулай яҙыуҙан тора. Бында төп өндәр генә бирелмәй, уларҙың нигеҙ үҙгәрештәре лә бирелә.

Фонематик-морфологик принцип — һүҙҙәрҙең мәғәнәле киҫәктәрен — морфемаларҙы, фонемаларҙы, һүҙҙең грамматик формаһы үҙгәреү менән төрлөсә әйтелеүҙәренә ҡарамаҫтан, бер генә төрлө яҙыуҙы талап итә (мәҫәлән, рус телендә сапог, сапоги (әйтелеше *сапок, съпаги*); башҡорт телендә борон, боронғо (әйтелеше *борон, бороңго*).

Тарихи-традицион принцип — боронғо ваҡытта нисек ҡабул ителһә, хәҙерге көндә лә шулай яҙыу, йәғни һүҙҙәрҙең боронғо әйтелеше хәҙерге телдәге әйтелешкә тура килмәһә лә, уларҙың ҡасандыр элек яҙылған формалары һаҡланыу тигән һүҙ. Был шунан килеп сыға: орфография яҙыуҙа ныҡлы ҡағиҙәләр билдәләй, был ҡағиҙәләр шул телдә һөйләшкән кешеләр өсөн мәжбүри нормаға әйләнә. Ләкин тел бара-бара үҙгәрә, шуның һөҙөмтәһендә йәнле телдең өндәр системаһы менән уның орфографияһы араһында айырма тыуа; айырым һүҙҙәр-

---

[16] *Истрин В. А.* Развитие письма. М., 1961. 39-сы бит.

[17] *Курбатов Х.* Татар теленең алфавит һәм орфография тарихы. Ҡазан, 1960. 8-се һәм 12-се биттәр.

[18] *Матусевич М.И.* Введение в общую фонетику. М., 1959. 118—125-се биттәр.

ҙең яҙылышы ҡасандыр бер ваҡыт телдең өн системаһына тура килһә лә, хәҙерге көндә бөтөнләй тура килмәй башлай, ләкин улар традиция буйынса элеккесә яҙылып йөрөй бирәләр.

Тарихи-традицион принциптағы орфография бигерәк тә быуаттар менән иҫәпләрлек яҙыу тарихы булған телдәрҙә була. Мәҫәлән, инглиз теленең орфографияһына ошо принцип хас.

Инглиз теленең орфографияһы бынан бер нисә быуат элек төҙөлөп тә, телдә ҙур ғына үҙгәрештәр булыуға ҡарамаҫтан, бөгөнгө көнгә тиклем шул хәлдә ҡалған, һөҙөмтәлә йәнле әйтелеш менән яҙылыш араһында ҙур ғына айырма килеп сыҡҡан.

Тарихи-традицион принциптағы яҙылыш фонетик принципҡа ла, фонематик-морфологик принципҡа ла тура килмәй. Бында һүҙҙәрҙең яҙылышын ныҡлы бер ҡағиҙә аҫтына алырға мөмкин түгел. Шуның өсөн дә был принциптағы яҙылышты һүҙҙәрҙең яҙылыу формаһын ныҡ хәтерҙә ҡалдырыу менән генә үҙләштерергә мөмкин.

График принцип тип һүҙҙәрҙе икенсе телдең графикаһына эйәртеп, үҙгәртмәй яҙыуға әйтелә. Был принцип менән күберәк икенсе телдән ингән һүҙҙәр яҙыла (мәҫәлән, башҡорт телендә рус әҙәби теле аша ингән һүҙҙәрҙең яҙылышы).

Дифференциацион принцип тип телдә бер төрлө әйтеп йөрөтөлгән ике һүҙҙе бер-береһенән айырыу өсөн яһалма рәүештә ике төрлө яҙыуға әйтелә (мәҫәлән, рус телендә *компания, кампания*; башҡорт телендә *тыуған, туғандаш, тыуған ауыл, тыуған ер, Тыуған ил; туған, туған тел, туғандаш*).

Хәҙерге көндә булған орфографиялар, ғәҙәттә, үрҙә күрһәтелгән принциптарҙың бер нисәһе нигеҙендә төҙөлгән. Орфографияны төҙөгәндә теге йәки был принциптың күпме урын алыу дәрәжәһе телдең характерына, орфография төҙөлгән ваҡыттағы тарихи шарттарға бәйләнеп һәм, бер яҡтан, ғилми талаптарҙан, икенсе яҡтан, практик уңайлылыҡ талаптарынан сығып хәл ителә. Ләкин һәр бер орфографияла бер принцип өҫтөнлөк итә. Мәҫәлән, һүҙ төрләнеү һәм үҙгәреү менән өндәре артыҡ күп үҙгәреүҙәргә, сиратлашыуҙарға осрамай торған телдәрҙең орфографияларында, ғәҙәттә, фонетик принцип өҫтөнлөк итә. Быға миҫал итеп башҡорт әҙәби теленең орфографияһын алырға мөмкин.

Һүҙ төрләнеү һәм үҙгәреү менән өндәре күп төрлө үҙгәрештәргә осрай торған телдәрҙә фонематик-морфологик принцип өҫтөнлөк итә. Мәҫәлән, рус теле орфографияһы фонематик-морфологик принципҡа нигеҙләнгән.

I

## ТӨРКИ ХАЛЫҠТАРЫНДА ЯҘЫУ. РЕВОЛЮЦИЯҒА ТИКЛЕМ БАШҠОРТ ЯҘЫУЫ. ҒӘРӘП АЛФАВИТЫ

Төрки халыҡтары араһында яҙыу бик борон барлыҡҡа килгән.

Ҡытай тарихсыларының раҫлауына ҡарағанда, боронғо төрки ҡәбиләләре ҡытай идеографик яҙыуы менән киң файҙаланғандар. Мәҫәлән, ҡытай тарихсыһы Сыма Цянь үҙенең тарихи яҙмаларында һундар башлығы Модэның (беҙҙең эраға тиклем 209—174 йылдар) ҡытай императорына бик йыш хат яҙғанын һәм унан яуап алғанын әйтеп китә. «История дома Суй» китабының авторы Вэй Чжен: «176 йылда (беҙҙең эраға тиклем) Модэ ҡытай батшаһына хатты үҙе яҙа торғайны», — тип хәбәр итә. Модэның улы Шаньюн Лаошанды (беҙҙең эраға тиклем 174—161 йылдарҙа һундарҙың башлығы булған) ҡытайҙар «Ҡытай батшаһына грамота яҙырға», ә унын яҡын кешеләрен «халыҡ, мал, мөлкәт һанына ҡарап, һалым һалыу өсөн кенәгәләр төҙөргә өйрәтәләр»[19], — тип яҙа.

Һундарҙың үҙҙәренең яҙыуы булыуы тураһында ла тарихи мәғлүмәттәр бар. Мәҫәлән, «История троецарствия» тигән хеҙмәттә 245—250 йылдарҙа Камбоджалағы иң боронғо батшалыҡ Фунанға Ҡытайҙан илселәр барғанлығы әйтелә. Шунан ҡайтҡас, илселәрҙең береһе Кань Тай, фунандарҙың «китаптары бар, уларҙы архивта һаҡлайҙар. Уларҙың яҙыуы һундар яҙыуын хәтерләтә», тип хәбәр итә. Фунандар һинд яҙыуын ҡулланалар[20].

---

[19] *Бичурин Н. Я.* Собрание сведений о народах, обитавших в Средней Азии в древние времена. Т. I. М.-Л., 1950. 52-се, 55-се, 226-сы биттәр.

[20] *Гумилев Л. Н.* Хунну. М., 1960. 97—98-се биттәр.

| Язылышы | Аңлата | | Язылышы | Аңлата | |
|---|---|---|---|---|---|
| | русса | латинса | | русса | латинса |
|  | а, ä | a, ä |  | н¹ | n¹ |
| | б¹ | b¹ | | н² | n² |
| | б², ä | b², ä | | ң | ŋ |
| | Б | γ | | й | ñ |
| | г | q | | нт | nt |
| | д¹ | d¹ | | нч | nč |
| | д² | d² | | ө, у | o, u |
| | з | z | | ӫ, ÿ | ö, ü |
| | ы, i | y, i | | п | p |
| | j¹ | j¹, i | | р¹ | r¹ |
| | j² | j², i | | р² | r² |
| | k | q | | с¹ | s¹ |
| | к | k | | с² | s² |
| | л¹ | l¹ | | т¹ | t¹ |
| | l² | l² | | т² | t² |
| | лт | lt | | ч | č |
| | м | m | | ш | š |

*5-се һүрәт.* Орхон-йәнәсәй алфавиты

Был алфавит С. Е. Маловтың «Памятники древнетюркской письменности» тигән хеҙмәтенән алынды. М. Л., 1952. 17-се бит.

Төрки халыҡтарының хәҙерге фән донъяһына килеп ирешкән һәм ныҡ тикшереп беленгән яҙма ҡомартҡылары V быуатҡа ҡарай. Был ҡомартҡылар төрки халыҡтарында ике төрлө яҙыу ҡулланылғанын күрһәтәләр: 1) орхон-йәнәсәй яҙыуы; 2) уйғыр яҙыуы.

**Орхон-йәнәсәй яҙыуы.** Ҡытай тарихсыларының мәғлүмәттәренә ҡарағанда, VI быуат баштарында Алтай менән Һырдарья араһындағы территорияла төрлө төрки ҡәбиләләре йәшәгәндәр.

Мәҫәлән, Минусинск уяһында хакас һәм ҡырғыҙ ҡәбиләләренең боронғо ата-бабалары, Йәнәсәй йылғаһының үрге ағышы бассейнында — чиктар (тываларҙың боронғо ата-бабалары), Орхон йылғаһы буйында — уғыҙ ҡәбиләләре, миктәрҙең көнбайыш һәм төньяҡ-көнбайышында — алтай һәм шорҙарҙың боронғо ата-бабалары, ә көньяғында — уйғырҙар, Байкалдың көньяҡ-көнбайышында — курыкандар (яҡуттарҙың боронғо ата-бабалары), көнсығышында — утыҙ-татарҙар, ә уларҙың көньяғында туғыҙ-уғыҙҙар йәшәгәндәр.

Бына шул ҡәбиләләрҙән Йәнәсәй йылғаһының үрге ағышы бассейнында йәшәүсе төрки ҡәбиләләре V быуатта уҡ үҙҙәренең телдәренең үҙенсәлектәренә яраҡлаштырып төҙөлгән алфавит ҡулланғандар, һуңға табан был яҙыу Орхонда, Урта Азияла һәм башҡа урындарҙа йәшәгән төрки ҡәбиләләре араһында ла таралып китә. Был яҙыу бер нисә быуат буйына билдәһеҙ булып ҡала. Йәнәсәй буйында ниндәйҙер билдәләр төшөрөлгән таштар табыла. Шундай уҡ билдәләр төшөрөлгән таштар башҡа урындарҙа ла табыла башлай. Мәҫәлән, 1889 йылда «Рәсәй география йәмғиәте» Н. М. Ядринцевты Монголияға фәнни экспедицияға ебәрә. Был экспедиция Орхон йылғаһы буйында ике ҙур таш таба. 1890 йылда мәшһүр тюрколог В. В. Радлов етәкселегендә экспедиция барып, был таштарҙағы яҙыуҙарҙың күсермәһен алып ҡайта. Ләкин әле был яҙыуҙар һаман бер нәмә лә һөйләмәй, уларҙың ниндәй халыҡтар яҙыуы икәне ҡараңғы була.

Ул таштарҙың бер яғы ҡытайса, ҡалған өс яғы билдәһеҙ алфавит менән яҙылған булған. Ахыр сиктә, Копенгаген университетының профессоры, төркиәтсе В. Томсен был яҙыуҙарҙың төрки telendә яҙылғанын белә һәм, тәржемә итеп, 1896 йылда баҫтырып сығара. Ул серле яҙыуҙы тағатып уҡыу өсөн, В. Томсенға төрки телдәренең сингармонизмлы тел булыуы ярҙам иткән (һүҙ эсендә йә алғы рәт, йә артҡы рәт һуҙынҡыларының ғына килеүе, бер һүҙ эсендә алғы һәм артҡы рәт һуҙынҡыларының булмауы һ. б.). Бер үк ваҡытта уны Рәсәй төркиәтсеһе В. В. Радлов та тәржемә итә. Борон төрки халыҡтарында, хандары йәки башҡа уҙамандары үлгәс, улар хөрмәтенә яҙыулы таштар ултыртыу ғәҙәте булған. Был «бәңгү таш»тарға (мәңге таш) үлгән кешеләрҙең биографияһы, эшләгән эштәре яҙыла торған булған. Был ике таш та шул «бәңгү

таш»тар булып, уларҙың береһе төрки ханы Күл-Тәгин (731 йылда вафат), икенсеһе Билгә Ҡаған (Могиллан — 734 йылда вафат) хөрмәтенә ултыртылған таш булып сыға. Шунан инде Йәнәсәй йылғаһы буйында табылған таштарҙағы яҙыуҙар ҙа уҡыла. Былар бөтәһе лә бер үк система — алфавит менән яҙылған булған. Шулай итеп, был ҡомартҡылар V быуатта Йәнәсәй йылғаһының үрге ағышы бассейнында йәшәгән төрки ҡәбиләләре ҡулланған алфавитта яҙылған булып сыға. Орхон һәм Йәнәсәй йылғалары буйында табылғанға күрә, хәҙерге фән донъяһында уны «орхон-йәнәсәй алфавиты», «орхон-йәнәсәй яҙыуы» тип йөрөтәләр. Орхон-йәнәсәй яҙыуы, ҡытай яҙыуы шикелле, юғарынан түбәнгә табан түгел, ә уңдан һулға яҙыла, һүҙ араларында ике нөктә ҡуйыла.

Орхон-йәнәсәй алфавитында 38 өн билдәһе (хәреф) бар. Уларҙың ҡайһы берҙәре ҡушма өндө белдерә (мәҫәлән, *лт, нт, нг)*; һигеҙ һуҙынҡы өн *(а, э, ы, и, у, о, ү, ө* өндәре) өсөн дүрт хәреф (*а, ы, у, ү)* алынған.

*Текст*



(1)

(2)

Транскрипция

1 5 10 15 20 25 30 35 40
(1) Siz älimä qunčujuma oɣlanuma bodunuma sizimä altmyš jašymda
45 50 55 60 65 70 75 80
(2) atym Äl Tuɣan Tutuq b̈än ẗäŋri älimka alčisi ärtim alty baɣ budunqa
85 88
b̈äg ärtim

Тәржемә

(1) От вас, мое государство, моя госпожа, мои сыны, мой народ, от (всех) вас в шестьдесят лет (я отделился, *т. е.* умер).
(2) Мое имя Эль-Туган-Тутук. Я был посланником божественному государству. Я был начальником шестисоставному народу.

*6-сы һүрәт.* Орхон-йәнәсәй яҙыуынан өлгө.
(С. Е. Маловтың юғарыла күрһәтелгән хеҙмәтенән алынды)

Орхон-йәнсәй алфавитын төрки халыҡтары ҡайҙан алғандар, ул нисек барлыҡҡа килгән — был турала ғалимдар араһында фекер берлеге юҡ. Мәҫәлән, В. Томсон менән В. В. Радлов, орхон-йәнәсәй алфавиты арамей алфавиты нигеҙендә барлыҡҡа килгән булырға кәрәк, тиҙәр. В. Томсон фекеренсә, арамей алфавиты, төрки теленең фонетикаһына, тәбиғәтенә ҡарап күп кенә үҙгәрешкә осраған, шулай итеп, ул төрки теленә яраҡлаштырып алынған. В. Томсон орхон-йәнәсәй алфавитындағы бер нисә билдәнең арамей алфавитында булмауын әйтә. Тимәк, улар ниндәйҙер икенсе юл менән барлыҡҡа килгән булып сыға.

Д. Дирингер фекеренсә, орхон-йәнәсәй алфавиты пәһләүи алфавитының урындарҙа ҡулланылған вариантынан йәки соғоди алфавитының бик боронғо формаһынан барлыҡҡа килгән булырға тейеш[21]. В. А. Истрин да орхон алфавитының пәһләүи[22] йәки соғоди[23] алфавиты нигеҙендә барлыҡҡа килеүен[24] әйтә.

С. П. Толстов орхон-йәнәсәй яҙыуының формалашыуына арамей яҙыуының күп кенә йоғонто яһағанлығын күрһәтә. Шуның менән бергә, ти ул, орхон-йәнәсәй алфавиты хәрефтәренең һәм уларҙың варианттарының күбеһе төрки халыҡтарының боронғо тамғаларына оҡшағанлығын әйтә[25].

Профессор Ғәбдеррахман Сәғҙи, нигеҙҙә, шул С. П. Толстов фекерен ҡеүәтләй. Ул, орхон-йәнәсәй алфавитына нигеҙ итеп арамей алфавиты алынған булһа ла, һәр хәлдә, төрки тамғаларының байтаҡ төрҙәре орхон-йәнәсәй алфавитының эсенә инеп киткән булырға тейеш, ти[26].

---

[21] *Дирингер Д.* Алфавит. М., 1963. 371-се бит.

[22] Беҙҙең эранан элек өсөнсө быуаттың яртыһында Персия һәм Месопотамия ерендә көслө Парфян батшалығы барлыҡҡа килә. Парфяндар арамей алфавитын үҙҙәренең телдәренә яраҡлаштырып, яңы алфавит төҙөйҙәр, шул алфавит пәһләүи исеме менән атап йөрөтөлә. VII быуатта Персия ғәрәптәр тарафынан һуғышып алынғас, пәһләүи яҙыуы менән алмаштырыла.

[23] Соғдиана дәүләте хәҙерге Үзбәкстан һәм Тажикстандың бер өлөшөн биләп торған. Соғодиҙар Ҡытай Төркөстанына — Синьцзянға һәм артабан Төньяҡ Һиндостан һәм Монголияға барып инәләр. VIII быуатта Соғдиана дәүләте ғәрәптәр тарафынан һуғышып алынғас, соғоди яҙыуы ғәрәп яҙыуы менән алмаштырыла.

[24] *Истрин В.А.* Возникновение и развитие письма. М., 1965. 322-се бит.

[25] *Толстов С. П.* Монета шахов древнего Хорезма и древнехорезмийский алфавит. // ВИД, 1938. № 4. 133—135-се биттәр; Древний Хорезм. М., 1948. 173-сө бит.

[26] *Сәгъди Габдерахман.* Кешелек дөнъясында тел, әдәбият, язу һәм аларның тарихи үсүләре. Ҡазан, 1926. 201-се бит.

П. Н. Мелиоранский менән И. Т. Савенков та орхон-йәнәсәй хәрефтәренең ҡайһы берҙәренең боронғо төрки тамғаларына оҡшағанын әйтәләр[27]. Н. А. Аристов, орхон-йәнәсәй яҙыуы Үҙәк Азияла боронғо тамғаларҙан барлыҡҡа килгән, тип раҫлай[28]. Киреһенсә, тамғалар орхон-йәнәсәй алфавитынан алынған тигән фекерҙә тороусылар ҙа бар.

Орхон яҙыуы боронғо тамғаларҙан барлыҡҡа килгән тигән фекерҙең, әлбиттә, бер ни тиклем нигеҙе бар. Сөнки башҡорт тамғалары араһында орхон-йәнәсәй яҙыуы хәрефтәренә оҡшаған тамғаларҙы күп кенә осратырға мөмкин.

Мәҫәлән:

Орхон хәрефтәре: 


Башҡорт тамғалары: 

Һуңғы ваҡытта орхон-йәнәсәй яҙыуы барлыҡҡа килгәнгә тиклем яҙылған таштар табыла башланы. Мәҫәлән, 1955 йылда археолог А. Д. Грач Тывала ике таҡтаташ таба. Шуларҙың береһенә орхон-йәнәсәй алфавиты барлыҡҡа килгәнгә тиклем булған билдәләр һәм орхон-йәнәсәй хәрефтәре төшөрөлгән; икенсеһендә шул уҡ билдәләрҙең береһе ҡабатлана. Беренсе таҡтаташтағы яҙыуҙы А. Д. Грач «Номыш баш ир» тип уҡый. 1961 йылда шундай уҡ таш СССР Фәндәр академияһының этнография институтының археология отряды тарафынан табыла. Был таштарҙағы билдәләр орхон-йәнәсәй алфавиты барлыҡҡа килгәнгә тиклем ҡулланылһалар ҙа, орхон-йәнәсәй алфавитындағы билдәләргә бик оҡшап торалар.

Шунан сығып, ҡайһы бер ғалимдар: «Әгәр ҙә А. Д. Грач тапҡан яҙыулы таҡтаташтар шикелле тағы ике-өс таш табылһа, боронғо төрки яҙыуының (Йәнәсәйҙән алып Орхонға тиклем) урында барлыҡҡа килеүе тулыһынса иҫбат ителәсәк», — тиҙәр[29].

---

[27] *Мелиоранский П. Н.* Памятник в честь Кюль-Тегина. «Записки восточного отделения Русского археологического общества». Т. XII, 1899. 47-се бит; *Савенков И. Т.* О древних памятниках изобразительного искусства на Енисее. // «Труды XIV археологического съезда». Т. 1. 356-сы бит.

[28] *Аристов Н. А.* Заметки об этническом составе тюркских племен и народностей. «Живая старина». 1894. Вып. III и IV. 418-се бит.

[29] *Батманов И. Н., Арагачи Э. Б., Бабушкин Г. Ф.* Современная и древняя Енисейка. Фрунзе, 1962. 26-сы бит.

Ҡыҫҡаһы, орхон-йәнәсәй яҙыуының нисек барлыҡҡа килеүе тураһында хәҙергә ҡырҡа бер фекер әйтеүе ҡыйын. Уны әйтеү өсөн өҫтәмә тикшеренеүҙәр үткәреү талап итеүә.

**Уйғыр яҙыуы** — Боронғо төрки халыҡтары орхон-йәнәсәй яҙыуынан башҡа тағы икенсе бер төр яҙыу ҡулланыр булғандар. Был яҙыу, башлыса, уйғыр төрөктәре араһында ҡулланылғанлыҡтан, фән донъяһында ул «уйғыр яҙыуы» тип аталып киткән. Ғалимдар, уйғыр яҙыуы соғоди алфавиты нигеҙендә беҙҙең эраның беренсе мең йыллығының икенсе яртыһында барлыҡҡа килгән, тип иҫәпләйҙәр.

Соғоди алфавитын уйғырҙар үҙгәртеп алғандар. Уйғыр алфавитында барлығы 20 генә хәреф, шуларҙың бишеһе һуҙынҡы хәрефтәр. Уйғыр алфавитында һәр бер өнгә башта, уртала, аҙаҡта яҙыу өсөн айырым хәрефтәр бар. Алфавитта хәрефтәр аҙ булғаны өсөн, бер үк хәреф бер нисә өн өсөн йөрөй, мәҫәлән, *п-б, г-к, д-т, ы-и, о-у, ө-ү* өндәренең һәр бер пары өсөн бер генә хәреф алынған.

Уйғыр яҙыуы ҡомартҡылары VIII быуаттан башлап һаҡланып ҡалған. Төньяҡ Монголияла VIII быуаттың икенсе яртыһында уйғыр ханы Билгетәңре Уйғыр Ҡаған хөрмәтенә ҡуйылған таш табыла. Таштағы яҙыу ике алфавит — уйғыр һәм орхон-йәнәсәй алфавиты — менән яҙылған. Тимәк, ул ваҡыттарҙа төрки халыҡтары һәр ике алфавитты ла берҙәй ҡулланған булып сыға. Уйғыр алфавиты менән яҙылған иң һуңғы яҙма ҡомартҡылар XVIII быуат баштарына тура килә. Уйғыр яҙыуы үҙ заманында бик таралған яҙыу булған. Ул Ҡытайҙа ла, Рим империяһында ла, ғәрәптәрҙә һәм башҡа ислам дәүләттәрендә лә уҡылған, танылған. Төрки халыҡтарында яҙыла торған рәсми ҡағыҙҙарҙы ла шул уйғыр яҙыуы менән яҙа торған булғандар. Алтын Урҙала ул рәсми дәүләт яҙыуы булып ҡулланылған. Аҡһаҡ Тимер ҙә уны үҙенең рәсми дәүләт яҙыуы итеп ҡабул иткән. Ғөмүмән, XV быуат буйына ул Төркөстанда рәсми яҙыу булып ҡулланылып килгән. Урта Азияла «Миғражнамә», «Бәхтиәрнамә» шикелле сығатай әҙәбиәтенән булған әҫәрҙәрҙең XV быуатта уйғыр яҙыуы менән яҙылған нөсхәләре табылған[30]. Беҙҙең эраның VI–VII быуаттарында Урта Азиялағы төрки халыҡтарында уйғыр яҙыуын ғәрәп яҙыуы алмаштыра.

---

[30] *Сәғъди Габдерахман.* Кешелек донъясында тел, әдәбият, язу һәм аларның тарихи үсүләре. Ҡазан, 1926. 208-се бит.



| Яҙылышы | | | Аңлата | |
|---|---|---|---|---|
| башта | уртала | аҙаҡта | русса | латинса |
| | | | а | a |
| | | | ä | ä |
| | | | ы, i | y, i |
| | | | о, у | o, u |
| | | | ö, ÿ | ö, ü |
| | | | п, б | p, b |
| | | | в | v, w |
| | | | ҕ | ϒ |
| | | | k | q |
| | | | х | Z |
| (kä) | (kä) | | г, к | g, k |
| | | | д, т | d, t |
| | | | ж | z̈ |
| | | | з | z |
| | | | j | j |
| | | | л | l |
| | | | м | m |
| | | | н | n |
| | | | р | r |
| | | | с | s |
| | | | ш | s̀ |
| | | | ч | č |

*7-се һүрәт.* Уйғыр алфавиты (С. Е. Маловтың күрһәтелгән хеҙмәтенән)

**Ғәрәп яҙыуы.** Октябрь инҡилабына тиклем башҡорт халҡы ғәрәп яҙыуы менән файҙаланды.

Ғәрәп яҙыуына тиклем башҡорттарҙа бүтән төр яҙыу булғанмы, юҡмы тигән һорауға яуап биреү ҡыйын, сөнки быны раҫлаусы яҙма ҡомартҡылар быға тиклем әле табылғаны юҡ. Ләкин шулай булһа ла, ҡайһы бер тарихи мәғлүмәттәр, мәҫәлән, башҡорт халҡының яҙыуы булған боронғо төрки дәүләттәре менән тығыҙ бәйләнештә булып, улар менән күп йылдар аралашып йәшәүе, башҡорттар ҙа ғәрәп яҙыуына тиклем башҡа төр яҙыу менән файҙаланманылармы икән, тип уйларға мәжбүр итә.

Беҙҙең эраның беренсе быуаты аҙағында үҙ-ара көрәштәр арҡаһында һун дәүләте икегә — төньяҡ һундарға һәм көньяҡ һундарға[31] — бүленә. Төньяҡ һундарҙың бер өлөшө монгол ҡәбиләләренең береһе булған сянабиҙарҙың ҡыҫырыҡлауы һөҙөмтәһендә һун исеме аҫтында уғырҙар менән бергә ҡушылып, көнбайышҡа табан күсеп, Арал диңгеҙенән алып Волга һәм Дон йылғаларына тиклем булған территорияла йәшәүсе аландарҙы үҙҙәренә баш эйҙерәләр[32]. Был һундар, хәҙерге Башҡортостандың төньяҡ өлөшөнә лә инеп, урындағы халыҡтар менән аралашып китәләр. Мәҫәлән, башҡорттарҙың ҡайһы бер ырыуҙары үҙҙәренең сығышын һундар башлығы Бала-миргә илтеп бәйләй[33]. Һис шикһеҙ, һундар үҙҙәре менән бергә боронғо яҙыуҙарын да алып килгән булырға тейеш.

Башҡорттарҙың күршеһе булған болғарҙар ғәрәп алфавиты ҡабул иткәнгә тиклем бер нисә быуат буйына үҙҙәренең көньяҡтан алып килгән орхон-йәнәсәй яҙыуы менән файҙаланғандар. Быны археологик тикшеренеүҙәр ваҡытында табылған болғар һауыт-һабаларына яҙылған яҙыуҙар раҫлай.

---

[31] *Бичурин Н. Я.* Собрание сведений о народах, обитавших в Средней Азии в древние времена. Т. 1. М. Л., 1950. 116—117-се биттәр.

[32] *Бернштам А. Н.* Очерк истории гуннов. Л., 1951. 112—116-сы биттәр.

[33] Очерки по истории Башкирской АССР. Т. I. Ч. 1. Өфө, 1956. 29-сы бит.

## ЗАЕМ КУНЖУТА

*Текст* Юр. (7)

(1) (2) (3) (4) (5) (6) (7) (8) (9) (10) (11)



*8-се һүрәт.* Уйғыр язуы өлгеһе.
(С. Е. Маловтың күрһәтелгән хеҙмәтенән)

*Транскрипция*

(1) **Ķüskü jyl altynč aǐ on jaŋ̧yqa**
(2) **maŋ̧a Qavsyduqa tüškä künčit**
(3) **k(ä)rgäk bolup Il-Tämir tin bir küri**
(4) **künčit altym küz iki küri kün-**
(5) **čit birürm(ä)n. Birmädin käčürsär m(ä)n il**
(6) **jaŋ̧ynča tüši bilä birür birkinčä**
(7) **bar joq bolsar m(ä)n inim Qasuq nyŋ̧**
(8) **tägi lär bilä köni birsünlär. Tanuq**
(9) **Qaban. Tanuq Böngäk. Bu nišan**
(10) **mäniŋ̧ ol. M(ä)n Qavsydu özüm**
(11) **bitidim.**

*Перевод*

**В год мыши, в шестой месяц, в начале (месяца) десятого (числа) так как мне, Кавсыду, понадобилось под процент кунжутное масло, то я от Иль-Темира одну меру-кюри получил кунжута. Осенью я возвращу две меры-кюри кунжута. Если я просрочу, не отдавая, то по обычаю народа отдам с процентами. Если я до уплаты умру, то мой младший брат Касук пусть правильно уплатит с родственниками. Свидетель Кабан. Свидетель Бонгяк. Этот знак мой.**

**Я, Кавсыду, сам написал.**

Болғар һауыт-һабаларында яҙылған яҙыуҙарҙы тәү башлап А. М. Щербак уҡыны. Ул һауыт-һабаларҙа түбәндәге һүҙҙәр яҙылған: (*бк*) *ҡымы (з) (эш) ҡымыҙ үшә бәдүк ауҙыңа тулдыра ич* — «ҡымыҙҙы (һауыттың) ошо ауыҙына тултырып эс». *Әлчи йәнә Ата-эч йәмә Бука — үчәү (и)*—«Әлчи йәнә Ата-эч йәнә Бука — өсәү» (кеше исемдәре)[34].

Болғарҙар идеографик төр яҙыу менән дә файҙаланғандар. X быуатта йәшәгән ғәрәп яҙыусыһы Аль-Багдади болғарҙарҙың ҡытай яҙыуын ҡулланғанлыҡтарын әйтә[35]. Был фекерҙе археологик материалдар ҙа дөрөҫләй. Мәҫәлән, 1950 йылда А. П. Смирнов, болғарҙарҙың боронғо ҡалаһы урынында археологик тикшеренеүҙәр алып барғанда, бер кувшин таба. Был кувшиндағы яҙыу билдәләре араһында боронғо ҡытай иероглифтары һәм орхон-йәнәсәй хәрефтәре бар. Мәҫәлән,  (ай йәки ҡояш),  (биш),  (өс),  (дүрт),  (тау),  (күк) — былар иероглифтар;  — былар орхон-йәнәсәй алфавиты хәрефтәре булырға тейеш[36].

Башҡорт халҡы болғарҙар менән бик тығыҙ бәйләнештә булған. Башҡортостандың Болғар ханлығы менән сиктәш райондарында болғар мәҙәниәте тарала. Болғарҙар менән шундай тығыҙ бәйләнештә булған башҡорттар ҙа болғарҙар файҙаланған яҙыуҙар менән файҙаланманылармы икән? Әлбиттә, был һорауға хәҙергә ҡырҡа яуап биреп булмай. Ләкин, һәр хәлдә, башҡорттар менән болғарҙар араһында яҙма бәйләнеш булған булырға тейеш.

Ғәрәп яҙыуы башҡорттарға X—XI быуаттарҙа ислам дине арҡыры килеп инә. Ғәрәп яҙыуы ҡомартҡылары Башҡортостанда XIV быуаттан башлап һаҡланып ҡалған. Быға боронғо ҡәбер таштарындағы яҙыуҙар һәм төрлө башҡорт ырыуҙары тарафынан төҙөп ҡалдырылған шәжәрәләр инә.

---

[34] *Курбатов Х.* Татар теленең алфавит һәм орфография тарихы. Ҡазан, 1960. 19—20-се биттәр. *Щербак А. М.* Несколько слов о приемах чтения рунических надписей, найденных на Дону // Советская археология. XIX. 1954.

[35] *Гаркави А. Я.* Сказания мусульманских писателей о славянах и русских. Спб, 1870. 241—242-се биттәр.

[36] *Каховский В. Ф.* Была ли письменность у чувашей в древности? // «Ученые записки научно-исследовательского института языка, литературы, истории и экономики при Совете Министров Чувашской АССР». Вып. XXI. 1962. 209-сы бит.

| Хәреф формалары | | | | Исемдәре |
|---|---|---|---|---|
| айырым торғанда | аҙаҡта | уртала | башта | |
| ا | ـا | .... | .... | *Әлиф* |
| ب | ـب | ـبـ | بـ | *Би* |
| ت | ـت | ـتـ | تـ | *Ти* |
| ث | ـث | ـثـ | ثـ | *Ҫи* |
| ج | ـج | ـجـ | جـ | *Жим* |
| ح | ـح | ـحـ | حـ | *Хи* |
| خ | ـخ | ـخـ | خـ | *Хы* |
| د | ـد | .... | ..... | *Дал* |
| ذ | ـذ | .... | .... | *Ҙәл* |
| ر | ـر | .... | ..... | *Рә* |
| ز | ـز | .... | .... | *Зи* |
| س | ـس | ـسـ | سـ | *Сен* |
| ش | ـش | ـشـ | شـ | *Шын* |
| ص | ـص | ـصـ | صـ | *Сад* |
| ض | ـض | ـضـ | ضـ | *Ҙад* |
| ط | ـط | ـطـ | طـ | *Тый* |
| ظ | ـظ | ـظـ | ظـ | *Ҙый* |
| ع | ـع | ـعـ | عـ | *Ғәйен* |
| غ | ـغ | ـغـ | غـ | *Ғайын* |
| ف | ـف | ـفـ | فـ | *Фи* |
| ق | ـق | ـقـ | قـ | *Ҡаф* |
| ک،ك | ـک،ـك | ـکـ | کـ | *Кәф* |
| ل | ـل | ـلـ | لـ | *Ләм* |
| م | ـم | ـمـ | مـ | *Мим* |
| ن | ـن | ـنـ | نـ | *Нон* |
| ه،ة | ـه | ـهـ،ـهـ | هـ | *Һи* |
| و | ـو | .... | .... | *Wау* |
| ى | ـى | ـيـ | يـ | *Йа* |

*9-сы һүрәт.* Ғәрәп алфавиты

Ғәрәп яҙыуы арамей яҙыуының бер тармағы булған нәбати[37] яҙыуы нигеҙендә V быуатта формалаша башлай. Ғәрәп яҙыуының иң боронғо ҡомартҡыһы булып Сириялағы Халеб (Алеппо) ҡалаһы эргәһендә 1879 йылда табылған яҙыу иҫәпләнә. Был яҙыу грек-сирия-ғәрәп телдәрендә 1512 йылда яҙылған.

Ғәрәп алфавиты элек 22 хәрефтән генә торған. Был 22 хәреф ғәрәп телендәге өндәрҙе биреп бөтөрә алмағанлыҡтан, яңынан 6 хәреф — غ، ذ، خ، ظ، ض، ث (*ҫ*, ҡалын ике *з*, ҡалын *х*, *ҙ*, ҡалын *г*) хәрефтәре өҫтәлгән. Шулай итеп, хәҙерге ғәрәп алфавиты 28 хәрефтән тора. Был алфавиттағы 28 хәрефтең өсөһө (*вау, йа, алиф*) — һуҙынҡы хәрефтәр, ҡалғандары— тартынҡы хәрефтәр.

Ғәрәп яҙыуының иң боронғо формаһы «куфи» яҙыуы тип йөрөтөлә. Был исем Месопотамиялағы Куфа ҡалаһына бәйләп бирелгән. Шунан һуңғыһы «нәсех» яҙыуы тип атала. Куфи яҙыуында бер төрлө лә нөктәләр ҡуйылмай. Ғәрәп хәрефтәренә нөктәләр ҡуйып яҙыу VIII быуаттың беренсе яртыһында ин-

[37] Ғәрәп ҡәбиләләренең береһе булған нәбатиҙар, беҙҙең эранан 5 быуат элек Ғәрәбстандан Палестинаның көньяғына күсеп килеп, икенсе быуатта ҙур дәүләт ойошторалар. Был дәүләт эсенә көньяҡ-көнсығыш Сирия, Синай ярымутрауы һәм төньяҡ-көнбайыш Ғәрәбстан инә. Нәбати дәүләтенең үҙәк ҡалаһы Батра (русса Петра) була. Беҙҙең эраның 105—106 йылдарында Нәбати дәүләте римляндар тарафынан һуғышып алына.

дерелә. Куфи яҙыуы хәҙер төрлө биналарҙы биҙәү өсөн генә ҡулланыла. Хәҙерге ғәрәп яҙыуы ул, асылда нәсех яҙыуы.

Ғәрәп яҙыуы төрлө яҙыу рәүештәренә бүленә. Мәҫәлән, ҫөлөҫ яҙыуы. Бында хәрефтәр төрлө рәсемдәр, нағыштар менән биҙәкләп, баш хәрефтәргә оҡшашлы итеп яҙыла. Был яҙыу китап баштарын матурлап яҙыу өсөн ҡулланыла.



*10-сы һүрәт.* Ҫөлөҫ яҙыуы өлгөһө

Риҡҡа яҙыуы — бында ش، س (с, *ш)* хәрефтәре бүлкәтләмәйенсә ش، س формаһында, ق، ن (*н, ҡ)* хәрефтәренең нөктәләре хәрефтең үҙенә ҡушылып ق، ن рәүешендә яҙыла. Ғөмүмән, хәрефтәрҙәге нөктәләр ҡушып ـ формаһында яҙылалар (ب، ت ).



*11-се һүрәт.* Риҡҡа яҙыуы өлгөһө

Ғәрәптәр башта гел тартынҡы өндәрҙе генә яҙып, һуҙынҡы өндәрҙе яҙыуҙа күрһәтмәгәндәр; һуҙынҡы өндәрҙе уҡыусы үҙе белеп айырырға тейеш булған. Ләкин һуҙынҡы өндәрҙе күрһәтеү өсөн VIII быуаттың икенсе яртыһында махсус билдәләр арттырылған. Был билдәләр хәрефтәрҙең өҫтөнә йәки аҫтына ҡуйыла. Өҫт-фәтхә ـَ *(ә)*, аҫт-кәсрә ـِ *(и)*, өтөр-замма ـُ (*о-ө*) һ. б. Мәҫәлән, قَلَم (ҡәләм), عِلم (ғилем), ظُلُم (золом).

Ғәрәп алфавиты, әлбиттә, беҙҙең телдең фонетик системаһына яуап бирмәй. Унда беҙҙең телдә булмаған *хы, ғайын, зад, зый* һ. б. хәрефтәр булыу менән бергә, беҙҙең телдә булған *г, ң* һ. б. өндәр өсөн хәрефтәр юҡ. Шуның өҫтөнә ғәрәп алфавитында башҡорт телендәге 10 һуҙынҡы (хәҙер 13 һуҙынҡы) өн өсөн ни бары өс кенә һуҙынҡы хәреф бар. Шуға күрә ҡулланыу процесында был алфавит төрлө үҙгәрештәргә осрай. Мәҫәлән, XVI быуаттың икенсе яртыһында төрки телендә яҙылған юрматы башҡорттары шәжәрәһендә ғәрәп алфавитындағы غ، ظ، ض، ذ، خ، ث *(ҫ,* ҡаты *х, ҙ,* ҡаты ике *з,* ҡаты *ғ)* хәрефтәре ҡулланылмаған, улар урынына ғәрәп алфавитында булмаған ۋ، ڭ، ژ، گ، چ *(ч, г, ж, ң, в)* хәрефтәре ҡулланылған. Мирсалих Бикчуриндың 1859 йылда баҫылып сыҡҡан дәреслегенә[38] башҡорт телендә «Батыр батша» әкиәте индерелгән. Бында ғәрәп алфавитындағы бөтә хәрефтәрҙе ҡулланыу менән бер рәттән өҫтәмә хәрефтәр ҙә ҡулланыла. Мәҫәлән, ژ *(ж)* — ژيتامز، ژوراك، ژير (житамез, жөрәк, жир), ڭ *(ң)* — كوڭل (күңел), كڭاش (кңаш — киңәш), шуның менән бергә ك *(к)* хәрефе *г* өнө урынында ла ҡулланыла: اكر (әкр, әгәр), بزكا (бзка — беҙгә).

Революцияға тиклем ғәрәп алфавиты башҡорттар өсөн дә, татарҙар өсөн дә һәм, ғөмүмән, күп төрки халыҡтары өсөн уртаҡ бер алфавит булған. Шуның өҫтөнә беҙҙең халыҡ Октябрь революцияһына тиклем татар әҙәби теле өсөн яраҡлаштырылған ғәрәп алфавиты менән файҙаланды. Революциянан һуң да башҡорт әҙәби теленең беренсе алфавиты ғәрәп графикаһы нигеҙендә төҙөлдө. Шуға күрә ғәрәп алфавитының революцияға тиклем ниндәй үҙгәрештәргә осрағанын күҙәтеп сығыу файҙаһыҙ булмаҫ, тип уйлайбыҙ.

Иң тәүҙә ғәрәп алфавитына беҙҙең телдә булған өндәр өсөн алты хәреф (گ، ژ، چ، پ، ۋ، ڭ) өҫтәлә. Был хәрефтәр ғәрәп алфавитында булған хәрефтәргә нөктәләр йәки һыҙыҡ ҡуйыу юлы менән яһалғандар. ر *(р)* хәрефенең өҫтөнә өс нөктә ҡуйып ژ *(ж)*, ح *(х)* хәрефе аҫтына өс нөктә ҡуйып چ *(ч)*, و *(у-ү)*

---

[38] *Мирсалих Бикчурин.* Начальное руководство к изучению арабского, персидского и татарского языков с наречиями бухарцев, башкир, киргизов и жителей Туркестана. Казань, 1859.

хәрефенең өҫтөнә өс нөктә ҡуйып ڤ *(в)*, ک *(к)* хәрефенә өс нөктә ҡуйып ڭ *(ң)*, һыҙыҡ ҡуйып گ *(г)*, ب *(б)* хәрефенә тағы ике нөктә өҫтәп پ *(п)* хәрефе яһалған, *ң* хәрефен ҡайһы бер авторҙар боронғо уйғыр алфавиты традицияһы буйынса ن *(н)* менән ک *(к)* хәрефтәрен ҡушып, نک формаһында ла ҡуллана.

Алфавиттарҙағы хәрефтәрҙең һаны төрлө авторҙар тарафынан төрләсә йөрөтөлә. Мәҫәлән, башҡорт мәғрифәтсеһе Мөхәмәтсәлим Өмөтбаев үҙенең грамматикаһында, ғәрәп алфавитындағы хәрефтәргә яңынан 6 хәреф өҫтәп, 33 хәреф ала: لا (ла)[39] پ، چ، ژ، گ، نک *(п, ч, ж, г, ң)*. Күренеүенсә, М. Өмөтбаев *г* хәрефен ک *(к)* хәрефенә өс нөктә өҫтәп ڮ , ә *ң* хәрефен ن *(н)*, ک *(к)* хәрефтәрен ҡушып نک яһап ала. М. Өмөтбаев был хаҡта түбәндәгеләрҙе яҙа: «Татар халҡы яҙыу өсөн ғәрәп хәрефтәрен алды. Анлар лам-әлиф илә 29 хәрефтәрҙер. Бунлардан башҡа фарсы һүҙҙәренә тейешле дүрт хәреф бар پ، چ، ژ، گ *(п, ч, ж, г)*, бунларҙы фарсы хәрефтәре тиерләр. Дәхи татар телендә борон хәрефе бар, *нун* илә *каф* ҡушып яҙыла: نك мәҫәлән, آتانك **(атаң); آتانڭ (атаның)**»[40].

Шул 34 хәрефтең дүртеһен — ا، و، ی، ه *(әлиф, вау, йа, һи)* — хәрефтәрен әйтеүле хәрефтәр (һуҙынҡы хәрефтәр) итеп йөрөтә. «Татар телендә әйтеүле дикан ی، ه، و хәрефтәре Яврупа халҡының гласный хәрефтәре кеби берәм-берәм һуҙылып әйтелмәйҙәр. Мәгәр *әлиф* өҫтөнә *мәд* ҡуйһаң, آ *(а)* була, әлифтән һуң و булһа, او (у) була, ی-нән һуң و булһа, یو *(ю)* була. ی-нән һуң ه булһа, یه *(йә)* була. Бу او، یو، یه һәр береһе берәр тауыштыр, шуның өсөн икешәре бер әйтеүле хәреф урынына

---

[39] Ул ваҡыттағы авторҙарҙың күбеһе *л* хәрефенән тыш тағы *л* менән *а*-нан торған ҡушма хәреф — *ла* хәрефен алалар. Сөнки ул ҡушма хәреф Ҡөрьәндә алынған, шуға күрә уны төшөрөп ҡалдырырға ярамай, имеш. Уны улар *лам-әлиф* тип исемләп йөрөтәләр.

[40] *Өмөтбаев М.* Татар нәхүсенең мохтасары. Ҡазан, 1901. 3-сө бит.

йөрөйҙәр»[41]. Шунан сығып ул, был хәрефтәрҙе, йәғни ی، ه، و، ا хәрефтәрен, айырым алғанда көнбайыш телдәрендәге шикелле тулы мәғәнәле һуҙынҡы хәрефтәр, тип иҫәпләп булмағанлығын әйтә. Дөрөҫ фекер, әлбиттә.

Хәбибулла Әхтәмов 35 хәреф ала, ул Мөхәмәтсәлим Өмөтбаев хәрефтәренә яңынан ике хәреф — ۋ، پ *(п, в)* хәрефтәрен — өҫтәй[42].

Хөсәин Маҡаев ۋ، ژ *(в, ж)* хәрефтәрен индермәйенсә 33 хәреф ала[43]. Сәләх Камал 36 хәреф[44], Ямалетдин Вәлиди 27 хәреф ала[45]. Сәләх Камал төрки телдә өс төрлө *каф* барлығын әйтә: *кәф гәрәби (к), кәф фарси* گ *(г), һаңрау кәф* ڭ *(ң).* Ул ваҡыттағы күп кенә дәреслектәрҙә был хәрефтәр шулай аталып йөрөй. Беҙ бында уҡытыусы Фатих Садиковтың «Яҙыу ҡағиҙәләре»[46] тигән дәреслегенә айырым туҡталып китмәксе булабыҙ. Был дәреслек 1907 йылда уҡытыусылар йәмғиәте тарафынан ҡаралып, ҡабул ителеп сыға һәм, Ғ. Ибраһимовтың тел дәреслектәре сыҡҡанға тиклем, Башҡортостан мәктәптәрендә лә берҙән-бер дөрөҫ яҙырға өйрәтеүсе дәреслек булып ҡулланып йөрөтөлә.

Был китап дүрт бүлектән тора. Беренсе бүлектә яҙыу яҙғанда, ғөмүмән, риғәйә ҡылынырға тейеш булған ҡағиҙәләр, тәртиптәр тураһында һүҙ бара: яҙғанда ҡәләмде нисек тоторға, нисек ултырырға, матур яҙырға, хәрефтәрҙе бер төрлө ҡалынлыҡта тигеҙ яҙырға, иғтибар менән яҙырға, һөйләм уртаһында һәм аҙағында тыныш билдәләрен дөрөҫ ҡуйыуға иғтибар итергә һ. б. әйтелә. Икенсе бүлектә төрки һүҙҙәрҙе яҙыуҙа риғәйә ителергә тейеш булған ҡағиҙәләр бирелә.

Ғәрәп алфавитындағы хәрефтәргә яңынан 6 хәреф (پ،چ،ڭ،گ،ژ،ۋ — *п, ч, г, ң, ж, в)* өҫтәлеп, бөтәһе 34 хәреф алына. Был 34 хәрефтән ث، ح، ض، ظ، غ، ذ *(ç, х,* ике ҡалын *з, ғ, ҙ)* хәреф-

---

[41] *Өмөтбаев М.* Татар нәхүсенең мохтасары. Ҡазан, 1901. 3-сө бит.
[42] *Өмөтбаев М.* Татар нәхүсенең мохтасары. Ҡазан, 1901. 3-сө, 4-се биттәр.
[43] *Әхтәмов Х.* Кагыйдә китабы. Казан, 1908. *Хөсәин Маҡаев.* Мохтасар яңы сарыф төрки. Казан, 1912.
[44] *Салах Камал.* Мохтасар имла мөгаллиме. Казан, 1915.
[45] *Вәлиди Я.* Татар теленең имла һәм сарыф-нәхү кагыйдәләре. Казан, 1915.
[46] *Садыйков Мөгаллим Фатих.* Язу кагыйдәләре. Казан, 1908.

тәре фәҡәт ғәрәпсә һүҙҙәрҙә генә яҙыла. پ، چ، گ، ژ، ۋ *(п, ч, г, ж, в)* хәрефтәре фарсы, рус һәм төрки һүҙҙәрҙә генә яҙыла, ғәрәп һүҙҙәрендә яҙылмай.

Яҙғанда еңел булһын өсөн һаңғырау *каф* хәрефен бер генә нөктә менән ڭ формаһында яҙырға ҡушыла. Төрки һүҙҙәрҙә *гәйен, хи* ( ح، ع ) хәрефтәре яҙылмай, һәр ваҡыт *хы, ғайын,* йәки ҡаты *г, х* ( خ، غ ) хәрефтәре яҙыла: ياخشي يازغان (яхшы язған).

Һуҙынҡы хәрефтәр эргәһендә *сад* ص хәрефе яҙылмай, *сен* س хәрефе генә яҙыла, ә һуҙынҡылар эргәһендә булмағанда, *сад, сен* хәрефтәре ишетелгәнсә яҙыла: سامار (Самар), قصر (ҡсыр-ҡысыр), سبر (сбр — Себер).

Һуҙынҡылар эргәһендә *тый* ط хәрефе яҙылмай, *ти* ت яҙыла: تاتلي (татлы).

*Ни эшләп* һорауына яуап булған хәл ҡылымдар ب *(б)* хәрефе алдынан *(у)* өҫтәп яҙыла: يازوب (язуб — яҙып).

Руссанан һәм башҡа телдәрҙән ингән һүҙҙәр ишетелгәнсә яҙыла: تيليگرام، ساماۋار (тилиграм, самавар).

Сығанаҡ килеш ялғауҙары һуҙынҡы хәрефһеҙ دن *(дин-дан-дән)* формаһында ғына яҙыла: قازاندن (Казандн — Ҡазандан).

Төбәү һәм урын килеш ялғауҙары һәр ваҡыт нәҙек яҙыла: تاوغه، تاوده (таудә, тауғә). Күплек ялғауҙары һәр ваҡыт لر *(лр, ләр)* формаһында ғына яҙыла: كتابلر، مكتبلر (ктаблр, мктблр — китаплэр, мәктәпләр).

Өсөнсө бүлектә ғәрәпсәнән ингән һүҙҙәр, исемдәр яҙылышы хаҡында ҡағиҙәләр бирелә. Мәҫәлән, икенсе киҫәге *дин* һүҙе булған исемдәрҙә шул һүҙ алдынан *әл* һүҙе яҙыла, *д* хәрефе алдынан *т* ишетелһә лә, яҙылмай: نورلدين (Нуретдин). Яхъя, Муса кеүек *а*-ға бөткән исемдәр ى менән яҙыла: يحيى، موسى (Яхйи, Муси тип яҙыла, Яхья, Муса тип уҡыла) һ. б.

Дүртенсе бүлектә тыныш билдәләре ҡуйылышына бәйле ҡағиҙәләр бирелә.

Шулай итеп, бөтә ҡағиҙәләр ғәрәп яҙыуы закондарынан сығып эшләнгәндәр. Икенсе төрлө әйткәндә, тартынҡы өндәр

ҙур роль уйнаған телдең закондары һуҙынҡы өндәр әһәмиәтле урын тотҡан телгә яраҡлаштырып бирелә.

1911 йылда татар әҙәбиәтенең классигы һәм күренекле телсе Ғалимьян Ибраһимовтың грамматика дәреслектәре сыға[47].

Ғ. Ибраһимов грамматика дәреслегенең I киҫәгенә яҙған инеш һүҙендә алфавит һәм орфография мәсьәләләренә ҡарата үҙенең ҡайһы бер фекерҙәрен әйтеп китә. Үҙенең «бер телдә ни тиклем өн булһа, уның яҙыуында ла шул тиклем хәреф булырға тейеш» тигән ҡараштa торғанлығын әйтә. Ул быға тиклем сыҡҡан дәреслектәрҙә яҙылып килгән дүрт һуҙынҡыға тағы ике һуҙынҡы — ҡыҫҡа ۉ *(вау)* һәм ە *(ә)* өҫтәй, шулай итеп ул алты һуҙынҡы хәреф ала. Ул бының менән генә беҙҙең орфографияның теүәлләнеп бөтмәүен асыҡ белһә лә, яңы хәрефтәр алырға йәки булғандарын алмаштырырға үҙенең хоҡуғы булмауын әйтә.

Ғәрәп, фарсы телдәренән ингән һүҙҙәрҙең яҙылышы тураһында түбәндәгеләрҙе әйтә: «Бер телдә ике имлә булмаҫҡа тейешлегенә асыҡ ышанһам да, шунлыҡтан телебеҙгә кергән һәр бер һүҙҙе, теләһә ғәрәби, теләһә башҡа булһын, татарса имлә менән яҙырға тейеш, тип белһәм дә, ғәрәби, фарси һүҙҙәрҙе үҙ имләләре менән яҙырға ҡалдырҙым, сөнки имләбеҙ рәсми вә ғомуми ҡағиҙәләр аҫтына алынып бөтмәгән, ... ләкин был ваҡытлы бер эштер. Көнө килер, имләбеҙ ғомум тарафынан ҡабул ителгән бер юлға керер, шул саҡта ғәрәби һүҙҙәрҙе лә татарса имлә менән яҙа башларҙар»[48].

Ғ. Ибраһимов 36 хәреф ала, ғәрәп алфавитындағы хәрефтәргә 8 хәреф өҫтәй: ە،ۉ،ڭ،گ،ژ،ۋ،چ،پ *(п, ч, в, ж, г, ң, о-ө, ә)*. Шул 36 хәрефтән *ҫи, хи, ғәйен, ҙәл, ҙый, ҙад* — ض،ظ،ذ،ع،ح،ث хәрефтәре фәҡәт ғәрәпсә һүҙҙәрҙә генә яҙыла:

ضرر، ظريف، ذاكر، علم، حليم، ثواب

**(ҫауаб, Хәлим, ғилем, Закир, Зариф, зарар).** *Хы* (خ) хәрефе татарсала бер нисә һүҙҙә генә яҙыла: خان، ياخشى، خاتون **(хатын,**

---

[47] *Ибраһимов Галимжҗан.* Татар сарыфы. Казан, 1911; Татар нәхүе. Казан, 1911.

[48] *Ибраһимов Галимжҗан.* Татар сарыфы. Казан, 1911.

**яхшы, хан)**, ژ *(ж)* хәрефе ғәрәпсә һүҙҙәрҙә яҙылмай, ۋ *(в)* руссанан ингән һүҙҙәрҙә генә яҙыла: ۋاگون، ۋاكزال **(вагун, вокзал)**. *Тый, сад, гайын* ط، ص، غ хәрефтәре татар һүҙҙәрендә ҡалын әйтелгән һәр ерҙә яҙыла: طش، صو، آلغى **(тыш, су, алгы)**. Ғ. Ибраһимов үҙенең грамматикаһында алты һуҙынҡы өн ала: آ — ҡалын өҫт (әлиф—а), آش — **аш;** ە، ـه — нескә өҫт (һаи рәсмиә — *ә);* بەر، بەرە — **бәр, бәрә;** و — тулы вау *(у, ү)*, قول، كول — **ҡул, күл;** ۇ — ҡыҫҡа вау (о-ө), قۇل، كۇل — **ҡол, көл;** ـيـ — оҙон *йа (ый, и)*, تيرمه، قيل — **тирмә, ҡыйл;** ى — ҡыҫҡа *йа (ы, е)*, كيلدى، قايتتى — **килде, ҡайтты.**

Ҡыҫҡа *йа* тик һүҙ аҙағында ғына яҙыла. Ул үҙенең 1914 йылда баҫылып сыҡҡан «Татар имләсе» тигән китабында, ҡыҫҡа *йа* яҙылышына тағы бер тапҡыр туҡталып (§ 16), былай ти: «Ҡыҫҡа *йа* һүҙҙең башында йәки уртаһында булһа, уны белдерер өсөн айырым хәреф кәрәк түгел: بل **(бел)**, بلن **(белән)**, كم **(кем)** тигәндәге кеүек. Әммә ахырҙа булһа, уны белдерер өсөн беҙҙә бер хәреф йөрөтәләр: ул да шул юғарылағы ҡыҫҡа ى -лыр». Был алты һуҙынҡының икеһен (ۇ، ە-ـه) 1909 йылдарҙа уҡ шул ваҡыттағы «Йолдыз» гәзитенең мөхәррире Һади Маҡсуди алфавитҡа индереп ебәргәйне.

Инҡилапҡа тиклем алфавит һәм орфографиялағы иң бәхәсле мәсьәләләрҙең береһе һуҙынҡы өндәр мәсьәләһе булды. Бер төркөм телселәр, татар телендә биш кенә һуҙынҡы, икенселәре — алты, өсөнсөләре, ун һуҙынҡы бар, тип иҫбат иттеләр. Шуға ҡарап, уларҙы бишселәр, алтысылар, унсылар тип, ә алтысылар имләһе — урта имлә, унсылар имләһе — яңы имлә, тип, ғәрәп алфавитындағы һуҙынҡы хәрефтәргә генә нигеҙләнгән орфография иҫке имлә тип йөрөтөлә.

1915 йылда Өфө земствоһы тарафынан тел, имлә һәм дәреслектәр мәсьәләһе буйынса ғилми бер кәңәшмә саҡырыла. Был кәңәшмәлә педагогтар, телселәр, яҙыусылар, гәзит мөхәррирҙәре ҡатнаша. Бында мәктәптәр өсөн дәреслектәр һайлау һәм уларҙы тикшереү мәсьәләһе ҡаралыуы менән бергә, алфавит һәм орфография тураһында ла мәсьәлә ҡуҙғатыла.

Кәңәшмәлә ҡатнашыусы Нурғәли Надиев иҫке имләне яҡлап сыға. Иҫке имлә менән яҙылған китаптарҙың күп булыуын,



*12-се һүрәт.* Иҫке имлә менән яҙыу өлгөһө

халыҡтың да инде уға өйрәнгәнлеген әйтеп үтә. Имләне үҙгәртеү күп ҡыйынлыҡтар тыуҙырасағын әйтә. Ләкин уны яҡлаусы булмай. Төп бәхәс урта һәм яңы имләләр тирәһендә бара. Ғ. Нуғайбәк, Ғ. Алпаров һәм М. Ҡорбанғәлиевтәр яңы имләне ҡабул итергә — һуҙынҡы хәрефтәрҙең һанын унға еткерергә кәрәклеген әйтәләр. Урта имләне яҡлап, Ғ. Ибраһимов ҙур доклад менән сығыш яһай: «Имләлә иҫке алымдың, — ти ул, — фәнни бер назарияһы юҡ.

Улар фәҡәт иҫке имлә менән яҙырға өйрәнгәндәр, матбағаларында шуға етерлек кенә хәреф бар. Яңынан күп итеп һаи рәсмиә хәрефе һәм вау ۆ ҡойҙорорға иренәләр, шунлыҡтан иҫке имлә менән яҙалар һәм баҫалар. Быны иң асыҡ миҫалы — «Дин вә мәғишәт» һәм уның нәшриәте». Ғ. Ибраһимов фекеренсә, әле хәҙергә яңы имләне лә ҡабул итеп булмай, сөнки хәҙергә уның ерлеге юҡ. «Бик дөрөҫ, бик хаҡ, — тип дауам итә ул, — беҙ имләлә идеал итеп һәр өнгә бер хәреф табыуҙы зиһенебеҙгә һалып ҡуябыҙ. Ләкин быны менән мәсьәлә бөттө, тип уйлай алмайбыҙ. Мәсьәләнең иң ауыры шул әсәсте ғәмәлгә индереүҙә тип барабыҙ. Шуға күрә беҙ имлә төҙөүҙә иң еңел юлды тоторға тейеш булабыҙ. Урта имлә иҫке имләнән йыраҡ түгел. Шуға күрә ул аҡрынлап ғәмәлгә инә бара. Мин урта имлә тарафдарҙарын реалистар тип, яңы имләлеләрҙе идеалистар тип әйткем килә».

زمانیده فراوان بود یاردە

طولو اورمان ایله قورط مال طوارده

کومک عسکرورناکون سایه سنده

قرار طابدی تجارلر سوداسنده

—

آیاقلی مال تمامی بتە یازدی

آغاچلار آقدی استرخانغە اوزدی

اننک آرطنچه اوچدی قورط هم اری

یوق ایدی طاع کبی اغاچ طاواری

—

بو باشقرط اورمانی تمام کیسولکاچ

سفینه‌لر طاواردیه هم اوزولکاچ

فکرلاب طابیلارهم باشقه شی‌نی

قارا طال تایرسی قوش هم کوکاینی

*13-сө һүрәт.* Иҫке имлә менән яҙыу өлгөһө
(Мөхәмәтсәлим Өмөтбаевтың автографы)

هوا صاف هم طن بولوب جیل ـ داولدن اثرده یوق ایدی. یراق وآچق
کوکده آلماس کبی یالتری طورغان نورلی یولدزلر برەم برەم کورنه
باشلیلر، آنلر بارغان صاین آرتا، کوبه‌یه، آخرچیکده بوتون کوك [آلز
بلەن طولا هم موك، ماتور وقاراب طویا آلماسلق بر کورنش طووا.
آنا، صو توبندن آی کوته‌رله؛ اول باشده قزغلت صاری، صوکره
آقصل قاراغه، نهایت کوموش آق توسکه ئه‌یله‌نه‌ده بوتون دنیاغه
سویوب، ایرکه‌له‌ب، قاراب، طن وآقرنغنه آیاز کوکدن یوزوب کیته.

*14-се һүрәт.* Урта имлә менән яҙыу өлгөһө


ئوقيتو ئيشنه بلن ئالله نيچه ييلدان بيرله ماتاشقانلغمدان كوبدن
بيرله بو كيمچلككلرنه كوره كيلدم، يازوچيلاريمزنك يازولارين، تل
توزوچيلاريمزنك توتقان يوللارين تيكشره كيلدم؛ «صرف قاعده-
لرنك» توزمه بيك كيره كلكلرين گمنه، ئارالارندان ئيك ياخشيلارين غنا
ـسا كيلدم.

*15-се һүрәт.* Яңы имлә менән яҙыу өлгөһө

Ғ. Ибраһимов ҡараштарын телселәрҙән Фатих Сәйфи, Хәлим Искәндәров һ. б. яҡлап сыға. Һөҙөмтәлә урта имлә ҡабул ителә: «Имләлә идеалыбыҙ фонетика буйынса һәр өнгә бер хәреф тапмаҡтыр. Ләкин был көндә ул әсәсте ғәмәлгә индереү мөмкин булмағанға, хәҙергә урта (мәғруф һәм моғтәдил) имлә менән яҙылған булыу тейешлеген иғтираф ҡыламыҙ»[49]. Шулай итеп, кәңәшмә татар алфавитында алты һуҙынҡы хәреф булырға тейешлеген рәсми рәүештә раҫлай.

Инҡилапҡа тиклем шул урта имлә ҡулланыла. Башҡортостандағы йәҙит мәктәп-мәҙрәсәләрендә Ғ. Ибраһимовтың шул урта имлә нигеҙендә төҙөлгән грамматикаһы тел уҡытыуҙа төп дәреслек булып йөрөй.

[49] Уфа вилаяте земствосында 1915 ел, июнь 20—27-сендә мөселман мәктәпләренә дәреслекләр сайлау өчен ясалган киңәш мәҗлесенең карарлары вә анда укылган докладлар. Уфа, 1916. 12-се, 16-сы, 189-сы, 199-сы, 204-се, 205-се һәм 209-сы биттәр.

## II

## БАШҠОРТ ӘҘӘБИ ТЕЛЕНЕҢ ҒӘРӘП ГРАФИКАҺЫ НИГЕҘЕНДӘ ТӨҘӨЛГӘН АЛФАВИТЫ ҺӘМ ОРФОГРАФИЯҺЫ

Октябрь инҡилабынан һуң башҡорт халҡы тулы азатлыҡҡа сыҡты һәм Автономиялы Совет Социалистик Республикаһы алды.

Тәбиғи, Башҡорт Автономиялы Совет Социалистик Республикаһы төҙөлөү менән, башҡорт яҙыуын барлыҡҡа килтереү мәсьәләһе мәҙәниәт төҙөлөшөнөң беренсе нәүбәттәге мөһим бурысы булып торҙо.

РКП(б)-ның 4-се Бөтә Башҡортостан конференцияһы (1921 йыл) үҙенең милли мәсьәлә буйынса ҡабул иткән тезистарында мәктәптәрҙе, суд һәм административ органдарҙы Башҡортостандағы һәр милләттең әсә теленә күсереү мәсьәләһен ҡуя.

1921 йылдың июлендә Советтарҙың икенсе Бөтә Башҡортостан съезы Башҡортостан хөкүмәтенә башҡорт телен бойомға ашырыу юлында практик саралар күреүҙе тапшыра, Советтарҙың икенсе Бөтә Башҡортостан съезының шул ҡарары нигеҙендә Башҡортостан хөкүмәте 1922 йылдың 5 декабрендә башҡорт телен тормошҡа ашырыу тураһында практик саралар күрһәтеп, айырым ҡарар сығара һәм шул көндән башлап ныҡлы эш башлана.

Советтарҙың икенсе Бөтә Башҡортостан съезы ҡарарҙарын шунда уҡ тулыһы менән бойомға ашырыуға, әлбиттә, мөмкинлек булмай, сөнки башҡорт яҙыуын барлыҡҡа килтереү өсөн оҙаҡ һәм етди әҙерлек эше алып барырға кәрәк була. Беренсе нәүбәттә башҡорт әҙәби теленең алфавитын, орфографияһын, шунан һуң инде грамматикаһын, терминологияһын һ. б. эшләргә кәрәк булды. Шуға күрә республикала сыға торған гәзит

һəм журналдар ике-өс йыл (1924 йылға тиклем) татар телендə баҫылып килде, башҡорт телендə тик айырым мəҡəлəлəр һəм хəбəрҙəр генə урынлаштырыла торғайны. «Башҡортостан» гəзите 1924 йылдың август айынан башлап ҡына тулыһынса башҡорт телендə сыға башланы.

Башҡорт əҙəби теленең алфавитын һəм орфографияһын төҙөү мəсьəлəһе 1922 йылдан уҡ көн тəртибенə ҡуйыла. Башҡортостан Мəғариф Халыҡ Комиссарлығы эргəһендəге Ғилми мəркəздең 1922 йылғы эш планына башҡорт əҙəби теленең алфавитын һəм орфографияһын төҙөү мəсьəлəһе индерелеп, быны өсөн айырым комиссия ойошторола, комиссияның председателе итеп Фатих Сəйфи Уфалы, ағзалары итеп Ғабдулла Шонəси менəн Сəғит Рəмиевтəр билдəлəнə, һуңынан был комиссияла Хөсни Кəримов, Шəриф Манатов, Шəһит Хоҙайбирҙин, Дауыт Юлтый һ. б. эшлəйҙəр.

Комиссия тарафынан төҙөлгəн башҡорт əҙəби теленең алфавиты һəм орфографияһы Ғилми мəркəздең ғилми-методик комиссияһы ултырыштарында 1922 йылдың аҙағында һəм 1923 йылдың баштарында бер нисə тапҡыр ҡарала, уларҙың һəр береһендə тағы ла тулыраҡ итеп эшлəргə тигəн ҡарар сығарыла.

1923 йылдың мартында был мəсьəлə буйынса Ғилми мəркəз айырым кəңəшмə үткəрə. Кəңəшмə хəҙерге көндə тотороҡло орфографияның булмауы əҙəби телде тормошҡа ашырыуҙы ҡыйынлаштырғанын əйтеп, һис кисекмəҫтəн башҡорт əҙəби теленең орфографияһын эшлəүҙе кəрəк тип таба. Кəңəшмə бөтə төрки халыҡтары өсөн дөйөм алфавит һəм орфография төҙөү мəсьəлəһен ҡуя. Ғилми мəркəзгə иң тəүҙə был орфографияның башҡа төрки халыҡтары тарафынан ҡулланылыу мөмкинлеген хəл итергə ҡушыла. Əгəр ғəрəп графикаһы нигеҙендə бөтə төрки халыҡтарының ихтыяжын ҡəнəғəтлəндерерлек дөйөм орфография төҙөргə мөмкин түгел икəн, икенсе алфавитҡа, мəҫəлəн, латин йəки башҡа алфавитҡа күсергə мөмкинлеге əйтелə. Лəкин был мəсьəлə Бөтə Рəсəй масштабында хəл ителергə тейеш. «Шул маҡсаттан сығып, — тиелə кəңəшмə ҡарарында, — Ғилми мəркəз үҙенең орфографияһын бик ентеклəп эшлəгəндəн һуң был мəсьəлə буйынса Бөтə Рəсəй күлəмендə конференция йыйыу тураһында көнсығыш республикалар, өлкəлəр менəн, беренсе нəүбəттə Ҡазан һəм Мəскəүҙəге көнсығыш нəшриəте менəн бəйлəнешкə инергə тейеш»[50]. Кəңəшмə

[50] Башҡортостан Үҙəк дəүлəт тарих архивы. Фонд Р-798. № 906.

ҡарарындағы «дөйөм орфография төҙөү» тигән һүҙҙәрҙән дөйөм алфавит төҙөү тураһында һүҙ бара, тип аңларға кәрәк. Башҡа төрки халыҡтары үҙҙәренең алфавит һәм орфографияларын ниндәй графика нигеҙендә төҙөйҙәр, шулар менән бәйләнеш тотоп, башҡорт әҙәби теле алфавиты һәм орфографияһын да шул графика нигеҙендә төҙөү кәрәклеге әйтелә, сөнки шул ваҡытта уҡ инде латинға күсеү хәрәкәте башланған була. 1923 йылдың декабрендә төҙөлгән «Хәреф вә имлә лаихәһе»ндә был хаҡта асыҡтан-асыҡ әйтелә. «Хәреф мәсьәләһендә, — тиелә был лаихәлә, — ике ағым булып, бер ағым ғәрәп хәрефтәрен ташлап, уның урынына латин хәрефтәрен алыу яғында булһа ла, ул сүрәттә бер халыҡтың күптәндән өйрәнеп килгән яҙыуын ташлау арҡаһында килеп сығасаҡ уңайһыҙлыҡтарҙың ғәйәт тә ҙур булыуын иғтибарға алып һәм уның өсөн хәҙерге момент уңайһыҙ әле тип, Ғилми мәркәз Башҡортостан өсөн ғәрәп хәрефтәрен ғәмәлдә үҙ көсөндә ҡалдыра»[51] (үҙгәртмәй алынды. — *Ҡ. Ә.).*

«Хәреф вә имлә лаихәһе» тип аталған башҡорт әҙәби теленең беренсе алфавиты һәм орфографияһы проектын Ғилми мәркәз эргәһендәге орфография комиссияһының тапшырыуы буйынса яҙыусы Сәғит Рәмиев төҙөй.

Был орфография ике бүлектән тора. Беренсе бүлегендә башҡорт әҙәби теленең алфавиты бирелә, һуҙынҡы өн хәрефтәренең һәм ҡайһы бер тартынҡы өн хәрефтәренең яҙылышы тураһында әйтелә.

Икенсе бүлектә ялғауҙар, теркәүестәр, киҫәксәләр яҙылышы тураһында әйтелә.

Был орфография фонетик принципта төҙөлгән. Шуның өсөн орфографияның беренсе пунктында, телебеҙҙең үҙ һүҙҙәре лә һәм ситтән ингән бүтән һүҙҙәр ҙә һөйләшкәндә нисек ишетелһәләр, яҙыуҙа ла шулай ишетелгәнсә яҙылырҙар, тиелә.

Башҡорт әҙәби теленең алфавиты был проект буйынса 33 хәрефтән тора: шуларҙың 27-һе тартынҡы, орфографияла әйтелгәнсә, тауышһыҙ өн хәрефтәре, алтыһы һуҙынҡы, орфографияла әйтелгәнсә, тауышлы өн хәрефтәре.

---

[51] Башҡортостан Үҙәк дәүләт тарих архивы. Фонд Р-798. № 1283.

*Тартынҡы өн хәрефтәре:*

| ب | پ | ت | ث | د | ذ | ر | ژ | س | ش | غ | ق | ك | گ |
|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|
| б | п | т | ç | д | ҙ | р | ж | с | ш | ғ | ҡ | к | г |

| ڭ | ل | م | ن | و | ه | ي | ئ | ج | ح | ز | ف | ۋ |
|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|
| ң | л | м | н | у | һ | й | з | җ | х | з | ф | в |

*Һуҙынҡы өн хәрефтәре:*

ا — ҡалын өҫт (а); ـه — нәҙек өҫт *(ә)*, و — оҙон өтөр *(у*, ү), ۇ — ҡыҫҡа өтөр (о, ө), ـي — оҙон аҫт (*и, ый)*, ـى — ҡыҫҡа аҫт *(э, е, ы)*.

Был алфавитта башҡорт теле өсөн һис кәрәге булмаған ع، ط، ظ، ض، ص، خ хәрефтәре төшөрөп ҡалдырыла. Ләкин шулай ҙа әле унда революцияға тиклем йәшәп килгән ғәрәпсәлек, ғәрәп теле тәьҫире ныҡ һиҙелеп тора.

Һуҙынҡы өн хәрефтәре һаны һаман шул иҫкесә алтау ҡала, хатта исемдәре лә шул революцияға тиклем йөрөтөлгәнсә ҡалдырыла. Дөрөҫ, орфографияның беренсе бүлегенең 2-се параграфында башҡорт телендә ун һуҙынҡы өн барлығы әйтелә, ләкин шул ун өн өсөн алты хәреф кенә алына. Был ҡыйынлыҡ ҡалын һүҙҙәрҙә ҡалынлыҡ билдәһе ( ٴ ) яҙыу менән хәл ителергә тырышыла. Орфографияла был хаҡта түбәндәгесә әйтелә: «Телебеҙҙә тауышлы өндәр унау булһа ла, уларҙың хәрефтәре бары алтау ғына булғанлығы өсөн, ҡалын һүҙҙәрҙе нәҙек һүҙҙәрҙән айырыуға ҡалын һүҙҙәр алдынан ошондай бер ( ٴ ) ҡалынлыҡ ғәләмәте яҙылыр (беренсе бүлек, §2): ٴبول (бул), بول (бүл), ٴتش (тыш), تش (теш), ٴتور (тор), تۇر (төр). Хатта рус теленән ингән һүҙҙәрҙе лә ҡалынлыҡ билдәһе ҡуйып яҙырға тәҡдим ителә: ٴكورس (курс), (беренсе бүлек, § 3).

Рус әҙәби теленән ингән һүҙҙәрҙе яҙыу өсөн кәрәк булған хәрефтәр, мәҫәлән, *ч* һәм башҡа хәрефтәр алфавитҡа алынмаған, сөнки бындай һүҙҙәр ҙә был орфография буйынса әйтелгәнсә яҙылырға тейеш булалар: ناسالنيك، سيخ — **насальник, сих (чех).**

Ғөмүмән, был орфография бик ҡыҫҡа төҙөлгән, мәҫәлән, һуҙынҡы өн хәрефтәренең яҙылышына ҡарата бары бер генә

параграф бирелә (§7), ул параграфта һуҙынҡы өн хәрефтәренең бөтә урында ла төшөрөлмәй яҙылыуы тураһында әйтелә. Ҡалған параграфтарҙа һуҙынҡы өн хәрефтәре ҡайҙа, нисек яҙылыуы тураһында түгел, ә уларҙың формалары (шәкелдәре) тураһында һүҙ бара. Мәҫәлән, оҙон өтөр ( و ) һүҙ башында килһә, ئو формаһында яҙыла һ. б.

Тартынҡы өн хәрефтәренә ҡарата ла бер генә параграф бирелә (беренсе бүлек, §6). Унда руссанан ингән һүҙҙәрҙә ق *(ҡ)*, ع *(ғ)* хәрефтәре яҙылмау тураһында әйтелә: گەزيتە (гәзитә), كاميسار (камисар), ә عەزيتا (ғәзитә), قاميسار (ҡамисар) тип яҙыу дөрөҫ түгел. Яҙыуҙа осрай торған бөтә моменттар орфографияның икенсе бүлегендәге беренсе параграф нигеҙендә хәл ителергә тейеш була. Унда башҡорт теленең үҙ һүҙҙәре лә, сит телдәрҙән ингән һүҙҙәр ҙә «һөйләшкәндә ҡалай ишетелһәләр, яҙыуҙа ла шулай ишетелгәнсә» яҙылырға тейешлеге хаҡында әйтелә. Орфографияның төп ҡағиҙәһе «нисек һөйләйһең, шулай яҙыуға» ҡайтып ҡала.

Был алфавит һәм орфография 1923 йылдың декабрендә орфография комиссияһы тарафынан ҡабул ителә. Шунан ул 1924 йылдың ғинуарында Башҡортостандағы яуаплы эшселәрҙең йыйылышы ҡарамағына ҡуйыла. Был йыйылыш та орфографияны раҫлай, тик етенсе параграфҡа төҙәтмә индерә. Был төҙәтмә буйынса ۏ *(э, е)* хәрефе һүҙҙең мәғәнәһенә зарар килмәҫлек урындарҙа яҙылмаҫҡа тейеш була: بذ، هذ، بیرب (**бҙ, һҙ, бирб — беҙ, һеҙ, биреб**).

Ошо үҙгәреш менән был орфография 1924 йыл «Яңы юл» журналында баҫылып сыға[52].

Шуның артынса уҡ «Белем» журналында «Башҡорт шиүәһендә яҙыу, һөйләшеү өсөн белергә тейешле булған төп ҡағиҙәләр» исеме менән тағы бер орфография баҫыла[53]. Быныһы Ғилми мәркәз янындағы орфография комиссияһының ағзаһы Ғәбделәхәт Вилдановтың ҡултамғаһы менән сыға. Был ҡағиҙәләр «Яңы юл» журналында баҫылып сыҡҡан орфография проектына өҫтәмәме әллә яңы проектмы — был турала бер нәмә лә әйтелмәй.

---

[52] «Яңы юл», 1924. № 1 (9). 28—30-сы биттәр.
[53] «Белем», 1924. № 1—2. 42—45-се биттәр.

Был орфография 30 параграфтан тора. Бындағы ҡағиҙәләр башҡорт теленең үҙенсәлегенән сығып, ныҡлап тикшереп ғилми нигеҙҙә эшләнмәгән. Мәҫәлән, шундай ҡағиҙәләр бар: татар телендәге *с* өнө башҡортсала һәр ваҡыт *h* өнөнә алышына (§ 2). Башҡортсала сит һүҙҙән кергән *п*-не күп ваҡытта *б* алыштыра: **балкавник, барк** (полковник, парк). Төрөк һүҙендәге *б* өнө күп ваҡытта *м* өнөнә алышына: **борон — морон, боҙ — моҙ** (§ 20). Татарсалағы **иде, диде** һүҙҙәре башҡортсала **ине, тине** булып йөрөй (§ 5). Башҡорт телендә *ч, җ* юҡ, *с, й* йөрөй: **насальник, йөмһүриәт**, тик башҡорт шиүәһенә кереп үҙләшеп бөтмәгән һүҙҙәрҙә *ж* хәрефе ҡала: **ижтиһад** (§ 1). Башҡорт һүҙҙәрендә ике *л* йәнәшә килһә, һуңғы *л* *д*-ға әйләнә: **мулла — мулда, сәллә — сәлдә, мәллә — мәлдә** (§ 4). Әгәр башҡорт һүҙенең ахырында *д* хәрефе артынан *т* хәрефе килһә, *д* *т*-ға алышына: **ядтау — яттау** (§ 6). Аҙаҡтан шундай иҫкәрмә бирелә: башҡорт телендәге башҡа үҙгәрештәр тураһындағы ҡағиҙәләр төрөк-татар һүҙенең ҡағиҙәләре менән бер.

Был ҡағиҙәләрҙең һәр береһе бик күп һорауҙар, бәхәстәр тыуҙыра. Мәҫәлән, төрөк телендәге *б* башҡортсала күп ваҡытта *м* өнөнә алышына, тип әйтелә. Ә **бәрән, билбау** һ. б. шуның һымаҡ бик күп һүҙҙәрҙә алышынамы, юҡмы? Башҡорт һүҙҙәрендә ике *л* йәнәшә килһә, һуңғы *л* *д*-ға әйләнә, тиелә. Ике *л* әйтеп йөрөтөлгәс, ни өсөн *д*-ға әйләндереп яҙыла, **илле, илленсе** һәм башҡа шуның кеүек һүҙҙәрҙә лә шулай *л* өнө *д*-ға әйләндереп яҙыламы? Ҡағиҙә буйынса шулай була инде: **илде, илденсе.** Шунан һуң иҫкәрмә бик ҡыҙыҡ: башҡорт телендәге башҡа үҙгәрештәр тураһындағы ҡағиҙәләр төрөк-татар һүҙенең ҡағиҙәләре менән бер, тиелә. Ә «Төрөк-татар һүҙе ҡағиҙәләре» тигәнде нисек аңларға?

1924 йылда башҡорт әҙәби теле орфографияһының яңы проекты төҙөлә.

Был проект Ғилми мәркәз эргәһендәге орфография комиссияһы тарафынан 1924 йылдың мартында ҡаралып раҫлана. Проект буйынса һүҙ яһаусы һәм үҙгәртеүсе бөтә ялғауҙар дүрт бөгөлөш законы буйынса яҙылырға тейеш була. Ләкин орфография комиссияһы быға үҙгәреш индереп, яһаусы ялғауҙарҙы дүрт бөгөлөш законына буйһондормайынса, бер генә төрлө яҙыу тураһында ҡарар ҡабул итә.

Был орфография «Башҡортса яҙыу ҡоралы» исеме менән бер ни тиклем өҫтәлеп, 1924 йылда айырым брошюра рәүешендә баҫылып сыға.

Орфография 32 параграфтан тора. Бында алты һуҙынҡы хәреф алына (ئا، ئه، ئۇ، ئو، ئ، ئی *а*, з, о, *у*, *е*, *и* ); *б* өнө шикле өн исеме менән атап йөрөтөлөп, *яп*, *куп* һымаҡ һүҙҙәр *яб*, *куб* формаһында яҙылырға тейеш була. Ғәрәпсәнән ингән һүҙҙәр *з* менән яҙылып, башҡорт теленең үҙ һүҙҙәренән дә ҡайһы берҙәренең *з* менән яҙылырға тейеш икәнлеге әйтелә (мәҫәлән, **ызылдай, бызылдай, зәңгәр, зыуылдауыҡ** һ. б.). Ғәрәпсәнән ингән һүҙҙәр *ж* менән әйтелһә лә, *җ* менән яҙыла (جهمهعهت، حوجا **хужа, җәмәғәт**); *ч* хәрефе алынмай, рус әҙәби теле аша ингән һүҙҙәр *с* менән яҙылырға тейеш була (سیناونیک — **синауник**).

Был орфографияла төп моменттар бына ошолар. Бында ғәрәп теле грамматикаһы һәм орфографияһының йоғонтоһо ла барлығын күрәбеҙ. Мәҫәлән, һүҙҙәрҙең аҙағында *б* яҙылыу, терминдарҙың ғәрәпсә алыныуы, мәҫәлән, изафә ғәләмәте (эйәлек килеш ялғауы), мәфғүлен биһ ғәләмәте (төшөм килеш ялғауы) һ. б.

«Башҡортса яҙыу ҡоралы»нда күплек ялғауҙары дүрт төрлө алына. Был ялғауҙарҙы үҙгәртеү мәсьәләһе ҡуҙғатылып, 1924 йылдың ноябрендә Ғилми мәркәз янында махсус йыйылыш үткәрелә. Йыйылышта күплек ялғауҙарын юрматылар телендәгесә ҡабул итеү кәрәклеге тураһында Д. Юлтый доклад яһай. Ул үҙенең докладында «Башҡортса яҙыу ҡоралы»ның күплек ялғауҙары яҙылышы тураһындағы ҡағиҙәһен үҙгәртергә кәрәклеген әйтә. Дауыт Юлтыйҙың был тәҡдиме йыйылышта ҡатнашыусылар араһында ҡыҙыу бәхәс тыуҙыра. Мәсьәлә ике диалект вәкилдәренең тартышына әйләнеп китә. Дауыт Юлтый һ. б., әҙәби телдең орфография ҡағиҙәләрен төҙөгәндә юрматы диалекты нигеҙ итеп алынырға тейеш, тиҙәр. Ғ. Вилданов һәм башҡалар, ҡыуаҡан диалектында һөйләүселәр күберәк, шуға күрә ҡыуаҡан диалекты нигеҙ итеп алынырға тейеш, тиҙәр. Ләкин күпселек үҙгәртмәү яғында була. Йыйылыш күплек ялғауҙары яҙылышы тураһында ҡағиҙәне үҙгәртмәҫкә, «Башҡортса яҙыу ҡоралы»ндағы ҡағиҙәләрҙе хөкүмәт органдары тарафынан раҫлатып, рәсмиләштерергә һәм матбуғатта шуны ҡулланырға мәжбүр итергә, тигән ҡарар ҡабул итә[54].

1925 йылда Ғилми мәркәз ҡарамағында «Башҡорт теле имләһе» исеме менән тағы яңы орфография баҫылып сыға. Был

[54] Башҡортостан Үҙәк дәүләт тарих архивы. Фонд Р-798. № 128-1.

орфографияла башҡорт теленең үҙ һүҙҙәре яҙылышы күпселектә морфологик принципта алына. Мәҫәлән, ябыҡ ижектәрҙә *ы-е* яҙылмау (ئاقل، ئالم — **аҡл, алм**); *о-ө* өндәре хәрефтәренең беренсе ижектә генә яҙылыуы (بۆرك، قۆرى — **бөре, ҡоры** һ. б.). Киреһенсә, рус әҙәби теле аша ингән һүҙҙәрҙең яҙылышы фонетик принципта алына. Был турала: «Сит телдән ингән һүҙҙәр башҡорт теленә әйләндерелеп, телебеҙҙең тәбиғәтенә (һөйләү теленә) эйәртеләләр — *сәүит, кәмитәт, бушта, буйыҙ, бараүыҙ, яраплан, биксел, башбрт* һ. б.[55]

Шулай итеп, бер-бер артлы орфографиялар сығып тора. Ләкин быларҙың береһе лә башҡорт телендә дөрөҫ яҙыуҙы урынлаштыра алмай, сөнки уларҙың үҙҙәрендә төплө төҙөк бер принцип булмай, башҡорт теленең үҙенсәлектәре тулыһынса иғтибарға алынмай, ҡағиҙәләр бик өҫтән генә эшләнгәндәр. Икенсенән, ғәрәп алфавиты үҙе башҡорт теленең фонетик системаһына яуап бирә алмағанлыҡтан, уның нигеҙендә, ғөмүмән, башҡорт телендә дөрөҫ яҙыуҙы тәьмин иткән орфография төҙөп булмай. Бына шулар бөтәһе лә ул ваҡыттағы матбуғатта яҙыуҙа төрлөлөк тыуҙыралар, һүҙҙәр һәм уларҙың киҫәктәре яҙылышында бер төрлөлөк булмай, бер үк һүҙ бер нисә төрлө яҙып йөрөтөлә. Шуның өҫтөнә рус теленән ингән һүҙҙәр боҙоп яҙыла. Мәҫәлән, шул орфографиялар нигеҙендә баҫтырып сығарылған термин китаптарында рус һүҙҙәре түбәндәгесә алынған: ۋالوت — **валут** (валюта), ئزبوت — **ызбут** (взвод), ياناراللى — **янараллы** (генеральный), دوبلەكەت — **дүбләкәт** (дубликат), كەپيتەنسە — **кәпитәнсә** (квитанция), باكونناى — **бакуннай** (погонный), سيكلاتار — **сиклатар** (секретарь), ئوساسكا — **усаска** (участок), سيك — **сик** (чек), ئشتام — **ыштам** (штамп), سيناونيك — **синауник** (чиновник), يەسەيكە — **йәсәйкә** (ячейка) һ. б.[56]

Ошо орфографиялар нигеҙендә 1925 йылда башҡорт теленең беренсе грамматикаһы яҙылып, баҫтырып сығарыла[57]. Грамматика дәреслектәрендә, бигерәк тә яҙыуҙа, бер төрлөлөк

---

[55] «Башҡорт теле имләһе», Өфө, 1925 йыл, 27-се бит.

[56] «Эш атамалары (терминдары)». Өфө, 1927. Башҡорт телен ғәмәлгә ҡуйыу комиссияһы һәм БХМК эргәһендәге Ғилми мәркәз ҡарамағында сығарылған.

[57] *Ғәбитов Х., Таһиров М., Хангилдин В., Вилданов Ғ.* Башҡорт теленең сарыфы. Өфө, 1926 йыл. Ғилми үҙәк ҡарамағында баҫыла.

һаҡланырға тейеш ине. Ләкин унда ла беҙ һүҙҙәр яҙылышында төплө бер принцип күрмәйбеҙ. Айырыуса *с, ç, һ* өндәре яҙылышында буталсыҡ тулып ята. Мәҫәлән: **сәсһәң аҙыҡ ҡабырһың, сәсмәҫәң ни ҡабырһың** (17-се бит), **яһалған телмәр, яҫалған исем; сағыштырыу, һағыштырыу; сандуғас, һандуғас; еҫ, ес** һ. б. Шунан һуң һүҙҙәрҙең иренләшеү законы яҙыуҙа бер урында һаҡлана, икенсе урында һаҡланмай. Хатта бер үк һөйләмдә бер үк һүҙ ике төрлө яҙыла. Мәҫәлән: «*Мынау һүҙ төркмдәрендәге сифат исмдәрҙң тойоҡ ялғауы оҡшаштарына ҡарай бр нисә төркмгә айртрға һәм ялғауһыҙҙарн бер төркмгә ҡуйб, төркмләтб яҙрға, шунан һуң тойоҡ үҙгәрштәрн байҡатырға кәрәк*». (Орфографияһы үҙгәртмәй күсерелә, 65-се бит.) Бына бында **тойоҡ** һүҙендә иренләшеү законы һаҡлана, ә төркөм һүҙе яҙылышында һаҡланмай.

1925—1927 йылдарҙа инде латин алфавитына күсеү хәрәкәте бик көсәйгән була. Латин алфавиты нигеҙендәге орфография ҡағиҙәләре проекты төҙөлә, быны төҙөгәндә төп принцип итеп фонетик принцип алына. Шулай итеп, ике алфавит һәм икеһе ике төрлө принципта төҙөлгән орфография ҡулланып йөрөтөлә башлай. Был хәл буталсыҡ тыуҙыра. Шуға күрә 1927 йылдың декабрь айында Өфөлә үткәрелгән яңалиф һәм имлә конференцияһы, «хәҙерҙән үк ғәрәп әлифбаһы менән яҙыла торған имләне яңы әлифба имләһендәге ҡағиҙәләргә буйһондороп ҡулланыу юлын тоторға», тигән ҡарар сығара.

Шул ҡарарҙы ғәмәлгә ашырыуҙың башланғысы итеп, дәреслектәр яҙыусы коллективтарҙың 1928 йылдың 15 февралендә Башҡортостан Мәғариф Халыҡ Комиссариаты эргәһендә үткәрелгән киңәйтелгән ултырышы шундай ҡарар ҡабул итә: «Иҫке әлифбанан яңы әлифбаға күсеү осоронда йәштәрҙе фонетика нигеҙенә ҡоролған имлә менән яҙырға күнектереү, яңы әлифбаға күсеүҙе еңеләйтәсәген иғтибарға алып, дәреслектәрҙең имләһен Башҡортостан дәүмәлендәге Беренсе яңалиф конференцияһы ҡабул иткән ҡарарға муафиҡ яҙырға».

Ошо ҡарарҙарға таянып, 1928/29 уҡыу йылына ғәрәп хәрефтәре менән баҫыла торған дәреслектәр өсөн ваҡытлы орфография ҡағиҙәләре төҙөлә. Был ҡағиҙәләр Башҡортостан Мәғариф Халыҡ Комиссариаты тарафынан саҡырылған телселәр йыйылышында ҡаралып ҡабул ителә, һәм улар 1928 йылдың 12 апрелендә Башҡортостан хөкүмәте тарафынан раҫлана[58].

---

[58] Башҡортостан Үҙәк дәүләт тарих архивы. Фонд Р-798. № 1939.

1928/29 уҡыу йылы өсөн яҙылған дәреслектәр ошо орфография менән баҫтырып сығарыла. Был орфографияның төп ҡағиҙәләре түбәндәгеләр:

1. Башҡорттоң был көндә ғәмәлдә булған әҙәби теле нигеҙендә бөтә һүҙҙәрҙе нәҡ ишетелгәнсә яҙырға.

2. Ялғауҙарҙағы тартынҡы өндәр тураһында сингармонизм ҡанунын тулыһы менән еренә еткереп яҙырға.

3. Ҡалынлыҡ, нескәлектә нигеҙ итеп һуҙынҡы өндәр алына. Ғәрәп әлифбаһында был хеҙмәтте үтәргә етерлек һуҙынҡы өн хәрефтәре булмағанға, ҡалын һүҙҙәр алдына ҡалынлыҡ билдәһе ҡуйыла (بول، ىبول — бүл, бул).

4. Һуҙынҡы өн хәрефтәре һүҙ башында элеккесә ике хәреф менән яҙылалар, тик ئ хәрефе һүҙ башында ئ рәүешендә яҙыла.

5. ئ *(э, е)* хәрефе асыҡ ижектә лә, ябығында ла ишетелгән һәр бер урында яҙыла.

6. Беренсе ижегендә ئ өнө булған һүҙҙәрҙә, уртаға башҡа һуҙынҡы өн кермәгәндә, ялғауҙарҙағы ئ өнө ۇ рәүешендә әйтелә. Шуның өсөн бындай һүҙҙәрҙең ялғауҙарына ла ۇ яҙыла: تۇذۇلۇشۇ، بۇتۇنۇهۇ، هۇرذۇ (төҙөлөшө, бөтөнөһө, һөрҙө) кеүек.

7. Ҡылымдан яһалған исемдәрҙең аҙағындағы و тартынҡы өн. Башҡорт телендә унан элек бер ئ өнө әйтелә. Шуның өсөн ундай исемдәр كيلئو، كيتئو، يا ذئو (килеү, китеү, яҙыу) рәүешендә яҙылырҙар. Тик алдағы ижектәрҙә ۇ өнө килгәндә, был ئ өнөн дә башҡорт ۇ рәүешендә әйтә. Улары كۇتۇو، تۇرتۇو، بۇكۇو (көтөү, төртөү, бөгөү) рәүешендә яҙылалар.

8. Быға тиклем كييم، ييلش، هير (кийем, йийлыш, һийр) ике ي менән яҙылып килгән һүҙҙәр башҡортса әйтелеүенсә كئيم، هئيئر، يئيئلئش (кейем, һыйыр, йыйылыш) рәүешендә яҙылырҙар.

9. Һүҙ һәм ижек аҙағында килгәндә ب әйтелеп ب менән яҙылып йөрөгән һүҙҙәр бынан һуң پ менән яҙылырҙар: كورئپ، ئەيتئپ، قايتئپ (ҡайтып, әйтеп, күреп) кеүек.

10. Сифат аҙағында ҡушыла торған сағыштырыу ялғауҙары: راق ، رەک *(-раҡ, -рәк)* төп һүҙгә ҡушып яҙыла.

11. *Ғына, ҡына, генә, кенә,* шулай уҡ ярҙамлыҡ өсөн йөрөгән *-да-дә, -ҙа-ҙә, -та-тә, -ла-лә* айырым яҙылалар.

12. Һүҙ башында мәғәнә көсәйтеү өсөн килгән *ап, ҡап, йәп* кеүек ялғауҙар ҡушып яҙылалар: ئاپپاق، قاپقارا، يەپيەشل **(аппаҡ, ҡапҡара, йәпйәшел).**

13. **Барғайным, ҡайтҡайным, күргәйнем** кеүек ярҙамлыҡ ҡылымдарҙың ڭ өнө, тойоҡлаш ҡылымдың ن өнө төшөрөлөп, тоташ яҙылалар.

14. Ситтән кергән һүҙҙәр башҡорт телендә һөйләнә торған формаларында яҙылалар: پلان، پلاكات **(пылан, пылакат)** кеүек.

15. Башҡортостан эсендә йәшәгән башҡорттарҙың телдәре араһында ҡайһы бер айырымлыҡтар бар: ҡыуаҡан башҡорттарынан булған һалйот башҡорттарының телдәрендә ث *(ç)* өнө булмаған кеүек, шул уҡ ҡыуаҡан башҡорттарының әйҙе тип йөрөтөлгән, башҡорттар менән юрматы башҡорттарының, Дим буйы һәм Ыҡ буйы башҡорттарының телдәрендә ھ (h) өнө юҡ, шул сәбәпле был ике өн беҙҙең әҙәби телдә буталсыҡ тыуҙыра, һүҙ башында һәм шарт ҡылым ялғауы булып килгән урында **(һыу, һуған, һабан, һөрөү, һалма, барһа, ҡайтһа, күрһәләр, барһалар, ҡайтһағыҙ** кеүек) һәр ваҡыт ھ *(h)* өнө менән яҙылырға; ә Әй, Дим, Ыҡ буйы башҡорттарының телдәрендә булған хосусиәткә эйәртеп, **çыу, çуған, çөрөү,çалма, çабан, барса, ҡайтçа, күрçәләр, барçалар, ҡайтçағыҙ** тип яҙылмаçҡа тейеш.

16. Бойороҡ ҡылымдың аҙаҡҡы өнө һәм бойороҡ ҡылымдан башҡа ҡылымдар яһағанда ла ھ *(h)* өнө яҙылмай **(баһ, баһҡан** кеүек), ул урында һәр ваҡыт ث *(ç)* өнө яҙылыр **(баç, баçҡан** кеүек).

17. Киләсәк заман хәбәр ҡылымдың аҙаҡҡы өнө **(бармаһ, ҡайтмаһ** кеүек) ھ *(h)* өнө менән яҙылмай, һәр ваҡыт ث *(ç)* өнө менән **(бармаç, ҡайтмаç** кеүек) яҙылыр.

18. Ҡайһы бер урындарҙа **беҙең, һеҙең, белән** кеүек һөйләнһә лә, һәр ваҡыт **беҙҙең, һеҙҙең, менән** яҙылыр.

19. Татар телендә килә торған **барасым килә, ҡайтасым килә, күрәсем килә** кеүек һүҙҙәргә эйәртеп, ҡайһы берәүҙәр **бараһым килә, ҡайтаһым килә, күрәһем килә** тип йөрөтһәләр ҙә, бынан һуң был һүҙҙәрҙә **барғым килә, ҡайтҡым килә, күргем килә** тип яҙылыр.

20. Шулай уҡ төбәмә һүҙҙәрҙең тойоҡ ялғауҙары менән төрләнеү формаларын татар теленә эйәртеп, ошо көнгә саҡлы ярым-ярты (**был — мыңа, мыны, мында; ул — уңа, аны, анда; ошо — ошоңа, шуна, ҡайҙа, бына, быны** кеүек) яҙылып килһә лә, бынан һуң төбәмә һүҙҙәрҙе исем, сифат, һан һүҙҙәренең тойоҡ ялғауҙары менән төрләнеү формаһына эйәртеп (**был — быға, быны, бында; ул — уға, унан, уны, унда; ошо — ошоға, ошоно, шуға** кеүек) яҙылыр[59].

Был орфография ғәрәп графикаһы нигеҙендә төҙөлгән орфографияларҙың иң һуңғыһы һәм Башҡортостан хөкүмәте тарафынан раҫланған берҙән-бер орфография булып иҫәпләнә. Быға тиклем төҙөлгән орфографиялар тик Башҡортостан Мәғариф Халыҡ Комиссариаты эргәһендәге Ғилми мәркәз ҡарамағында сығарылып киләләр, уларҙың береһе лә хөкүмәт органдары раҫлауына индерелмәй.

Һуңғы орфография, быға тиклем баҫылып сыҡҡан орфографияларға ҡарағанда, әлбиттә, тулыраҡ төҙөлгән, бында башҡорт теленең үҙенсәлеге күберәк иҫәпкә алына. Мәҫәлән, сингармонизм законы, *ҫ, һ* өнө хәрефтәренең яҙылышы конкретлаштырыла, һүҙ аҙағында һаңғырау һәм яңғыраулы өн хәрефтәренең яҙылышы һ. б. Ләкин ғәрәп алфавитының башҡорт теленең фонетик системаһына тулыһынса яуап бирә алмауы башҡорт теленең бөтә үҙенсәлектәрен сағылдырыусы орфография төҙөргә мөмкинлек бирмәй. Шуға ҡарамаҫтан, ғәрәп хәрефтәре нигеҙендә төҙөлгән башҡорт әҙәби теленең алфавиты һәм орфографияһы үҙ заманында башҡорт яҙыуы үҫешендә билдәле дәрәжәлә ыңғай роль уйнаны. Башҡорт телендә беренсе гәзит, журналдар сыға башланы. Башланғыс мәктәптәр өсөн бөтә фәндәрҙән дәреслектәр төҙөлөп, баҫтырып сығарылды.

V—VII кластар өсөн башҡорт теленең беренсе грамматикаһы — морфологияһы һәм синтаксисы — яҙылды. Мәҫәлән, 1923—1927 йылдарҙа башҡорт телендә бөтәһе 34 дәреслек баҫылып сыға[60]. Башҡорт яҙыусыларының әҫәрҙәре тәү башлап шул ғәрәп хәрефтәре менән баҫылып сыға. Халыҡтың грамоталылығы байтаҡ күтәрелә.

---

[59] «Белем». 1928, № 5—6. 43—45-се биттәр. Был орфография ҡағиҙәләре Ғәббәс Дәүләтшин менән Ғөмдә Хәбиров тарафынан төҙөлгәндәр.

[60] Башҡортостан Үҙәк дәүләт тарих архивы. Фонд Р-798, № 1939.

## III

## БАШҠОРТ ӘҘӘБИ ТЕЛЕНЕҢ ЛАТИН ГРАФИКАҺЫ НИГЕҘЕНДӘ ТӨҘӨЛГӘН АЛФАВИТЫ ҺӘМ ОРФОГРАФИЯҺЫ

Ғәрәп алфавитына Октябрь инҡилабына тиклем дә, инҡилаптан һуң да реформа артынан реформа индереп торолғанын беҙ алда күреп үттек. Ләкин ни тиклем генә реформа индерелмәһен, ул төрки телдәренең, шул иҫәптән башҡорт теленең, фонетик системаһына тулыһынса яуап бирә алманы. Шуның өсөн уны ниндәй ҙә булһа бүтән алфавит менән алмаштырырға кәрәк ине.

Ғәрәп алфавитының төрки телдәре өсөн яраҡһыҙ булыуын, уны башҡа төрлө алфавит менән алмаштырырға кәрәклеген төрки халыҡтары араһында тәү башлап бөйөк әзербайжан яҙыусыһы Мирза Фатали Ахундов (1812—1878) күтәреп сыға. Ул бер-бер артлы дүрт төрлө проект тәҡдим итә. Шул проекттарҙың икеһен ул рус һәм латин графикалары нигеҙендә төҙөй. Ғәрәп алфавитының һәм шуның нигеҙендә төҙөлгән орфографияның етешһеҙлектәре тураһында китаптар яҙа[61].

Татарҙар араһында латин хәрефтәренә күсеү мәсьәләһен тәү башлап шағир Сәғит Рәмиев (1880—1926) ҡуҙғата. Ул 1911, 1912 йылдарҙа Әстрханда сыға торған «Идел» газетаһында был хаҡта мәҡәләләр яҙа һәм татар әҙәби теле өсөн латин графикаһы нигеҙендә алфавит проектын төҙөй[62].

---

[61] *Абдуллаев И.* Әзербайжан яҙыуы тарихы. Баку, 1951. Кандидатлыҡ диссертацияһы (ҡулъяҙма).

[62] Сәгыйть Рәмиев мәкаләләре: Мөхәмәтшакир вә Мөхәмәтзакир Рәмиевлар тарафынан иҗад вә тәрсим улынган аерым-аерым хәрефләргә бер нәзар. «Идел», 1911, 3 июнь; Ник бутыштыралар икән? // «Идел», 1912, 29 май.

Ләкин латин хәрефтәренә күсеү фекерен яҡлаусылар бик аҙ була. Бигерәк тә дин әһелдәре һәм уның эйәрсендәре быға ҡаршы киләләр. Улар, ғәрәп хәрефен ташлау «...әһле исламды шул ҡәҙәр күп ғөмүм вә әҫәр исламиә тәхсиленән мәхрүм итәсәге бик әйтелмештер»[63], тиҙәр.

1910 йылда Дәүләт думаһында башланғыс мәктәп тураһында закон проекты ҡарағанда, Дағстан вәкиле Хәйдәров үҙенең сығышында: «Бөтә ғаләм исламдә маҡбул булған хоруфат ғәрәп хоруфатылыр. Бинаән ғаләйһи был хоруфат ғәләмисламдың бер жөзьи булған Дағстан мосолмандарының да рухиҙер»[64], — ти.

Ғәрәп хәрефтәрен ташлауға дин әһелдәре генә түгел, шул ваҡыттағы интеллигенцияның да күпселеге ҡаршы була. Ғәрәп хәрефтәрен ташлау, улар фекеренсә, үткән мираҫтан, йөҙ йылдар буйы ижад ителгән әҙәбиәттән айырыуға килтерә.

Латин хәрефтәренә күсеү хәрәкәте тик Октябрь инҡилабынан һуң ғына көсәйеп китә. Тәү башлап был хәрәкәт Әзербайжанда киң йәйелдереп ебәреләә, 1922 йылда инде Әзербайжанда яңы алфавит комитеты ойошторола, әзербайжан теле өсөн латин графикаһы нигеҙендә яңы алфавит төҙөлә. 1923 йылдан был яңы алфавит рәсми рәүештә ғәрәп алфавиты менән бер тигеҙ хоҡуҡта ҡулланыла башлай, ә 1924 йылдан инде ул унда барлыҡ учреждениелар өсөн мәжбүри һәм берҙән-бер алфавит булып китә[65]. Латин хәрефтәренә күсеү хәрәкәтенең башында шул ваҡытта Әзербайжан Үҙәк Башҡарма Комитетының председателе булып эшләгән Сәмәд Ағамалы оғлы тора. Ул был турала В. И. Ленинға доклад менән керә.

С. Ағамалы оғлының әйтеүенсә, В. И. Ленин латин алфавитына күсеүҙе «Көнсығышта бөйөк революция» тип атай[66]. Латин графикаһы нигеҙендә төҙөлгән алфавит ғәрәп алфавитына ҡарағанда төрки телдәренең фонетик системаһына тулыраҡ яуап бирә ине.

---

[63] *Кәримов М. Ф.* Мөселманнарга чит хәрефләр кабул иту мәсьәләсе. «Шура», 1911, № 4, 100—102-се биттәр.

[64] *Еникеев Г.* 23 окт. 1910 ел Думада тәгълим гомумы һәм ибтидаи мәктәпләр лаихәсе каралганда мөселман фракциясе әгъзалары нотыгы, 1910, Петербург.

[65] Стенографический отчет первого пленума Всесоюзного центрального комитета нового тюркского алфавита. М. 1927. 25-се бит.

[66] *Агамалы оглы С.* В защиту нового тюрского алфавита. Баку, 1927.

Әзербайжан артынса башҡа милли республикаларҙа ла латинсылыҡ хәрәкәте көсәйә башлай. Урындарҙа яңалиф комитеттары төҙөлә. Ҡайһы бер республикаларҙа (мәҫәлән, Үзбәкстанда, Ҡырымда, Татарстанда һ. б.) был хәрәкәт ныҡ ҡаршылыҡтарға осрай. Татарстанда 83 кеше ҡул ҡуйып, партия Үҙәк Комитетына хат та яҙалар.

Башҡортостанда латинға ҡаршы ойошҡан рәүештә сығыштар булмаһа ла, айырым фекерҙәр булғыланы. 1926 йылдың апрелендә Өфө ҡалаһындағы яуаплы эшселәрҙең, мәҙәниәт, сәнғәт хеҙмәткәрҙәренең дөйөм йыйылышы булып, латинға күсеү мәсьәләһе ҡарала. Ике доклад ҡуйыла. Латинсылар исеменән докладты Кәрим Иҙелғужа яһай. Ул үҙенең докладында ғәрәп хәрефтәренең күп етешһеҙлектәре булғанын әйтә: ғәрәп хәрефтәрендә шәкелдәр бик күп, полиграфия эшендә бик уңайһыҙлыҡ килтерә; фәнни китаптарҙы (алгебра, геометрия) ғәрәп хәрефтәре менән яҙып булмай, бөтә фәнни билдәләр латинса йөрөтөләләр, телеграф, стенография өсөн ғәрәп хәрефтәре яраҡһыҙ, ноталар яҙып булмай; уңдан һулға яҙыу күреүгә һәм иғтибар менән эшләүгә ҙур зарар килтерә; яҙыу машиналары ҡулланыуҙы уңайһыҙлай һ. б. Латин хәрефтәренең халыҡ-ара әһәмиәте бар, ул һәр бер мәҙәниәтле милләт тарафынан ҡулланыла; латин хәрефтәре менән яҙыуға тиҙ өйрәнеп була.

Ғәрәп хәрефтәрен яҡлап Ғәлим Айҙаров доклад яһай. Ул үҙенең докладында ғәрәп хәрефен ҡалдырыуҙы ҡеүәтләп, түбәндәге фекерҙәрҙе әйтә: Кәрим Иҙелғужа уңдан һулға яҙыу ғәйре тәбиғи тимәксе була, юҡ, улай түгел. Әгәр ҙә беҙ тәбиғәтте алып ҡараһаҡ, Ер шары ла уңдан һулға әйләнә бит. Ғәрәпсә яҙылған һүҙҙәр латин хәрефтәре менән яҙылған һүҙҙәргә ҡарағанда аҙ урын алалар. Уҡығанда ғәрәп хәрефтәрен күҙ тиҙ ала, уны күҙҙең ҡырыйы менән дә уҡып була, латинға ҡарағанда тиҙерәк уҡыла, ғәрәп хәрефтәренең шәкеле күп, шуға күрә уҡырға еңел. Ғәрәпсә тиҙ яҙыла, стенография кеүек ул. Кәрим Иҙелғужа нота мәсьәләһен ҡуя, ноталар хәрефтәр менән яҙылмай, һыҙыҡтар менән яҙыла. Латинға күсһәк, бөтә халыҡты грамотаһыҙ яһарға кәрәк, был наҙанлыҡты бөтөрөү өсөн тағы ла 20 йыл кәрәк буласаҡ, быға ни тиклем аҡса әрәм китер. Өс төрлө хәреф уҡырға тура киләсәк. Революциянан һуң сыҡҡан китаптарҙы ташларға йәки күбеһен латинға күсерергә тура киләсәк. Латинға күсеү мөмкин түгел, юҡ эш ул, ти. Әлбиттә, Кәрим Иҙелғужа үҙенең докладында ғәрәп алфавитының

етешһеҙлектәрен фәнни яҡтан асып бөтөрә алмаған, шуға ҡарамаҫтан йыйылышта ҡатнашыусыларҙың күпселеге, мәҫәлән, Х. Ҡушаев, Ғ. Ҡасимов, Х. Ғәбитов, Ш. Чураев, Чураголов, Э. Хәбиби һ. б. латин хәрефтәренә күсеүҙе яҡлап сығыш яһайҙар.

Ғазим Ҡасимов латинға ҡаршы кешеләрҙе бер нисәгә бүлә: а) динселәр, былар, Ҡөрьәнде латин хәрефтәре менән яҙып булмай, дин боҙола, тиҙәр; б) милләтселәр — латин хәрефебеҙҙе ситтәрҙән йоттора, милләт һәләк була, тип илаусылар; в) реформистар — ғәрәп хәрефен төрлө яҡтан уңайлатабыҙ, уңайлы ул, тиеүселәр; г) латинға, нигеҙҙә, ҡаршы түгел, ләкин хәҙергә мөмкин түгел, тип ҡурҡыусылар; д) латин хәрефтәрен тормошҡа үткәреүҙә халыҡтан ҡурҡыусылар, халыҡ мулла ҡулында, уларҙың психологияһы латин хәрефе кеүек бер үҙгәреште ҡабул итә алмай, тип күтәрелеүселәр. Ғазим Ҡасимов латинға ҡаршыларҙы шулай биш төркөмгә бүлә лә өсөнсө төркөмгә Ғибад Алпаровты, дүртенсе төркөмгә Ғәлимйән Ибраһимовты, бишенсе төркөмгә Әхмәт Абдуллинды индерә.

Йыйылышта ҡатнашыусыларҙың ҡайһы берҙәре латинға күсеүҙе бик артыҡ баһалап та ҡуялар. Мәҫәлән, Н. Янбарисов, Германия хөкүмәте үҙенең мәҙәниәте менән бөтә донъяны үҙ шауҡымына алыу фекеренә килгәс, үҙҙәренең хәрефтәрен ташлап, латин хәрефен алырға мәжбүр булды һәм шуның менән ҙур муаф фаҡыят ҡаҙанды, ти. Н. Янбарисов фекеренсә, латин хәрефтәре бөтә донъяны үҙ шауҡымына алыуҙа көслө ҡорал булып тора, бөтә донъяны үҙ шауҡымыңа буйһондорорға теләһәң, латин хәрефтәре ҡабул итергә кәрәк булып сыға.

Йыйылышта Мәжит Ғафури, Ғибад Алпаров, Әхмәт Абдуллин, Муса Ысмаҡовтар латин хәрефен алыуға ҡаршы сығалар. М. Ғафури, мин латин ҡабул итеүгә ҡаршы, ғәрәп хәрефтәре яҡлы булыуҙы дин менән бутамаһындар, беҙҙе динсе тимәксе булалар, мин үҙем ғәрәпсе, ләкин 20-се йылдан бирле динһеҙмен. Латин хәрефтәрен массовый итеү өсөн зәминдәр (ерлек.— *Ҡ. Ә.)* әҙерләргә кәрәк, латин хәрефтәре менән яҙғанды уҡымаясаҡтар, ти. Һуңынан ул, әлбиттә, үҙенең был фекеренән кире ҡайта.

Муса Ысмаҡов, латинды тормошҡа ашырыу ул ҡоро хыял, беҙ латинға күсеү менән бик күп нәмә юғалтабыҙ, берҙән, төрөктәрҙән айырылыу була; икенсенән, был эштә алға киткән булып, аҡһап ҡалып, 20—30 йылдан һуң кире артҡа ҡайтырға тейеш буласаҡбыҙ. Яңы хәрефкә күсеү мәсьәләһен ҡәтғи

ҡуябыҙ икән, ул саҡта бергә йәшәү, бергә ашау, бәйләнеш һәм башҡа яҡтарҙы иғтибарға алып, һис ғауғаһыҙ рус хәрефтәренә күсергә кәрәк. Ул беҙгә үҙләшкән, революцияға тиклем үк доктор М. Ҡулаев тарафынан эшләнгән алфавитты ҡабул итһәк, был иң дөрөҫ һәм төплө килеш буласаҡ, ти.

Ғибад Алпаров, латин хәрефтәре файҙаһына килтерелгән дәлилдәр нигеҙһеҙ, беҙҙә реформалы хәреф бар, ул һәйбәт, латин хәрефтәренең кәрәге юҡ, ти.

Шулай ҡыҙыу бәхәстәрҙән һуң йыйылыш күпселек менән латинға күсеүҙе кәрәкле таба һәм был юлда планлы эш алып барыу тураһында ҡарар ҡабул итә[67]. Латинға ҡаршы шундай айырым сығыштар булыуға ҡарамаҫтан, латинсылыҡ хәрәкәте милли республика һәм өлкәләрҙә көндән-көн көсәйә бара. Бигерәк тә 1926 йылдың февраль айында Баҡыла үткәрелгән беренсе төркиәт съезынан һуң көсәйеп китә. СССР Үҙәк Башҡарма Комитетының 1927 йылдың 11 май ҡарары менән Бөтә Союз яңы алфавит үҙәк комитеты төҙөлә. Комитеттың председателе итеп С. Ағамалы оғлы билдәләнә. Комитеттың составына Әзербайжан, Дағстан, Тажикстан, Ҡаҙағстан, Татарстан, Башҡортостан һ. б. милли республика һәм өлкәләрҙән вәкилдәр индерелә.

Тюркология съезына Советтар Союзының барлыҡ республика һәм өлкәләренән тыш, сит илдәрҙән — Төркиә, Венгрия һәм Германиянан да вәкилдәр, күренекле төркиәтселәр килә. Съезға Башҡортостандан да бер нисә кеше бара. Съезда төркиәткә бәйле бик күп мәсьәләләр менән бер рәттән алфавит һәм орфография мәсьәләһе лә көн тәртибенә ҡуйыла. Был һуңғы мәсьәлә буйынса съезда бик ҡыҙыу бәхәс бара. Латин алфавитына күсеүҙе яҡлап сығыусылар менән бер рәттән ҡаршы сығыусылар ҙа була. Мәҫәлән, Татарстандан күренекле телсе Ғәлимйән Шәрәф латин алфавитын ҡабул итеүгә ҡаршы була[68].

Бик ҡыҙыу бәхәстәрҙән һуң тюркология съезы алфавит һәм орфография тураһында түбәндәге ҡарарға килә.

Съезд яңы алфавиттың төрки телдәр өсөн һәр яҡлап уңай икәнен билдәләп үтә, был алфавитҡа күсеүҙе һәм уны тормош-

---

[67] Башҡортостан Үҙәк дәүләт тарих архивы. Фонд 3. Опись 9. № 6. 17—30-сы биттәр.

[68] *Шараф Г.* К вопросу о принятии для тюркских народностей латинского шрифта // Вестник научного общества Татароведения. 1926 г. 64-се бит.

ҡа ашырыуҙы һәр милли республиканың йәки өлкәнең үҙ эше тип ҡарай. Был эштә Әзербайжан һәм башҡа республикаларҙың тәжрибәләрен башҡаларға өлгө итеп ҡуя. Орфография принциптарынан төрки телдәренең үҙенсәлегенә иң яраҡлыһы фонетик принцип тип таныла. Әлбиттә, билдәле дәрәжәлә этимологик (морфологик) принцип та иғтибарға алына. Ғәрәп һәм башҡа сит телдәрҙән (Европа телдәренән һ. б.) ингән һүҙҙәр шулай уҡ фонетик принцип буйынса яҙылырға тейеш була[69].

Башҡортостанда латинсылыҡ хәрәкәте ныҡлап 1924 йылдарҙа башлана.

1924 йылдың июнендә Ғилми мәркәз латинға күсеү мәсьәләһен тикшереү өсөн махсус йыйылыш үткәрә. Йыйылыш хәҙерҙән үк латин хәрефтәренә күсеүҙе тейеш табып, уны ғәмәлгә ашыра башлау өсөн, түбәндәге сараларҙы билдәләй.

Латин хәрефтәре менән бәләкәй генә бер әлифба китабы баҫтырып сығарырға; латин хәрефтәренә күсеү идеяһын таратыу өсөн Ғилми мәркәз эргәһендә ваҡытлы өлкә комитеты төҙөргә; мәктәптәрҙә латин хәрефтәрен өйрәнеү түңәрәктәре ойоштororға; Республика газеталарында латин хәрефтәренә өйрәтеү мөйөштәре асырға һәм латин хәрефтәре менән лозунгылар баҫырға[70]. Ваҡытлы өлкә яңалиф комитетына Сәғит Сүнчәләй, Ғабдулла Шонәси, Әхмәт Хәбиби, Сәғит Рәмиев һәм Ғибад Алпаровтар һайлана.

Ваҡытлы яңалиф өлкә комитеты тарафынан башҡорт теленең латин графикаһы нигеҙендә беренсе алфавит проекты төҙөлә һәм ул комитеттың 1924 йылдың 4 октябрендәге ултырышында ҡаралып раҫлана. Был алфавит 10 һуҙынҡы һәм 24 тартынҡы өн хәрефтәренән тора.

Был проектта *ҡ, ғ* өндәре өсөн айырым хәрефтәр алынмай, алфавитҡа индерелгән *к* хәрефе *к* һәм *ҡ* өндәре, ә *g* хәрефе *г, ғ* өндәре хәрефе булып ҡулланылырға тейеш була. Уның ҡарауы, проектҡа башҡорт телендә бөтөнләй ҡулланылмаған *җ* хәрефе индерелә.

Башҡортостан Халыҡ Комиссарҙары Советының 1924 йыл 6 октябрь ҡарары менән Ғилми мәркәз эргәһендәге ваҡытлы яңалиф өлкә комитеты урынына Башҡортостан яңалиф үҙәк комитеты ойоштorола. Был рәсми комитеттың беренсе

---

[69] *Курбатов Х.* Татар теленең алфавит һәм орфография тарихы. Ҡазан, 1960. 74 бит.

[70] Башҡортостан Үҙәк тарихы архивы. Фонд Р-798. № 1275.

ултырышы 1925 йылдың 25 февралендә була. Ултырышта яңалифты пропагандалау мәсьәләләре ҡарала. Ғилми мәркәз эргәһендәге ваҡытлы яңалиф өлкә комитеты тарафынан төҙөлгән алфавит проектын ҡайтанан ҡарап сығыу өсөн комиссия ойоштороҙа.

Был комиссия алфавит ниндәй принциптарҙан сығып төҙөлөргә тейеш, иң тәүҙә шуларҙы билдәләй: һәр бер өндөң үҙенә махсус хәреф алына; бер хәреф ике өн урынында ҡулланылмай; ҡушма хәрефтәр алынмай; латин алфавитындағы хәрефтәр етмәһә, латин хәрефе ҡулланған башҡа милләттәр әлифбаларынан алына, әгәр ҙә улай ҙа етмәһә, латин алфавитындағы хәрефтәр нигеҙендә яңы хәрефтәр яһап алына; шәкелде күбәйтмәүҙе күҙ алдында тотоп, баш хәрефтәр алынмай.

### *Проект*

| | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|
| A a<br>а | B ʙ<br>б | J j (g)<br>ж | C c (ç)<br>ч | D d<br>д | D d̦<br>ҙ | E e<br>э |
| Ə ə (a)<br>ә | F f<br>ф | G g<br>ғ | H h<br>h | Ħ ħ<br>х | I i<br>и | U u (ə)<br>ы |
| Y y (j)<br>й | K k<br>к | L l<br>л | M m<br>м | N n<br>н | N̂ n̂<br>ң | O o<br>о |
| Ө ө<br>ө | P p<br>п | R r<br>р | S s<br>с | Ş ş (ŝ)<br>ш | T t<br>т | T ƅ<br>ç |
| U ɯ (ɯ)<br>у | U ɯ (u)<br>ү | V v<br>в | Î î<br>ый | Z z<br>з | Ĵ ĵ<br>ж | J̌<br>апостроф |

Иҫкәрмә. *Йәйәләр эсендә аҙсылыҡ тарафынан тәҡдим ителгән хәреф формалары күрһәтелгән*

Комиссия алфавит проектында d̦, ə, y, ş, ƅ (*ҙ, ә, й, ш, ç*) формаһында алынған хәрефтәрҙе a, a, j, s, b формаһында алырға тәҡдим итә. Яңынан алфавитҡа ике хәреф өҫтәй: *й* (вау), *ь* (апостроф); был алфавит 36 хәрефтән тора. Комиссияның тәҡдимдәре Башҡортостан яңалиф үҙәк комитетының 1925 йылдың 20 март ултырышында ҡабул ителә.

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| *a* а | *b* б | *ĝ* җ | *c* ч | *d* д | *d* ҙ |
| *e* э | *a* ә | *f* ф | *g* г | *h* һ | *ħ* х |
| *i* и | *û* ы | *j* й | *k* к | *l* л | *m* м |
| *n* н | *n̂* ң | *o* о | *ө* ө | *p* п | *r* р |
| *s* с | *ŝ* ш | *t* т | *t'* ç | *u* у | *ü* ү |
| *v* в | *î* ый | *z* з | *ĵ* ж | *ŭ* вау | ’ апостроф |

Ләкин комиссия алфавитты ҡарағанда үҙе билдәләгән принциптарҙан ситкә сыға: *ҡ, ғ* өндәре өсөн айырым хәрефтәр алмай, g, *k (г, к)* хәрефтәре икешәр өн урынында *(д—г, ғ, k—к, ҡ)* ҡулланылып йөрөргә тейеш булалар. Шунан һуң *ы* өнө ике хәрефтән *(i, e – ie)* яһап алына.

Беренсе тюркология съезына әҙерләнеү уңайы менән яңы алфавит проекты Яңалиф комитетының 1926 йылдың февралендә булған ултырышында тағы бер ҡат тикшерелә һәм бер нисә хәрефтең шәкелдәренә үҙгәреш индерелә: *j, ue, b̄, b* *(ж, ы, ç,* апостроф) хәрефтәре үҙгәртелеп, *ĵ, ûe, t'* ’ формаһында алыналар.

Был алфавит тейешле аңлатмалар менән «Башҡорт аймағы» журналының тюркология съезы материалдарына бағышланған икенсе һанында баҫтырып сығарыла[71].

Проекттың һуҙынҡы өн хәрефтәре бүлеге тураһындағы аңлатмаһында: «Беҙҙең яңы алфавит проектының был бүлеге йылдар буйына эшләнде, һәм ул эшләнеп бөткән. Хәҙерге ваҡытта ул уҡыу йорттарында, стена гәзиттәрендә ҙур

[71] Почему мы, башкиры, решили заменить арабский алфавит для башкирской письменности латинской, и почему мы имеем отдельный свой проект нового алфавита? // Башҡорт аймағы, 1926. № 2. 1—8-се биттәр.

уңыш менән ҡулланыла, шуға күрә ул киләсәктә үҙгәрмәйәсәк», — тиеләә. Ләкин ғәмәлдә улай булып сыҡмай. Бөтә Союз Яңалиф үҙәк комитетының 1927 йылдың июнь айында буласаҡ пленумында яңы төрки алфавитын унификациялаштырыу мәсьәләһе ҡаралырға тейеш була. Шул уңай менән башҡорт алфавиты проекты яңынан ҡаралып, уға күп кенә үҙгәрештәр индерелә, һәм ул айырым брошюра рәүешендә баҫтырып сығарыла[72]. Был проект буйынса алфавитҡа *ҡ, ғ* өндәре өсөн айырым хәрефтәр алына (*q g*) *ҡ, ҙ, ә, х, ы, о, ө, ç, ый, ж* өндәренең хәреф шәкелдәре үҙгәртелә. Элекке проектта был өндәрҙең хәрефтәре *ĝ, d, a, h, ie, ө, o, t́, î, ĵ* формаһында алынһа, һуңғы проектта *ç, d, ə, x, b, o, ө, ƀ, y, z* формаһында алына.

Бөтә Союз яңалиф үҙәк комитетының 1927 йылдың июнендә үткәрелгән беренсе пленумында яңы алфавитты унификациялаштырыу мәсьәләһе ҡарала. Пленум ҡарамағына төрлө республикаларҙан, шул иҫәптән Башҡортостандан да, бөтәһе 16 проект килә.

Яңы алфавитты унификациялаштырыу тураһында ике доклад була. Беренсе докладты Әзербайжан вәкиле профессор Чобан-Заде һөйләй. Ул һәр бер өнгә бер хәреф алыу принцибын яҡлай. Икенсе докладты Ҡаҙағстан вәкиле Түрәҡулов яһай. Ул яңы алфавитты ярашлылыҡ һәм сингармонизм закондары нигеҙендә төҙөргә тәҡдим итә. Ярашлылыҡ законы шунан ғибәрәт: мәҫәлән, **с** (**ч**) хәрефе алфавитҡа индерелһә лә, ул үзбәк һәм татарҙарҙа *ч* өнө хәрефе *(çас-ҡач)*, башҡорттарҙа *с* өнө хәрефе *(çас-ҡас)*, ҡаҙаҡтарҙа *ш* өнө хәрефе *(çас-ҡаш)* булып ҡулланылып йөрөргә тейеш. Тимәк, шул бер хәреф икенсе телдәрҙә ниндәй өн хәрефенә тура килә, шул өн хәрефе булып ҡулланыла. Йәки алфавитҡа *г* (*з*) хәрефе индерелә лә, шул хәреф башҡорт алфавитында *ҙ* өнө хәрефе булып ҡулланылырға тейеш.

Сингармонизм законына таянып, Түрәҡулов һуҙынҡы өндәрҙең ҡалындары өсөн дә, нәҙектәре өсөн дә бер генә форма хәреф алырға тәҡдим итә, сингармонизм законына буйһоноп, улар ҡалын һүҙҙәрҙә — ҡалын, нәҙек һүҙҙәрҙә нәҙек уҡылырға тейештәр. Нәҙеклеген күрһәтеү өсөн өҫкә бер нөктә ҡуйырға мөмкин. Мәҫәлән: *bul, bűl* (**бул, бүл**), *bьl, bil* (**был, бил**).

---

[72] Яңы башҡорт әлифбаһы (проект). Өфө, Башҡортостан яңы әлифба нәшере, 1927.

Пленумда ҡатнашыусыларҙың күпселеге, шул иҫәптән Башҡортостан вәкилдәре лә, Түрәкуловтың был тәҡдименә ҡаршы сығалар. Мәҫәлән, Ш. Манатов үҙенең сығышында, ярай, *z* хәрефен *ȥ* өнө урынында ҡулланайыҡ, ти, ә башҡорт телендә *з* өнө менән әйтелә торған һүҙҙәр ҙә бар, уларҙы нисек яҙырбыҙ, ти.

Ысынлап та, был принцип буталсыҡ ҡына тыуҙыра. Мәҫәлән, *c* (ч) хәрефе башҡорт телендә *с* өнө хәрефе булып йөрөй икән, ләкин шуның менән бергә *ч* өнө менән әйтелә торған һүҙҙәр ҙә бар бит, уларҙы нисек яҙырға кәрәк? Пленумда ҡатнашыусыларҙың береһе: «Был алфавиттарҙы берләштереү түгел, ә телдәрҙе берләштереү булып сыға», — тип бик дөрөҫ әйткән.

Шунан һуң пленумда баш хәрефтәр мәсьәләһе бик ныҡ бәхәс тыуҙырған. Баш хәрефтәрҙе алыуға ҡаршы кешеләр, ғәрәп алфавитында лә шәкелдәр күплегенән йөҙәп бөткәйнек, әгәр баш хәрефтәрҙе алһаҡ, латин алфавитында лә шәкелдәр күп буласаҡ, тиҙәр.

Бик ҡыҙыу бәхәстәрҙән һуң төрки телдәре өсөн берләштерелгән алфавит ҡабул ителә, һәм ул «Берләштерелгән яңы төрки әлифбаһы» тип атала. Был алфавит 33 хәрефтән тора, баш хәрефтәр алыналар[73].

Берләштерелгән алфавит ҡабул ителгәс, башҡорт теленең яңы алфавиты, тағы бер ҡат ҡаралып, рәсми рәүештә ҡабул ителә. Берләштерелгән алфавиттағы хәрефтәр бөтәһе лә үҙгәрешһеҙ алыналар. Шуларға тағы башҡорт теленең специфик өндәре өсөн өс хәреф — *ƀ,đ,ɓj* (*ç, ȥ, ый*) хәрефтәре өҫтәлә. Шулай итеп, башҡорт алфавиты 36 хәрефтән тора: шуларҙың 10-ы — һуҙынҡы өн, 26-һы — тартынҡы өн хәрефтәре.

Башҡорт алфавитында баш хәрефтәр ҙә алына, ләкин быға ҡаршы килеүселәр ҙә була. Улар, әгәр баш хәрефтәрҙе алһаҡ, ғәрәп алфавитындағы шикелле, шәкелдәр күбәйә, тиҙәр. Х. Ғәбитов үҙенең «Яңы башҡорт әлифбаһының имләһе тураһында» тигән мәҡәләһендә: «Ғәрәп хәрефтәрен ташлауҙағы төп ауырлыҡтарҙың берәүһе һәм өлкәне шәкел күплеге булһа, яңы төрки хәрефтәрендә был ауырлыҡты тағы ла ҡабатлауҙан бөтә көсөбөҙ менән һаҡланырға тейешбеҙ.

---

[73] Стенографический отчет первого пленума Всесоюзного центрального комитета нового тюркского алфавита. М., 1927. 107—151, 159—167-се биттәр.

## БЕРЛӘШТЕРЕЛГӘН ЯҢЫ ТӨРКИ ӘЛИФБАҺЫ

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| A a<br>а | B ʙ<br>б | C c<br>ч | Ç ç<br>җ | D d<br>д | E e<br>э |
| Ə ə<br>ә | F f<br>ф | G g<br>г | Ƣ ƣ<br>ғ | H h<br>һ | I i<br>и |
| J j<br>й | K k<br>к | L l<br>л | M m<br>м | N n<br>н | Ꞑ ꞑ<br>ң |
| O o<br>о | Ɵ ɵ<br>ө | P p<br>п | Q q<br>ҡ | R r<br>р | S s<br>с |
| Ş ş<br>ш | T t<br>т | U u<br>у | V v<br>в | X x<br>х | Y y<br>ү |
| Z z<br>з | Ƶ ƶ<br>ж | Ь ь<br>ы | | | |

Әгәр беҙ яңы төрки хәрефтәрендә баш хәреф ҡабул итһәк, был тағы ла шул уҡ дүрт төрлө шәкелде ҡабул итеү тигән һүҙ була. Шуның өсөн дә яңы төрки хәрефтәрендә Европаның иҫке ғәҙәтенән ҡалма «баш хәреф» алынырға тейеш түгел, тибеҙ беҙ», — ти[74]. Авторҙың баш хәрефтәрҙе алыуға ҡаршы килтергән дәлилдәре менән, әлбиттә, килешеп булмай. Ул ғәрәп алфавитының иң ҙур төп етешһеҙлеге итеп шәкелдәр күплеген ала. Шәкелдәрҙең күплеген ғәрәп алфавитының етешһеҙ яҡтарының береһе итеп алып була, ләкин уның төп етешһеҙлеге ул түгел, ғәрәп алфавитының төрки телдәре фонетик системаһына яуап бирмәүе — бына уның төп етешһеҙлеге шул. Баш хәрефтәр Европаның иҫкелек ҡалдығы, тип әйтеүенең дә һис бер фәнни нигеҙе юҡ. Баш хәрефтәр иҫкелек ҡалдығы булған артыҡ шәкелдәр түгел, яҙыуҙа уларҙың әһәмиәте бик ҙур, улар яҙыуҙың айырым мәғәнәгә эйә булған кәрәкле бер элементы булып иҫәпләнә. (Яңғыҙлыҡ исемдәрҙе уртаҡлыҡ исемдәрҙән айырыу һ. б.)

*ҡ, ғ* өндәре өсөн айырым хәрефтәр алыу мәсьәләһендә лә ике төрлө ҡараш була. *ҡ, ғ* өндәре өсөн айырым хәреф алмау яғында тороусылар ул өндәрҙе айырым фонема итеп иҫәпләмәйенсә,

---

[74] *Ғәбитов Х.* Яңы башҡорт әлифбаһының имләһе тураһында. «Башҡорт аймағы», 1927, № 3, 29-сы бит.

*к, г* өнөнөң ҡалын варианты итеп кенә ҡарайҙар, уларҙың фекеренсә, *к, г* өндәре нәҙек һуҙынҡылар эргәһендә килһә — нәҙек, ҡалын һуҙынҡылар эргәһендә килһә — ҡалын әйтелә. Шуға күрә тәүге проекттарҙа *ҡ, г* өндәре өсөн айырым хәрефтәр алынмай. Берләштерелгән төрки алфавитында был өндәр өсөн айырым хәрефтәр алына, шунан инде башҡорт теле алфавитында ла алырға булалар. Был турала 1927 йылдың декабрендә Өфөлә булып үткән Беренсе яңалиф конференцияһы ҡарарында: *q, k, g, ƣ* хәрефтәрен унификацияға буйһоноп, дүрт шәкелдә ҡалдырырға, тип әйтелә.

**Башҡорт теленең рәсми ҡабул ителгән яңы алфавиты**

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| *Aa*<br>а | *Bʙ*<br>б | *Cc*<br>ч | *Çç*<br>җ | *Dd*<br>д | *Đđ*<br>ҙ |
| *Ee*<br>э | *Ff*<br>ф | *Əə*<br>ә | *Gg*<br>г | *Ƣƣ*<br>h | *Hh*<br>и |
| *Ii*<br>и | *Jj*<br>й | *Kk*<br>к | *Qq*<br>ҡ | *Ll*<br>л | *Mm*<br>м |
| *Ꞑꞑ*<br>ң | *Nn*<br>н | *Oo*<br>о | *Ɵɵ*<br>ө | *Pp*<br>п | *Rr*<br>р |
| *Ss*<br>с | *Şş*<br>ш | *Tt*<br>т | *Ƀƀ*<br>ç | *Uu*<br>у | *Vv*<br>в |
| *Xx*<br>х | *Yy*<br>ү | *Zz*<br>з | *Ƶƶ*<br>ж | *Ьь*<br>ы | *Ьj ьj*<br>ый |
| ,<br>апостроф | | | | | |

Беренсе тюркология съезына әҙерлек уңайы менән 1925 йылда Мәскәү яңалиф комитеты тарафынан төҙөлөп, РСФСР Мәғариф Халыҡ Комиссариаты эргәһендә үткәрелгән кәңәшмәлә раçланған план буйынса яңалифҡа күсеү 1945 йылда тамам булырға тейеш була. Был план буйынса яңалифҡа күсеү түбәндәгесә билдәләнә:

1925—1930 йылдар — алфавитты фәнни эшләү, яңы хәрефтәр өсөн шрифтар әҙерләү; булған хәреф йыйыусыларҙың 50 процентын ҡайтанан әҙерләү; II баҫҡыс мәктәптәр һәм юғары уҡыу йорттары өсөн ҡайһы бер дәреслектәр баҫтырып сығарыу;

1931—1935 йылдар — икенсе баҫҡыс мәктәптәр өсөн булған дәреслектәрҙең бөтәһен дә ҡайтанан баҫтырыу; юғары уҡыу йорттары өсөн фәнни хеҙмәттәр, пособиелар баҫтырып сығарыу; беренсе баҫҡыс мәктәп уҡыусыларын яңы алфавит менән таныштырыу; тарих һәм география карталары баҫтырыу; яңы алфавит менән газета, журналдар сығарыу; әҙәби әҫәрҙәр баҫтырыу.

1936—1940 йылдар — юғары уҡыу йорттарын яңалифҡа күсеүгә әҙерләү; бөтә дәреслектәрҙе яңы алфавит менән баҫтырыу; мәктәптәрҙә яңы алфавит менән уҡытыуҙы индереү; ғәрәп хәрефе менән уҡыуҙы икенсе баҫҡыс мәктәптәрҙең юғары кластарында ғына ҡалдырыу; газеталарҙы яңы алфавитҡа күсереү.

1940—1941 йылдар — тулыһынса латинға күсеп бөтөү[75].

Ләкин бөтә милли республикаларҙа һәм өлкәләрҙә латин хәрефтәренә күсеү хәрәкәтенең көндән-көн көсәйә барыуы был планды емерә. Башҡортостанда ла был хәрәкәт бик көслө була. Бик күп һанда латин алфавиты дуҫтары түңәрәктәре төҙөлә. 1928 йылдың аҙағына инде уларҙың һаны 500-ҙән артып китә, кантондарҙа яңалиф комитеттары ойошторола. Комсомол был өлкәлә актив эш алып бара. ВЛКСМ-дың Башҡортостан өлкә комитеты бюроһы 1927 йылдың сентябрендә был хаҡта махсус ҡарар ҡабул итә. Яңалифса уҡый белмәгән бер генә комсомол да булырға тейеш түгел, тигән лозунгыны ҡуя.

1928 йылдың 7 июлендә Башҡортостан Үҙәк Башҡарма Комитеты яңы алфавитты рәсми дәүләт алфавиты итеп ҡарар сығара, һәм Башҡортостанда яңы алфавитҡа күсеүҙең биш йыллыҡ планы төҙөлә. Был план буйынса яңы алфавитҡа күсеү түбәндәгесә билдәләнә:

1. Яңы алфавитты мәктәптәрҙә 1928/29 уҡыу йылынан индерә башларға. 1931/32 уҡыу йылында I—II кластарҙың 100 проценты, III—IV кластарҙың 75 проценты яңы алфавитҡа күсергә тейеш булалар.

2. Бөтә гәзит, журналдар 1932 йылда яңы алфавитҡа бөтөнләй күсеп бөтөргә тейеш булалар. Ҡыҫҡаһы, был план буйынса

---

[75] Башҡортостан Үҙәк дәүләт тарих архивы. Фонд Р-798. № 1505.

яңы алфавитҡа күсеү 1932 йылда тамам булырға тейеш була. Ләкин яңы алфавитҡа күсеү хәрәкәтенең көслө рәүештә йәйелеүе, үҫеүе һөҙөмтәһендә был план ҡыҫҡартыла. Башҡортостан хөкүмәте яңы алфавитҡа күсеүҙе 1930 йылдың беренсе ғинуарына тамамлау тураһында ҡарар ҡабул итә, һәм был ҡарар Советтарҙың Башҡортостандың 10 йыллыҡ юбилейына арналған VII съезында раҫлана.

Латин хәрефтәре менән китаптар 1928 йылдан сыға башлай. Нәшриәт органдарынан ғәрәп хәрефтәренең нисек сығарыла барыуын түбәндәге таблица[76] менән күрһәтергә мөмкин:

| Йылдар | Башҡорт телендә нисә китап баҫтырып сығарылған | Шуларҙан | |
|---|---|---|---|
| | | латинлаштырылған алфавит менән | ғәрәп алфавиты менән |
| 1917 | 1 | — | 1 |
| 1927 | 86 | — | 86 |
| 1928 | 132 | 18 | 114 |
| 1929 | 100 | 37 | 63 |
| 1930 | 181 | 148 | 33 |
| 1931 | 203 | 199 | 4 |
| 1932 | 284 | 284 | — |

Шулай итеп, 1932 йылда инде ғәрәп хәрефе нәшриәттән бөтөнләй ҡыҫырыҡлап сығарып бөтөрөлә.

Башҡорт әҙәби теленең латинлаштырылған алфавит нигеҙендәге орфографияһы 1930 йылда төҙөлә һәм ул, Башҡортостан Үҙәк Башҡарма Комитеты Президиумы тарафынан раҫланып, баҫылып сыға[77].

Орфография ете бүлектән тора. Беренсе бүлектә башҡорт әҙәби теле орфографияһының дөйөм нигеҙҙәре тураһында әйтелә. Алфавитта 10 һуҙынҡы, 26 тартынҡы, бөтәһе 36 хәреф

[76] *Исхаҡов Ф.* Введение нового алфавита в Башкирии//Алфавит Октября. М.-Л., 1934. 39-сы бит.

[77] «Башҡорт теле имләһе». Өфө, 1930. 39-сы бит.

алына, һүҙ уртаһында өндәрҙе өҙөп әйтеү өсөн апостроф (’) ҡулланылырға тейеш *(тәs’әлә)*. Орфографияла төп принцип итеп фонетик принцип алына, ҡайһы бер урындарҙа фонематик-морфологик принцип та ҡулланыла *(вөgөngө, unber,* әйтелеше— *вөgөңgө, umber)*. Рус теленән ингән һүҙҙәр шулай уҡ фонетик принципта яҙылалар. Был хаҡта: «Сит телдәрҙән ингән термин һәм һүҙҙәр өсөн әҙәби телдә алынған өндәр еткән тиклем дөрөҫ әйтеү нигеҙ итеп алына. Башҡорт теленә инеп, күптән үҙләшеп киткән сит тел һүҙҙәренең әйтелеше ялпы телендәгесә ҡала», — тиелә (8-се бит).

Икенсе бүлектә өндәрҙең дөрөҫ яҙылышы тураһында ҡағиҙәләр бирелә. Иренләшеү, сингармонизм законы һүҙҙәрҙең аҙағына тиклем һаҡлана. Тамыр һүҙҙәрҙә һәм тоташ яҙыла торған ҡушма һүҙҙәрҙә *q, к* өндәре *g, g* менән сиратлашалар (*toq, togo, jөк, jөgө, Qaragol* ); башҡорт һүҙҙәрендә һүҙ башында *p,* аҙағында *b* яҙылмай, *b, p* яҙыла *(bьsaq, кyrep);* рус теленән ингән һүҙҙәрҙә һүҙ башында *p* яҙылышы һаҡлана, ә аҙаҡта *b* яҙылышы һаҡланмай — *p* яҙыла *(plan, кlup);* сифаттарҙың аҙағы *i* менән, ә исемдәр аҙағы *ej, ьj, oj, өj* менән яҙыла *(xәrbi, Vәlej, Taxavьj, Qoloj, Xөsnөj);* рус теленән ингән һүҙҙәрҙә *ы* урынына *ьj* яҙыла *(Rьyndin); h* хәрефе һүҙ башында, уртаһында, ялғауҙар башында, ә *ƀ* — тамыр һүҙ аҙағында, бойороҡ ҡылым аҙаҡтарында яҙыла (*hьv, кilhә, baƀ*) *бер* һуҙынҡы аша ике *h* йәки ике *ƀ* килмәй, тәүгеһе *h,* ә икенсеһе *ƀ* булып килә (*hoƀgo, hiƀкәnev*); һүҙ башында ике тартынҡы өн килгәндә, улар алдында һәр ваҡыт *e, ь* яҙыла *(ьqsьm, erкet ),* бындай осраҡтарҙа рус теленән ингән һүҙҙәрҙә *e, ь* яҙылмай *(stansa, stinә, stакan);* һүҙ башында килгән *r, v* артынан *a, ә* килһә, ул ваҡытта *q, v* алдынан *ь, e* яҙылмай *(vaqьt, Rәsәj, rәsem).*

Өсөнсө бүлектә ялғауҙарҙың дөрөҫ яҙылышы тураһында ҡағиҙәләр бирелә. Бөтә ялғауҙар ҡушып яҙылалар. Дүртенсе бүлектә айырым һүҙҙәрҙең яҙылышы тураһында әйтелә: «ине» ярҙамлыҡ ҡылымы *-ҡан-кән, -ған-гән* ялғауҙарына бөткән ҡылымдарға ҡушып яҙыла *(qajtqajnь, кilgәjne);* ҡушма ҡылымдар айырым яҙылалар *(аркil* түгел, *alьp кil);* киҫәксәләр айырым яҙылалар *(qalьn, dьr, кitap tьr, barhьn da, кilqәn dәhә);* һорау киҫәксәһе ҡушып яҙыла *(ulmь);* бойороҡ ҡылымдағы *һана-һәнә* айырым яҙыла *(bar hana, кil hәnә).*

Бишенсе бүлектә апостроф яҙылышы хаҡында әйтелә.

Алтынсы бүлектә рус теленән ингән һүҙҙәр яҙылышы хаҡында ҡағиҙәләр бирелә. Бында рус теленең специфик өндәре башҡорт телендә ниндәй хәрефтәр арҡыры бирелеүе тураһында һүҙ бара. Был хаҡта орфографияла: «Сит телдәрҙә башҡорт телендә булмаған *е, я, ч, о, в, ц* өндәре бар. Бындай өндәр сит һүҙҙәр арҡыры әҙәби телгә инеү өҫтөндә булһалар ҙа, уларҙың һәр ҡайһыһы өсөн яңы хәрефтәр алынмай. Шуның өсөн дә сит телдән ингән һүҙҙәр, башҡорт әҙәби теле өсөн алынған хәрефтәр еткәнсе дөрөҫ яҙылып, етмәгәндә башҡорт теленә буйһондоролалар», — тип әйтелә (30-сы бит). Шунан һуң рус телендәге айырым өндәр урынына башҡорт телендә ниндәй хәрефтәр яҙылырға тейешлеге тураһында һанап кителә. Рус телендәге *а* өнө урынына *a, ә* яҙыла *(kanal, Vəsilej); е* өнө урынына *i, jə (silsəvit, jəvrəj, Jəgyr); я—jə, ja (Jalta, Jəкef)*; в — *v, f (vagun, safxuz); о — ь, u, a, ө (vulьs, Dun, Danbas); ц — s, ts (sirкəv, aкsejə, aкatsejə); ия, ие, зм — eja, zem (Anglejə, каmmunizem); ua, ea — eja (pralitarejat, tejatьr).*

Етенсе бүлектә баш хәрефтәр яҙылышы хаҡында ҡағиҙәләр бирелә: өлкә, республика, район ойошмалары, ҡала, ауыл, күл, йылға, урам, учреждение, мәктәп, йәмғиәт, ширҡәт, китап, газета, журнал исемдәре баш хәреф менән яҙылалар; бер нисә һүҙҙән торһалар, һәр бер һүҙе баш хәреф менән яҙыла, тиелә *(Estərletamaq, Timer Arqa* (тау исеме), *Өfө Pidvuzь, Qala Səvite)*; яңғыҙлыҡ исемдән килгән сифаттар бәләкәй хәреф менән яҙыла *(orombur qavьпь, qazan sitege, məsкəv malь).*

Ғөмүмән алғанда, орфография башҡорт теленең үҙенсәлектәрен шаҡтай иҫкә алып төҙөлгән. Ләкин шуның менән бергә етешһеҙ яҡтары ла күп кенә. Был етешһеҙлектәр ике төркөмгә бүленә: беренсе төркөмө орфографияның эшләнеп етмәүенән килгән етешһеҙлектәр. Мәҫәлән, ҡушма һүҙҙәр яҙылышы тураһында орфографияла бер нәмә лә әйтелмәй. Баш хәрефтәр яҙылышы бик өҫтән эшләнгән, ҡушма яңғыҙлыҡ исемдәрҙең бөтәһе лә баш хәреф менән яҙыла, тип дөйөм рәүештә генә әйтелә, дифференциация яһалмай. Шул арҡала Ағиҙел, ҡала советы, Борай ауыл советы кеүек исемдәрҙә лә һәр бер һүҙ баш хәреф менән яҙылырға тейеш була *(Qala Səvite, Boray Avьl Səvite).* Бер үк характерҙағы яҙылыштарҙа берҙәмлек юҡ, мәҫәлән, әҙәби, Вәли кеүек һүҙҙәрҙә беренсеһендә *i*, икенсеһендә *ej* яҙыла *(xərbi, Vəlej).* Икенсе төркөм етешһеҙлектәр латинлаштырылған алфавиттың кәмселектә-

ренә бәйле етешһеҙлектәр. Был, нигеҙҙә, рус теленән ингән һүҙҙәрҙең яҙылышына ҡайтып ҡала. Латинлаштырылған алфавитта рус телендәге ҡайһы бер өндәр өсөн хәрефтәр булмау рус теленән ингән һүҙҙәрҙе боҙоп яҙыуға юл ҡалдыра. Мәҫәлән, башҡорт теленең үҙ һүҙе **матур** ҙа, рус теленән ингән **мотор** һүҙе лә бер төрлө яҙылалар (*matur* — матур, *matur* — мотор), **цех, техника** һ. б. ошоноң һымаҡ һүҙҙәр *six, tixnikә* (сих, тихникә) рәүешендә яҙылалар.

Орфографияны практик ҡуллана башлағас, был етешһеҙлектәр яҙыуҙа буталсыҡ тыуҙыра. Шуға күрә 1933 йылдың май айында орфографияның бәхәсле мәсьәләләрен тикшереү өсөн ҡала конференцияһы саҡырыла. Конференцияла был мәсьәлә буйынса докладты Ғәббәс Дәүләтшин яһай. Конференцияла рус телендәге *о* һәм *е* өндәрен алыу-алмау мәсьәләһе иң бәхәсле мәсьәләләрҙең береһе була. Конференцияла ҡатнашыусыларҙың ҡайһы берҙәре (Зәкәриә Абитаев, Бәшәр Хәсән һ. б.) *о, е* өндәрен алыуға ҡаршы булалар, улар, *о, е* өндәрен алып, халыҡтан алыҫлашабыҙ, халыҡ телендә ул өндәр юҡ, тиҙәр. Ҡайһы берҙәре (мәҫәлән, Ғабдулла Амантай, Усман Хөсни һ. б.), *о* өнөн генә алырға кәрәк, тиҙәр. У. Хөсни, *о* өнөн алып, ялпыны етәкләһәк, ә *е* өнөн алып, алға ла сабып китергә тейеш түгелбеҙ, ти.

Конференция *о* өнөн алырға була. Ләкин һуңынан *е* өнөн дә алырға ҡарар ителә. Шул конференцияла ҡабул ителгән ҡарар нигеҙендә, орфография ҡағиҙәләре ҡайтанан ҡаралып, үҙгәрештәр индерелә һәм 1934 йылда яңы редакцияла баҫылып сыға[78].

*ç* (җ) хәрефе алфавиттан төшөрөлә. «БыҒаса алфавитта урын алып килгән *ç* хәрефе башҡорт әҙәби телендә ҡулланмау сәбәпле, алфавиттан төшөрөп ҡалдырыла», — тиелә орфографияла.

Орфографияға индерелгән үҙгәрештәрҙең күбеһе рус теле аша ингән һүҙҙәрҙең яҙылышына ҡағыла. Улар түбәндәгеләр: *о, е* хәрефтәре һәр береһе икешәр өн урынына ҡулланырға булғанлыҡтан, рус теле аша ингән һүҙҙәрҙә *о, е* яҙылышы һәр бер урында һаҡлана. Элек *matur, tixnik* (матур, тихник) рәүешендә яҙып йөрөтөлгән һүҙҙәр хәҙер был орфография буйынса *motor, texnik* формаһында яҙылырға тейеш була. Рус теле аша ингән һүҙҙәрҙә *э, и, у, д, г* хәрефтәре яҙылышы һаҡлана

[78] Башҡорт теле орфографияһы. Өфө, 1934.

*(Engel' s, biologiya, актual', zavod, doкlad, nalog); v* ике өн хәрефе булып йөрөй *(vaqьt, velosiped);* рус телендәге *ю* ижек баштарында *ju, jy,* ә бүтән урындарҙа *y* формаһында яҙыла *(junкer, lyкs); я* ижек баштарында *ja,* ә бүтән урындарҙа *ә* формаһында яҙыла *(Jalta, soja, Valә, Galә);* рус теле аша ингән һүҙҙәр аҙағында килгән *ия, ея — ia, ea* рәүешендә яҙыла *(partia, Кorea);* рус теле аша ингән һүҙҙәрҙә *аа, иа, ио, ие, еа, ео* яҙылыштары һаҡлана, *aa, ia, io, ie, ea, eo,* формаһында яҙылалар *(Aaran qalahь, radio, океаn h. б.);* тамыр һүҙҙәрҙә ҡуш тартынҡылар төшөрөлмәй яҙыла *(кlassik, gramm, кilovatt, metall).* 1930 йылда баҫылып сыҡҡан орфографияла ялғауҙарҙың ҡалын йәки нәҙек яҙылыуы тураһында бер нәмә лә әйтелмәгәйне, сөнки ул орфография буйынса рус теле аша ингән һүҙҙәрҙә башҡорт теленең фонетик закондарына буйһондороп яҙылғанлыҡтан, ялғауҙарҙың ҡалын йәки нәҙек яҙылышы мәсьәләһендә ҡыйынлыҡтар осрамай ине: ялғауҙар яҙылышы сингармонизм законына буйһона ине. Хәҙер инде рус теле аша ингән һүҙҙәрҙең яҙылышы рус теле орфографияһына бер ни тиклем яҡынлаштырылғас, ялғауҙарҙың ҡалын йәки нәҙек яҙылышы мәсьәләһен билдәләү ҡыйынлаша төшә, шуға күрә 1934 йылғы орфографияла ялғауҙарҙың ҡалын йәки нәҙек яҙылышы тураһында айырым параграф бирелә (§ 31). Ялғауҙарҙың ҡалын йәки нәҙек яҙылышы ялғау алдындағы ижектең ҡалын йәки нәҙек булыуына ҡарап килә: ҡалын ижек булһа — ҡалын ялғау, нәҙек ижек булһа — нәҙек ялғау яҙыла. Ижектәрҙең ҡалынмы, нәҙекме икәнлеге, асыҡ ижектәрҙә ижек башында йәки аҙағында килгән һуҙынҡыға ҡарап, ябыҡ ижектәрҙә ижек уртаһында килгән һуҙынҡыға ҡарап билдәләнә: ҡалын һуҙынҡы килһә — ҡалын ижек, нәҙек һуҙынҡы килһә — нәҙек ижек була.

Нәҙек һуҙынҡылы ябыҡ ижектәрҙең өс төрлөһө был дөйөм ҡағиҙәгә буйһонмай: аҙағы берҙән артыҡ тартынҡыға йәки — *ер* формаһында бөткән, *е* алдынан *с, ш, ч, з, ж* өндәре булған ябыҡ ижектәрҙә ялғауҙар ҡалын яҙыла *(temptar, pionerь, sextar, cextar).*

Шунан ҡушма һүҙҙәр яҙылышы бер ни тиклем киңәйтеп бирелә; *и* өнөнә бөткән сифаттар менән исемдәр яҙылышы берләштерелә, икеһендә лә *и* яҙыла *(xәrbi, Vәli).*

Орфографияға индерелгән төп үҙгәрештәр бына шуларҙан тора. Әлбиттә, был үҙгәрештәрҙе индергәндән һуң, орфография бер ни тиклем яҡшыра, бигерәк тә рус теле аша ингән һүҙҙәрҙең

яҙылышы шаҡтай яҡшыртыла. Ләкин һаман әле орфографияла күп кенә мәсьәләләр асыҡланып етмәй. Шуға күрә матбуғатта орфография тураһында фекер алышыуҙар туҡталмай. Бигерәк тә 1937 йылдың июнендә саҡырыласаҡ тел конференцияһы алдынан башҡорт әҙәби теле орфографияһының айырым мәсьәләләре буйынса матбуғатта күп кенә мәҡәләләр баҫылып сыға. Фекер алышыуҙа ҡатнашыусылар үҙҙәренең мәҡәләләрендә күберәк ялғауҙар, ҡушма һүҙҙәр, баш хәрефтәр һәм рус теле аша ингән һүҙҙәр яҙылышы мәсьәләләренә туҡталалар[79].

Рус теле аша ингән һүҙҙәрҙе мөмкин тиклем үҙгәртмәй яҙыуҙы тәҡдим итәләр. Ләкин шуның менән бергә ҡайһы бер авторҙар рус теле аша ингән бөтә һүҙҙәрҙе лә фонетик принципта, халыҡ телендә әйтелгәнсә, яҙырға кәңәш бирәләр. Мәҫәлән, уҡытыусы Ш. Сөләймәнов рус телендәге *о, е, в* өндәрен алмаҫҡа тәҡдим итә. Рус телендәге *я* хәрефенең башҡорт телендә әллә нисә төрлө яҙылыуын әйтеп, бер генә формала *ьja* формаһында яҙырға кәрәклеген әйтә *(partьja, каmisьja)*; **клуб, доклад, архив** кеүек һүҙҙәрҙе, әйтелгәнсә, *кlup, daкlat, ərxif* формаһында, ә һүҙ аҙағындағы ҡуш тартынҡыларҙың береһен генә яҙырға тәҡдим итә[80].

1937 йылда тел конференцияһы саҡырылмай. Шулай ҙа фекер алышыу барышында орфография тураһында матбуғатта әйтелгән тәҡдимдәрҙе иҫкә алып, 1938 йылда башҡорт әҙәби теле орфографияһының яңы проекты төҙөлөп, баҫтырып сығарыла[81].

---

[79] *Әхмәр Ҡ.* Башҡорт әҙәби теле грамматикаһы һәм орфографияһының ҡайһы бер мәсьәләләре // «Башҡортостан». 16.XII.1936; *Харисов Ә.* Башҡорт яҙма теленең бөгөнгө хәле ҡайһы бер асыҡлауҙарҙы һорай // «Башҡортостан». 20.XII.1936; *Ярлыҡапов Г.* Башҡорт әҙәби теле һәм орфография ҡағиҙәләре тураһында бер нисә һүҙ // «Башҡортостан». 12.XII. 1936; *Буранғолов К.* Башҡорт әҙәби теле орфографияһының һәм грамматикаһының ҡайһы бер мәсьәләләре // «Башҡортостан». 14.1.1937; *Сабашев Р.* Башҡорт теле орфографияһының ҡайһы бер мәсьәләләре тураһында // «Башҡортостан». 1.IV.1937; *Хөсни У.* Башҡорт теле грамматикаһының ҡайһы бер мәсьәләләре // «Башҡортостан». 15.III.1937; *Ғөзәйерова.* Башҡорт теленең фәнни грамматикаһы тураһында // «Башҡортостан». 10.IV.1937; *Баишев Т.* Башҡорт телендә ҡайһы бер һүҙҙәр тураһында // «Башҡортостан», 21.IV.1937.

[80] *Сөләймәнов Ш.* Башҡорт теле орфографияһы тураһында // «Башҡортостан». 12.XII.1936.

[81] «Башҡорт әҙәби теленең орфографияһы (яңы проект)». Өфө, 1938.

Был орфография бынан элек төҙөлгән орфографияларға ҡарағанда тулыраҡ эшләнгән була. Алфавиттан *ьj* хәрефе төшөрөлә, 9 һуҙынҡы, 25 тартынҡы, бөтәһе 34 хәреф алына. Рус теле аша ингән һүҙҙәрҙең яҙылышы бер аҙ камиллаштырыла. Был хаҡта орфографияла: «Интернациональ халыҡ-ара һүҙҙәрҙең башҡорт орфографияһы буйынса дөрөҫ яҙылышын билдәләү өсөн критерий итеп ул һүҙҙәрҙең рус әҙәби телендәге яҙылышы формаһы алына һәм башҡорт алфавиты бирә алған тулылыҡта үҙгәртмәй яҙыу мәжбүр ителә», — тиелә (6-сы бит).

Рус теле аша ингән һүҙҙәр яҙылышы буйынса элекке орфографияға ҡарағанда түбәндәге үҙгәрештәр индерелә: *a* яҙылышы бөтә урында һаҡлана *(antenna, sistema);* һүҙ башында, ижек башында *e* башҡорт телендә *je* формаһында яҙыла *(Jegor, Jefim, ов'jект), ё* урынына *ч, ж* өндәренән һуң *o*, ә башҡа урындарҙа *jo* яҙыла *(ucot, montjor, акtjor); ч* — башҡорт теле фонетикаһына эйәреп, *s* йәки *ş* менән алмаштырып яҙылмай *(Capajev, nacalniк); з, с* хәрефтәре үҙгәртелмәй яҙылалар *(rus, samavьr); щ* — һүҙ башында һәм уртала һуҙынҡы һуңында килгәндә *şc*, бүтән урындарҙа хәрефе менән бирелә *(Şcerbaкov, naborşiк, pomeşciк, plaş); э* яҙылышы һәр бер урында һаҡлана *(Engel's, poema); в* урынына *v* яҙыла *(sovxoz, avtor, акtiv); нк, нг* бөтөмдәренә бөткән һүҙҙәргә зат ялғауҙары *ьһь* формаһында килә *(bапкьһь, lozungьһь); ист, ст, сть* бөтөмлө һүҙҙәрҙә *t* хәрефе, тамыр һәм нигеҙ һүҙҙәрҙә генә яҙылып, ялғауҙар ҡушылғанда төшөрөлә *(Sovet vlasь, xalьq artisь); ый, ий* бөтөмлө һүҙҙәр *i* менән яҙыла *(M. Gor'кi, B. Majaкovsкi, N. Belьj); ск* бөтөмлө яңғыҙлыҡ исемдәр *sкi* формаһында яҙыла *(Sverdlovsкi, Minsкi).*

Башҡорт теленең күп кенә һүҙҙәре был проект буйынса фонематик-морфологик принципта яҙылырға тейеш була. Был турала: «Быға тиклем ҡулланылған орфография, байтаҡ өлөшөндә фонетик принципҡа нигеҙләнеү менән, ҙур етешһеҙлектәрҙе эсенә ала ине. Был яңы проект фонетик принципты бөтөнләй сығарып ташламай. Ләкин кәрәкле урында морфологик принципты ҡулланыу менән орфографияла усовершенствование индерә», — тиелә (7-се бит). Шул ҡағиҙә нигеҙендә өсөнсө зат хәҙерге заман хәбәр һөйкәлеше ҡылымының аҙағы *i* менән *(ərsi, beit, jөri); о-ө* хәрефтәре тамыр һәм нигеҙ һүҙҙәрҙә генә яҙылырға *(ololьq, Өfөneкe, bolottь);* исем ҡылым аҙаҡтары — *u, y* менән *(qajtu, baru, кily, byly);* ғәрәп-фарсы һүҙҙәре шул телдәрҙә йөрөтөлгәнсә *(ədəbi, nadan, qəderle, ədəm, qədər)* яҙылырға тейеш була.

Ҡушма һүҙҙәр яҙылышы хаҡында проектта бирелгән ҡағиҙәләр буйынса, ике тамыр йәки нигеҙ һүҙҙән торған ҡушма һүҙҙәр, бер баҫым менән әйтелеп, бер предметҡа исем йәки термин урынында ҡулланылһа, тоташ яҙылалар. Ике һүҙҙән торған ҡушма сифаттар, рәүештәр, ҡылым һорауҙары, *ал* һүҙе менән килгән ҡушма ҡылымдар, көсәйтеү дәрәжә сифаттары, һорау киҫәксәһе менән ярҙамсы ҡылым *икән, уҡ-үк, ғына-генә, ҡына-кенә, даһа-таһа, ҙаһа* киҫәксәләре тоташ яҙыла: *Agidel, Agdinged, niᶊləp; atакугкә, qaraju* (ҡара айыу), *artaban, xalьqara, hərber, bernisə, hiskem, hajlavaldь, kiləlmәne, qajtalmanь, kyrəlməjəsək, baramікәп, appaq, qajtqasuq, kilgəsyk, куркепә, juqtaha.*

Шунан һуң айырым һүҙҙәр үҙгәртеп алына *(belən,* ул — *аньп, ань, anan, anda, alaj, andaj).*

Рәт һаны ялғауы бөтә цифрҙар һуңында ла — рим цифрымы, ғәрәп цифрымы — дефис аша яҙылырға тейеш була *(XVII-se sjezd, 1924-se jьl, 5-se mart).*

Ялғауҙарҙың ҡалын йәки нәҙек яҙылышы элекке орфографияла һуңғы ижеккә ҡарап билдәләнә ине, ә был проектта ялғау алдындағы өндөң ҡалын йәки нәҙек әйтелеүенә ҡарап билдәләнә *(udarniktar, revolytsionerь, marksistar, Gor'kigə).*

Бер нисә һүҙҙән торған яңғыҙлыҡ исемдәрҙең һәр бер һүҙе баш хәреф менән яҙыла: *Bөjөк Oktəber' Sotsialistik Revolytsiahь, Sovet Sotsialistik Respublikalarь Sojuzь, Өfө Rajon Finans Bylege, Bajazit Avьl Sovetь.*

Күренеүенсә, был проектта элекке орфографияларға ҡарағанда күп кенә асыҡлауҙар, өҫтәлмәләр, үҙгәртмәләр индерелгән. Уларҙың күбеһе, әлбиттә, орфографияны камиллаштырыуға йүнәлдерелгәндәр. Ләкин шуның менән бергә ҡайһы бер үҙгәртмәләр башҡорт теленең үҙенсәлеген иғтибарға алып етмәүҙе лә күрһәтеп торалар (мәҫәлән, хәбәр һөйкәлеше ҡылымы аҙаҡтарын *и* менән, исем ҡылым аҙаҡтарын *у* менән яҙыу һ. б.). Ҡушма һүҙҙәр яҙылышы эшләнеп етмәгән. Проектта беренсе һүҙе сифат йәки айырым исем булып килгән ҡушма исемдәр айырым яҙылалар, тип әйтелә лә (50-се бит), шуға миҫал итеп *qara harьq, aq harьq* һәм башҡа ошоноң һымаҡ һүҙҙәр килтерелә. Ә бер нисә бит алда, ата ҡаҙ, аҡ айыу кеүек һүҙҙәр тоташ яҙылалар, тип әйтелә (46-сы бит).

Проектта 1937 йылдың тәьҫире лә һиҙелеп ҡала. Дөйөм принциптар бүлегендә: «Тел төҙөлөшө өлкәһендә ҙур сәйәси бурыс булып буржуаз милләтселәр тарафынан үткәрелгән ҡороҡослоҡ эҙемтәләрен бөтөрөү бурысы тора», — тиелә (7-се бит).

Был проект йәмәғәтселек фекерен алыу өсөн баҫтырып таратыла. Уҡытыусылар, уҡыусылар, телселәр, гәзит редакцияларында, нәшриәттә эшләүселәр һ. б. ҡатнашлығында проект тикшерелә, өйрәнелә. Шунан бер ни тиклем үҙгәрештәр менән 1939 йылда Башҡортостан Верховный Советы Президиумы тарафынан раҫланып, баҫылып сыға[82]. Хөкүмәт раҫлауына бирер алдынан проект ҡайтанан ҡарап сығылып, уға түбәндәге үҙгәрештәр индерелә: исем ҡылым аҙаҡтарында *у*, өсөнсө зат хәҙерге заман хәбәр һөйкәлеше ҡылымдары аҙағында *и* яҙыу тураһындағы ҡағиҙәләр төшөрөп ҡалдырыла, уларҙы элеккесә исем ҡылым аҙаҡтарында *ыу-еү, оу-өү;* хәбәр ҡылымда *й, ей, ый, ой-өй* яҙыла; *о-ө* яҙылышы һүҙҙең аҙағына тиклем һаҡлана; рус телендәге *щ* башҡорт телендә һәр урында *şc* (шч) рәүешендә яҙыла *(şcuкin, plaşc);* беренсе һүҙе асыҡлау мәғәнәһендә килгән бөтә ҡушма һүҙҙәр айырым яҙылалар (аҡ айыу, ҡара айыу, ата ҡаҙ, инә ҡаҙ, баш мәҡәлә); көсәйтеү дәрәжәһе сифаттары дефис аша яҙыла (ап-аҡ); ярҙамлыҡ һүҙҙәр бөтәһе лә айырым яҙылалар *(кilgəs ук, hin genə, кilə ləhə);* бер нисә һүҙҙән торған яңғыҙлыҡ исемдәрҙең союз һәм өлкә әһәмиәтендә булғандарының һәр бер һүҙе баш хәреф менән, был әһәмиәткә эйә булмаған яңғыҙлыҡ исемдәрҙең — беренсе һүҙе генә баш хәреф менән яҙыла (*SSSR Verxovnьj Sovetь, BASSR Finans Xalьq Komissariatь, Өfө rajon militsiə bylege, Boray avьl sovetь).*

Орфографияла ҡушма рәүештәр, ҡушма ҡылымдар, рәт һаны ялғауҙары яҙылышы хаҡында бер нәмә лә әйтелмәй. Ғөмүмән, орфографияла ҡушма һүҙҙәр яҙылышы бүлеге бик өҫтән эшләнгән.

Үҙгәртеп алынған ҡайһы бер һүҙҙәр (белән, анаң, анда, аға, андан һ. б.) орфографиянан төшөрөп ҡалдырылғандар, сөнки теге йәки был һүҙҙе нисек һәм ниндәй формала алыу — ул орфография мәсьәләһе түгел, ә терминология һәм грамматика мәсьәләһе.

Был орфографияның ғүмере оҙон булмай. Ул 1939 йылдың аҙағында ғына баҫылып сыға, ә шул уҡ 1939 йылда инде рус графикаһы нигеҙендәге алфавитҡа күсеү мәсьәләһе ҡуҙғала. Шулай итеп был орфография латин графикаһы нигеҙендәге алфавит буйынса төҙөлгән орфографияларҙың һуңғыһы була.

---

[82] «Башҡорт теле орфографияһы». БАССР Верховный Советы Президиумы тарафынан раҫланған, 3.III.1939. Протокол № 8. Өфө, 1939.

8—9 йыл эсендә бөтөнләй яңынан тип әйтерлек эшләнеп, дүрт орфография баҫылып сыға. Шулай йыш үҙгәреп тороуына ҡарамаҫтан, был орфографиялар береһе лә яҙыуҙағы ҡыйынлыҡтарҙы, буталсыҡтарҙы бөтөрә алманы, рус әҙәби теле аша ингән һүҙҙәрҙең яҙылышы хәл ителмәне; айырым һүҙҙәр әллә нисә төрлө яҙып йөрөтөлдө. Бының төп сәбәбе орфографияла түгел, алфавитта ине.

## IV

## БАШҠОРТ ӘҘӘБИ ТЕЛЕНЕҢ РУС ГРАФИКАҺЫ НИГЕҘЕНДӘ ТӨҘӨЛГӘН АЛФАВИТЫ ҺӘМ ОРФОГРАФИЯҺЫ

Башҡорт яҙыуын латинлаштырылған алфавитҡа күсереү үҙ ваҡытында прогрессив күренеш булды. Латинлаштырылған алфавит башҡорт халҡының тарихында, башҡорт яҙыуының һәм мәҙәниәтенең үҫешендә бик ҙур ыңғай роль уйнаны. Латинлаштырылған алфавит ғәрәп алфавитына ҡарағанда үҙләштереү өсөн еңелерәк һәм яҙыу өсөн уңайлыраҡ булды. Уға күсеү арҡаһында йөҙҙәрсә мең башҡорт йәштәре әсә телендә уҡырға һәм яҙырға тиҙерәк өйрәнделәр. Ололарҙың бик күбеһе грамотаға эйә булды.

Халыҡ хужалығының икенсе биш йыллығын бойомға ашырыу йылдары — социалистик төҙөлөштөң гигант аҙымдар менән алға китеүе һәм мәҙәниәт революцияһының еңеү йылдары булдылар. Был йылдарҙа Башҡортостанда грамотаһыҙлыҡ, нигеҙҙә, бөтөрөлдө, мәктәптәр һәм башҡа мәҙәниәт-ағартыу учреждениелары бик ныҡ үҫте, тиҫтәләрсә исемдә гәзиттәр, журналдар, башланғыс һәм урта мәктәптәр өсөн төрлө фәндәрҙән стабиль дәреслектәр баҫылды. Башҡорт стенографияһы, башҡорт телендә яҙыу машинкалары эшләнде. Был эштә лә латинлаштырылған алфавит ыңғай роль уйнаны. Латинлаштырылған алфавитҡа күсеү — дин әһелдәрен дини әҙәбиәт таратыу буйынса уларҙың төп ҡоралы булған ғәрәп алфавитынан мәхрүм итте.

Социалистик яңы индустрия, механизацияланған ауыл хужалығы, хеҙмәттең яңы ҡоралдары революция йылдарында, бигерәк тә халыҡ хужалығының икенсе биш йыллығын бойомға ашырыу һәм өсөнсө биш йыллыкты уңышлы рәүештә тормошҡа үткәрә барыу йылдарында барлыҡҡа килгән яңы

төшөнсәләр, яңы фәнни асыштар һ. б. бик күп яңы һүҙҙәр һәм терминдар тыуҙырҙы. Башҡорт теленә көн һайын ундарса яңы һүҙҙәр өҫтәлә барҙы. Милли формалы, социалистик йөкмәткеле мәҙәниәт үҙенең үҫешендә тағы ла киңерәк ҡолас йәйҙе һәм алға табан яңы аҙымдар яһаны. Бына ошо шарттарҙа быға тиклем йәшәп килгән латинлаштырылған алфавит халыҡтың мәҙәниәт талаптарын ҡәнәғәтләндерә алмай башлай һәм телдең, яҙыуҙың артабан үҫешенә етди тотҡарлыҡ яһай, башҡорт теленә көндән-көн инә барған рус һүҙҙәрен һәм интернациональ һүҙҙәрҙе дөрөҫ яҙыуға ҡамасаулай, рус теле менән башҡорт теленең бер-береһенә йоғонто яһауына яһалма кәртә була башлай. Бына шуларҙың бөтәһе латинлаштырылған алфавиттың түбәндәге етешһеҙлектәренән килде:

1. Латинлаштырылған алфавиттың хәреф системаһы башҡорт һүҙҙәренең дә, рус һүҙҙәренең дә өн составын үҙ эсенә алып бөтмәй. Мәҫәлән, латинлаштырылған алфавитта рус телендәге *ц, щ, я, ю* өндәрен биреү өсөн хәрефтәр юҡ. Был хәл башҡорт теленә рус әҙәби теле аша ингән һүҙҙәрҙе дөрөҫ яҙыуҙы ҡыйынлаштырҙы. Мәҫәлән, русса цех, цемент, меню, Валя һүҙҙәре *sex, sement, meny, Valə* **(сех, семент, мену, Валә)** рәүешендә яҙылалар ине.

2. Бер үк хәрефтең рус телендә бер өнгә, ә башҡорт телендә бөтөнләй икенсе өнгә билдә булып йөрөүе арҡаһында, уҡыусыларға әсә телен, шулай уҡ рус телен үҙләштереүҙе ҡыйынлаштырҙы. Мәҫәлән, *в* хәрефе рус телендә *в* өнөн, ә башҡорт телендә *б* өнөн, *c* — рус телендә *с* өнөн, башҡорт телендә *ч* өнөн, *т* — рус телендә *т* өнөн, башҡорт телендә *м* өнөн, *п* — рус телендә *п* өнөн, башҡорт телендә *н* өнөн, *р* — рус телендә *р*, башҡорт телендә *п*, *ч* — рус телендә *ч*, башҡорт телендә *р*, *и* — рус телендә *и*, башҡорт телендә *у*, *у* — рус телендә *у*, башҡорт телендә *ү* өнөн белдерә ине.

3. Латинлаштырылған алфавит нәшриәттә ҙур ҡыйынлыҡтар тыуҙырҙы. Уның өсөн махсус рәүештә йыһазландырылған монотиптар, линотиптар, шрифтар булдырыу кәрәк булды.

Шуның өсөн 1938 йылда Башҡортостанда башҡорт яҙыуын латинлаштырылған алфавиттан рус графикаһы нигеҙендә төҙөлгән алфавитҡа күсереү тураһында Башҡортостанда киң хәрәкәт башлана. Был турала КПСС-тың Башҡортостан өлкә комитеты бюроһының 1938 йылдың 14 августа беренсе ҡарары, 1939 йылдың 21 апрелендә икенсе ҡарары сыға һәм башҡорт теленең алфавиты һәм орфографияһы проектын төҙөү өсөн комиссия төҙөлә.

Республиканың бөтә райондарында башҡорт халҡы, Башҡорт АССР-ы Верховный Советынан башҡорт яҙыуын латинлаштырылған алфавиттан рус графикаһы нигеҙендә төҙөлгән алфавитҡа күсереүен һорап, ҡарар ҡабул итә[83].

Башҡорт АССР-ы Верховный Советы Президиумы, башҡорт хеҙмәтсәндәренең был теләктәрен үтәү маҡсатынан сығып, 1939 йыл 20 декабрҙә башҡорт яҙыуын латинлаштырылған алфавиттан рус графикаһы нигеҙендә төҙөлгән алфавитҡа күсереү һәм шул алфавитҡа ярашлы итеп эшләнгән орфографияны раҫлау тураһында указ сығара. Был указ буйынса башҡорт яҙыуын латинлаштырылған алфавиттан рус графикаһы нигеҙендәге алфавитҡа күсереү 1940 һәм 1941 йылдар эсендә тамамланырға тейеш була.

Революцияға тиклем дә рус һәм башҡорт ғалимдары тарафынан рус графикаһы нигеҙендә башҡорт теле алфавиты төҙөлгән. Мәҫәлән, В. Катаринский 1908 йылда башҡорттар өсөн әлифба төҙөп, баҫтырып сығара. Ул үҙенең әлифбаһында 39 хәреф ала. Башҡорт теленең специфик өндәре өсөн түбәндәге хәрефтәр алына: *ö-ө, г-h, ä-ә, ÿ-ү, н-ң;* ләкин *ҙ, ҡ, ғ, ҫ* өндәре өсөн айырым хәрефтәр алынмай[84].

А. Бессонов үҙенең 1907 йылда баҫтырып сығарған әлифбаһында башҡорт теле алфавитын 41 хәрефтән төҙөй, *ҙ* өнө өсөн айырым хәреф *(g′)* ала һәм рус фитаһын *(ө)* индерә[85].

Башҡорт теле алфавитын булдырыуҙа башҡорт ғалимы доктор М. Ҡулаев күп эш эшләй. Ул 1912 йылда рус-грек графикаһы нигеҙендә 33 хәрефтән торған башҡорт милли алфавитын төҙөй. Ул *ә, ү* өндәре өсөн грекса «альфа», «ипсилон», *о, ө* өндәре өсөн грекса «омега» хәрефен төрлө формаларҙа эшләп алған: (*α-ә, у-ү, ω-о, ϑ-ө*). Башҡорт теленең ҡалған специфик өндәре өсөн түбәндәге хәрефтәрҙе алған: *ʅ-ғ, ъ-ы, ь-е, ɫ-ҙ, ȷ-й, ƙ-ҡ, ң-ŋ, ƒ-ҫ, ƥ-һ*. Доктор М. Ҡулаев үҙенең алфавитын ике тапҡыр — 1912 һәм 1919 йылдарҙа баҫтырып сығара[86].

---

[83] Был турала партияның урындағы ойошмалары ҙур эш алып бара. 1938—1939 йылдарҙа Башҡортостандың 46 районында башҡорт яҙыуын рус графикаһы нигеҙендә төҙөлгән алфавитҡа күсереү мәсьәләһен тикшереүгә арналған 1249 йыйылыш үткәрелә, был йыйылыштарҙа 92 мең кеше ҡатнаша, 3800 кеше сығыш яһай. «Ҡыҙыл Башҡортостан», 1939, 11 декабрь.

[84] *Катаринский В.* Букварь для башкир. Оренбург, 1908.

[85] *Бессонов А.* Букварь для башкир. Казань, 1907.

[86] *Кулаев М. Н.* Основы звукопроизношения и азбука для башкир. Казань, 1912. Альпей. Казань, 1919.

М. Кулаев тарафынан төҙөлгән башҡорт алфавиты (16—17-се һүрәттәр).

а, ӑ, б, г, ғ, д, ъ, ь, ж, ҙ, з, ӡ, и, ј, к, ҡ,
л, м, н, ң, о, ә, п, р, с, ҫ, т, у, ү, ф, х, һ,
ш, ʼ.

*16-сы һүрәт.* Баҫма хәрефтәр

Был алфавитҡа ул түбәндәге аңлатманы бирә: «Һөйләшкән саҡта башҡорттар утыҙ өс төрлө тауыш сығарып һөйләшәләр. Ул утыҙ өс тауышҡа 33 хәреф алынырға тейеш. Татар хәрефтәре (ғәрәп хәрефтәре. — *Ҡ. Ә.)* башҡорт тауыштарына етешмәй. Шуның өсөн ни саҡлы яҙышһаң да, башҡортсаға татар хәрефтәренең килбәте лә юҡ, уҡыған саҡта ибәтәйе лә юҡ, һәм шул сәбәпле татарса уҡыу, татарса яҙышыу бик ҡыйын.



*17-се һүрәт.* Яҙма хәрефтәр

Татарса (ғәрәп хәрефтәре менән. — *Ҡ. Ә.)* яҙыу таныу өсөн, уҡый белер өсөн генә әллә нисәмә йылдар уҡыйҙар, шуға ла ҡайһы берәүҙәр яҙыу танымай ҡала. Улай булырға төптө тейеш

түгел. Уҡый белеү, яҙыу белеү бик тиҙ булырға тейеш. Шуны еңеләйтер өсөн, мин был әлепейҙе сығарып яҙҙым. Был әлепейҙә һәр бер тауышҡа бер хәреф булғанға күрә, башҡорт һүҙҙәрен әйтелгәнсә яҙып торорға мөмкин, һәр бер һүҙ бер төрлөсә генә яҙылғас, уҡырға ла бик тиҙ өйрәнелә»[87]. Шулай итеп, М. Ҡулаев ғәрәп хәрефтәренең башҡорт теленең фонетик системаһына бөтөнләй яуап бирмәгәнлеген, ғәрәп хәрефтәренең яҙыу, уҡыу өсөн ҡыйын икәнен әйтә. Шуға күрә ул ғәрәп хәрефтәрен рус хәрефтәре менән алыштырыуҙы тәҡдим итә. Үҙенең алфавитын ул һәр бер өнгә бер хәреф булыу принцибынан сығып төҙөгән.

Башҡорт әҙәби теленең рус графикаһы нигеҙендәге алфавитын һәм орфографияһын төҙөгәндә, революцияға тиклемге ғалимдарҙың был өлкәләге тәжрибәләре, әлбиттә, иҫкә алына, өйрәнелә.

Башҡорт әҙәби теленең рус графикаһы нигеҙендәге алфавитын һәм орфографияһын төҙөгәндә, иң бәхәсле мәсьәләләрҙең береһе һуҙынҡы өн хәрефтәренең шәкеле һәм һыҙылышы мәсьәләһе булды. Бер төркөм иптәштәр ҡушма һуҙынҡы хәрефтәр яҙыуға ҡаршы сығалар. Улар *йы, йе* урынына *е; йа, йә* урынына *я; йо, йө* урынына *ё* хәрефен яҙырға һәм был өндәрҙең нәҙеклеген яҙыуҙа йомшаҡлыҡ билдәһе *(ь)* менән биреүҙе тәҡдим иттеләр: **ел, ель, быел, теееш (йыл, йел, быйыл, тейеш); ял, яль (йал, йәл); ёмғаҡ, ёҙөк, боёк, көё, ёнь (йомғаҡ, йөҙөк, бойоҡ, көйө, йөн)**. Һуҙынҡылар эргәһендә *й* яҙыу, был иптәштәр фекеренсә, башҡортса һүҙҙәрҙең яҙылышын рус графикаһынан бик ныҡ айыра, яҙыуҙа сыбарлыҡ һәм буталсыҡ тыуҙыра[88]. Әлбиттә, был нигеҙле дәлил түгел ине. Һуҙынҡыларҙың нәҙек әйтелешен йомшаҡлыҡ билдәһе менән белдереү (мәҫәлән, **ял, яль**) ғилми принципҡа нигеҙләнмәгән, сөнки йомшаҡлыҡ билдәһенең төп функцияһы һуҙынҡының нәҙеклеген белдереү түгел, ә тартынҡыларҙың нәҙеклеген белдереүҙән тора. Икенсенән, һуҙынҡылар янында *й* хәрефе яҙыу рус теленең үҙендә лә бар. Мәҫәлән, **йеменский, йог, йод, йотация, йодоформ**[89]...

---

[87] *Кулаев М. Н.* Основы звукопроизношения и азбука для башкир. — Казань, 1912. Альпей. Казань, 1919.

[88] *Миңнеғәлиев И. М.* Башҡорт әҙәби теле орфографияһының ғилми принциптары тураһында // Ҡыҙыл Башҡортостан, 1940, 10 декабрь.

[89] Орфографический словарь русского языка. Под редакцией С. И. Ожегова и А. Б. Шапиро. М., 1956, 351-се бит.

Икенсе бәхәсле мәсьәлә — башҡорт теленең специфик өндәренең шәкеле мәсьәләһе булды. Ҡайһы бер иптәштәр башҡорт теленең специфик өндәрен ҡатмарлы хәрефтәр менән күрһәтеү яғында булдылар. Мәҫәлән, *къ-ҡ, хъ-һ, тсь-ҫ, дь-ҙ, оь-ө, уь-ү* һ. б. Был хәрефтәр ҡабул ителгән тәҡдирҙә **ҡаҡылдаҡ, бүл, үҙебеҙ, өлөшө, һоҫко** кеүек һүҙҙәр түбәндәгесә яҙылырға тейеш инеләр: **къакъылдакъ, буьл, уьдьебедь, оьлоьшоь, хъотськъо.**

Ғөмүмән, специфик өндәр өсөн бик күп төрлө шәкелдәре тәҡдим ителде. Мәҫәлән:




Ләкин күпселек менән специфик өндәр өсөн был хәрефтәрҙең беренселәре ҡабул ителде.

Башҡорт АССР-ы Верховный Советы тарафынан 1939 йылда раҫланған алфавит һәм орфография 1940 йылда айырым брошюра рәүешендә баҫылып сыҡты[90].

Рус графикаһы нигеҙендә төҙөлгән башҡорт әҙәби теле орфографияһы биш бүлектән тора: беренсе бүлектә орфографияның дөйөм принциптары тураһында әйтелә һәм башҡорт әҙәби теленең 41 хәрефтән торған алфавиты бирелә; икенсе бүлектә һуҙынҡылар яҙылышы; өсөнсө бүлектә тартынҡылар яҙылышы; дүртенсе бүлектә айырым һүҙҙәрҙең һәм ялғауҙарҙың яҙылышы; бишенсе бүлектә баш хәрефтәр яҙылышы бирелә.

1940 йылдың декабрь айында Өфөлә башҡорт теле буйынса ғилми конференция үткәрелә. Конференцияға Башҡортостандағы телселәр, ғалимдар, матбуғат эшселәре, яҙыусыларҙан тыш, туғандаш республикаларҙан да, Мәскәүҙән дә телсе ғалимдар ҡатнашалар. Был конференцияла башҡорт әҙәби теле өсөн рус графикаһы нигеҙендә төҙөлгән алфавит һәм орфографияһының ғилми принциптары тураһында проф. Н. К. Дмит-

---

[90] Башҡорт әҙәби теленең алфавиты һәм орфографияһы. Өфө, Башгосиздат, 1940.

риевтың доклады тыңлана. Докладсы һуҙынҡы өндәрҙе ҡушма хәрефтәр менән (*йо, йө, йә, йе*) яҙмайынса, бер генә хәреф менән (*е, ё, я*) яҙыу принцибын ҡуя. Был мәсьәләлә конференцияла ҡатнашыусылар икегә айырыла. Бер төркөм делегаттар ҡушма хәрефтәр менән яҙыу яғында, ә икенсе төркөм (күпселек) бер генә хәреф менән яҙыу яғында була.

Конференция рус графикаһы нигеҙендә төҙөлгән алфавиттың башҡорт теленең специфик үҙенсәлектәрен иҫәпкә алып төҙөлгәнен күрһәтеп үтә. Башҡорт теле орфографияһының фонетик, морфологик, тарихи-традицион принциптарҙа төҙөлөүен фәнни яҡтан дөрөҫ тип таба. Шул уҡ ваҡытта конференция БАССР Верховный Советы Президиумынан башҡорт теле орфографияһына ҡайһы бер үҙгәрештәр индереүҙе һорап та ҡарар сығара. Был үҙгәрештәр башлыса *я, е, ё* хәрефтәре яҙылышы мәсьәләһенә ҡайтып ҡала[91].

Конференциянан һуң орфографияның һуҙынҡы хәрефтәр яҙылышына бәйле ҡағиҙәләре ҡайтанан тикшерелә. М. Ғафури исемендәге тел, әҙәбиәт ғилми-тикшеренеү институты конференция ҡарары нигеҙендә һуҙынҡылар яҙылышы тураһында проект төҙөп, СССР Фәндәр академияһының тел һәм яҙыу институтына ебәрә. Институт, проектты ҡарап, түбәндәге фекерҙе әйтә:

СССР халыҡтары телдәре өсөн рус графикаһы нигеҙендәге алфавит түбәндәге принциптарҙан сығып төҙөлөргә тейеш:

1) Рус хәрефтәре рус алфавитында ниндәй мәғәнәлә ҡулланылһалар, башҡа халыҡтарҙың алфавитында ла шул уҡ мәғәнәлә ҡулланылырға тейеш.

2) Рус графикаһы нигеҙендәге алфавит шул телдең фонетик үҙенсәлектәрен иҫәпкә алып төҙөлөргә, телдәге бөтә специфик өндәр өсөн айырым хәрефтәр алынырға тейеш.

3) СССР халыҡтарының рус графикаһы нигеҙендәге алфавиттары араһында унификация булырға тейеш.

Башҡорт алфавитындағы һуҙынҡыларҙың яҙылышы тураһында төҙөлгән яңы проект был принциптарға ҡаршы килә. *Я, е, ё* хәрефтәренә рус алфавитында булмаған мәғәнәләр йөкмәтелә: *я* хәрефе рус алфавитында *йа* өнөн белдерә, ә башҡорт алфавитында *йа, йә* өндәрен белдерергә тейеш була; *е* хәрефе рус

---

[91] Рәсәй Фәндәр академияһының Өфө ғилми үҙәге архивы. Фонд 3. Опись 9. № 48. 295—297-се биттәр.

алфавитында *йэ* өнөн, *ё* хәрефе — *йо* өнөн белдерә, ә башҡорт телендә был хәрефтәр рус алфавитында булмаған *йы, йө* өндәрен дә белдерергә тейеш булалар. Был хәл мәктәптә уҡыусыларға бер үк хәрефте ике төрлө уҡырға юл ҡалдыра. Уҡыусылар был хәрефтәрҙе башҡорт теле дәресендә *йы, йэ, йө* итеп уҡып, рус телендә лә шулай уҡый башлаясаҡтар. Бына шуларҙан сығып, СССР Фәндәр академияһының тел, яҙыу институты М. Ғафури институты ебәргән проектты хупламай[92].

Шулай итеп, һуҙынҡылар яҙылышына үҙгәреш индерелмәй, быға тиклем нисек ҡабул ителгән булһа, шулай ҡала. Сөнки ҡушма һуҙынҡы өндәрҙе бер хәреф менән генә яҙыу, мәҫәлән, **йөн** һүҙен ёнь формаһында яҙыу башҡорт һүҙҙәренең әйтелешен боҙоуға килтерер ине.

Рус графикаһы нигеҙендә 1940 йылда төҙөлгән орфографияны ҡулланыу практикаһы уның ҡайһы бер параграфтарына асыҡлау индереү кәрәклеген күрһәтә. Мәҫәлән, *о-ө, ы-е* өндәренең яҙыуҙа төшөп ҡалыу-ҡалмау мәсьәләһе асыҡланып етмәгән була. Был турала орфографияла, тамыр һәм нигеҙҙәрендә *о-ө, ы-е* өндәре булған ҡылымдарға ялғауҙар ҡушылыу менән *о-ө, ы-е* өндәре яҙыуҙа төшөрөлмәй, тиелә (§§5, 10). Был ҡағиҙә буйынса түбәндәге һорауҙар килеп тыуа: **бойроҡ, айрым** һәм башҡа ошоноң һымаҡ тамырҙары ҡылымдан булып та, ялғау ҡушылыу менән икенсе һүҙ төркөмөнә әйләнгән һүҙҙәрҙә *о-ө, ы-е* өндәре яҙыуҙа төшөп ҡаламы, юҡмы, **айрым, бойроҡ** тип яҙырғамы, әллә **айырым, бойороҡ** тип яҙырғамы? Икенсенән, **ҡурыҡ, һелек** кеүек һүҙҙәр ялғауҙар ҡушылғанда ни эшләй? Өсөнсөнән, **халыҡ, бүрек, ирек, хәреф, исем** кеүек һүҙҙәрҙә ялғауҙар ҡушылғанда *ы-е* хәрефтәре яҙылышы һаҡланамы, юҡмы: **халҡы, бүрке, ирке, хәрфе, исме** типме, әллә **халығы, бүреге, иреге, хәрефе, исеме** тип яҙырғамы? Бына шул арҡала бер үк һүҙҙәр матбуғатта төрлөсә яҙып йөрөтөлә башлай (**бойроҡ — бойороҡ, халҡы — халығы, бүрке — бүреге, хәрфе — хәрефе, исме— исеме** һ. б.).

Орфографияла ялғауҙарҙың ҡалын йәки нәҙек яҙылышы һүҙҙәрҙең аҙаҡтарындағы өндәрҙең ҡалын йәки нәҙеклегенә ҡарап билдәләнә (§ 37—2). Был ҡағиҙә лә рус теленән ингән һүҙҙәрҙә, ялғауҙар яҙылышында күп кенә ҡыйынлыҡтар тыуҙыра.

---

[92] Рәсәй Фәндәр академияһының Өфө ғилми үҙәге архивы. Фонд 3. Опись 9. № 45. 38—40-сы биттәр.

Мәҫәлән, **июнь, февраль, ноябрь** һ. б. ошоноң һымаҡ һүҙҙәрҙә аҙаҡҡы өндәрҙең нәҙеклеген йомшаҡлыҡ билдәһе күрһәтеп тора. Ә бына **Папанин, эфир, отряд, билет** һ. б. ошондай һүҙҙәрҙә ҡалын ялғаумы, нәҙек ялғаумы яҙырға? Рус теле буйынса был һүҙҙәрҙең аҙағындағы өндәр ҡалын, ә башҡорт теле закондарынан сығып ҡарағанда нәҙек өн иҫәпләнәләр, сөнки нәҙек һуҙынҡы эргәһендә килгәндәр. **Папанинға, эфирға, отрядҡа, билетҡа** тип яҙырғамы, әллә **Папанингә, эфиргә, отрядкә, билеткә** тип яҙырғамы?

Шунан һуң бер нисә һүҙҙән торған яңғыҙлыҡ исемдәр яҙылышы мәсьәләһе асыҡланып етмәгән була. Орфографияла бер нисә һүҙҙән торған яңғыҙлыҡ исемдәрҙең һәр бер һүҙе баш хәреф менән яҙыла, тиелә (24-се бит). Был ҡағиҙә буйынса **СССР Верховный Совете** тигәндә лә, **Борай ауыл совете** тигәндә лә һәр бер һүҙ баш хәреф менән яҙылырға тейеш була (**СССР Верховный Совете, Борай Ауыл Совете**). Ә матбуғатта партия һәм хөкүмәт юғары органдары исемдәренең һәр бер һүҙе баш хәреф менән яҙылып, ҡалғандарында беренсе һүҙҙәре генә баш хәреф менән яҙып йөрөтөлә (**СССР Верховный Совете, Борай ауыл совете**).

Шуларҙың бөтәһен иғтибарға алып, 1940 йылғы орфография ҡайтанан ҡарап сығыла һәм уның айырым параграфтарына асыҡлауҙар индерелә: *о-ө, ы-е*-ләрҙең яҙылышына бәйле ҡағиҙәләр конкретлаштырыла, уларҙың ниндәй осраҡтарҙа төшөп ҡалыу-ҡалмау мәсьәләһе ентекле итеп бирелә. Элекке орфографияла аҙаҡтары *ий*-гә бөткән исемдәрҙә ҡыҫҡа *и (й)* төп килештә генә һаҡланып, ялғауҙар ҡушылғанда төшөп ҡала ине, ә *ый, ей*-гә бөткән исемдәрҙә төшөп ҡалмай ине (**Горький — Горькиҙе, Алексей — Алексейҙе**). Былар берләштерелә: *ий*-гә бөткән исемдәрҙә лә ҡыҫҡа *и(й)* бер ваҡытта ла төшөп ҡалмай (**Горькийҙе, Алексейҙе**).

Бер нисә һүҙҙән торған яңғыҙлыҡ исемдәрҙең яҙылышына асыҡлыҡ индерелә: партия һәм хөкүмәт юғары органдарының (**республика, Бөтә Союз, өлкә**) һәр бер һүҙе баш хәреф менән яҙылып, ҡалғандарында беренсе һүҙе генә баш хәреф менән яҙылырға тейеш була (**КПСС Үҙәк Комитете; РСФСР Верховный Совете; Башҡорт АССР-ы Верховный Совете; Стәрлетамаҡ педагогия институты; Борай район башҡарма комитете; Туғай ауыл совете**).

Ҡайһы бер айырым һүҙҙәрҙең яҙылышына асыҡлыҡ индерелә: **хыял, ихтыяр, хыянат** һ. б. шуның һымаҡ һүҙҙәр элек

*и* менән яҙыла ине, хәҙер *ы* менән яҙылырға тейеш була; **сыйфат, сыйныф** һәм башҡа ошоноң кеүек *ый* менән йөрөтөлгән һүҙҙәр ҙә хәҙер *и* менән яҙылырға тейеш булалар (**синыф, сифат, сираҡ** һ. б.).

Ялғауҙарҙың ҡалын йәки нәҙек яҙылышы һүҙҙең аҙағындағы өндөң әйтелешенә ҡарап түгел, ә һүҙҙең аҙаҡҡы ижегенең ҡалын йәки нәҙек булыуына ҡарап билдәләнә. Ҡушма һүҙҙәр яҙылышы конкретлаштырыла. 1940 йылғы орфография буйынса аҙаҡтағы *нг, нк, оск, уск, иск* бөтөмдәренең береһенә бөткән һүҙҙәргә зат ялғауҙары *ы* ҡушып яҙылып, ә күплек, килеш ялғауҙары *ы* ҡушылмай яҙылырға тейеш була, былар бер принципҡа ҡуйылалар: күплек һәм килеш ялғауҙары ла, зат ялғауҙары шикелле *ы* ҡушып яҙылырға тейеш була (**банкыһы, банкылар, банкынан**).

Был төҙәтмәләр Башҡортостан Мәғариф Халыҡ Комиссариаты тарафынан саҡырылған телселәр һәм матбуғат эшселәре кәңәшмәһендә ҡаралып хуплана һәм Башҡорт АССР-ы Верховный Советы Президиумының раҫлауына индерелә. Башҡорт АССР-ы Верховный Советы Президиумы был мәсьәләне ҡарап, үҙенең 1941 йылдың 15 ноябрь Указы менән орфографияға индерелгән асыҡлауҙарҙы раҫлай[93].

Шундай төҙәтмәләр индерелгәндән һуң, орфография яңы редакцияла 1942 йылда айырым брошюра рәүешендә баҫылып сыға[94].

1950 йылда башҡорт теле орфографияһына тағы бер ни тиклем асыҡлауҙар индерелә: алфавитҡа *ё* хәрефе алына; ҡушма һүҙҙәр, рус әҙәби теле аша ингән һүҙҙәрҙә ялғауҙар яҙылышы конкретлаштырыла. Был асыҡлауҙар Башҡорт АССР-ы Верховный Советы Президиумының 1950 йылдың 23 ноябрь Указы менән раҫлана, шунан һуң яңы редакцияла айырым брошюра булып баҫылып сыға[95]. Шулай итеп, рус графикаһы нигеҙендә төҙөлгән алфавит һәм орфографияның сирек быуат тарихы бар. Башҡорт теленең хәҙерге алфавиты 42 хәрефтән тора.

---

[93] *Әхмәр Ҡ.* Башҡорт әҙәби теле орфографияһына индерелгән ҡайһы бер асыҡлауҙар тураһында. «Ҡыҙыл Башҡортостан». 31.XII. 1941.

[94] Башҡорт әҙәби теленең алфавиты һәм орфографияһы. Өфө, Башгосиздат, 1942.

[95] Башҡорт әҙәби теленең алфавиты һәм орфографияһы. Өфө, Башгосиздат, 1951.

Алфавиттағы хәрефтәрҙең һаны, әлбиттә, башҡорт телендәге өндәрҙең һанына ҡарағанда аҙыраҡ, сөнки һәр бер төп өндәр өсөн генә хәрефтәр алынып, алфавитта уларҙың төрлө фонетик солғаныштағы айырым әйтелеш варианттары өсөн махсус хәрефтәр алынмай. Әгәр ҙә һәр өндөң айырым әйтелеш варианты өсөн бер хәреф алған булһаҡ, алфавитты ҡулланыу ҡыйын булыр ине. Мәҫәлән, **атама, арба, ҡонан, баржа, быҙау** һүҙҙәрендә *а* өнө төрлөсә — *о, ы* һәм башҡа өндәргә яҡынырaҡ өн итеп әйтелә. Әгәр ҙә шул әйтелештәрҙең һәр береһен алфавитта сағылдырырға уйлаһаҡ, бер *а* өнө өсөн генә әллә нисә хәреф алырға тура килер ине. Был яҙыу практикаһын ҡыйынлаштырыр, *а* өнө булған һүҙҙәрҙе яҙғанда, был һүҙҙә нисек әйтелә әле, тип уйларға һәм бер үк өндө төрлөсә яҙып, алфавитты фонетик транскрипцияға әйләндерергә тура килер ине.

## Башҡорт алфавиты

| Рәт һаны | Баҫма хәрефтәр | Хәрефтәр исеме | Рәт һаны | Баҫма хәрефтәр | Хәрефтәр исеме |
|---|---|---|---|---|---|
| 1 | Аа | а | 22 | Пп | пэ |
| 2 | Бб | бэ | 23 | Рр | эр |
| 3 | Вв | вэ | 24 | Сс | эс |
| 4 | Гг | гэ | 25 | ҫ | ҫэ |
| 5 | Ғғ | ғы | 26 | Тт | тэ |
| 6 | Дд | дэ | 27 | Уу | у |
| 7 | Ҙҙ | ҙэ | 28 | Үү | ү |
| 8 | Ее | е | 29 | Фф | эф |
| 9 | Ёё | ё | 30 | Хх | ха |
| 10 | Жж | жэ | 31 | Һһ | һа |
| 11 | Зз | зэ | 32 | Цц | цэ |
| 12 | Ии | и | 33 | Чч | чэ |
| 13 | Йй | й | 34 | Шш | ша |
| 14 | Кк | ка | 35 | Щщ | ща |
| 15 | Ҡҡ | ҡы | 36 | ъ | ер |
| 16 | Лл | эль | 37 | Ыы | ы |
| 17 | Мм | эм | 38 | ь | ерь |
| 18 | Нн | эн | 39 | Ээ | э |
| 19 | ң | эң | 40 | Әә | ә |
| 20 | Оо | о | 41 | Юю | ю |
| 21 | Өө | ө | 42 | Яя | я |

Башҡорт теле алфавитында һуҙынҡы өндәр өсөн 13 хәреф алынған: *а, ә, о, ө, у, ү, ы, э, и, е, ё, ю, я*. Быларҙан *ё* хәрефе фәҡәт рус әҙәби теле аша ингән һүҙҙәрҙә генә, *ә, ө, ү* хәрефтәре фәҡәт башҡорт теленең үҙ һүҙҙәрендә йәки рус теленән инеп тә башҡорт теленең фонетикаһына буйһондороп әйтелә торған һүҙҙәрҙә генә яҙыла (**бүрәнә, көршәк, өҫтәл**). Өс хәреф ҡушма өндәрҙе белдерә: *ё*-йо, я-йа, *ю*-йу, йү, мәҫәлән, **ёлка (йолка); юл, юрист, юкә (йул, йурист, йүкә); ярыш, якорь (йарыш, йакорь).** Һуҙынҡы хәрефтәрҙең бишеһе бер нисә өндө белдерә: *о* хәрефе тар әйтелешле һәм киң әйтелешле *о* өндәрен (**ҡоролош, колхоз**); *ы* хәрефе ҡыҫҡа әйтелешле һәм киң әйтелешле *ы* өндәрен (**ыласын, промышленность**): *и* хәрефе *и* һәм *ый* өндәрен (**ирек, сираҡ** (сыйраҡ); *е* хәрефе *йә, э, е* өндәрен (**ел (йел), бел (бэл), тема**); *у* хәрефе һуҙынҡы *у* һәм ҡыҫҡа әйтелешле ҡалын тартынҡы *ʋ* өндәрен (**клуб, матур; ауыл (аʋыл)**; *у* хәрефе нәҙек һуҙынҡы *ү* һәм ҡыҫҡа әйтелешле нәҙек тартынҡы *ʋ* өндәрен белдерә (**бүлмә, рәүеш (рәʋеш)**.

Тартынҡы өндәр өсөн 27 хәреф алынған: *б, в, г, ғ, д, ҙ, ж, з, й, к, ҡ, л, м, н, ң, п, р, с, ҫ, т, ф, х, һ, ц, ч, ш, щ*. Был хәрефтәрҙән фәҡәт *в* хәрефе генә ике өндө (*в* һәм ҡыҫҡа әйтелешле *ʋ* өндәрен) белдерә: **совет, ваҡыт, вәкил (уаҡыт, үәкил).** Тартынҡы хәрефтәрҙән *ғ, ҙ, ҡ, ң, ҫ* хәрефтәре башҡорт теленең үҙ һүҙҙәрендә һәм рус теленән инеп тә, башҡорт теленең фонетикаһына буйһондороп әйтелгән һүҙҙәрҙә генә яҙыла (**ағай, ғинуар, ҙур сумаҙан, ҡаҡы, ҡарбуз, таң, баҫынҡы, кәбеҫтә**); *з* хәрефе рус, ғәрәп, фарсы телдәренән ингән һүҙҙәрҙә генә (**завод, зифа, заман**) һәм башҡорт һүҙҙәренең ҡайһы берҙәрендә (мәҫәлән, **зыбын, зырлауыҡ, ызылдауыҡ** һ. б.); *һ* хәрефе башҡорт, ғәрәп, фарсы һүҙҙәрендә генә (**һәм, һеңле, мөһабәт**); *ц, ч, щ* хәрефтәре рус теле аша ингән һүҙҙәрҙә генә яҙыла (**цех, почта, учреждение, плащ**).

*ҫ, ң* хәрефтәре һүҙ башында яҙылмай. Быларҙан башҡа тағы алфавитта *ъ, ь* (ер, ерь) хәрефтәре алынған, былар бер төрлө лә өндө белдермәйҙәр: *ъ* хәрефе ҡалын тартынҡы өндө үҙенән һуңғы йәки алдағы һуҙынҡы өндән айырып әйтеүҙе белдереү өсөн (**донъя, съезд, маъмай**); *ь* хәрефе үҙенән алдағы өндөң нәҙеклеген белдереү (**роль**) йәки нәҙек тартынҡы өндө үҙенән һуңғы йә алдағы һуҙынҡы өндән айырып әйтеүҙе белдереү өсөн (**тәьмин, мәсьәлә**) ҡулланыла.

Башҡорт әҙәби теленең хәҙерге орфографияһы төп фонетик принципҡа ҡоролған. Күпселек һүҙҙәр әйтелгәнсә яҙып йөрөтөләләр. Мәҫәлән, тамыр йәки нигеҙ һүҙҙәр аҙағындағы *ҡ, к, п*

өндәре һүзгә һуҙынҡы өн менән башланған ялғау ялғаныу менән *ғ, г, б* өндәренә әйләндереп әйтелә һәм был орфографияла ла үҙенең сағылышын ала: нисек әйтелә, шулай яҙыла (**аҡ — ағы, китап — китабы, ебәк — ебәге**). Һүҙҙәрҙе бергә ҡушып әйткәндә ике һуҙынҡы уртаһында килгән *ҡ, к* өндәре *ғ, г* өндәренә әйләндереп әйтелә, шулай яҙылалар: **терегөмөш (тере көмөш), Ағиҙел (Аҡ Иҙел)**. Ҡайһы бер һүҙҙәр ялғауҙар ҡушылыу менән айырым өндәр төшөрөп ҡалдырылып әйтеләләр, яҙыуҙа ла төшөрөп яҙылалар (**халыҡ — халҡы, ирек — ирке, бүрек — бүрке** һ. б.).

Рус теле аша ингән һүҙҙәрҙең күбеһе, айырыуса терминдар, үҙҙәренең тамыр йәки нигеҙ өлөштәрендә график принципта, йәғни рус орфографияһындағыса яҙылалар (**принцип, банк, съезд, промышленность, металл, килограмм, класс**). Ләкин ялғауҙар ҡушыу менән, был принцип емерелә, ялғауҙар фонетик принципҡа нигеҙләп яҙылалар (**принцип — принцибе, банк — банкыһы, съезд — съезы, промышленность — промышленноскә, металл — металға, килограмм — килограмда, класс — кластан**).

Ҡайһы бер һүҙҙәр фонематик-морфологик принципта яҙыла. Мәҫәлән, *н* өнө үҙенән һуңғы өндәрҙең йоғонтоһо аҫтында *ң, м* өндәре менән сиратлашып әйтелһә лә, был сиратлашыу яҙыуҙа күрһәтелмәй (**ун бер, ун биш, барғанмын, килгәнмен, көнбағыш, боронғо, тартынҡы, һуҙынҡы, бөгөнгө**; әйтелә: **ум бер, ум биш, барғаммын, килгәммен, ҡомбағыш, бороңғо, тартыңҡы, һуҙынҡы, бөгөңгө**).

Ҡайһы бер һуҙынҡы өндәр һүҙҙәрҙең үҙгәреүе менән төшөрөп әйтелһә лә, яҙыуҙа һаҡлана (**айыр — айырыу, айырым, айырылғас, айырыуса; синыф — синыфы; кәкере — кәкерәйеү, кәкерәйгән**; әйтелә: **айыр—айрыу, айрым, айрылғас, айрыуса; синыф — синфы; кәкере — кәкрәйеү, кәкрәйгән**).

Айырым һүҙҙәр дифференциацион принцип нигеҙендә яҙылалар. Был принцип әйтелеше бер үк, ә мәғәнәләре төрлө һүҙҙәрҙе бер-береһенән айырыу өсөн ҡулланыла: һүҙҙәр, мәғәнә үҙгәрештәренә ҡарап, төрлөсә яҙыла, бер төрлө әйтелә. Мәҫәлән, **туған — туғандаш, туғанлашыу, туғанлыҡ, туған тел, туғаным; тыуған — тыуған ауыл, тыуған ер, тыуған ил**, йәки **күренеш — күрнеш; ҡаршы — ҡарышыу** һ. б.

Һүҙҙәрҙе ҡушып яҙыу йәки яҙмау, баш хәреф йәки бәләкәй хәреф менән яҙыу аша һүҙҙәрҙең мәғәнә айырымлыҡтарын белдереү кәрәк булғанда ла дифференциацион принцип ҡулланыла. Мәҫәлән: **ирек, Ирек, гүзәл, Гүзәл, аҡ һаҡал, аҡһаҡал, биш бармаҡ, бишбармаҡ**.

Шулай итеп, башҡорт әҙәби теленең хәҙерге орфографияһында һүҙҙәр яҙылышында биш төрлө принцип ҡулланыла. Ләкин быларҙың ҡулланыу дәрәжәһе бер төрлө түгел. Быларҙан башҡорт әҙәби теле орфографияһы өсөн фонетик принцип нигеҙ принцип итеп алынған, ә ҡалғандары өҫтәмә принцип булып иҫәпләнәләр.

Башҡорт әҙәби теленең хәҙерге орфографияһы сирек быуаттан артыҡ ҡулланылып килә. Уның ҡағиҙәләренең бик күбеһе хәҙерге көндә тотороҡланды, улар нигеҙендә яҙыу традицияға инеп китте. Рус графикаһы нигеҙендә төҙөлгән алфавитҡа күскәнгә тиклем беҙҙең орфография бик йыш үҙгәреп тора ине, сөнки ғәрәп алфавиты һәм латинлаштырылған алфавит беҙҙең телдең фонетик системаһына тулыһынса яуап бирмәне. Йыш ҡына үҙгәрештәр индереп торолһа ла, ул алфавиттар һәм улар нигеҙендә төҙөлгән орфография ҡағиҙәләре башҡорт әҙәби телен ныҡлы яҙыу нормаһына урынлаштыра алманылар. Рус графикаһы нигеҙендәге алфавит һәм орфография әҙәби телдең яҙма формаһын нормалаштырыуҙа ҙур ярҙам итте. Хәҙер беҙҙә дөрөҫ яҙыуҙың берҙәм нормалары барлыҡҡа килде. Улар башҡорт милли әҙәби теленең үҙенсәлектәрен һәм уның үҫеш перспективаһын, һис шикһеҙ, дөрөҫ сағылдыра.

Башҡорт әҙәби теле хәҙер — фән теле, нәфис әҙәбиәт, публицистика, беллетристика теле, рәсми документтар теле, матбуғат теле. Йыл һайын башҡорт яҙыусыларының йөҙәрләгән исемдә әҫәрҙәре, төрлө фәндән китаптар, монографиялар, терминология һүҙлектәре, башланғыс, урта, юғары уҡыу йорттары өсөн дәреслектәр баҫылып тора. Тиҫтәләрсә гәзиттәр, журналдар сыға. Башҡорт композиторҙарының әҫәрҙәре, нотаға һалынған халыҡ йырҙары йыйынтыҡтары баҫыла; юғары уҡыу йорттарында башҡорт теле һәм әҙәбиәте кафедралары эшләй; махсус институттарҙа башҡорт теле, әҙәбиәте буйынса ғилми-тикшеренеү эштәре алып барыла. Башҡорт яҙыуының рус графикаһы нигеҙендәге алфавитҡа күсерелеүе был эштә ҙур роль уйнаны һәм уйнай. Хәҙерге орфография принципиаль үҙгәрештәр индереүҙе талап итмәй. Ләкин бынан орфографияны яҡшыртыу, камиллаштырыу буйынса бөтөнләй эш алып барырға тейеш түгелбеҙ, тигән һығымтаға килергә ярамай, сөнки орфография телдең структураһы менән тығыҙ бәйләнгән. Тел үҫә, уның һүҙлек составы интенсив рәүештә тулылана, байыға бара: яңы һүҙҙәр яһалалар, икенсе телдәрҙән яңы һүҙҙәр инә. Шул арҡала яҙылышы орфография ҡағиҙәләре менән ҡарал-

маған һүҙҙәр, формалар барлыҡҡа килә. Шунан айырым һүҙҙәрҙең яҙылышында ҡапма-ҡаршылыҡтар, төрлөлөктәр килеп тыуа. Хәҙерге көндә беҙҙә практикала айырым һүҙҙәр яҙылышында осраған төрлөлөктәр, башлыса, бына шунан килә. Һүҙҙәр яҙылышында бер төрлөлөк булмау — әҙәби телдең нормаһын ҡаҡшата; халыҡтың грамоталылығын күтәреү эшенә, әҙәби телдең мәҙәни-ижтимағи функцияһын үтәү эшенә ҡамасаулыҡ итә; мәктәптәрҙең уҡытыу эшендә, нәшриәт һәм матбуғат эшендә ҡыйынлыҡтар тыуҙыра.

Бына быларҙың бөтәһе лә беҙҙең орфографияның ҡайһы бер ҡағиҙәләрен асыҡлауҙы, тултырыуҙы талап итәләр. 1957—1958 йылдарҙа башҡорт әҙәби теленең орфографияһы тураһында «Совет Башҡортостаны» гәзите биттәрендә алып барылған дискуссия ла беҙҙең был фекерҙе раçланы. Хәҙер шул дискуссия барышында матбуғатта бәхәс тыуҙырған ҡайһы бер мәсьәләләргә айырым туҡталып, үҙебеҙҙең ҡарашыбыҙҙы әйтеп китмәксе булабыҙ.

## 1. АЛФАВИТ ТУРАҺЫНДА

Беҙҙең алфавитта үҙенсәлекле өндәр өсөн алынған хәрефтәр рус алфавитындағы ниндәй хәрефтән сығып яһалған, шул хәреф эргәһендә килтереләләр. Мәçәлән, *ҡ* хәрефе *к* хәрефенән һуң, ә *ғ* — *г*, *ç* — *с*, *ң* — *н*, *ө* — *о* хәрефенән һуң килә. Ләкин рус алфавитындағы *з* хәрефенә айырым билдә ҡуйып яһалған *ҙ* хәрефе *д* хәрефе һуңында килә. Ғәрәп һәм латинлаштырылған алфавиттарҙа *ҙ* хәрефе *д* хәрефенән сығып яһалған, шуға күрә унда *ҙ* хәрефе *д* хәрефенән һуң ҡуйыла. Шул традиция буйынса рус графикаһы нигеҙендә төҙөлгән алфавитта ла *ҙ* хәрефе *д* хәрефенән һуң ҡуйылған. Был, әлбиттә, дөрөç түгел. Шуға күрә *ҙ* хәрефе *з* хәрефе эргәһендә торорға тейеш була.

Шунан һуң *ә* хәрефен *а* хәрефенән һуң ҡуйыу фекерендә тороусылар бар. Практик уңайлылыҡ яғынан ҡарағанда был фекер менән килешеп була.

Беҙ алда ҡайһы бер хәрефтәрҙең бер нисә өнгә йөрөгәнен әйтеп үткәйнек, һәр бер фонемаға бер хәреф алыуҙы тәҡдим итеп матбуғатта сығыштар булды[96]. Мәҡәлә авторҙары ҡыçҡа

---

[96] *Биишев Әкрәм.* «Совет Башҡортостаны». 20. VIII. 1957; *Ишбулатов Н.* «Совет Башҡортостаны». 19.XII.1957; *Йосопов Х.* «Совет Башҡортостаны». 17.XII.1957.

әйтелешле тартынҡы *v* һәм һуҙынҡы *о, ы, е* (**болон, был, белем, ваҡыт**) өндәре өсөн айырым хәреф алырға тәҡдим итәләр (мәҫәлән, *е̂, о̂, ы̂, у̂-ү̂*: **у̂аҡыт, ү̂әкил, бо̂ло̂н, бе̂ле̂м**). Был дөрөҫ фекер, әлбиттә, һәр бер фонема өсөн айырым хәреф алғанда яҡшы булыр ине, ләкин уның ҡыйын яҡтары бар. Беренсенән, әгәр ҙә беҙ яңы хәрефтәрҙе быға са йәшәп килгән *у, ү, ы, е, о* хәрефтәренә ниндәйҙер билдәләр ҡуйып алһаҡ, яҙыу бик сыбарланасаҡ, яҙырға ауыр буласаҡ, мәҫәлән, **болонлоҡ, быйылғы, белемле, ватылыу** һүҙҙәрен **бо̂ло̂нло̂ҡ, бы̂йы̂лғы̂, бе̂ле̂мле̂, у̂а̂ты̂лы̂у̂** формаһында яҙырға тура килер ине. Быларҙа һәр һуҙынҡыға һәм тартынҡы *у-ү*-гә ике тапҡыр ҡул тейҙерергә тура килә, ә был өндәр бит беҙҙең телдә һәр бер һүҙҙә тиерлек ҡулланыла, был инде яҙыуҙы ҡатмарлаштыра, тиҙ яҙыуға ҡамасаулай. Беҙ хәрефтәрҙең анһат һәм тиҙ яҙылыуын, һүҙҙәрҙең мөмкин тиклем ыҡсым булыуын, яҙыуҙың еңел уҡылыуын, күҙгә матур күренеүен дә иҫтән сығарырға тейеш түгелбеҙ. Шунан һуң әгәр 42 хәрефтән торған алфавитыбыҙға тағы ла биш хәреф өҫтәһәк, алфавит 47 хәрефтән торасаҡ. Бында техник мөмкинселектәрҙе лә иғтибарға алырға кәрәк. Мәҫәлән, быға са йәшәп килгән алфавит (баш хәрефтәрҙе, тыныш билдәләрен һәм цифрҙарҙы иҫәпләгәндә) яҙыу машинкаһында 102 тамғаға урын табылыуын талап итә. Ә беҙҙә хәҙерге көндә ҡулланыла торған машинкаларҙың ни бары 45 баҫмағы булып, 90 ғына тамға һыйҙыра. Шул арҡала беҙҙең яҙыу машинкаларында ҡайһы бер тыныш билдәләре етешмәй, әгәр тыныш билдәләрен барыһын да урынлаштырһаҡ, баш хәрефтәрҙе төшөрөп ҡалдырырға тура килә. Типографиялағы хәреф йыя торған машиналарға килгәндә инде шундай уҡ хәлгә осраясаҡбыҙ.

Икенсенән, был биш өн өсөн алфавитта айырым хәрефтәр булмау, яҙыу практикаһында бер төрлө лә ҡыйынлыҡ килтергәне юҡ. Алфавитта булған 42 хәреф беҙҙең телебеҙҙәге бөтә һүҙҙәрҙе еңел һәм дөрөҫ яҙыуҙы тулыһынса тәьмин итә.

Былай ҙа әле беҙҙең алфавит бүтән төрки телдәренең алфавиттарына ҡарағанда хәреф күплеге яғынан беренсе урында тора. Шунан һуң бер хәрефтең ике-өс өн урынында ҡулланылыуы бүтән телдәрҙә лә бар. Мәҫәлән, рус телендә **Яков, моряк** һүҙҙәрендә төрлө өндәр ишетелһә лә, бөтә урында ла *я*, **Европа, Ленин** һүҙҙәрендә *е*, **юбилей, июнь, меню, дюжина** һүҙҙәрендә һәр урында ла *ю* яҙыла.

Шуға күрә алфавитҡа яңы хәрефтәр өҫтәүҙең, беҙҙең фекерсә, кәрәге юҡ.

Хәҙер алфавиттың бөтә төркиәткә бәйле бер мәсьәләһенә туҡталып китәйек.

Күпселек төрки телдәре өсөн дөйөм булған өндәр бар. Ләкин уларҙың хәрефе рус графикаһы нигеҙендә төҙөлгән алфавиттарҙа төрлөсә алынған. Мәҫәлән, *ө* (башҡорт, ҡаҙаҡ, ҡырғыҙ, татар, төрөкмән, уйғыр), *ӧ* (гагауз, хакас), *оь* (ҡумыҡ, ноғай); *ү* (башҡорт, ҡаҙаҡ, ҡырғыҙ, татар, тува, төрөкмән, уйғыр, азербайжан); *ӱ* (гагауз, хакас); *уь* (ҡумыҡ, ноғай); *ң* (башҡорт, ҡаҙаҡ, ҡырғыҙ, татар һ. б.); *нъ* (ҡарасай, ноғай); *ҡ* (башҡорт), *къ* (балҡар, ҡарасай, ҡумыҡ); *ғ* (әзербайжан, башҡорт, ҡарағалпаҡ, уйғыр, ҡаҙаҡ), *г* (ҡырғыҙ, татар), *гъ* (балҡар, ҡарасай, ҡумыҡ) һ. б.

Шуның өҫтөнә һәр бер телдә үҙенең үҙенсәлекле өндәре өсөн алынған хәрефтәр бар. Мәҫәлән, *ӓ* (гагауз); *і* (ҡаҙаҡ, хакас), *ү* (ҡаҙаҡ) һ. б.

Шул рәүешле бер үк өн хәрефтәренең төрлө телдә төрлөсә алыныуы һәм бер үк хәрефтең төрлө өндө белдереүе ҡәрҙәш төрки телдәрендә яҙылған әҙәбиәтте уҡыуҙы, уларҙың мәҙәниәт өлкәһендәге өлгәшеүҙәре менән танышып барыуҙы ҡыйынлаштыра.

Икенсенән, сағыштырма планда яҙылған ғилми хеҙмәттәрҙә бөтә төрки телдәрҙән миҫалдар килтерергә кәрәк булғанда ла был хәл ҡыйынлыҡ тыуҙыра, сөнки был хәрефтәр типография кассаларының береһендә лә тулыһынса тупланмаған. Үҙенсәлекле хәрефтәрҙе һәр бер милли өлкә, республикаларҙағы типографияларҙың кассаларында ғына табырға мөмкин.

Бына был хәл алфавиттарға унификация үткәреү кәрәклеген талап итә. Күпселек төрки телдәр өсөн дөйөм булған өндәрҙең хәрефтәре бер төрлө алынһа, бер үк хәрефтәрҙең төрлө алфавиттарҙа төрлө мәғәнәлә ҡулланылыуы бөтөрөлһә, ҡәрҙәш төрки халыҡтарының әҙәбиәте һәм мәҙәниәт өлкәһендәге уңыштары менән танышып барыу эшен еңеләйтер ине.

## 2. ҺУҘЫНҠЫЛАР ЯҘЫЛЫШЫ

1. Башҡорт әҙәби теленең хәҙерге орфографияһында ҡушма өндәр *йа, йу, йү, йе* бер генә хәреф менән — *я, ю, е* хәрефтәре менән — яҙып йөрөтөлә. Орфография буйынса яҙылған ҡайһы бер мәҡәләләрҙә[97] был өндәрҙе башҡорт һүҙҙәрендә *йа, йу, йү, йе* формаһында ике хәреф менән яҙырға кәрәклеге әйтелә.

[97] *Ишбулатов Н.* Орфография хаҡында фекерҙәр. «Совет Башҡортостаны». 19.X.1957; *Йосопов Х.* Орфографияның ҡайһы бер мәсьәләләренә ҡарата. «Совет Башҡортостаны». 17.XII.1957; *Моратов Ә.* Яңы орфография башҡорт теленең үҙенсәлектәренә яуап бирһен ине. «Совет Башҡортостаны». 9.II.1958.

Был мәҡәләләрҙең авторҙары, *я*-ның нәҙек варианты *йә* рәүешендә яҙыла, былар ҙа шулай ике хәреф менән яҙылырға, бер система булырға тейеш, тиҙәр.

Беҙҙең алфавит, һәр кемгә билдәле, рус графикаһы нигеҙендә төҙөлгән. Беҙҙең әҙәби телгә рус теленән бик күп һүҙҙәр инеп башҡорт теленең үҙ һүҙҙәре менән бер хоҡуҡта, бер үк дәрәжәлә ҡулланылып йөрөйҙәр. Бына шуларҙы иҫкә алмай, яһалма рәүештә яҙыуҙы ҡатмарлаштырыу, уны фонетик транскрипцияға әйләндереү кәрәкме? Рус телендәге *я, ю* хәрефтәре шул уҡ беҙҙәге *йа, йу* өндәрен белдерә. Рус алфавиты ике өн ҡушылмаһын бер генә хәреф менән яҙырға мөмкинлек бирә икән, ниңә уны файҙаланмаҫҡа?! Мәҫәлән, **йаҡ, йуҡ** һүҙҙәрен өс хәреф менән яҙыу урынына рус хәрефтәрен файҙаланып, ике генә хәреф менән яҙабыҙ икән, бында һүҙҙең әйтелешенә бер төрлө лә зарар килмәй. Был авторҙарҙың тәҡдимдәрен ҡабул иткәндә, һүҙҙәрҙең яҙылышында ике төрлөлөк килеп сыға: рус теленән ингән һүҙҙәрҙә шул уҡ өндәр ҡушылмаһын бер генә хәреф менән, ә башҡорт теленең үҙ һүҙҙәрендә ике хәреф менән яҙырға тейеш булабыҙ. **Як** (хайуан исеме) тигәндә *йа* ҡушма өнөн бер генә хәреф менән, ә **яҡ** тигәндә ике хәреф менән; **Янғантау** (курорт исеме) һүҙендә башҡортса яҙғанда ике хәреф менән, русса яҙғанда бер генә хәреф менән йәки **Ямал-ненец** милли округы тигәндә, **Ямал** һүҙендәге *йа*-ны бер генә хәреф менән, ә үҙебеҙҙең **Ямал** (кеше исеме) һүҙен ике хәреф менән яҙырға тейеш булабыҙ. Был хәл инде грамоталылыҡты күтәреүгә алып бармай. Шуның өҫтөнә уҡыусылар һәр бер һүҙҙе яҙғанда, был һүҙ башҡорт теленең үҙ һүҙеме әллә рус теленән ингән һүҙме, тип уйларға мәжбүр буласаҡ.

*Йа, йу, йү, йе* өндәрен ике хәреф менән яҙһаҡ, *ъ, ь* билдәләрен яҙыуҙан ҡотолабыҙ, тиҙәр.

Беренсенән, *ъ, ь* билдәләре башҡортса бик аҙ һүҙҙәрҙә, ҡушма һүҙҙәрҙә генә ҡулланыла. Икенсенән, беҙ ул билдәләрҙән бөтөнләй ҡотола алмайбыҙ, рус теленән ингән һүҙҙәрҙә барыбер яҙырға тейеш булабыҙ.

Ҡушма һуҙынҡы өндәрҙең *я, йә, ю, е, йы (йе)* формаһында яҙылышы хәҙер традицияға инеп, үҙләшеп китте. Уларҙың яҙылышында практикала бер төрлө лә ҡыйынлыҡтар осрамай. Был хәрефтәр башҡорт теленең үҙ һүҙҙәренең һәм рус теленән ингән һүҙҙәрҙең дә яҙылышын дөрөҫ кәүҙәләндерәләр. Шуға күрә уларҙың яҙылышын ҡайтанан ҡарауға, беҙҙеңсә, ихтыяж юҡ.

2. Хәҙер *ы-е, о-ө* өндәре хәрефтәренең яҙыуҙа төшөп ҡалыу-ҡалмау мәсьәләһенә туҡталайыҡ.

Хәҙерге орфографияла *о-ө, ы-е* хәрефтәренең яҙыуҙа төшөп ҡалыу-ҡалмауы түбәндәгесә билдәләнә:

а) тамыр йәки нигеҙҙәрендә *о-ө, ы-е* өндәренең береһе булған һүҙҙәргә ялғауҙар ҡушылғанда ла *о-ө, ы-е* өндәре хәрефтәре төшөрөлмәйенсә яҙыла (**ҡоро — ҡороған, ҡоролоҡ, ҡоротоу; төшөр — төшөрөү, төшөрөлөү; айыр — айырым, айырылыу, айырыуса; ғилем — ғилеме**);

б) тамырында йәки нигеҙендә *о-ө, ы-е* өндәренең береһе әйтелмәгән һүҙҙәргә ялғауҙар ҡушылғанда инде *о-ө, ы-е* яҙылмай (**осра — осрау, осраҡлы; бөҙрә — бөҙрәләнеү, бөҙрәләнгән; аҡрын — аҡрынайыу; күкрә — күкрәү; сәсрә — сәсрәү**);

в) *ҡ-к* өндәренең береһенә бөткән һүҙҙәрҙең аҙағына һуҙынҡы өн ялғағанда, *ҡ-к* өндәре *ғ-г* өндәре менән сиратлашмаһа, *о-ө, ы-е* өндәре хәрефтәре ул һүҙҙәрҙең тамырында ла, шулай уҡ уларға ялғауҙар ҡушылғанда ла яҙылмай (**йолҡ — йолҡа, йолҡоу, йолҡто; өрк — өркә, өркөү, өрктө); ҡырҡ** (һан) **— ҡырҡынсы, ҡырҡар, ҡырҡлап; ҡырҡ** (ҡылым) **— ҡырҡыу, ҡырҡты, ҡырҡыр;**

г) һүҙҙең аҙағында *и* ялғап, сифат яһағанда һуңғы ижек алдындағы *ы-е* төшөп ҡала (**синыф — синфи, ғилем — ғилми**);

д) аҙаҡтары тартынҡы өндәрҙең береһенә бөткән һүҙҙәрҙәге *раҡ-рәк* ялғауҙары алдында *о-ө, ы-е* өндәре хәрефтәре һәр ваҡыт яҙыла (**тотош — тотошораҡ, уҡып — уҡыбыраҡ, төҙ — төҙөрәк, аҙ — аҙыраҡ, йәшел — йәшелерәк**) (§ 12).

Үрҙәге ҡағиҙәләрҙең бигерәк тә өсөнсөһө матбуғатта бәхәс тыуҙыра. Күренеүенсә, *ҡ-к*-гә бөткән һүҙҙәрҙең яҙылышы фонематик-морфологик принципҡа ҡоролған: был төркөм һүҙҙәр тамыр, нигеҙ хәлдә лә, ялғауҙар ҡушылғанда ла бер төрлө яҙылалар: ялғау ҡушылғанда был һүҙҙәрҙә *о-ө, ы-е* өндәре төшөп ҡалалар икән, тамыр, нигеҙ хәлендә лә төшөрөп ҡалдырыла.

Матбуғатта сығыш яһаусылар был ҡағиҙәне үҙгәртеүҙе тейеш табалар, ләкин улар араһында фекер берлеге юҡ. Бер төркөм авторҙар **халыҡ, бүрек, ирек, йолҡ** һәм башҡа шуның һымаҡ һүҙҙәрҙең бөтәһендә лә *о-ө, ы-е* яҙылышы һаҡланырға тейеш, тиҙәр[98]. Икенсе бер төркөм авторҙар **милек, халыҡ,**

---

[98] *Ишбулатов Н.* Орфография хаҡында фекерҙәр. «Совет Башҡортостаны». 19.X.1957; Яңы орфография башҡорт теленең үҙенсәлектәренә яуап бирһен ине. «Совет Башҡортостаны». 9.II.1952.

**ирек, бүрек** һүҙҙәрендә *ы-е* яҙырға, ә ҡалғандарында, мәҫәлән, **ҡурҡ, ялҡ, өрк** һ. б. һүҙҙәрҙә яҙмаҫҡа кәрәк, тиҙәр[99].

Ҡайһы бер авторҙар *ы-е, о-ө* өндәренең хәрефтәре яҙылышын һүҙ төркөмө булыу яғынан сығып билдәләргә тәҡдим итәләр: исемдәрҙә яҙырға, ә ҡылымдарҙа яҙмаҫҡа, тиҙәр[100].

Шул рәүешле бер һүҙ төркөмө булып килгәндә — яҙырға, икенсе һүҙ төркөмө булып килгәндә — яҙмаҫҡа, йәки шул төркөмдән булған һүҙҙәрҙең бер нисәһендә яҙып, ҡалғандарында яҙмаҫҡа формаһында хәл итһәк, яҙылышты ҡатмарландырыу булыр ине. Мәҫәлән, ниндәй һүҙ төркөмөнән булыу принцибынан сыҡһаҡ, **халыҡты, бүректе** һүҙҙәрендә икенсе ижектә һуҙынҡы өн хәрефен яҙырға, ә **ҡурыҡты, һелекте** тигәндә яҙмаҫҡа тейеш булабыҙ. Орфографияла системалылыҡты күҙ уңында тотһаҡ, был төркөм һүҙҙәрҙең яҙылышы бер генә принципҡа ҡоролорға тейеш: элеккесә, фонематик-морфологик принциптан сығып, береһендә лә яҙмаҫҡа йәки, фонетик принциптан сығып, бөтәһендә лә яҙырға кәрәк. Үҙгәртергә кәрәк икән, ул ваҡытта был форма һүҙҙәрҙә *о-ө, ы-е* өндәре хәрефтәренең яҙылышын фонетик принципҡа ҡорорға кәрәк.

## 3. ЯЛҒАУҘАР ЯҘЫЛЫШЫ

Рус әҙәби теле аша ингән һүҙҙәрҙә ялғауҙарҙың ҡалын йәки нәҙек яҙылыу мәсьәләһе беҙҙең орфографияла һуңғы йылдарҙа бәхәсле мәсьәләләрҙең береһе булып килде. Ғәрәп һәм латинлаштырылған алфавиттар нигеҙендә төҙөлгән орфографияларҙа ялғауҙарҙың ҡалын йәки нәҙек яҙылышы бер төрлө лә ҡыйынлыҡ тыуҙырманы, сөнки ул ваҡытта рус әҙәби теле аша ингән һүҙҙәрҙең бөтәһе лә башҡорт теленең фонетикаһына һәм сингармонизм закондарына буйһондороп яҙыла ине.

1934 йылда орфографияға рус әҙәби теле аша ингән һүҙҙәрҙә *е, о* өндәре хәрефтәре яҙылышын һаҡлау тураһында үҙгәреш индерелгәс, ялғауҙарҙы ҡалын йәки нәҙек яҙыу мәсьәләһе көн тәртибенә ҡуйылды, сөнки *е, о* өндәре хәрефтәренең яҙылышын ҡабул итеү менән рус әҙәби теле аша ингән һүҙҙәрҙә сингармонизм законы һаҡланмай башлай. Мәҫәлән, 1934 йылға тиклем

---

[99] *Киекбаев Ж. Ғ.* Орфографияны яҡшыртыуҙың ҡайһы бер мәсьәләләре. «Совет Башҡортостаны». 25.VIII.1957.

[100] *Сәитбатталов Ғ.* Фәнни нигеҙҙә төҙөлгән башҡорт теле орфографияһы өсөн. «Совет Башҡортостаны». 11.X.1957. *Ишбулатов Ғ.* Орфография һәм лексика хаҡында фекерҙәр. «Совет Башҡортостаны». 7.XII.1957.

*совет* һүҙе латинлаштырылған алфавит менән *səvit* формаһында яҙып йөрөтөлһә, *е, о* өндәре яҙылышы ҡабул ителеү менән *sovet* формаһында яҙыла башланы.

Ялғауҙарҙы ҡалын йәки нәҙек яҙыу принциптары йыш үҙгәреп тора. 1934 йылғы орфографияла рус әҙәби теле аша ингән һүҙҙәрҙә ялғауҙарҙың ҡалын йәки нәҙек яҙылыуы һүҙҙең һуңғы ижегенә ҡарап билдәләнә, йәғни һүҙҙең һуңғы ижеге ҡалын булһа — ҡалын ялғау, нәҙек ижек булһа — нәҙек ялғау яҙыла. 1940 йылғы орфографияла һүҙҙәге һуңғы өндөң әйтелеүенә ҡарап билдәләнә: һүҙҙең һуңғы өнө ҡалын әйтелһә, ҡалын ялғау, нәҙек әйтелһә, нәҙек ялғау яҙыла. Был мәсьәлә 1941 йылда ҡайтанан ҡаралып, тағы ла ҡабаттан ялғауҙарҙы һүҙҙең һуңғы ижегенең ҡалын йәки нәҙеклегенә ҡарап яҙырға кәрәк табылды.

Ҡулланыуҙа булған хәҙерге орфографияла рус әҙәби теле аша ингән һүҙҙәрҙә ялғауҙарҙы ҡалын йәки нәҙек яҙыу мәсьәләһе түбәндәгесә хәл ителгән:

Ялғауҙарҙың ҡалынлығы йәки нәҙеклеге тамыр йәки нигеҙ һүҙҙәрҙең һуңғы ижектәренә ҡарап билдәләнә: һуңғы ижек ҡалын булһа — ҡалын ялғау, нәҙек булһа — нәҙек ялғау яҙыла (**завод-тар, химик-тәр, актив-тәр**).

Иҫкәрмә. 1. Рус әҙәби теле аша ингән, бер генә нәҙек ижектән торған ҡайһы бер һүҙҙәргә ҡалын ялғауҙар ялғана. Бындай бер ижекле һүҙҙәрҙең ҡайһыларында ялғауҙарҙың ҡалын килеүе орфография һүҙлегендә күрһәтелергә тейеш (**литр-ы, метр-ы, цех-та, тип-тар**). Был һүҙҙәр ҡушма һүҙ составына инеп, уның һуңғы ижеге булып килгәндә лә, үрҙәге ҡағиҙә һаҡлана: **сантиметр-ы, барометр-ға**.

2. Әгәр рус теле аша ингән һүҙҙәрҙең йәки фамилияларҙың һуңғы ижеге *е* хәрефе менән башланһа, ялғау һуңғы ижек алдындағы ижектең ҡалын йәки нәҙек хәрефкә бөтәүенә ҡарап ялғана: **боец-тар, курьер-гә.**

3. Аҙағында йәки уртаһында *я* йәки *ю* килгән ижектәр нәҙек ижек булып иҫәпләнәләр: **кухня-не, моряк-тәр, меню-гә, бюс-е** (§ 39).

25 йыллыҡ тәжрибә ялғауҙарҙың ҡалын йәки нәҙек яҙылышын билдәләү принцибының, йәғни һүҙҙең һуңғы ижегенә ҡарап билдәләүҙең тотороҡло икәнен күрһәтте. Башҡорт теленең үҙ һүҙҙәрендә, шулай уҡ рус теленән ингән һүҙҙәрҙең күбеһендә был принцип бер төрлө лә ҡыйынлыҡ тыуҙырмай (**ҡала-лар, бүлмә-ләр, заводтар, партия-ны, аквариум-ды, адмирал-дар, актёр-ҙар, актрисаны**). Шуға күрә ҡайһы бер тел-

селәрҙең ялғауҙарҙың ҡалын йәки нәҙек яҙылышын билдәләүсе ҡағиҙәләр, ғөмүмән, «орфоэпик норманы боҙоуға килтерҙе»[101] тигән фекерҙәре менән килешеп булмай. Был ҡағиҙәләр ғөмүмән, орфоэпик норманы боҙмай, ә рус әҙәби теле аша ингән һәм ғәрәп теленән ингән айырым төркөм һүҙҙәрҙең яҙылышын әйтелешенән бер аҙ йыраҡлаштыра ғына. Әлбиттә, ниндәй генә ҡағиҙә төҙөгәндә лә был төркөм һүҙҙәрҙең яҙылышы менән әйтелешендә тулы тура килеү булдырыу мөмкин түгел, ләкин яҡынлаштырырға мөмкин. Һәр бер төр ялғауҙың әйтелеше принцибынан сыҡҡанда, бәлки, яҙылыш менән әйтелеш араһында бер ни тиклем тура килеү булдырырға мөмкин булыр ине, ләкин улай булғанда һәр бер төр ялғауға тиерлек бер ҡағиҙә төҙөргә кәрәк буласаҡ. Икенсенән, әйтелештә төрлөлөк булырға мөмкин: бер үк ялғауҙы бер үк һүҙҙә берәү ҡалын әйтергә, икенсе берәү нәҙек әйтергә мөмкин. Мәҫәлән, **ударник** һүҙендә күплек ялғауын ҡалын яҙабыҙ икән, әйтелешкә бик тура килеп тора, ә зат ялғауын ҡалын итеп **ударниг-ы** тип яҙабыҙ икән, әйтелешкә бик үк тура килмәй. Тимәк, был принциптан сыҡҡанда, рус әҙәби теле аша ингән һүҙҙәрҙә ялғауҙарҙың ҡалын йәки нәҙек яҙылышын дөйөм ҡағиҙәләр аҫтына алып булмай. Ә яҙылышта төрлөлөк булмаһын өсөн, орфографияның ҡағиҙәләре бөтә кешегә аңлайышлы, асыҡ, дөйөм булырға тейеш. Яҙыуҙа осрай торған бөтә моменттар дөйөм ҡағиҙәләр аҫтына алынғанда ғына грамоталы яҙыу, дөрөҫ яҙыу урынлаштырылырға мөмкин. XIX быуатта рус теле орфографияһында ла шундай бер хәл була, бер үк һүҙҙәр бер нисә төрлө яҙып йөрөтөлә башлайҙар. Шул ваҡытта В. Г. Белинский, бының ныҡлы ҡағиҙәләр булмағандан килгәнлеген әйтеп, былай ти: «Рус орфографияһындағы буталсыҡтар һәм ҡыйынлыҡтар ҡағиҙәләрҙең иреклелегенән (тотороҡһоҙлоғонан) килә. Уҡыусыға дөйөм ҡағиҙәне әйтһәгеҙ, уны тиҙ аңлар һәм шуға ярашлы итеп яҙырға ғәҙәтләнеп китер; дөйөм ҡағиҙәнән тыш ҡайһы бер иҫкәрмәләрҙе лә хәтерҙә ҡалдырыу уға ул тиклем ҡыйын булмаҫ. Ә инде уға бының яҙылышы тураһында ҡағиҙә юҡ, шулай яҙып йөрөтөлә инде, тип әйтһәгеҙ — ул ваҡытта һеҙҙең грамматикағыҙ һәм орфографияғыҙ уның өсөн ғазапҡа әйләнәсәк»[102].

---

[101] *Сәитбатталов Ғ.* Фәнни нигеҙҙә төҙөлгән башҡорт теле орфографияһы өсөн. «Совет Башҡортостаны». 11.X.1957.

[102] *Виноградов В.* О реформе и упорядочении русской орфографии. «Учительская газета». 1954. 21 август.

Әгәр беҙ ҙә ялғауҙарҙың ҡалын йәки нәҙек яҙылышын дөйөм бер ныҡлы ҡағиҙәгә нигеҙләмәйенсә, «шулай әйтелә, шуға күрә шулай яҙыла» принцибынан сығып ҡына хәл итһәк, орфографияны үҙләштереүҙе ҡыйынлаштырасаҡбыҙ ғына.

Ҡайһы бер телселәр рус әҙәби теле аша ингән һүҙҙәрҙә ялғауҙарҙың ҡалын йәки нәҙек яҙылышын һүҙҙең һуңғы ижегенән алдағы ижектән сығып билдәләргә тәҡдим итәләр: әгәр һүҙҙең һуңғы ижеге алдындағы ижек ҡалын булһа, ҡалын ялғау — нәҙек булһа, нәҙек ялғау яҙыла (**ударник**-тар, **осетин**-дәр). Ләкин был дөйөм бер принцип була алмай. Мәсәлән, **кабинет, комитет, инженер, диспетчер** һәм башҡа шуның һымаҡ бик күп һүҙҙәрҙә һуңғы ижектән алда нәҙек ижек килгән, тимәк, юғарыла әйтелгән ҡағиҙә буйынса нәҙек ялғау яҙылырға тейеш (**кабинет-тәр, комитет-тәр, инженер-ҙәр, диспетчер-ҙәр**), ләкин әйтелешкә тура килтерәйек тиһәк, ҡалын ялғау яҙырға тейешбеҙ (**кабинет-тар, комитет-тар, инженер-ҙар, дисиетчер-ҙар**).

Беҙҙең фекерсә, хәҙерге орфографияла ялғауҙарҙың ҡалын йәки нәҙек яҙылышын билдәләүсе төп ҡағиҙә һаҡланырға тейеш, сөнки ул ҡағиҙә башҡорт әҙәби теленең бөтә һүҙҙәренә ҡарата әйтелә. Ә инде рус теленән һәм бүтән телдәрҙән ингән айырым төркөм һүҙҙәрҙә ялғауҙарҙың яҙылышын әйтелешкә яҡынайтыу өсөн төп ҡағиҙәгә ҡайһы бер асыҡлауҙар, иҫкәрмәләр индерергә кәрәк.

Ә. И. Харисов үҙенең «Яңы орфография проблемалары» тигән йөкмәткеле мәҡәләһендә[103] был мәсьәләгә бик ныҡ туҡталып, рус әҙәби теле аша ингән һүҙҙәрҙә ялғауҙарҙың ҡалын йәки нәҙек яҙылышын түбәндәгесә билдәләргә тәҡдим итә:

1. Нәҙек ялғауҙар яҙыла:

а) йомшаҡлыҡ билдәһенә бөткән һүҙҙәргә: **автомобил-дәр, артел-гә, нефт-се**, ләкин — **секретар-ҙар, кустар-сылыҡ.**

б) *и, ий, е (э), ей, ие* өндәренә бөткән һүҙҙәргә: **коньки-ҙә, Октябрьский-гә, юбилей-гә, коммюнике-лә, учреждение-лә.**

2. Бөтә ҡалған осраҡтарҙа рус теленән ингән һүҙҙәрҙә ҡалын ялғауҙар яҙыла.

Тамырҙарында *а, о, у, ы, я, ю* һуҙынҡылары булмаған, ике йәки унан артыҡ тартынҡыға бөткән йәки ижеге *е* өнө менән билдәләнгән бер ижекле һүҙҙәрҙә ҡалын ялғауҙар яҙыла: **метр-ҙан, цех-ҡа, грек-тар.**

---

[103] *Харисов Әхнәф.* Яңы орфография проблемалары. «Совет Башҡортостаны». 1960. 26.VI, 29.VI, 30.VI.

Ижеге *и* өнө йәки *ей* өндәре менән билдәләнгән бер ижекле һүҙҙәргә нәҙек ялғауҙар яҙыла: **Рим-гә, спирт-тән, тиф-тән, рейд-тә, сейф-кә,** ләкин **тип-тар, тир-ға.**

Был фекерҙәр менән килешергә мөмкин, улар рус әҙәби теле аша ингән һүҙҙәрҙә ялғауҙар яҙылышын, нигеҙҙә, дөрөҫ сағылдыралар. Ләкин уларҙы дөйөмләштерәһе, тағы ла асыҡлай төшәһе бар.

Рус теленән һәм бүтән телдәрҙән ингән һүҙҙәрҙә ялғауҙарҙы ҡалын йәки нәҙек яҙыу мәсьәләһендә ҡаршылыҡтар, башлыса, һуңғы ижектәре *е* йәки *и* менән билдәләнгән һүҙҙәргә ҡайтып ҡала. Тәүҙә был форма һүҙҙәрҙе һанап китәйек:

I. 1) Фрунзе, галифе, желе, кафе, клише, коммюнике, кофе, купе, пенсне, ясле;

2) метр, газометр, гектометр, декаметр, дециметр, километр;

3) Приморье, поместье, печенье, ателье, варенье, Запорожье;

4) Енисей, юбилей, дрейф, рейд, сейф, казначей, адыгей, еврей, лицей, трофей;

5) авианосец, австралиец, авторитет, аккомпанемент, акцент, анкер, арест, балет, бассейн, брезент, брикет, бункер, буфет, бухгалтер, бюджет, венгер, винегрет, гидроген, дебаркадер, декадент, декрет, диалект, диспансер, диспетчер, документ, доцент, жилет, жакет, запорожец, землемер, инженер, интервент, кабинет, кавалер, кадет, квартет, комитет, клевер, компетент, комплекс, крокет, котлет, комсомолец, конверт, конспект, комплект, лазарет, макет, манжет, маркизет, мастер, маузер, медикамент, миноносец, музей, немец, ненец, оппозиционер, оппонент, орден, ордер, оркестр, офицер, пакет, паркет, партер, патент, пергамент, печенег, пионер, пистолет, портвейн, портрет, президент, премьер, пропеллер, протез, процент, реакционер, револьвер, резерв, рельеф, референт, рецензент, секрет, семестр, снайпер, совет, студент, сюжет, университет, факел, фермер, цемент, центнер, черкес, эпитет, эсминец, юпитер, юнкер;

6) занятие, сословие, телевидение, черчение, учреждение;

7) герб, гетр, грек, Днепр, Днестр, крем, мех, негр, нефть, пресс, рельс, серб, тембр, темп, фетр, френч, цех, чек, чех, член, эвен, швед, шеф.

II. 1) жюри, Миссури, сандали, Сочи, такси;

2) абсолютизм, альпинизм, большевизм, империализм, карьеризм, ленинизм, марксизм, дарвинизм;

3) автоброневик, автоматик, академик, аккредитив, актив, акциз, алфавит, алюмин, анализ, антитезис, архив, аспирин, большевик, броневик, букинист, вазелин, валик, ванилин, глицерин, гранит, графит, графин, грузин, девиз, дезертир, декоратив, дельфин, денщик, депозит, дефис, дефицит, диапозитив, дифтерит, забойщик, зенит, зефир, инвалид, инглиз, кабардин, калибр, кальций, кассир, католик, коллектив, колорит, командир, коммунист, комсомолец, конторщик, кофеин, крекинг, кризис, кубик, лезгин, лимит, магний, магнит, медик, менингит, меньшевик, министр, наборщик, наводчик, народник, нафталин, негатив, неолит, никотин, олиф, осетин, парафин, паразит, Париж, парик, персик, петит, питомник, плановик, позитив, помещик, реактив, режим, сановник, санскрит, сатин, сахарин, сервиз, соратник, сотрудник, сульфид, сульфит, сюрприз, тажик, тариф, термин, транзит, фазис, финиш, химик, Харбин, шарнир, электр, эфир, ювелир;

4) винт, гипс, грипп, диск, кит, лиф, лифт, приз, принц, Рим, скиф, спирт, тип, тиф, фильм, фин, цикл, цинк, цифр, шрифт, шприц, шин, шифр;

5) Фатих, Салих, ғалим, шағир, Ғәлим, Хәким, мәғариф.

Хәҙерге орфография буйынса был һүҙҙәрҙең бөтәһендә лә нәҙек ялғау яҙылырға тейеш, сөнки уларҙың һуңғы ижеге алғы рәт һуҙынҡылар менән килгән, шуға күрә нәҙек ижек булып иҫәпләнә. Ләкин ялғауҙар ҡуша башлағас, ҡаршылыҡтар килеп тыуа: бер үк форма ижеккә бөткән был һүҙҙәрҙең ҡайһы берҙәрендә нәҙек ялғауҙар тура килеп тора (**кафе-гә, ғалим-дәр, омоним-дәр** һ. б.), ә ҡайһы берҙәрендә нәҙек ялғауҙар тура килмәй, нәҙек ялғау ҡушыу менән, һүҙҙәрҙең яҙылышы әйтелешенән бик ныҡ йыраҡлаша (мәҫәлән, **Фрунзе-не, совет-те, алфавит-те, цифр-ҙе, коммунис-те, ударник-те, шағир-ҙе**). Шулай итеп, бер үк форма ижеккә бөткән һүҙҙәргә бер осраҡта нәҙек ялғау, икенсе осраҡта ҡалын ялғау тура килә. Уның сәбәбе шунда: ижекте билдәләгән алғы рәт *е, и* өндәре төрлө фонетик солғанышта килеп, артҡы рәт йәки артҡы рәт өнгә тартым өн итеп әйтеләләр. Мәҫәлән, **крейсер** һүҙе менән **доцент** һүҙендәге *е* өндәре **академик, ғалим** һүҙҙәре менән **алфавит, шағир, тарих** һүҙҙәрендәге *и* өндәре әйтелеш яғынан бер-береһенән бик ныҡ айырыла, **доцент** һүҙендәге *е* һәм **алфавит, шағир** һүҙҙәрендәге *и* өнө артҡы рәт *ы* өнөнә яҡын итеп, тимәк, ҡалын ижек итеп әйтелә. Тимәк, **крейсер, академик, ғалим** һүҙҙәрендә нәҙек ялғауҙар, ә **доцент, алфавит, шағир, тарих**

һүҙҙәрендә ҡалын ялғауҙар яҙылырға тейеш (**крейсер-ҙәр, академик-тәр, ғалим-дәр; доцент-тар, алфавит-тар, шағир-ҙы, тарих-ты**). Шуның өсөн орфографияла ялғауҙарҙың ҡалын йәки нәҙек яҙылышы тураһында бирелгән төп ҡағиҙәгә был турала өҫтәмә индерергә кәрәк, шулай иткәндә бик күп һүҙҙәрҙең яҙылышы менән әйтелеше араһындағы айырма кәмей.

Хәҙер ялғауҙар ҡушылғанда, рус әҙәби теле аша ингән һүҙҙәрҙең тамыры йәки нигеҙе тулы һаҡланыу-һаҡланмау мәсьәләһенә туҡталып китәйек. Ғәмәлдәге орфография буйынса ялғауҙар ҡушылғанда бөтә хәлдәрҙә лә тамыр йәки нигеҙ һүҙҙең аҙағындағы ҡайһы бер өндәр төшөп ҡала. Мәҫәлән, ялғауҙар ҡушҡанда, тамыр йәки нигеҙ һүҙҙәрҙең аҙағындағы бер иш ҡуш тартынҡының береһе, ә *-ист, -ст, -сть* формаһында бөткән һүҙҙәрҙә *т* яҙылмай (грипп — грипте, артист — артисе, часть — часе).

Был хаҡта Ә. И. Харисовтың «Ғәмәлдәге орфография буйынса *-ость, -сть,-ст* һәм *-зд* формаһына бөткән һүҙҙәргә ялғауҙар ҡушҡанда, *т (ть), д* өндәре төшөрөлә. Был ҡағиҙәнең көсөн сикләргә кәрәк булыр, сөнки уны дөйөм бер принцип итеп алып бөтә төр ялғауҙарға ҡарата ҡулланыу һүҙҙәрҙе боҙоп яҙыуға, хата үҙләштереүгә килтерә. Был хәл бигерәк тә мәктәп практикаһында буталсыҡ тыуҙыра»[104] тигән фекере менән тулыһынса ҡушылырға тура килә.

Ысынлап та, мәктәптә әсә теле дәресендә һәр бер ялғау ҡушҡанда уҡыусы **промышленность** һүҙен **промышленнос** формаһында яҙып йөрөй икән, ялғауһыҙ яҙырға тура килгәндә, русса ла, башҡортса ла шулай яҙа башлаясаҡ, был хәл грамоталылыҡты түбәнәйтеүгә алып бара, ике телдә лә дөрөҫ яҙыуҙы үҙләштереүҙе ҡыйынлаштыра.

Шуға күрә рус әҙәби теле аша ингән һүҙҙәр ялғауҙар ҡушҡанда ла үҙҙәренең яҙылыштарын мөмкин тиклем тулыһынса һаҡларға тейештәр. Хәҙер ғәмәлдә булған орфографияла был турала бирелгән ҡағиҙәләргә асыҡлыҡ индерергә мөмкин.

Был төр һүҙҙәрҙәге аҙаҡҡы өндәрҙе шул өн менән башланған ялғауҙар йәки өсөнсө зат ялғауы ҡушҡанда ғына төшөрөп яҙып, башҡа урындарҙа төшөрмәй яҙырға кәрәк: **металл —**

---

[104] *Харисов Ә.* Яңы орфография проблемалары. «Совет Башҡортостаны». 30.VI. 1960.

**металлы (металлы), металы (металл-ы), металлды, металлға; турист — туристар (турист-тәр), туристкә; промышленность — промышленносте (промышленность-те), промышленносе (промышленность-е), промыш-ленносткә; поезд — поезы (поезд-ы), поездар (поезд-дар), поездға; съезд — съезы (съезд-ы), съезда (съезд-да, съездға).**

## 4. ҒӘРӘП-ФАРСЫ ҺҮҘҘӘРЕ ЯҘЫЛЫШЫ

Беҙҙең орфографияла ғәрәп-фарсы теленән ингән һүҙҙәрҙең яҙылышы мәсьәләһе асыҡланып етмәгән. Хәҙерге орфографияла ғәрәп-фарсы һүҙҙәренең яҙылышы тураһында түбәндәге ҡағиҙә бирелә:

Революцияға тиклем үк башҡорт теленә көнсығыш телдәренән инеп, ныҡ үҙләшеп, һөйләшеү телендә төрлөсә әйтелеп йөрөй торған һүҙҙәр яҙылыштары яғынан түбәндәгесә өс төркөмгә бүленә:

1) ҡалын яҙыла торған һүҙҙәр: **тамам, донъя, ҡарар, талап, яуап, халыҡ, ҡабул, байрам;**

2) нәҙек яҙыла торған һүҙҙәр: **сәләм, сәләмәт, рәхәт, сәбәп, енәйәт, мөнәсәбәт, мәҡәлә, Зәкиә;**

3) ҡалын-нәҙек ижектәр менән яҙыла торған һүҙҙәр: **китап, мәғариф, тарих, иғтибар, Фатих, Фатима, Салих, синыф, сифат, ихтыяр, мөһабәт, Сания, Сафия, Суфия, Асия** (§ 36).

Был ҡағиҙә генә, әлбиттә, ғәрәп-фарсы һүҙҙәренең яҙылышын хәл итә алмай. Уға өҫтәмәләр, асыҡлауҙар индерелергә тейеш.

Ғәрәп-фарсы һүҙҙәре яҙылышы тураһында ике төрлө фекер бар: бер төркөм иптәштәр ғәрәп һүҙҙәрен үҙгәртмәйенсә яҙыу яғында торалар, ә икенселәре, халыҡ телендә әйтелгәнсә яҙыу кәрәк, тиҙәр. Беҙ ҙә шул һуңғы фекерҙе ҡеүәтләйбеҙ, сөнки был һүҙҙәр хәҙергә тиклем матбуғатта шул халыҡ телендә әйтелгәнсә яҙып йөрөтөлә, һәм был яҙылыш традицияға инеп бара. Икенсенән, улар күптән инеп, беҙҙең телдең фонетик закондарына ярашып, үҙләшеп киткән. Ләкин шулай ҙа уларҙың яҙылыш принциптарын билдәләргә тейешбеҙ. Матбуғатта бер үк төркөмгә ингән ғәрәп-фарсы һүҙҙәренең бер өлөшө бер принципта, ә икенсе өлөшө бөтөнләй икенсе принципта яҙып йөрөтөлә. Мәҫәлән, **Фәриҙә, мәдрәсә, әдәбиәт** һүҙҙәре *ҙ* менән, ә **Хәдисә, Сажидә, фидакәр** һүҙҙәре *д* менән яҙып йөрөтөлә.

Быларҙы бер ҡағиҙә аҫтына алырға кәрәк. Беҙҙең фекерсә, был төркөм һүҙҙәрҙе түбәндәге ҡағиҙә аҫтына алырға мөмкин булыр ине.

Ғәрәп-фарсы һүҙҙәренең уртаһында *ә, и, ө, р, й* өндәре һуңында килгән *д* өнө *ҙ* өнөнә әйләндереп яҙыла: **Һәҙиә, Ҡәҙриә, Бәҙәр, Бәҙри, ғәҙәт, мәҙрәсә, әҙәбиәт, ҡәҙим; Һиҙәйә, Һиҙиәт, Сажиҙә, Хәмиҙә, фиҙакәр, Халиҙә; Мәмдүҙә; мөҙир, ҡөҙрәт, Мәрҙән, Фәрзәнә; Хәйҙәр, Зөбәйҙә** һ. б.

Шунан һуң бер киҫәге *дин* йәки *гәбд* һүҙҙәренән торған ҡушма исемдәр төрлөсә — **Ғәйне*тдин*, Ғәйне*ддин*, *Ғәбд*ерәхмән,*Ғәпд*ерәхмән, *Ғәпт*ерәхмән, *Абд*рахман, *Эпд*ерәхман,** формаларында яҙып йөрөтөләләр. Был төркөм исемдәрҙең дә яҙылышын бер принципҡа ҡуйырға кәрәк. Беҙҙең фекерсә, был форма исемдәрҙәге *гәбд* һүҙендәге *б, д* яңғыраулы өндәр һаңғырау өндәргә әйләндерелеп, *п, т* хәрефтәре менән, *дин* һүҙле исемдәрҙә ҡатар торған яңғыраулы *д* өндәренең беренсеһе һаңғырау өнгә әйләндерелеп, *т* хәрефе менән яҙылырға тейеш: ***Ғәпт*елхәй, *Ғәпт*ерәхмән, *Ғәпт*улла; Нуре*тдин*, Ғәйне*тдин*, Сәйфе*тдин*** һ. б.

Ғәрәп-фарсы телдәренән ингән һүҙҙәрҙең күбеһе беҙҙең телдә сингармонизм законына буйһондороп, алғы йәки артҡы рәт һуҙынҡылар менән генә әйтеп йөрөтөлә һәм яҙыла: **сәләм, мөнәсәбәт, енәйәт, мәҡәлә, мәҡәл, тамам, ғазап (сәлам, мөнасәбәт, енайәт, мәҡалә, мәҡал, тәмам, ғәзап** түгел). Ҡайһы бер телселәр ғәрәп-фарсы һүҙҙәренең бөтәһен дә шулай башҡорт теленең сингармонизм законына буйһондороп, алғы йәки артҡы рәт һуҙынҡылары менән генә, йәғни нәҙек йәки ҡалын ижектәр менән генә яҙырға тәҡдим итәләр. Был фекер менән тулыһынса килешеп булмай, сөнки күп кенә хәлдәрҙә ижектең ҡалын йәки нәҙек әйтелеүе һүҙҙәрҙең мәғәнә айырмаһына бәйләнгән. Мәҫәлән, **Хәким** (исем) һәм **хаким** (сифат: **хаким** синыфтар) йәки **Ғәлим** һәм **ғалим** һ. б. Әлбиттә, быға тиклем башҡорт теленең сингармонизм законына буйһондоролмай, ҡалын-нәҙек ижектәр менән яҙып йөрөтөлгән һүҙҙәрҙең ҡайһы берҙәрен был законға буйһондороп яҙырға мөмкин, мәҫәлән, **мәғариф, фиҙаҡәр, әхлаҡ** түгел, ә **мәғәриф, фиҙәҡәр, әхләҡ.**

Ахыр сиктә, һүҙҙәрҙең һәм ялғауҙарҙың дөрөҫ әйтелешенә бәйләп, башҡорт әҙәби теленең дөрөҫ әйтелеше (орфоэпияһы) мәсьәләһен дә онотorға ярамай. Был мәсьәлә менән проф. Ж. Ғ. Киекбаев күптән бирле шөғөлләнде һәм, матбуғат биттәрендә мәҡәләләр менән сығыш яһап, башҡорт орфоэпияһы

буйынса кандидатлыҡ диссертацияһы яҡлау менән (1948 йыл) сикләнмәйенсә, 1964 йыл «Башҡорт әҙәби теленең дөрөҫ әйтелеше» тигән китап баҫтырып сығарҙы[105]. Китапта автор, дөйөм теоретик фонетика нигеҙенә таянып һәм уны башҡорт теленең фонетикаһына бәйләп, башҡорт орфоэпияһының төп мәсьәләләрен квалификациялы рәүештә дөрөҫ хәл иткән. Унда төп башҡорт һүҙҙәренең дөрөҫ әйтелеше тураһында ғына түгел, рус, ғәрәп, фарсы һүҙҙәренең һәм ялғауҙарының дөрөҫ әйтелеше тураһында ла тулы яуап табырға мөмкин. Хәҙер шул орфоэпик ҡағиҙәләрҙе практик рәүештә ғәмәлгә ашырырға кәрәк. Беҙҙә, ғәҙәттә, һүҙҙең әйтелеше менән яҙылышы араһындағы сикте айырмайҙар. Был инде дөйөм тел мәҙәниәтенең етешмәүенән килә.

## 5. ҠУШМА ҺҮҘҘӘР ЯҘЫЛЫШЫ

Беҙҙең орфографияла ҡушма һүҙҙәр яҙылышы хаҡында төп принциптар әйтелгән: ике тамырҙан йәки нигеҙҙән тороп та, бер нәмәгә исем йәки термин булып киткән һүҙҙәр ҡушып, ә беренсе һүҙ бер үк нәмәнең төрлө сифатын билдереп йәки предметтарҙың береһенән икенсеһен айырып килгән йәки һуңғы һүҙе зат ялғауы менән килгән ҡушма исемдәр, ике һүҙҙән торған ҡушма сифаттар, рәүештәр айырым яҙылалар: **олатай, ҡарағош, балғалаҡ, Ҡариҙел, Биктимер, ҡулъяулыҡ, аҡҡош;** ләкин: **ағас күпер, таш күпер, Аҡ диңгеҙ, Урта диңгеҙ, алма ағасы, ишек алды; ҡот осҡос, Бөтә Союз** (§ 37) һ. б.

Ләкин был принциптар ҡушма һүҙҙәр яҙылышында осраған бөтә осраҡтарҙы ла эсенә алып бөтөрә алмай. Шунлыҡтан практикала ҡушма һүҙҙәр яҙылышында буталсыҡтар, ҡыйынлыҡтар тыуа, мәғәнәләре яғынан бер үк төркөмгә ингән ҡушма һүҙҙәр төрлөсә яҙып йөрөтөлә.

Башҡорт телендә ҡушма һүҙҙәрҙең ҙур урын тотҡанын һәм уларҙың яҙылышындағы буталсыҡтарҙы күрһәтеү өсөн, уларҙы төркөмдәргә бүлеп, миҫалдар килтереп үтәйек:

а) бер ергә лә, бер ерҙә лә, бер заман, бер кем, бер кемгә лә, бер кем дә, бер килке, бер көйсә, бер көн, бер көнлөк, бер күңелдән, бер ҡайҙа ла, бер ҡайҙан да, бер ҡасан да, бер нисек тә, бер нисә, бер ни тиклем, бер нәмә, бер нәмә лә, бер рәттән, бер саҡ, бер тигеҙ, бер тиң, бер тиклем, бер төр, бер төрлө, бер төҫлө, бер туған, бер үҙе, бер юлы;

---

105 *Киекбаев Ж. Ғ.* Башҡорт әҙәби теленең дөрөҫ әйтелеше. Өфө, 1964.

б) ҡайһы бер, ҡайһы ваҡыт, ҡайһы саҡ;

в) һис бер, һис кем, һис булмаһа, һис ҡайҙа, һис нәмә, һис шикһеҙ;

г) һәр бер, һәр ваҡыт, һәр заман, һәр йыл, һәр кем, һәр көн, һәр ҡайҙа, һәр ҡайһыһы, һәр ҡасан, һәр саҡ, һәр төрлө, һәр хәлдә, һәр яҡлап;

д) шул саҡ, шул тиклем;

е) ярымсүл, ярымутрау;

ж) ҡобайыр, ҡолаҡбау, ҡоштабаҡ, ҡушҡанат, ҡушъяулыҡ, ҡырынташ, мамыҡбаш, меңъяпраҡ, өсмөйөш, сәмреғош, тутыйғош, һуйырташ, үҙағыш, башҡала, башмәҡәлә, балғалаҡ;

з) күкбаш, күкбүрек, ҡарабойҙай, ҡарағанат, ҡаракүл, аҡҡош, ҡарағош, ҡараҡалпаҡ, Ҡарурман (көй исеме), ҡыҙылғанат, ҡыҙылғойроҡ, ҡыҙылтүш, аҡбалыҡ, аҡсуҡ, аҡсәпсек, аҡсәскә, аҡтамыр, алағорт, зәңгәрбаш, зәңгәрсуҡ;

и) ҡарабаш турғай, ала ҡарға, ҡара гәрәбә, Аҡ диңгеҙ, Ҡара диңгеҙ, Ағиҙел, Ҡариҙел, ҡара ерек, ҡара ҡайын, ҡара ҡамыш, ҡара саған, ҡара таҡта, ҡара тал, ҡара тирәк, ҡара тополь, ҡара һырлан, аҡ ҡурғаш, ҡара ҡурғаш;

й) ҡара һауыты, ер еләге, ҡайын еләге, ағас күмере, бесәй тәпәйе, ҡуян ҡолағы, кәзә һаҡалы, ҡыҙыл кәзә һаҡалы, айыу алабутаһы, айыу емеше, кейәү ҡамсыһы;

к) Ямантау, Торатау, Нарыштау, Бурһыҡтау, Күмертау, Ҡалыутау, Ҡаратау, Ҡараташ, Ҡарауылтау, Ҡарауылтүбә (тау), Сәкәштау, Тағанташ (тау), Тимерарҡа (тау), Тумсаташ (тау), Ыйыҡтау, Юрматау, Ирәмәл (тау), Шихан (тау), Үтәмен (тау), Ҡуштау, Йөрәктау, Янғантау һ. б.

л) Асылыкүл, Атауҙы (күл), Мауыҙҙы (күл), Мулдаҡкүл, Оҙонкүл, Оло Асыуҙы (күл), Өргөн (күл), Суртанды (күл), Талҡаҫ (күл), Үләнде (күл), Әүешкүл, Ҡабан күле;

м) ни сәбәпле, ни нәмә, ни хаҡ, ни бары, ни тиклем, нишләп, ни эшләһәң, ни эшләр, ни эшләгәс, ни эшләне, ни эшләгән;

н) айырым-асыҡ, батырҙарҙың-батыры, буйҙан-буйға, йәнфарман, күкле-йәшелле, аҙыҡ-түлек, баш-баштаҡ, борон-борондан;

о) бушҡул, үҙаллы, үҙһүҙле, үҙһүҙлелек, аяғөҫтө, баштүбән, ике йөҙлө, ике йөҙлөлөк, ерле юҡҡа, кемуҙарҙан, яланҡул, бер ҡатлы (кеше), бер фекерҙән, бер һүҙҙән, бер ауыҙҙан;

п) йөрәк әрнеткес, баш ватҡыс, баш ҡатырғыс, ҡот осҡос, ҡот осоу;

р) ишек алды, Кавказ алды, һайлау алды, өй алды, тау алды, урман алды, байрам алды, ял алды;

с) күп милләтле, Бөтә Союз, бөтә донъя, бөтә Башҡортостан;

т) тәүбашлап, тәүтапҡыр, тәүтормош, тәүһыҙма, тәүшарт, тәү башта, тәү баштағы;

у) аҡһыл күк, ала сыбар, ҡан ерән, ҡара туры, ҡуйы ҡыҙыл, ҡыҙыл бурыл, ҡыҙыл һары, көрән һары, ҡара көрән, ҡоба туры;

ф) ауыл-ара, район-ара, халыҡ-ара, үҙ-ара;

х) әллә кем, әллә ни, әллә нимә, әллә ни тиклем, әллә тағы;

ц) ни эшләй, ни эшләгәс, ни эшләһә, ни эшләгән, ни эшләп.

Юғарыла килтерелгән ҡушма һүҙҙәр бөтәһе лә хәҙерге матбуғатта ҡабул ителгән формала яҙылғандар. Әгәр шул һүҙҙәрҙең яҙылышын тикшереп ҡараһаҡ, түбәндәге хәлде күрәбеҙ:

а) **бер күңелдән, бер фекерҙән, бер һүҙҙән, бер юлы** рәүештәре — айырым, ә **кемуҙарҙан, берауыҙҙан, бушҡул, аяғөҫтө, яланҡул, баштүбән** рәүештәре — тоташ;

б) **нишләп** — тоташ, **ни эшләһә, ни эшләгән** — айырым; **үҙаллы, үҙһүҙле** сифаттары — тоташ, ә **бер ҡатлы** (бер ҡатлы кеше), **ике йөҙлө** сифаттары — айырым;

в) **Ямантау, Янартау, Ҡарауылтүбә** (тау) — тоташ, ә **Нарыш-тау** дефис аша, **Тимер арҡа** (тау) — айырым; **ала ҡарға** — айырым, **алағорт** тоташ яҙып йөрөтөләләр.

г) **Ҡараҡалпаҡ** тигәндә *ҡ* өнө сиратлашмай, ә **ҡарағанат, ҡарағош, ҡыҙылғанат, алағорт, ҡыҙылғойроҡ** тигәндә *ҡ* өнө *ғ* менән сиратлашып яҙыла.

Ҡушма һүҙҙәр яҙылышы мәсьәләһе башҡорт тел белемендә генә түгел, ғөмүмән тюркологияла хәл ителмәгән ҡатмарлы мәсьәләләрҙең береһе булып иҫәпләнә. Был — беҙҙең телдә аналитик форма һүҙ яһалышының ҙур урын алыуынан килә.

Һуңғы ваҡытта ҡушма һүҙҙәрҙең яһалышына бәйле ғилми-теоретик хеҙмәттәр сыға башланы. Быға миҫал итеп, Б. О. Орузбаеваның «Ҡырғыҙ телендә һүҙ яһалышы» тигән хеҙмәте менән[106], С. Н. Муратовтың «Төрки телдәрендә тотороҡло һүҙбәйләнештәре» тигән хеҙмәтен[107] күрһәтеп китергә мөмкин.

Башҡорт тел белемендә лә ҡушма һүҙҙәр ғилми-теоретик яҡтан яҡшы уҡ тикшерелгән, тип әйтергә мөмкин. Профессор Н. К. Дмитриев үҙенең «Башҡорт теле грамматикаһы»нда[108]

---

[106] *Орузбаева Б. О.* Словообразование в киргизском языке (автореферат докторской диссертации). Фрунзе, 1964.

[107] *Муратов С. Н.* Устойчивые словосочетания в тюркских языках. М. 1961.

[108] *Дмитриев Н. К.* Башҡорт теле грамматикаһы. Өфө, 1950.

тәүбашлап ҡушма һүҙҙәргә ентекле ғилми классификация яһап, уларҙың яһалыу формаларын асып бирҙе. Был турала икенсе хеҙмәтте Т. М. Ғарипов яҙҙы. Ул үҙенең «Башҡорт телендә исем һүҙҙәрҙең яһалышы» тигән монографияһында башҡорт телендәге ҡушма һүҙҙәрҙең төрҙәренә төплө характеристика биргән[109]. Ҡушма һүҙҙәрҙең яҙылышын билдәләгәндә, әлбиттә, был хеҙмәттәрҙәге ғилми-теоретик положениеларҙы иҫәпкә алырға тейешбеҙ, һәр хәлдә, был мәсьәлә, үҙебеҙҙең телдең үҙенсәлектәренән сығып, ғилми нигеҙҙә хәл ителергә тейеш.

Ҡайһы берҙә беҙҙә ҡушма һүҙҙәрҙең яҙылышын, рус телендә ҡушып яҙыла икән, беҙҙә лә ҡушып яҙылырға тейеш тигән принциптан ғына сығып хәл итеүгә ынтылыуҙар осрай. Ләкин быныҡ менән килешеп булмай, сөнки рус теле менән башҡорт теле — икеһе ике системалы тел. Һәр бер телдең үҙенсәлектәре бар. Мәҫәлән, рус телендә һүҙҙәрҙе ҡушып яҙғанда, ике һүҙҙе бергә бәйләй торған өндәр килә (**шесть — месячный — *шести*-месячный**), беҙҙең телдә ул юҡ (алты айлыҡ); шунан һуң рус телендә бер һүҙ менән аңлатылған төшөнсәләр беҙҙә ике һүҙ менән аңлатылырға мөмкин (**гусятина — ҡаҙ ите**). Рус телендә бер генә һүҙ менән әйтелеүенә ҡарап, беҙ ҙә **ҡаҙите** тип ҡушып яҙһаҡ, дөрөҫ булмаҫ ине, сөнки бында беренсе һүҙ үҙенең анығлаусылыҡ мәғәнәһен юғалтмаған, иттең төрөн аңлата (**ҡаҙ ите, һарыҡ ите, һыйыр ите, ат ите** һ. б.). Шунан ҡушма һүҙҙәр яҙылышын билдәләгәндә, бер һүҙҙе үҙен генә айырып алып хәл итергә ярамай, ә формалаш һүҙҙәрҙе бөтәһен бергә алып хәл итергә кәрәк. Мәҫәлән, **биш йыллыҡ** һүҙен үҙен генә айырып алып, рус телендә лә ҡушып яҙыла, беҙ ҙә ҡушып яҙырға тейешбеҙ, тип хәл итһәк, дөрөҫ булмаҫ ине. Был формалағы башҡа һүҙҙәрҙе лә иҫкә алырға кәрәк: **өс йыллыҡ, ете йыллыҡ, ун йыллыҡ** (мәктәп), **алты айлыҡ** (курс), **егерме биш йыллыҡ** (эш), **Ленинградтың ике йөҙ илле йыллығы** һ. б. **Биш йыллыҡ** һүҙен ҡушып яҙғас, быларҙың бөтәһен дә ҡушып яҙырға кәрәк, сөнки һәр бер һүҙ өсөн айырым ҡағиҙә сығарып булмай (**егермебишкөнлөк, икейөҙиллейыллыҡ**), быларҙы ҡушып яҙғас, һандарҙы ла ҡушып яҙыу мәсьәләһе килеп тыуа: **егермебишкөнлөк эшем бар**, тигәндә, **егерме биш көнлөк** һүҙҙәрен ҡушып яҙабыҙ икән, **егерме биш** һүҙе айырым ҡулланылғанда ла ҡушып яҙылырға тейеш була.

---

[109] *Гарипов Т. М.* Башкирское именное словообразование. Уфа, 1959.

Ҡушма һүҙҙәр яҙылышы тураһында матбуғатта бер нисә мәҡәлә баҫылып сыҡты. Шулар араһында Ә. И. Харисовтың мәҡәләһе айырым иғтибарға лайыҡлы. Ул үҙенең «Яңы орфография проблемалары» тигән мәҡәләһендә[110] ҡушма һүҙҙәр яҙылышы мәсьәләһенә киң генә туҡтала. Авторҙың төп положениелары менән, нигеҙҙә, килешергә мөмкин.

Ҡушма һүҙҙәрҙең яҙылышын ниндәй принциптарҙан сығып билдәләргә тейешбеҙ? Хәҙер шул мәсьәләгә туҡталып үтәйек.

Төп принцип булып ҡушма һүҙҙең исем, сифат, алмаш йәки һандан килгән беренсе компоненттың үҙаллылыҡ мәғәнәһе, аныҡлаусылыҡ функцияһы һаҡланыу-һаҡланмауы иҫәпләнергә тейеш: әгәр ҡушма һүҙҙең беренсе компоненты үҙаллылыҡ мәғәнәһен, аныҡлаусылыҡ функцияһын һаҡламаһа, тоташ яҙырға, әгәр һаҡлаһа — айырым яҙырға кәрәк. Шуның менән бергә бында баҫымдың да әһәмиәте бар. Ҡушма һүҙҙәр бер баҫым менән әйтелә, һәм ул ҡушма һүҙҙең икенсе компонентына төшә (**ҡара́ , ҡо́ш — ҡара-ғош**). Ҡушма һүҙҙәрҙең тоташ йәки айырым яҙылыуында уларҙың компоненттарының ниндәй грамматик формала һәм ниндәй фонетик мөнәсәбәттә килеүҙәре лә билдәле бер роль уйнай. Мәҫәлән, беренсе компоненты һуҙынҡы йәки тартынҡы өнгә бөтөп, икенсе компоненты һуҙынҡы өн менән башланған йәки беренсе компонент аҙағында һәм икенсе компоненттың башында бер үк төрлө тартынҡылар килгән ҡушма һүҙҙәр тоташ әйтелергә һәм яҙылырға тиҙерәк бирелеүсән булалар (**аҡҡош, Ҡариҙел** һ. б.). Икенсе компоненты өсөнсө зат ялғауы менән йәки беренсе компонент сифат яһаусы *ҡы-ке, ғы-ге* ялғауҙары менән килгәндә, тоташ әйтелмәйҙәр ҙә, яҙылмайҙар ҙа; тоташ яҙып йөрөтөлә икән, ул ваҡытта һүҙҙең грамматик формаһы үҙгәрә, зат һәм сифат яһаусы ялғау төшөп ҡала: **ат борсағы, ат йыуаһы, айыу алабутаһы; билбау** (бил бауы), **алмағас** (алма ағасы); **өҫҡорма** (өҫкө ҡорма), **аръяҡ** (арғы яҡ), **алтөрән** (алғы төрән).

Ҡушма һүҙҙәрҙе тоташ яҙыу күп кенә ваҡытта һүҙҙең мәғәнәһен дифференциациялауға ла ярҙам итә. Мәҫәлән, **күк бүрек** (ниндәй бүрек? — **күк бүрек**), **күкбүрек** (үҫемлек исеме).

---

[110] *Харисов Ә.* Яңы орфография проблемалары. «Совет Башҡортостаны», 29.VI. 1960.

Ҡушма һүҙҙәр тоташ яҙылғанда, фонетик үҙгәрештәргә лә осрай, һүҙҙәрҙе ҡушҡас, ике һуҙынҡы араһында килгән йәки икенсе компоненттың башында килгән *ҡ-к* өндәре *ғ-г* менән сиратлаша һәм әйтелгәнсә яҙыла (**Аҡ иҙел — Ағиҙел, бер көн — бергән, ярыҡанат — ярғанат, ел ҡыуар — елғыуар**).

Һүҙҙәрҙе ҡушҡанда, өндәрҙең сиратлашыуынан башҡа тағы, ғөмүмән, һүҙҙәрҙең яҙылышы үҙгәрә. Мәҫәлән: **гөл-емеш — гөлйемеш, ир егет — ирйегет**. Был ҡағиҙә киләсәктә лә һаҡланырға тейешме, түгелме? Беҙҙең фекерсә, үҙгәртелергә тейеш, сөнки бер үк һүҙҙең ике төрлө яҙып йөрөтөлөүе мәктәптәрҙә уҡытыу процесын ҡыйынлаштыра. Мәктәптә уҡыусы балалар **емеш** һүҙен айырым яҙғанда ла **йемеш** тип яҙа башлайҙар. Шуға күрә ҡушма һүҙҙәрҙең компоненты булып килгәндә лә, һүҙҙәр үҙҙәренең элекке яҙылыштарын һаҡларға тейештәр (**гөл-емеш — гөльемеш, ир-егет — ирьегет**).

Юғарыла әйтелгән принциптарҙан сыҡҡанда, ҡушма һүҙҙәрҙең ҡайһылары тоташ, ҡайһылары айырым яҙылырға тейеш, шуларға туҡталып үтәйек.

## Тоташ яҙылырға тейеш

1) Кеше исемдәре, географик атамалар, ботаника, зоология, астрономия терминдары, ижтимағи-сәйәси терминдар һәм, ғөмүмән, яңы төшөнсә белдергәндә беренсе компоненты үҙенең тура мәғәнәһен юғалтҡан башҡа төрлө исемдәр: **Ағиҙел, Ҡариҙел, Ҡараяҡуп, Стәрлетамаҡ, Миәкәбаш, Ҡарайерек, Иштирәк, аҡҡош, бүрекбаш, ҡырғаяҡ, ҡыҙылғанат, Тимерғаҙыҡ, Башташ, Ҡараташ, Тағанташ, Тумалташ, Ҡарауылтүбә, Тимерарҡа** (тау исемдәре), **Ҡолтүбән** (күл исеме), **дүртмөйөш, өсмөйөш** һ. б.

Тау, күл һүҙҙәре бергә әйтеп йөрөтөлә торған географик атамалар ҙа тоташ яҙылалар: **Бурһыҡтау, Ыйыҡтау, Ҡаратау, Ҡарауылтау, Нарыштау, Сәкәштау, Тыратау, Ямантау, Оҙонкүл, Сыбаркүл, Ҡандрагүл, Яҡтыгүл, Янғантау** һ. б.;

2) бер төшөнсәне белдереү өсөн ике һүҙҙән ҡушып алған сифаттар, рәүештәр: **үҙһүҙле, икейөҙлө, берғатлы, атҡаҙанған, үҙаллы; сынъяһау, бушҡул, тәүбашлап, тәүтапҡыр, аяғөҫтө, баштүбән, кемуҙарҙан, яланаяҡ, яланҡул, бергән, берьюлы, бернисә, беррәүешле, беррәттән, берһүҙһеҙ, бертауыштан, бертигеҙ, бертуҡтауһыҙ, беръяҡлы, бертөрлө.**

### Айырым яҙылырға тейеш

1) Беренсе һүҙе үҙенең тура мәғәнәһен һаҡлап, бер үк нәмәнең төрөн белдереп, предметтарҙың береһенән икенсеһен айырып килгән ҡушма исемдәр: **аҡ ҡурғаш, ҡара ҡурғаш, ҡара ҡарға, ала ҡарға, Үрге Ҡыйғы, Түбән Ҡыйғы, Иҫке Бикмәт, Яңы Бикмәт.**

Диңгеҙ исемдәре, рус теле яҙылышына эйәртеп, традиция буйынса айырым яҙып йөрөтөләләр: **Аҡ диңгеҙ, Ҡара диңгеҙ, Ҡыҙыл диңгеҙ, Урта диңгеҙ, Эгей диңгеҙе;**

2) икенсе компоненты өсөнсө зат ялғауы менән килгән ҡушма исемдәр: **ҡара һауыты, ер еләге, ҡурай еләге, айыу көпшәһе;**

3) икенсе компоненты *алды, аръяғы, арты* һүҙенән килгән ҡушма исемдәр: **ишек алды, байрам алды, юбилей алды, һайлау алды, ял алды, Байкал аръяғы, Урал аръяғы, Кавказ арты;**

4) һуңғы компоненты *сы-се, со-сө* ялғаулы ҡушма исемдәр: **ижад итеүсе, эш башҡарыусы, ат ҡараусы;**

5) беренсе компоненты һандан торған ҡушма шартлы сифаттар: **биш йыллыҡ план, һигеҙ йыллыҡ мәктәп;**

6) беренсе компоненты төҫтөң төрҙәрен белдереп килгән ҡушма сифаттар: **аҡһыл күк, ала сыбар, ҡан ерән, ҡара туры, ҡоба туры, ҡуйы ҡыҙыл, ҡыҙыл бурыл, ҡыҙыл һары, көрән һары, ҡара көрән, алма сыбар, тимер күк;**

7) исем менән ҡылымдан ҡушып яһалған сифаттар: **йөрәк әрнеткес, ғәфү ителмәҫлек, баш ватҡыс, баш ҡатырғыс, ҡот осҡос;**

8) беренсе компоненты *бөтә* һүҙенән торған һүҙҙәр: **бөтә ил, Бөтә Союз, бөтә донъя, бөтә Башҡортостан;**

9) ҡушма һандар: **ун бер, ун биш, егерме алты;**

10) беренсе компоненты *һәр, һис, ҡайһы, әллә* һүҙенән торған ҡушма һүҙҙәр: **һәр бер, һәр ваҡыт, һәр заман, һәр йыл, һәр кем, һәр көн, һәр ҡайҙа, һәр ҡайһыһы, һәр ҡасан, һәр нәмә, һәр төрлө, һәр хәлдә, һәр яҡлап; һис бер, һис кем, һис ҡайҙа, һис нәмә, һис шикһеҙ; ҡайһы бер, ҡайһы ваҡыт, ҡайһы саҡ; әллә кем, әллә ни, әллә нимә, әллә тағы;**

11) Ҡушма ҡылымдар: **бара алмау, килә алмау, килеп инеү, ҡот осоу, баш ватыу, баш ҡатырыу.**

## Дефис аша яҙылалар

1) Һүҙҙе ҡабатлау юлы менән яһалған ҡушма һүҙҙәр — исемдәр, сифаттар, рәүештәр: **берәм-берәм, бергә-бергә, бер-бер, буй-буй, оҙон-оҙон, батыр-батыр, елбер-елбер, ҡытыр-ҡытыр, башма-баш, бермә-бер, мин-минлек, баш-баштаҡ, берҙән-бер, икәүҙән-икәү, әлдән-әле, батырҙарҙың-батыры, матурҙарҙың-матуры, белер-белмәҫ, беленер-беленмәҫ, урынлы-урынһыҙ, тейешле-тейешһеҙ, аҙ-маҙ, иләҫ-миләҫ, имеш-мимеш, тар-мар, илке-һалҡы, алпан-толпан, тирә-яҡ;**

2) йыйыу мәғәнәһен белдергән ҡушма исемдәр, сифаттар, рәүештәр: **иҫән-һау, аҡлы-ҡаралы, арымай-талмай, бөтмәҫ-төкәнмәҫ, буй-һын, имен-аман, тауыш-ғауға, газета-журнал, моң-зар, кәм-хур, сахра-дала, шик-шөбһә, аш-һыу, ашамлыҡ-эсемлек, баш-аяҡ, килем-китем, көн-төн, ҡош-ҡорт, ураҡ-сүкеш, юҡ-бар, ат-һый, йорт-ил, табаҡ-һауыт, йорт-йыһаз, тау-таш, ут-күҙ, аң-белем, ҡатын-ҡыҙ, ата-баба, ағай-эне, күҙ-ҡолаҡ, ҡан-йәш, уйын-көлкө, көньяҡ-көнсығыш, арыу-талыу, ел-дауыл, ҡарсыҡ-ҡорсоҡ, егет-елән, күрше-күлән, ҡунаҡ-маҙар, кеше-фәлән, арбаһы-ние, тауышы-ние, социал-демократ, Мамин-Сибиряк, Кәбирова-Сәитова, килеп-нитеп, килһә-нитһә, әйткәс-иткәс, барғас-иткәс;**

3) беренсе компоненты *обер-, лейб-, штаб-, вице-, экс-* һ. б. шундай һүҙҙәрҙән торған ҡушма исемдәр: **обер-мастер, унтер-офицер, лейб-медик, штаб-квартира, вице-президент, экс-чемпион;**

4) икенсе компоненты *ара* һүҙенән торған ҡушма сифаттар, рәүештәр: **ауыл-ара, район-ара, халыҡ-ара, үҙ-ара, ике-ара;**

5) үлсәү берәмектәрен аңлатҡан ҡушма исемдәр: **тонна-километр, киловатт-сәғәт, кеше-сәғәт, километр-сәғәт;**

6) махсус эш йорто йәки төрлө предмет, машина һәм уның киҫәктәрен, техник системаларҙы аңлатҡан ҡушма исемдәр: **хата-лаборатория, дизель-мотор, блок-система, вакуум-аппарат.**

Дөйөм алғанда, ҡушма һүҙҙәр яҙылышын шулай хәл итергә мөмкин. Әлбиттә, бында беҙ төп ҡағиҙәләрҙе генә әйтеп киттек. Орфографияның ҡағиҙәләрен асыҡлағанда, уларҙы тағы ла конкретлаштырырға мөмкин.

Ҡушма һүҙҙәрҙең дөрөҫ яҙылышына бәйләп, ахыр сиктә, шуны әйтергә кәрәк: юғарыла ҡушма һүҙҙәрҙең дөрөҫ яҙылышына ҡараған мәсьәләләрҙең күбеһе хәҙерге көндә, нигеҙҙә, хәл

ителгән тип әйтергә мөмкин. Мәçәлән, урта һәм юғары мәктәптәр өсөн сығарылған дәреслектәрҙә ҡушма һүҙҙәрҙең дөрөç яҙылышына ҡарата махсус бүлек бирелгән һәм бик күп ҡушма һүҙҙәрҙең (уртаҡлыҡ һәм яңғыҙлыҡ исемдәрҙең) йыйылмаһы менән бергә уларҙың дөрөç яҙылышына ҡарата ҡағиҙәләр бирелгән. Ул ҡағиҙәләр фәнни яҡтан нигеҙләнгән. Был турала V—VI кластар өсөн сығарылған «Башҡорт теле дәреслеге»ндәге һәм проф. Ж. Ғ. Киекбаевтың «Хәҙерге башҡорт теле» тигән китабындағы «ҡушма һүҙҙәр» бүлеге иғтибарға лайыҡлы.

5 – 1.0035.12

## ҺЫҒЫМТАЛАР

Октябрь инҡилабына тиклем башҡорт халҡы ғәрәп яҙыуы менән файҙаланған. Ғәрәп яҙыуы башҡорттарға X—XI быуаттарҙа ислам дине арҡыры килеп инә. Ғәрәп яҙыуы ҡомартҡылары Башҡортостанда XIV быуаттан башлап һаҡланып ҡалған. Быға боронғо ҡәбер таштарына яҙылған яҙыуҙар һәм төрлө ырыуҙар тарафынан төҙөп ҡалдырылған шәжәрәләр, һуңғараҡ төрлө юридик эш ҡағыҙҙары инә.

Ғәрәп яҙыуын, ғәрәп алфавитын ҡабул иткәнгә тиклем башҡорттар бүтән төр яҙыу ҡулланғандармы, юҡмы — был һорауға ҡырҡа яуап биреп булмай, сөнки быны раҫлаусы яҙма ҡомартҡылар быға тиклем әле табылғаны юҡ. Ләкин шулай булһа ла ҡайһы бер тарихи мәғлүмәттәр, мәҫәлән, башҡорттарҙың боронғо яҙмаһы булған төрки дәүләттәр менән (Болғар ханлығы һәм башҡалар менән) тығыҙ бәйләнештә булып, күп йылдар аралашып йәшәүе — башҡорттар ҙа ғәрәп яҙыуына тиклем башҡа төр яҙыу менән файҙаланманылармы икән, тигән уйға килергә мәжбүр итә. Был турала тикшеренеү дауам ителергә тейеш.

Октябрь инҡилабына тиклем прогрессив рус һәм башҡорт ғалимдары башҡорт теленең алфавитын булдырыу сараһын күрәләр. Былар араһында башҡорт телсеһе доктор М. Ҡулаев айырым урын алып тора. Ул 1912 йылда рус-грек графикаһы нигеҙендә башҡорт теленең 33 хәрефтән торған алфавитын төҙөй: ләкин ул ваҡыттағы шарттар доктор М. Ҡулаевҡа үҙенең эшен тормошҡа ашырырға мөмкинлек бирмәй. Шулай ҙа М. Ҡулаевтың был алфавиты башҡорт теленең революцияға тиклемге беренсе милли алфавиты булып иҫәпләнергә тейеш.

Октябрь инҡилабынан һуң башҡорт әҙәби теленең беренсе алфавиты һәм орфографияһы ғәрәп графикаһы нигеҙендә 1923 йылда төҙөлә. Быны төҙөгәндә, әлбиттә, башҡорт теленең ҡайһы бер үҙенсәлектәре иғтибарға алынған. Был алфавит шул

заманда башҡорт халҡы араһында үҙ телендә грамота таратыуҙа билдәле дәрәжәлә ыңғай роль уйнай. Уға реформа артынан реформа индереп торола, ләкин ни тиклем генә реформа индерелмәһен, ул башҡорт теленең фонетик системаһына тулыһынса яуап бирә алмай. Шуның менән бергә ул үҙләштереү өсөн дә бик ауыр була. Был турала Фридрих Энгельс та заманында әйтеп китә. Ул үҙенең Карл Марксҡа ебәргән бер хатында, «шул ҡәһәрле ғәрәп алфавиты булмаһа, фарсы теленең бөтә грамматикаһын 48 сәғәт эсендә өйрәнергә өҫтәмә алыр инем», тип яҙа ул[111].

Башҡа милли республикалар менән бер рәттән Башҡортостанда ла 1924 йылдарҙа уҡ башҡорт алфавитын латин графикаһы нигеҙендәге алфавитҡа күсереү тураһында хәрәкәт башлана, һәм шул йылда уҡ башҡорт теленең латин графикаһы нигеҙендәге беренсе алфавиты төҙөлә. 1928 йылдың 7 июлендә Башҡортостан Үҙәк Башҡарма Комитеты яңы алфавитты дәүләт алфавиты итеп алырға тигән ҡарар сығара һәм яңы алфавитҡа күсеүҙең биш йыллыҡ планы төҙөлә. Яңы алфавитҡа күсеү 1931 йылда тамам була. 1930 йылда башҡорт теленең латин алфавиты нигеҙендә төҙөлгән беренсе орфографияһы баҫылып сыға.

Ғәрәп алфавитынан латин графикаһы нигеҙендәге алфавитҡа күсеүҙең маҡсаты — халыҡҡа уҡыу өсөн еңел алфавит тыуҙырыуҙан тора ине. Ул ваҡытта шундай алфавит булып латин алфавиты иҫәпләнә ине.

Башҡорт яҙыуын латинлаштырылған алфавитҡа күсереү үҙ заманында прогрессив күренеш булды. Латинлаштырылған алфавит башҡорт халҡының тарихында, йәш башҡорт яҙыуының һәм мәҙәниәтенең үҫешендә ыңғай роль уйнаны. Латинлаштырылған алфавит ғәрәп алфавитына ҡарағанда үҙләштереү өсөн еңелерәк һәм яҙыу өсөн уңайлыраҡ булды. Уға күсеү арҡаһында йөҙәр меңләгән башҡорт йәштәре әсә телендә уҡырға һәм яҙырға тиҙерәк өйрәнделәр. Грамотаһыҙ оло йәштәге кешеләрҙең бик күбеһе грамотаға эйә булды.

Яңы индустрия, механизацияланған ауыл хужалығы, хеҙмәттең яңы ҡоралдары барлыҡҡа килеү, яңы төшөнсәләр, фәнни яңы асыштар һ. б. бик күп яңы һүҙҙәр һәм терминдар тыуҙырҙылар. Башҡорт телендә көн һайын ундарса яңы һүҙҙәр өҫтәлә барҙы.

---

[111] *Энгельс Ф.* Соч., том XXI, стр. 495—496. Письмо К. Марксу.

Бына шул шарттарҙа быға тиклем ҡулланып килгән латинлаштырылған алфавит шул ваҡыттың талаптарын бөтәһен дә ҡәнәғәтләндерә алмай, һәм ул телдең, яҙыуҙың артабан үҫеүенә тотҡарлыҡ яһай башлай. Башҡорт теленә көндән-көн инә барған рус һүҙҙәрен һәм интернациональ һүҙҙәрҙе дөрөҫ яҙыуға ҡамасаулай, рус теле менән башҡорт теленең бер-береһенә йоғонто яһауына яһалма кәртә була башлай. Шуға күрә 1940 йылда башҡорт теленең алфавиты рус графикаһы нигеҙендә төҙөлгән алфавитҡа күсерелә.

Яҙыуҙың график нигеҙен һәм шуға ярашлы рәүештә дөрөҫ яҙыу нормаларын йыш алмаштырып тороу, әлбиттә, халыҡтың грамоталылығын күтәреү эшенә билдәле дәрәжәлә ҡамасаулыҡ итте. Ләкин, шуға ҡарамаҫтан, ғәрәп хәрефтәре нигеҙендә төҙөлгән алфавит та, латин хәрефтәре нигеҙендә төҙөлгән алфавит та заманында башҡорт яҙыуының үҫешендә ыңғай роль уйнанылар.

Рус графикаһы нигеҙендә төҙөлгән алфавит башҡорт теленең үҙ һүҙҙәрен, шулай уҡ башҡорт теленә рус һәм башҡа телдәрҙән ингән һүҙҙәрҙе дөрөҫ яҙыуҙы тәьмин итте. Башҡорт халҡының рус халҡы һәм СССР-ҙың башҡа халыҡтары менән бәйләнешен нығытыуға, шулай уҡ уларҙың мәҙәниәт байлығына эйә булыуына ярҙам итте. Ул беҙҙең йәш үҫмерҙәрҙе мәктәптәрҙә рус алфавиты өҫтөнә тағы икенсе бер алфавитты — латинлаштырылған алфавитты өйрәнеүҙән ҡотҡарҙы.

Хәҙерге башҡорт алфавиты әсә теленең специфик үҙенсәлектәрен иҫәпкә алыу менән бергә беҙҙең илдәге туғандаш халыҡтарҙың алфавиттарын унификациялау, мәҙәниәтенең яҡынайыу талаптарынан тыуған бурыстарҙы ла иҫәпкә ала, сөнки беҙҙең яҙыу башҡорт һәм рус телдәрендә грамоталылыҡтың дөйөм нигеҙҙәрен тәьмин итеү менән бергә, беҙҙең илдә рус графикаһы менән файҙаланған туғандаш төрки халыҡтарҙың әҙәбиәтен уҡып барырға ла мөмкинлек бирә.

Башҡорт теленең хәҙерге орфографияһы төп фонетик принципта төҙөлгән, айырым һүҙҙәр график, фонематик-морфологик, дифференциацион һәм тарихи-традицион принциптарҙа яҙылалар.

Башҡорт теленең хәҙерге алфавиты һәм орфографияһы милли әҙәби телдең яҙма формаһын нормалаштырыуҙа ҙур ярҙам итте.

25 йыл ҡулланыу һөҙөмтәһендә дөрөҫ яҙыуҙың берҙәм милли нормаһын билдәләүҙә ҙур өлгәшеүҙәргә ирешелде.

Хәҙерге көндә ғәмәлдә булған башҡорт теле орфографияһының ҡағиҙәләре шул ҙур эштең йомғағы булып тора. Улар хәҙер традицияға инеп китте. Дөрөҫ яҙыуҙың берҙәм нормалары барлыҡҡа килде. Улар башҡорт милли әҙәби теленең үҙенсәлектәрен һәм уның үҫеш перспективаһын дөрөҫ сағылдыралар.

Башҡорт теленең бөгөнгө орфографияһы принципиаль үҙгәрештәр индереүҙе талап итмәй. Шулай ҙа уның ҡайһы бер ҡағиҙәләре, мәҫәлән, ҡушма һүҙҙәр, ғәрәп-фарсы һүҙҙәре һәм рус әҙәби теле аша ингән һүҙҙәрҙә ялғауҙарҙың яҙылышына бәйле ҡағиҙәләр бер ни тиклем асыҡлауҙы талап итә. Киләсәктә башҡорт теленең орфографияһын камиллаштырыу шул үрҙә күрһәтелгән ҡағиҙәләрҙе асыҡлау юлы менән барырға тейеш.

## РЕЗЮМЕ

Башкирский национальный литературный язык до Октябрьской революции не имел своего письменного оформления. Однако это не говорит об отсутствии у башкир до революции вообще письменности, как это ошибочно утверждается в некоторых историко-литературных статьях.

Башкиры начиная с XI века пользовались арабской письменностью. Наиболее ранние известные нам письменные памятники, которые свидетельствуют об этом, датируются XIV веком. Сюда относятся: надписи на надгробных камнях, башкирские летописи — тайралар, рукописные списки произведений отдельных башкирских авторов, народных преданий, эпоса, песен и солдатских баитов; документы о взаимоотношении башкир с ногайцами, документы о подданстве башкир Московскому государству, манифесты Пугачева, воззвание и обращение Салавата к башкирскому народу и др. Эти памятники написаны на языке поволжско-уральского тюрки, насыщенного элементами башкирского живого разговорного языка. Этот язык признавался русской администрацией как официальный письменный язык башкирского народа начиная с XVI века, т. е. после присоединения башкир к Московскому государству.

Пользовались ли башкиры до принятия арабского алфавита другой письменностью — установить трудно. Но некоторые косвенные исторические данные, например, пребывание Башкирии в составе других тюркоязычных государств, имевших свои системы письма, дают право предполагать, что башкиры до арабского алфавита могли пользоваться другой письменностью.

По утверждению древнекитайских историков, древние тюркоязычные племена, в частности гунны, уже во втором столетии до н. э. имели свою письменность. Как известно, гуннское

нашествие захватило наряду с другими территориями и южную часть современной Башкирии. Гунны вступали в этнические контакты с местным населением. Так, с гуннами связывают свое происхождение башкиры некоторых родов, которые ведут свою генеалогию от вождя гуннов Баламира. Весьма возможно, что гунны могли занести сюда свою письменность.

Волжские булгары, как теперь уже установлено, до арабской письменности в течение ряда столетий пользовались принесенной ими с юга рунической письменностью. В ту пору существовала тесная связь башкир с булгарами. Булгарская культура распространялась на соседние с Булгарией районы Башкирии. Надо полагать, что были и письменные связи, — башкиры, как и булгары, также могли пользоваться руническим письмом.

Первый алфавит и орфография башкирского литературного языка были разработаны на основе арабской графики в 1923 году. Арабский алфавит был очень сложным, в нем было множество диакритических знаков. Каждая буква имела несколько начертаний (в начале, середине и конце слова), кроме того, этот алфавит полностью не передавал фонетических особенностей башкирского языка. Так, в алфавите, составленном в 1923 году на основе арабской графики, для 10 гласных звуков, имевшихся тогда в башкирском языке (теперь их стало 13), было принято лишь 6 гласных букв. Правда, некоторые лингвисты, желая сохранить арабский алфавит, вносили в него отдельные реформы путем сокращения количества букв и прибавления дополнительных диакритических знаков для обозначения твердости и мягкости гласных и т. д. Однако алфавит остался таким же сложным, как был до революции, и не удовлетворял растущие требования языка в связи с развитием культуры народа. Поэтому башкирская письменность в 1930 году была переведена на латинизированный алфавит.

Перевод башкирской письменности на латинизированный алфавит в тот период был прогрессивным явлением. Благодаря тому, что он был более удобным для письма и более доступным для усвоения, сотни тысяч башкир быстро научились писать и читать на родном языке. В эти годы в Башкирии, в основном, была ликвидирована неграмотность; республика покрылась широкой сетью школ и культурно-просветительных учреждений; начали издаваться десятки газет и журналов — и в этом деле латинизированный алфавит тоже сыграл положительную роль.

Однако в дальнейшем и латинизированный алфавит оказался не в состоянии выразить все возрастающие языковые явления — он был не в состоянии передать все фонетические особенности современного башкирского языка. В связи с бурным развитием промышленности, сельского хозяйства, культуры в башкирский язык через русский вошло очень много политических и научно-технических терминов, а вместе с ними и новые звуки (**ц**, **щ** и т. д.). Произошло значительное изменение в фонетической системе современного башкирского языка. Латинизированный алфавит не обеспечил правильного усвоения новых слов, вошедших через русский язык. Отсутствие в латинизированном алфавиты букв **щ**, **ц**, **ю**, **я** искажало написание, а вместе с ним и произношение заимствованных из русского языка слов. Одна и та же буква в русском алфавите означала один звук, а в башкирском латинизированном алфавите — совершенно другой звук. Такое положение осложняло усвоение и родного и русского языков.

В связи с этим башкирская письменность в 1940 году была переведена на алфавит на основе русской графики.

Конечно, такая частая смена графических основ письма и соответственно с ней норм правописания до некоторой степени тормозила повышение грамотности населения, особенно в 20-х и 30-х годах, когда алфавит башкирского литературного языка основывался на арабской и латинской графике. Но несмотря на это, арабский и особенно латинизированный алфавит в свое время сыграли положительную роль в развитии башкирской письменности.

Переход башкирской письменности на алфавит на основе русского письма являлся важным этапом в ее развитии. Он имел огромное политическое и культурное значение. Переход на русскую графическую основу в условиях многонационального Советского государства обеспечил, с одной стороны, устранение алфавитного разнобоя в национальных школах, а с другой — улучшение преподавания и усвоение родного и русского языков.

Современный башкирский алфавит полностью учитывает специфические особенности его фонетической системы. Новое письмо не только обеспечивает общую основу грамотности на башкирском и русском языках, но и дает возможность читать литературу братских тюркоязычных народов нашей страны, пользующихся русской графикой.

Современная башкирская орфография построена на фонетическом принципе. Сущность его сводится к тому, что пишущий передает произносимые им звуки принятыми буквами в их основном значении: этим создается соответствие письма произношению. Этот принцип является основным в башкирском правописании. В отдельных случаях применяются и иные принципы: графический (для слов, заимствованных из русского языка или через русский язык в основной форме), фонематико-морфологический, дифференциационный.

Современный башкирский алфавит и орфография сыграли большую роль в нормализации письменной формы башкирского литературного языка. В результате 25-летней практики были достигнуты большие успехи в установлении единых норм правописания.

Главным итогом этой работы является ныне действующий кодекс основных орфографических правил башкирского литературного языка, а также положительные традиции, сложившиеся в процессе применения этих правил, в которых отразились как особенности, так и перспективы развития башкирского литературного языка.

Современная башкирская орфография принципиального изменения не требует, она нуждается лишь в улучшении и совершенствовании. Этот вывод был признан исторически обоснованным и правильным почти всеми участниками дискуссии по вопросам башкирской орфографии, которая широко развернулась на страницах башкирской прессы в 1957—1958 годах.

## ӘҘӘБИӘТ

### Китаптар, мәҡәләләр


*Абдуллаев И.* Азербайжан яҙыуы тарихы. Баку, 1951.

*Агамалы оглы С.* В защиту нового тюркского алфавита. Баку, 1927.

Алфавит Октября. Итоги введения нового алфавита среди народов РСФСР. М.-Л., 1934.

*Аристов Н. А.* Заметки об этническом составе тюркских племен и народностей // «Живая старина». Вып. III и IV, 1894.

*Баишев Т.* Башҡорт телендәге ҡайһы бер һүҙҙәр тураһында // «Башкортостан», 1937. 21/IV.

*Баишев Т.* Ғәрәп, латин, имлә // Белем, 1928. № 5—6.

*Бакаев Ф.* Орфография тураһында тәҡдимдәр // «Совет Башҡортостаны». 1957, 28/VIII.

*Батманов И. А.* Язык енисейских памятников древнетюркской письменности. Фрунзе, 1959.

*Батманов И. А., Барагачи З. Б., Бабушкин Г. Ф.* Современная и древняя Енисейка. Фрунзе, 1962.

*Башҡортостан яңалиф конференцияһының материал һәм ҡарарҙары.* Р. Мағазов редакцияһында. Өфө, 1928.

*Бернштам А. Н.* Очерки истории гуннов. Л., 1951.

*Бессонов А.* Букварь для башкир. Казань, 1907.

*Биишев Ә.* Һәр өндөң үҙ тамғаһы булһын // «Совет Башҡортостаны». 1957, 20/VIII.

*Бичурин Н. Я.* Собрание сведений о народах, обитавших в Средней Азии в древние времена. Т. 1. М.-Л., 1950.

*Бикчурин Мирсалих.* Начальное руководство к изучению арабского, персидского и татарского языков с наречиями бухарцев, башкир, киргизов и жителей Туркестана. Казань, 1859.

*Богородицкий В. А.* Очерки по языковедению и русскому языку. М., 1939.

*Буранғолов К.* Башҡорт әҙәби теле орфографияһының һәм грамматикаһының ҡайһы бер мәсьәләләре // «Башҡортостан», 1937. 14/I.

*Вилданов Ғ.* Эш атамалары. Өфө, 1927.

Вопросы культуры речи. I вып., 1955; II вып., 1959; III вып., 1961; IV вып., 1963. М., АН СССР, Институт русского языка.

*Җәмалетдин Вәлиди.* Татар теленең имла һәм сарыф-нәхү кагыйдәләре. Казан, 1915.

*Гарипов Т. М.* Башкирское именное словообразование. Уфа, 1959.

*Гаркави А. Я.* Сказания мусульманских писателей о славянах и русских. СПб., 1870.

*Гвоздев А. Н.* Основы русской орфографии. М., 1954.

*Георгиев В.* Происхождение алфавита // «Вопросы языкознания». 1952. № 6. С. 48—83.

*Горбушина Л. А., Яковлев В. Г.* Элементы языкознания и сведения из истории русского языка и письма. М., 1941.

*Гумилов Л. Н.* Хунну. М., 1960.

*Ғәбитов Хәбибулла.* Башҡорт имләһе тураһында тезистәр // «Башҡорт аймағы». 1926. № 2.

*Ғәбитов Хәбибулла.* Яңы башҡорт элифбаһының имләһе тураһында // «Башҡорт аймағы». 1927. № 3.

*Дирингер Д.* Алфавит (перевод с английского). М., 1963.

*Дмитриев Н. К.* Башҡорт теленең грамматикаһы. Өфө, 1950.

*Дәүләтшин Ғәббас.* Башҡорт теле һәм уны дөрөҫ яҙыу ҡағиҙәләре. Өфө, 1929.

*Еникеев Ғ.* 1910 йыл, 23 октябрь Думада тәгълим ғомуми һәм ибтидади мәктәпләр лаихәсен ҡараганда мөселман фракциясе әгъзалары нотыгы. Петербург, 1910.

*Ибраһимов Галимҗан.* Татар сарыфы. Казан, 1911.

*Ильминский Н. И.* О применении русского алфавита к инородческим языкам. Казань, 1883.

*Истрин В. А.* Некоторые вопросы теории письма // «Вопросы языкознания». 1953. № 4.

*Истрин В. А.* Развитие письма. М., 1961.

*Истрин В. А.* Возникновение и развитие письма. М., 1965.

*Истрина Е. С.* Нормы русского литературного языка и культуры речи. М.-Л., 1948.

*Исхаков Ф.* Введение нового алфавита в Башкирии // (в сборнике «Алфавит Октября»). М.-Л., 1934.

*Ишбулатов Ғ.* Орфография һәм лексика хаҡында фекерҙәр // «Совет Башҡортостаны». 1957, 4/XII, 7/XII.

*Ишбулатов Н.* Орфография хаҡында фекерҙәр // «Совет Башҡортостаны». 1957, 19/X.

*Йомагужин Ә.* Орфография хаҡында бер-ике һүҙ // «Совет Башҡортостаны». 1958, 18/III.

*Йосопов Х.* Орфографияның ҡайһы бер мәсьәләләренә ҡарата // «Совет Башҡортостаны». 1957. 17/XII.

*Камал Сәлях.* Мохтасар имла мөгаллиме. Казан, 1915.

*Катаринский.* Букварь для башкир. Оренбург, 1908.

*Каховский В. Ф.* Была ли письменность у чувашей в древности? // «Ученые записки научно-исследовательского института ЯЛИЭ при Совете Министров Чувашской АССР». Вып. 21, 1962.

*Киекбаев Ж. Ғ.* Орфографияны яҡшыртыуҙың ҡайһы бер мәсьәләләре // «Совет Башҡортостаны». 1957. 25/VIII.

*Киекбаев Ж. Ғ.* Башҡорт әҙәби теленең дөрөҫ әйтелеше. Өфө, 1964.

*Киекбаев Ж. Ғ.* Хәҙерге башҡорт теле. Өфө, 1966.

*Киекбаев Ж. Ғ.* Хәҙерге башҡорт теленең лексикаһы һәм фразеологияһы. Өфө, 1966.

*Коллектив.* Вопросы русской орфографии. М., 1964.

*Коллектив.* Орфография собственных имен. М., 1965.

*Коллектив.* Очерки по истории Башкирской АССР. Ч. 1. Т. I. Уфа, 1950.

*Кочергина В. А.* Краткий очерк истории письма. М., МГУ, 1955.

*КПСС в резолюциях и решениях съездов, конференций и Пленумов ЦК.* Ч. I, изд. 7. М., 1954.

*Крючков С. Е.* Вопросы современной русской орфографии. М., 1952.

*Крючков С. Е.* О спорных вопросах современной русской орфографии. М., Учпедгиз, 1952.

*Курбатов Х.* Татар теленең алфавит һәм орфография тарихы. Казан, 1960.

*Кәримов Ф.* Мөселманнарга чит хәрефләр кабул итү мәсьәләләре // «Шура», 1911. № 4.

*Кузыев Р.* Башҡорт яҙыуын рус алфавитына күсереү тураһындағы мәсьәләгә ҡарата // «Ҡыҙыл Башҡортостан». 1939. 5/VIII.

*Кулаев М. Н.* Основы звукопроизношения и азбука для башкир. Казань, 1912.

*Кулаев М. Н.* Альпей. Казан, 1917.

*Лепёхин И.* Продолжение дневных записок путешествия академика и доктора медицинских наук Ивана Лепехина по разным провинциям Российского государства в 1770 г. СПб., 1802.

*Лоукотка Ч.* Развитие письма (перевод с чешского). М., 1950.

*Макаев Хөсәен.* Мохтасар яңа сарыф төрки. Казан, 1912.

*Малов С. Е.* Памятники древнетюркской письменности. М.-Л., 1951.

*Малов С. Е.* Енисейская письменность тюрков. М.-Л., 1952.

*Матусевич М. И.* Введение в общую фонетику. М., 1959.

*Мелиоранский П. И.* Памятник в честь Кюль-Тегина. «Записки восточного отделения Русского археологического общества». Т. XII, 1899.

*Миңнеғәлиев Ислам.* Башҡорт әҙәби теле орфографияһының ғилми принциптары тураһында // «Ҡыҙыл Башҡортостан». 1940. 10/XII.

*Моратов Ә.* Яңы орфография башҡорт теленең үҙенсәлектәренә яуап бирһен ине // «Совет Башҡортостаны». 1958. 9/II.

*Муратов С. Н.* Устойчивые словосочетания в тюркских языках. М., 1961.

*Мусаев К. М.* Алфавиты языков народов СССР. М., 1965.

*Назаров А. Н.* Некоторые вопросы методики орфографии. Пенза, 1955.

*Насилов В. М.* Язык орхоно-енесейских памятников. М., 1960.

Орфографический словарь русского языка под редакцией С. И. Ожегова и А. Б. Шапиро. М., 1956.

*Өмөтбаев Мөхәмәтсәлим.* Татар нәхүсенең мохтасары. Казан, 1901.

Почему мы, башкиры, решили заменить арабский алфавит для баш. письменности латинским и почему мы имеем отдельный свой проект нового алфавита // «Башҡорт аймағы». 1926. № 2.

*Пигуловская Н. В.* Сирийский источник VI в. о народах Кавказа. ВДИ, 1939. № 1(6).

*Псянчин В. Ш.* История формирования башкирского литературного языка. Автореферат на соискание ученой степени кандидата филологических наук. Казань, 1965.

*Пумянский А. Л.* Английский литературный язык (связь произношения и правописания). М., 1963.

*Реформатский А. А.* Введение в языкознание. М., 1947.

*Рәмиев Сәгыйть.* Мөхәмммәтшакир вә Мөхәммәтзакир Рәмиевлар тарафыннан иҗат вә тәрсим улынган айырым-айырым хәрефләргә бер нәзар // «Идел», 1911. 3/VI.

*Рәмиев Сәгыйть.* Безгә тәкмил вә ислахе хәреф кирәкме? Әллә бөтенләй тәбдил үк кирәкме? // «Идел». 1911. 5/VII.

*Рәмиев Сәгыйть.* Ник буташтыралар икән? // «Идел», 1912. 29/V.

*Рәхим Гали, Газиз Г.* Татар әдәбияты тарихы. Беренче жилд. Борынгы дәвер, беренче бүлек. Казан, 1924.

*Рәшит Юлдаш.* Хәреф үҙгәртеү мәсьәләһе // «Белем». 1924. № 1—2.

*Сабашев Рауил.* Башҡорт әҙәби теле орфографияһының ҡайһы бер мәсьәләләре тураһында // «Башҡортостан». 1937. 1/IV.

*Савенков И. Т.* О древних памятниках изобразительного искусства на Енисее // «Труды XIV археолог, съезда». Т. I.

*Мөгаллим Садыйков Фатих.* Язу кагыйдәләре. Казан, 1908.

Стенографический отчет первого пленума Всесоюзного Центрального Комитета нового тюркского алфавита, заседавшего в Баку от 3 до 7 июня 1927 года. М., 1927.

*Сәгъди Габдерахман.* Кешелек дөньясында тел, әдәбият, язу һәм аларның тарихи үсүләре. Казан, 1926.

*Сәитбатталов Ғ.* Фәнни нигеҙҙә төҙөлгән башҡорт теле орфографияһы өсөн // «Совет Башҡортостаны». 1957. 11/X.

*Толстов С. П.* Монеты шахов древнего Хорезма и древнехорезмийский алфавит // ВДИ, 1938. № 4.

*Толстов С. П.* Древний Хорезм. М., 1948.

*Убрятова Е. И.* Некоторые вопросы графики и орфографии письменности языков народов СССР, пользующихся алфавитами на русской основе. М., 1959.

*Уфа вилаяте земствосында 1915 ел июнь 20—27 сендә мөселман мәктәпләренә дәреслекләр сайлау өчен ясалган киңәш мәжлесенең карарлары вә анда укылган докладлар.* Өфө, 1916.

*Фатихов Ә.* Орфографияның принциптәре хаҡында // «Совет Башҡортостаны», 1958. 15/II.

*Харисов Ә.* Башҡорт яҙма теленең бөгөнгө хәле ҡайһы бер асыҡламалар һорай // «Башҡортостан». 1936. 20/XII.

*Харисов Ә., Камалов Н.* Яңы орфографияның ҡайһы бер мәсьәләләренә ҡарата // «Ҡыҙыл Башҡортостан». 1940, 28/IX.

*Харисов Ә.* Яңы орфография проблемалары // «Совет Башҡортостаны», 1960. 26/V1, 29/V1, 30/VI.

*Шапиро А. Б.* Русское правописание. Изд. 2. М., 1961.

*Шмидт.* Опыт мандаринской грамматики. Владивосток, 1902.

*Шараф Галимджан.* К вопросу о принятии для тюркских народностей латинского шрифта. Казань, 1926.

*Щерба Л. В.* О разных стилях произношения // Записки неофилологического общества. Пг., 1916.

*Щерба Л. В.* Фонетика французского языка. М., 1948.

*Щербак А. М.* Несколько слов о приемах чтения рунических надписей, найденных на Дону // «Советская археология». XIX, 1954.

*Әмиров М.* Ғәрәп һәм фарсы һүҙҙәренең яҙылышына ҡарата. «Совет Башҡортостаны». 1957. 17/VIII.

*Әхмәр Ҡ.* Башҡорт башланғыс мәктәптәре уҡыусыларының типик орфографик хаталары һәм орфография уҡытыу методикаһы. Өфө, 1935.

*Әхмәр Ҡ.* Башҡорт әҙәби теле грамматикаһы һәм орфографияһының ҡайһы бер мәсьәләләре // «Башҡортостан». 1936. 16/XII.

*Әхмәр Ҡ.* Башҡорт әҙәби теле орфографияһына индерелгән ҡайһы бер асыҡлауҙар тураһында // «Ҡыҙыл Башҡортостан». 1941. 31/XII.

*Әхмәр Ҡ.* Башҡорт әҙәби теленең орфография һүҙлеге. Өфө, 1942.

*Әхмәр Ҡ.* Башҡорт әҙәби теленең орфография һүҙлеге. М., 1952.

*Әхмәр Ҡ.* Орфографиябыҙҙың ҡайһы бер мәсьәләләре // «Совет Башҡортостаны». 1957. 30/VII.

*Әхтәмов Мохтар.* Беҙҙең тәкдимдәр // «Совет Башҡортостаны». 1957. 30/X.

*Әхтәмов Х.* Кагыйдә китабы. Казан, 1908.
*Энгельс Ф.* Происхождение семьи, частной собственности и государства. М., 1952.
*Юлдашев А. А.* К проблеме формирования башкирского национального языка // Сб. «Вопросы башкирской филологии». М., 1959.
*Янина С. А.* Джучидские монеты из раскопок сборов Куйбышевской экспедиции в Булгарах в 1957 году. М., МИА. № 80, 1960.

**Башҡорт әҙәби теле алфавиты һәм орфографиялары**

Башҡортостан Мәғариф Халыҡ Комиссарлығы эргәһендәге ғилми мәркәздең хәреф һәм имлә лаихаһы // «Яңы юл». 1924. № 1.
Башҡортса яҙыу ҡоралы. Өфө, 1924.
Башҡорт теле имләһе. Өфө, 1925.
Яңы башҡорт әлифбаһы (проект). Башҡортостан яңалиф комитеты нәшере. Өфө, 1927.
1928/29 уҡыу йылында ғәрәп хәрефтәре менән баҫыла торған дәреслектәр өсөн ваҡытлы орфография ҡағиҙәләре // «Белем». 1928. № 5—6.
Башҡорт теленең имләһе. Өфө, 1930.
Башҡорт әҙәби теленең орфографияһы. Өфө, 1934.
Башҡорт әҙәби теленең орфографияһы (яңы проект). Өфө, 1938.
Башҡорт теле орфографияһы. Өфө, 1939.
Башҡорт әҙәби теленең алфавиты һәм орфографияһы. Өфө, 1940.
Башҡорт әҙәби теленең алфавиты һәм орфографияһы. Өфө, 1942.
Башҡорт әҙәби теленең алфавиты һәм орфографияһы. Өфө, 1951.

## АРХИВ МАТЕРИАЛДАРЫ

Башҡортостан Мәғариф Халыҡ Комиссариаты эргәһендәге Ғилми мәркәз материалдары. Башҡортостан Үҙәк дәүләт тарих архивы. Фонд Р-798. №684, 687, 685, 686, 689, 904, 906, 908, 1275, 1289,1283, 1505,1506,1507, 2126, 1792, 1939, 2486.
СССР Фәндәр академияһы Башҡортостан филиалының архивы. Фонд 3. Опись 9. № 6, 19, 20, 39, 45, 47, 48 49, 52.

## Ҡ. З. ӘХМӘРОВТЫҢ ХЕҘМӘТТӘРЕНЕҢ БИБЛИОГРАФИЯҺЫ

### *1929*

1. Фәндәр Академияһы ярҙамында. Беренсе тапҡыр киң күләмдә ғилми-тикшеренеү эштәре үткәрәбеҙ.

При содействии Академии наук. Впервые в широком плане проводим научно-исследовательские работы. — «Башҡортостан», 1929, 28 июня.

2. Фәндәр Академияһының Башҡортостан экспедицияһы әтрәттәренең 1928-се йылдың йәйендә эшләгән эштәре.

Работа отрядов Башкирской экспедиции Академии наук летом 1928 года.— «Башҡорт аймағы», 1929, № 7, с. 1—8.

### *1930*

3. А. Ф. Рязанов. — «Краеведческий сборник», 1930, № 3—4, с. 120—123.

О жизни и научной деятельности члена Общества по изучению Башкирии А. Ф. Рязанова.

### *1931*

4. 1907 йылда элекке Өфө губернаһы Бөрө өйәҙендә крәҫтиәндәр ҡуҙғалышы.

Крестьянские восстания в 1907 году в Бирском уезде Уфимской губернии.—«Аймаҡ», 1931, № 1, с. 33—38.

### *1932*

5. Әсә теленән эш китаптары араһында.

Среди книг для практических занятий по родному языку.— «Культура революцияһы», 1932, № 2—3, с. 63—67.

6. КЙМ һәм ФЗЙМ өсөн әсә теле программаһы (проект).

Программа по родному языку (проект) для ШКМ и ШФЗМ. Отв. редактор Г. Юсупов. Уфа, Башгиз, 1932, 40 с. (БНКПр. Научно-мето-

дический сектор). Соавторы-составители: Г. Сагадиев, Г. Давлетшин, З. Шакиров, Ю. Гареев, А. Мансуров, У. Хөсни.

7. Башҡорт теле дәреслеге, 1 киҫәк. Башланғыс курс.

Учебник башкирского языка, ч. 1. Начальный курс. Уфа, Башгосиздат, 1932, 103 с.

В конце учебника дан башкирско-русский словарь (поурочно), с. 94—103. Соавтор: З. Шакиров.

### *1933*

8. Башланғыс мәктәптәр өсөн башҡорт теле дәреслеге.

Учебник башкирского языка для начальных школ. (Грамматика и правописание), ч. 3. Учебный год IV. Отв. ред. С. Ямалиев. Уфа, Башкнигоиздат. 1933, 44 с.

9. Грамматика, 2 киҫәк. Синтаксис.

Грамматика, ч. 2. Синтаксис. Учебник для средних школ. Под ред. С. Ямалиева. Уфа, Башгосиздат, 1933, 122 с.

Рец.: Гареев Ю. — «Культура революцияһы», 1934, № 2, с. 35—39.

10. Тел тураһында Ленин һәм Сталин.

Ленин и Сталин о языке. Отв. ред. Ю. Г. Гареев. Уфа, Башгиз. 1933, 20 с.

11. ФЗЙ һәм КЙМ өсөн башҡорт теле программаһы (V—VIII төркөм).

Программа по башкирскому языку для ШФЗМ и ШКМ (V—VIII группы). Отв. ред. Гареев. Уфа, Башгоскнигоиздат. 1933, 18 с. (БНКПр. Научно-методический сектор).

12. Башҡорт теле.

Башкирский язык. Учебник для ШКМ и ШФЗМ. Отв. ред. Х. Абдрашит. Уфа, Башгосиздат. 1933, 145 с. Соавторы: Г. Хабиров. Х. Абдрашит.

### *1934*

13. Башланғыс башҡорт мәктәптәрендә орфографик хаталар. Орфографические ошибки в башкирских начальных школах. «Башҡортостан». 1934, 4 ноября.

14. Башҡорт теле дәресе (конспект).

Урок башкирского языка (конспект). — «Культура революцияһы». 1934, № 6—7, с. 36—38.

15. Башҡорт теле дәреслеге.

Учебник башкирского языка. Грамматика и правописание, ч. 3. Для 4 классов. Испр. 2-е изд. Отв. ред. Абдрашитов. Уфа, Башгосиздат. 1934, 57 с.

16. Грамматика, 2 киҫәк. Синтаксис.

Грамматика, ч. 2. Синтаксис. Учебник для 6—7 классов средней школы. Испр. 2-е изд. Отв. ред. М. Абдуллин. Уфа, Башгосиздат. 1934, 127 с.

17. Башҡорт теле.

Программа-задания (по башкирскому языку) для заочных педтехникумов. Отв. редактор Давлетшин. Уфа, Башгосиздат. 1934, 41 с. (Соавтор: У. Хусни).

### *1935*

18. Орфографик хаталар һәм орфография уҡытыу юлдары. Орфографические ошибки и методы преподавания орфографии. Отв. ред. Т. Баиш. Уфа, Башгиз, 1935, 46 с. (Башк. научно-исслед. ин-т педагогики).

19. Башҡорт теле дәреслеге.

Учебник башкирского языка. Грамматика и правописание, ч. 3. Для 4 классов. Испр. 3-е изд. Отв. ред. X. Абдрашитов. Уфа, Башгосиздат. 1935, 54 с.

20. Грамматика, 2 киҫәк. Синтаксис. Грамматика, ч. 2. Синтаксис. Учебник для 6—7 классов средней школы. Испр. 3-е изд. Отв. ред. X. Абдрашит. Уфа, Башгосиздат. 1935, 102 с.

### *1936*

21. Башҡорт телендә тыныш билдәләре.

Знаки препинания в башкирском языке. Отв. ред. У. Хусни. Уфа, Башгиз.1936, 28 с.

22. Башҡорт әҙәби теленең ҡайһы бер мәсьәләләре.

Некоторые вопросы башкирского литературного языка.— «Башҡортостан». 1936, 16 декабря.

23. Башҡорт теле программаһы (V—VIII синыфтар).

Программа башкирского языка (V—VIII классы). Отв. ред. С. Ямалиев. Уфа, Башгиз. 1936, 21 с. (БНКПр. Управление начальных и средних школ). Соавторы: А. Мансуров, Ю. Гареев.

### *1939*

24. Башҡорт теле грамматикаһының ҡайһы бер мәсьәләләре. Некоторые вопросы грамматики башкирского языка.— «Башҡортостан уҡытыусыһы». 1939, № 6, с. 59—65; № 8—9, с. 77—87.

25. Рец.: Ә. Мансуров. Грамматика, 1 киҫәк. Морфология. Учебник для средних школ. 4-е изд. Уфа, 1938, 112 с. — «Башҡортостан уҡытыусыһы». 1939, № 1, с. 62—67.

### *1940*

26. Ҡ. Әхмәр иптәштең «Башҡорт теленең синтаксис һәм пунктуацияһы» тигән темаға доклады буйынса Бөтә Башҡортостан I ғилми тел конференцияһының резолюцияһы (проект).

Резолюция (проект) по докладу товарища К. Ахмерова на тему: «Синтаксис и пунктуация башкирского языка», сделанный им на I Всебашкирской научной конференции по языку. Уфа, 1940, 5 с.

27. Орфографик, пунктуацион, стилистик хаталар һәм улар өҫтөндә эшләү. Орфографические, пунктуационные, стилистические ошибки и работа над ними.— «Материалы Всебашкирской научно-педагогической конференции учителей». Уфа, Башгосиздат. 1940, с. 97—113.

28. Орфографик, пунктуацион, стилистик хаталар һәм улар өҫтөндә эшләү.

Орфографические, пунктуационные, стилистические ошибки и работа над ними. — «Башҡортостан уҡытыусыһы». 1940, № 7, с. 50—62.

29. Ярҙамлыҡ исемдәр.

Служебные имена.— «Ҡыҙыл Башҡортостан». 1940, 27 сентября.

## *1941*

30. Башҡорт теле. Педучилищелар өсөн дәреслек.

Башкирский язык. Учебник для педагогических училищ. (Фонетика, морфология, синтаксис, элементы языкознания и история языка). Отв. ред. Т. Г. Баишев. Уфа, Башгосиздат. 1941, 198 с.

31. Башҡорт әҙәби теле орфографияһына индерелгән ҡайһы бер асыҡлауҙар тураһында.

О некоторых уточнениях, введенных в орфографию башкирского литературного языка.—«Ҡыҙыл Башҡортостан». 1941, 31 декабря.

32. Башҡортостан беренсе ғилми тел конференцияһының ҡыҫҡаса йомғаҡтары.

Краткие итоги Первой башкирской научной конференции по языку.— «Башҡортостан уҡытыусыһы». 1941, № 1, с. 12—17.

## *1942*

33. Ишбулатов Ғ. И., Баишев Т. Ғ. Уҡыу китабы. 2 киҫәк.

Книга для чтения, ч. 2. Для второго класса начальной школы. Отв. ред. К. Ахмеров. Уфа, Башгосиздат. 1942, 154 с.

34. Башҡорт әҙәби теленең орфография һүҙлеге.

Орфографический словарь башкирского литературного языка. Под ред. А. Кутушева, Г. Ишбулатова. С прил. статьи «Основные правила правописания». Уфа, Башгосиздат. 1942, 191 с. (Башк. научно-исслед. ин-т языка, лит-ры и истории им. М. Гафури при СМ БАССР).

## *1943*

35. Актуальные вопросы башкирского языка.— «Красная Башкирия». 1943, 21 декабря.

36. Еңелмәҫ ил. Әҙәби йыйынтыҡ.

Непобедимая страна. Литературный сборник для учащихся 1 и 2 классов начальной школы. Под ред. Г. И. Ишбулатова. Уфа, Башгосиздат. 1943, 35 с. (Сост. К. З. Ахмеров).

37. Үлем фашизмға! Әҙәби йыйынтыҡ.

Смерть фашизму! Литературный сборник для учащихся 3—4 классов начальной школы. Под ред. Г. Ишбулатова. Уфа, Башгосиздат. 1943, 39 с. (Сост. К. Ахмеров).

### *1944*

38. Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында башҡорт теле.

Башкирский язык в годы Великой Отечественной войны.— «Ҡыҙыл Башҡортостан». 1944, 11 февраля.

39. «Ҡыҙыл Башҡортостан» газетаһы һәм башҡорт әҙәби теле.

Газета «Кызыл Башкортостан» и башкирский литературный язык.— «Ҡыҙыл Башҡортостан». 1944, 14 сентября.

### *1945*

40. Башҡорт теле грамматикаһы, 2 киҫәк. Синтаксис.

Грамматика башкирского языка, ч. 2. Синтаксис. Учебник для 6—7 классов семилетней и средней школы. Уфа, Башгосиздат. 1945, 159 с.

### *1948*

41. Башҡорт әҙәби теле — Бөйөк Октябрь емеше.

Башкирский литературный язык — детище Великого Октября. — «Ҡыҙыл Башкортостан». 1948, 9 января.

42. Башҡорт әҙәби теленең лексик нормаһы һәм терминология мәсьәләләре. Вопросы лексической нормы и терминологии башкирского литературного языка.— «Октябрь». 1948, № 7, с. 49—57.

43. Башҡорт теле грамматикаһы, 2 киҫәк. Синтаксис.

Грамматика башкирского языка, ч. 2. Синтаксис. Учебник для 6—7 классов семилетней и средней школы. Испр. 2-е изд. Уфа, Башгосиздат. 1948, 203 с.

Приложения: I. Знаки препинания, с. 185—196; II. Башкирские и русские синтаксические термины, с. 97—100.

44. Формирование и развитие башкирского литературного языка. М., 1948, 33 с.

45. Русско-башкирский словарь под ред. проф. Н. К. Дмитриева, К. З. Ахмерова, Т. Г. Баишева. С прил. кратк. очерка башк. грамматики (Н. К. Дмитриев) МГИС, 1948, 960 с. (Научно-исслед. ин-т языка, лит-ры и истории им. М. Гафури при СМ БАССР). (Соавторы-

составители: Т. Г. Баишев, А. М. Бикмурзин, Мажит Бурангулов, Г. И. Ишбулатов, А. Ш. Кутушев, Л. И. Харисов, Махмут Хафизов).

Рец.: Усманов А. — «Красная Башкирия». 1948, 17 апреля; Терегулова Р. Н. — там же, 1948, 12 ноября.

## *1949*

46. А. С. Пушкин әҫәрҙәре башҡорт телендә.

Произведения А. С. Пушкина на башкирском языке.— «Ҡыҙыл Башҡортостан». 1949, 5 июня.

47. Произведения великого поэта (А. С. Пушкина) на башкирском языке.— «Красная Башкирия». 1949, 5 июня.

48. Мансуров Ә. Башҡорт теле грамматикаһы, 1 киҫәк.

Грамматика башкирского языка, ч. 1. Учебник для 5 и 6 классов семилетней и средней школы. Под ред. К. Ахмерова. Уфа, 1949. 242 с.

49. Рец.: Дмитриев Н. К. Грамматика башкирского языка. М.— Л., 1948, 276 с. (АН СССР. Ин-т языка и мышления). — «Красная Башкирия». 1949, 18 февраля. Соавтор: Р. Терегулова.

## *1950*

50. Башҡорт әҙәби телен артабан камиллаштырыу бурыстары. Задачи дальнейшего совершенствования башкирского литературного языка. «Әҙәби Башҡортостан». 1950, № 6. С. 43—50.

51. Башҡорт теле грамматикаһы, 2 киҫәк. Синтаксис.

Грамматика башкирского языка, ч. 2. Синтаксис. Учебник для 6 и 7 классов семилетней и средней школы. Испр. 3-е изд. Уфа, Башгосиздат. 1950. 168 с.

Приложения: I. Знаки препинания. С. 153—162; II. Башкирские и русские синтаксические термины. С. 163—165.

52. Синтаксис һәм пунктуация буйынса күнегеүҙәр йыйынтығы.

Сборник упражнений по синтаксису и пунктуации. Учебное пособие. Для 6 и 7 классов семилетней и средней школы. Уфа, Башгосиздат. 1950. 123 с.

53. Дмитриев Н. К. Башҡорт теленең грамматикаһы.

Дмитриев Н. К. Грамматика башкирского языка. Ред. К. Ахмеров, Дж. Киекбаев. Уфа, Башгосиздат. 1950, 300 с. (Башк. научно-исслед. ин-т языка, лит-ры и истории им. М. Гафури при СМ БАССР).

Пер. с русск. яз.

54. Русса-башҡортса химия терминдары.

Русско-башкирские термины по химии. Под ред. Ю. А. Усманова и К. З. Ахмерова. Уфа, Башгосиздат. 1950, 40 с. (Башк. научно-исслед. ин-т языка, лит-ры и истории им. М. Гафури при СМ БАССР).

## *1951*

55. Телдең грамматик төҙөлөшө тураһында И. В. Сталин учениеһы.

Учение И. В. Сталина о грамматическом строе языка. — «Ҡыҙыл Башҡортостан». 1951, 30 мая.

56. Башҡорт әҙәби теленең алфавиты һәм орфографияһы.

Алфавит и орфография башкирского литературного языка. Ред. К. Ахмеров. Уфа, Башгосиздат. 1951. 26 с.

## *1952*

57. Башҡорт теле грамматикаһы, 2 киҫәк. Синтаксис.

Грамматика башкирского языка, ч. 2. Синтаксис. Учебник для 6 и 7 классов семилетней и средней школы. Испр. 4-е изд. Уфа, Башкнигоиздат. 1952. 153 с.

Приложения: I. Знаки препинания. С. 138—147; II. Башкирские и русские синтаксические термины. С. 148—150.

58. Синтаксис һәм пунктуация буйынса күнегеүҙәр йыйынтығы. Сборник упражнений по синтаксису и пунктуации (учебное пособие) для 6 и 7 классов семилетней и средней школы. Испр. 2-е изд. Уфа, Башгосиздат, 1952. 95 с.

59. Башҡорт әҙәби теленең орфография һүҙлеге.

Орфографический словарь башкирского литературного языка. Изд. 2-е, перераб. и доп. Для нач. и сред. школ. С прил. статьи «Правила правописания». М., ГИС, 1952. 235 с. (АН СССР. Башкирский филиал. Ин-т истории, языка и лит-ры).

Рец.: Ишбулатов Н. — «Башҡортостан уҡытыусыһы». 1957, № 7, с. 15—18; Йосопов Х. — «Совет Башҡортостаны». 1958, 16 август; Ишбулатов Г. — «Әҙәби Башҡортостан». 1957, № 12, с. 70—74. От редакции — с. 74.

## *1953*

60. Языкознание в Башкирии.«Вопросы языкознания», 1953, № 3, с. 156—159.

61. Состояние и задачи башкирского языкознания в свете учения И. В. Сталина по языкознанию.— «Советская Башкирия». 1953, 15 мая.

62. Башкорт тел гыйлеменең торышы һәм алда торган бурычлары. Состояние и задачи башкирского языкознания.— «Кызыл тан». 1953, 20 июня.

63. Сравнительная грамматика русского и башкирского языков. Пособие для преподавателей русского языка в башкирской школе. Под ред. действ, чл. АПН РСФСР Н. К. Дмитриева. Уфа, Башкнигоиздат. 1953, 208 с. Соавтор: Р. Н. Терегулова (АН СССР. Башкирский филиал, Ин-т истории, языка и лит-ры).

## *1954*

64. Вопросы башкирского языкознания.— «Вестник АН СССР». 1954, № 3, с. 99—100.

65. Башҡорт теле грамматикаһы, 2 киҫәк. Синтаксис.

Грамматика башкирского языка, ч. 2. Синтаксис. Учебник для 6 и 7 классов семилетней и средней школы. Испр. 5-е изд. Уфа, Башкнигоиздат. 1954. 148 с.

Приложения: I. Знаки препинания. С. 132—141; II. Башкирские и русские синтаксические термины. С. 142—144.

66. Синтаксис һәм пунктуация буйынса күнегеүҙәр йыйынтығы. Сборник упражнений по синтаксису и пунктуации (учебное пособие) для 6 и 7 классов семилетней и средней школы. Испр. 3-е изд. Өфө, Башгосиздат, 1954. 88 с.

67. Башҡорт телендә һөйләмдәрҙә һүҙҙәрҙең килеү тәртибе. Порядок слов в предложении в башкирском языке. — «Башҡортостан уҡытыусыһы». 1955, № 1. С. 41—44.

68. V—VII кластарҙа яңы программа буйынса башҡорт теле уҡытыу. Обучение башкирскому языку по новой программе в V—VII классах. — «Башҡортостан уҡытыусыһы». 1955, № 7—8, с. 95—100.

## *1956*

69. Башҡорт телендә ярҙамсы исемдәр.

Служебные имена в башкирском языке. — «Башҡортостан уҡытыусыһы», 1956, № 1, с. 26—28.

70. Башҡорт телендә ҡылым төрҙәре.

Виды глагола в башкирском языке. — «Башҡортостан уҡытыусыһы». 1956, № 2. С. 48—52.

71. Ҡушма һөйләм төрҙәре.

Виды сложного предложения. — «Башҡортостан уҡытыусыһы». 1956, № 7. С. 57—63.

72. Башҡорт теле грамматикаһы, 2 киҫәк. Синтаксис.

Грамматика башкирского языка, ч. 2. Синтаксис. Учебник для 6 и 7 классов семилетней и средней школы. Уфа, Башкнигоиздат. 1956. 143 с.

Приложения: I. Знаки препинания. С. 129—138; II. Башкирские и русские синтаксические термины. С. 139—141.

## *1957*

73. Башҡорт әҙәби теленең формалашыу һәм үҫеү юлдары.

Пути формирования и развития башкирского литературного языка.— «Әҙәби Башҡортостан». 1957, № 4. С. 68—78.

74. Орфографиябыҙҙың ҡайһы бер мәсьәләләре.

Некоторые вопросы нашей орфографии. — «Совет Башҡортостаны». 1957, 30 июля.

75. К вопросу об обособлении второстепенных членов предложения в башкирском языке.— «Координационное совещание по вопросам грамматики тюркских языков» 27—31 авг. 1957 г. Отв. ред. Е. И. Убрятова, Т. М. Гарипов. Уфа, 1957. С. 6—7. (АН СССР. ОЛЯ. ИЯЗ. Башкирский филиал. Ин-т истории, языка и лит-ры).

76. Синтаксис һәм пунктуация буйынса күнегеүҙәр йыйынтығы. Сборник упражнений по синтаксису и пунктуации (учебное пособие) для 6 и 7 классов семилетней и средней школы. Уфа, Башкнигоиздат. 1957. 108 с.

77. Башҡорт телендә ябай һөйләм синтаксисы. Синтаксис простого предложения в башкирском языке. Отв. ред. Н. Т. Зарипов. С вступительной статьей проф. Н. К. Дмитриева. Уфа, Башкнигоиздат, 1957 (на обложке: 1958), 263 с. (АН СССР. Башкирский филиал. Ин-т истории, языка и лит-ры).

Рец.: Сәитбатталов Ғ.— «Совет Башҡортостаны», 1958, 9 июля; Әхтәров Р.— «Совет Башҡортостаны», 1958, 15 ноябрь; Хангильдин В.— «Башҡортостан уҡытыусыһы», 1959, № 3, с. 62; Жәләй Ләтиф — «Кызыл таң». 1959, 31 март; Ғ. Әхәтов. — «Кызыл таң». 1959, 19 июнь.

## *1958*

78. Синтаксис простого предложения в башкирском языке. Автореферат дисс. на соискание ученой степени доктора филол. наук. Отв. за выпуск Т. М. Гарипов. 1958, 30 с. (АН СССР. ОЛЯ. ИЯЗ. Башкирский филиал. Ин-т истории, языка и лит-ры).

79. Башҡорт теле грамматикаһы, 2 киҫәк. Синтаксис.

Грамматика башкирского языка, ч. 2. Синтаксис. Учебник для 6—7 классов семилетней и средней школы. Испр. 2-е изд. Уфа, Башкнигоиздат. 1958, 132 с.

Приложения: I. Знаки препинания, с. 118—127; II. Башкирские и русские синтаксические термины, с. 128—130.

80. К вопросу об обособлении второстепенных членов предложения в башкирском языке.— «Вопросы составления описательных грамматик языков народов СССР», Редколл.: Е. И. Убрятова, Н. З. Гаджиева, Т. М. Гарипов, А. Й. Харисов. Уфа, 1958, с. 26—33 (АН СССР. ОЛЯ. ИЯЗ. Башкирский филиал. Ин-т истории, языка и лит-ры).

81. Краткий очерк грамматики башкирского языка. М., Изд-во иностр. и нац. словарей, 1958, 61 с.

82. Башкирско-русский словарь. Редколл.: К. З. Ахмеров, Т. Г. Баишев, Р. Г. Каримова, А. А. Юлдашев. С прил. краткого очерка грамматики башкирского языка (К. З. Ахмеров). М., ГИС, 1958, 804 с. (АН СССР. Башкирский филиал. Ин-т истории, языка и лит-ры). Соавторы-составители: Т. Г. Баишев, А. М. Бикмурзин, У. М. Каюмова, Б. С. Саяргалеев, Р. Н. Терегулова.

Рец.: Ишбулатов Г., Юмагужин А.— «Советская Башкирия», 1959, 12 апреля; Йософ Гәрәй.— «Әҙәби Башҡортостан». 1960, № 1, б. б. 78—82; Гулин И.—«Совет Башҡортостаны». 1959, 12 февраль.

### *1959*

83. Вопросы башкирской филологии. Редколл.: К. З. Ахмеров, Т. М. Гарипов, А. Н. Киреев, А. И. Харисов (отв. ред.) и А. А. Юлдашев. М., АН СССР. Башкирский филиал. 1959. 159 с.

84. Обстоятельственные обороты в грамматической системе башкирского языка.— «Вопросы башкирской филологии». М., 1959, с. 24—31.

### *1960*

85. Башҡорт теле грамматикаһы, 2 киҫәк. Синтаксис.

Грамматика башкирского языка, ч. 2. Синтаксис. Учебник для 6—7 классов семилетней и средней школы. 3-е изд. Уфа, 1960, 135 с.

86. Башҡорт телендә ярҙамлыҡ исемдәр.— «Башҡорт теле уҡытыусыларына ярҙамға».

Служебные имена в башкирском языке.— «В помощь преподавателям башкирского языка». Сб. статей. Уфа, Башкнигоиздат. 1960, с. 32—36.

87. Башҡорт телендә ҡылым төрҙәре.— «Башҡорт теле уҡытыусыларына ярҙамға».

Глагольные виды в башкирском языке.— «В помощь преподавателям башкирского языка». Сб. статей. Уфа. Башкнигоиздат. 1960, с. 37—46.

88. Башҡорт телендә һөйләмдәрҙә һүҙҙәрҙең килеү тәртибе.— «Башҡорт теле уҡытыусыларына ярҙамға».

Порядок слов в предложениях в башкирском языке.—«В помощь преподавателям башкирского языка». Сб. статей. Уфа, Башкнигоиздат. 1960, с. 53— 63.

89. Башҡорт телендә теҙмә ҡушма һөйләм синтаксисы.

Синтаксис сложносочиненного предложения в башкирском языке. Отв. ред. С. Г. Сафуанов. Уфа, Башкнигоиздат. 1960, 80 с. (АН СССР. Башкирский филиал. Ин-т истории, языка и лит-ры).

Рец.: Сәитбатталов Ғ.— «Совет Башҡортостаны». 1960, 4 ноябрь.

90. Башкирские шежере. Составление, перевод текстов, введение и комментарии Р. Г. Кузеева. Отв. ред. К. З. Ахмеров. Уфа, Башкнигоиздат, 1960, 304 с. (АН СССР. Башкирский филиал. Ин-т истории, языка и лит-ры).

## *1961*

91. Синтаксис һәм пунктуация буйынса күнегеүҙәр йыйынтығы. Сборник упражнений по синтаксису и пунктуации. Учебное пособие для 6—7 классов семилетней и средней школы. 2-е изд. Уфа, Башкнигоиздат, 1961, 108 с.

## *1962*

92. Исследования по синтаксису башкирского языка. Доклад, обобщающий содержание работ, представленных к защите на соискание ученой степени доктора филологических наук. Отв. за выпуск Т. М. Гарипов. Уфа, 1962, 62 с. (Башкирский филиал АН СССР. Ин-т истории, языка и лит-ры. АН Казахской ССР. Ин-т языкознания).

93. Башҡорт теле грамматикаһы, 2 киҫәк. Синтаксис.

Грамматика башкирского языка, ч. 2. Синтаксис. Учебник для 6 и 7 классов семилетней и средней школы. Изд. 4. Уфа, Башкнигоиздат. 1962, 132 с.

Приложения: I. Знаки препинания, с. 118—127; II. Башкирские и русские синтаксические термины, с. 128—130.

Рец.: Һунаршин С.— «Башҡортостан уҡытыусыһы». 1963, № 7, с. 61—62.

## *1963*

94. Телселәрҙең Бөтә союз форумы.

Всесоюзный форум языковедов.— «Совет Башҡортостаны», 1963, 31 января. Соавтор: Т. Гарипов.

## *1964*

95. Башҡорт теле грамматикаһы, 2 киҫәк. Синтаксис.

Грамматика башкирского языка, ч. 2. Учебник для 6 и 7 классов семилетней и средней школы. 5-е изд. Уфа, Башкнигоиздат, 1964, 132 с.

Приложения: I. Знаки препинания, с. 118—127; II. Башкирские и русские синтаксические термины, с. 128—130.

96. Русско-башкирский словарь. Сост.: Т. М. Гарипов, Н. Х. Ишбулатов, Б. С. Саяргалеев, Р. Н. Терегулова, У. М. Яруллина. Редколл. К. З. Ахмеров (отв. редактор), У. М. Яруллина, Т. М. Гарипов, З. К. Ишмухаметов, М. Л. Рафиков. М., Изд-во «Советская энциклопедия», 1964, 985 с. (АН СССР. Уфимский ин-т истории, языка и лит-ры).

Рец.: Ураҡсин З. Ғ.— «Совет Башҡортостаны», 1965, 17 февраль.

## *1965*

97. Башҡорт теле дәреслеге, 2 киҫәк. 7—8 кластар өсөн синтаксис. Учебник башкирского языка, ч. 2. Синтаксис для 7—8 классов. Уфа, Башкнигоиздат, 1965, 207 с.

Приложение: Башкирские и русские синтаксические термины, с. 200—203. Соавтор: Г. Г. Саитбатталов.

Рец.: Яппаров М., Галина Ғ.— «Совет Башҡортостаны», 1965, 16 июль.

## *1966*

98. Современная орфография башкирского литературного языка и ее совершенствование.— «Итоговая научная сессия Уфимского ин-та истории, языка и лит-ры АН СССР за 1965 год». (Тезисы докладов). Уфа, 1966, с. 32—35.

99. О современной орфографии башкирского литературного языка. — «Тюркологическая конференция, посвященная 40-летию 1-го тюркологического съезда» (Тезисы докладов). Баку, 1966, с. 38—39.

100. К вопросу о характере и лексическом составе ранних письменных памятников Башкирии.— «Башкирская лексика». Тематический сборник. Уфа, 1966, с. 9—16.

101. Педагогия училищелары өсөн программалар.

Программа для педагогических училищ (Башкирский язык и башкирская детская художественная литература). Уфа, Башкнигоиздат, 1966, 64 с. Соавторы-составители: Дж. Г. Киекбаев, К. З. Ахмеров, Г. Г. Саитбатталов, М. Г. Гималова, А. А. Галлямов (Министерство просвещения БАССР и Башкирский филиал научно-исслед. ин-та нац. школ АПН РСФСР).

102. Башҡорт теле дәреслеге, 2 киҫәк. 7—8 кластар өсөн синтаксис.

Учебник башкирского языка, ч. 2. Синтаксис для 7—8 классов. 2-е изд. Уфа, Башкнигоиздат, 1966, 208 с.

Приложение: Башкирские и русские синтаксические термины, с. 202—204. Соавтор: Г. Г. Саитбатталов.

## *1967*

103. «О применении метода структурной лингвистики в сравнительно-исторической грамматике тюркских и других алтайских языков». — «Симпозиум по сравнительно-исторической грамматике тюркских языков» 13—15 июня 1967 г. (Тезисы и сообщения). М., 1967, с. 5—6. Соавторы: Дж. Г. Киекбаев, Н. Х. Ишбулатов, А. М. Азнабаев.

## *1969*

104. Башҡорт теле дәреслеге, 2 киҫәк. 7—8 кластар өсөн синтаксис. Учебник башкирского языка, ч. 2. Синтаксис для 7—8 классов. 3-е изд. Уфа, Башкнигоиздат, 1969, 208 с.

Приложение: Башкирские и русские синтаксические термины, с. 202—204. Соавтор: Г. Г. Саитбатталов.

105. Башҡорт яҙыуы тарихынан (Башҡорт әҙәби теленең алфавиты һәм орфографияһы тарихы).

Из истории башкирской письменности (История алфавита и орфографии башкирского литературного языка). Отв. ред. проф. Дж. Г. Киекбаев. Уфа, Башкнигоиздат, 1972 (АН СССР. Башкирский филиал. Ин-т истории, языка и лит-ры).

Библиографию составил и комментировал М. Л. Рафиков.

## БАШҠОРТ ЯҘЫУЫ ТАРИХЫ БУЙЫНСА ӘҘӘБИӘТ ИСЕМЛЕГЕ

*Аҙнағолов Р. Ғ.* Башҡорт теленең орфография һүҙлеге. Өфө, 1998.

*Ахметов М. А.* Орхоно-енисейские памятники и их отношение к современному башкирскому языку // Археография и лингвистическая текстология Южного Урала. / Отв. ред. Р.Г.Кузеев. Уфа: БФАН СССР, 1977. С. 75—83.

*Баишев Т. Ғ.* Урта быуаттарҙа уртаҡ яҙма телдәр: латин, иҫке славян, төрки // Башкирский языковедческий сборник. Уфа, 1975. 173—179-сы биттәр.

*Ишбирҙин Э. Ф., Ғәләүетдинов И. Ғ., Халиҡова Р. Х.* Башҡорт әҙәби теленең тарихы. Өфө, 1993. 318 бит.

*Бикмәтов Н.* Башҡорт телен өйрәнеүҙә файҙалы ҡулланма. Башҡортостан, № 8,10 ғинуар, 1953.

Боронғо төрки ташъяҙма ҡомартҡыларҙан. Кесе яҙма // Ватандаш. 1996. №1. 119—122-се биттәр.

Вопросы истории башкирского литературного языка. Уфа: БФАН СССР, 1985.

Вопросы лексикологии и лексикографии башкирского языка. Сб.статей. Уфа, 1983. 128 с.

*Галяутдинов И. Г.* Два века башкирского литературного языка. Уфа, 2000. 448 с.

*Галяутдинов И. Г.* История башкирского литературного языка XIX—начала XX века и некоторые вопросы ее изучения // Советская тюркология. 1984. № 5.

*Галяутдинов И. Г.* История литературного языка как саморазвитие системы: Общеметодологические проблемы // Советская тюркология. 1988. № 2.

*Галяутдинов И. Г.* Система графем в текстах тюркской письменности Урало-Поволжья XIX в. // Вопросы описания и каталогизации восточных рукописей Южного Урала. Уфа, 1985. С. 72—86.

*Гарипов Т. М.* Старотюркские, письменные памятники Башкирии // Советская тюркология. 1972. № 4.

*Ибрагимова Г. Д.* Отношение башкирского языка к древнетюркским и старотюркским памятникам письменности. На материале имен числительных. Автореф. дис. канд. филол. наук. Уфа, 2002.

Из прошлого и настоящего башкирской письменной культуры и языка. Уфа, 1988. 107 с.

Исследования по башкирскому языку и письменной культуре Башкирии. Уфа, 1989. 170 с.

*Ишбердин Э. Ф.* Камень с «загадочными» знаками // Советская тюркология. 1980. № 2. С. 64—67.

*Ишбулатов Н. Х.* Современный башкирский язык (система норм литературного языка). Уфа, 1972. 144 с.

*Ишмухаметов З. К., Суфьянова Н. Ф.* Башҡорт теленең орфография һүҙлеге. Өфө, 2002. 351 бит.

Очерки истории башкирского литературного языка. М.,1989. 256 с.

Письменные памятники Башкирии (Историко-филологические исследования). Уфа, 1982. 175 с.

*Сөләймәнова Р. Ә.* Телен яҡлаған халҡын һаҡлар. «Башҡортостан» гәзите, 10 декабрь, 2010 й.

*Толомбаев В. З.* Башҡорт тамғалары һәм яҙма // Башкирская филология: история, современность, перспективы: Труды Всероссийской научной конференции. Уфа: Гилем, 2005. 58—61-се биттәр.

*Хажин В. И.* Орфография һүҙлеге. I—III класс уҡыусылары өсөн ҡулланма. Өфө, 1978. 72 бит.

*Хисамитдинова Ф. Г.* История башкирского языка: Материалы по исторической фонетике. Учебное пособие. Уфа, 1989. 82 с.

*Шәрипова З. Я.* Иҫке төрки яҙмаһы // Башҡортостан уҡытыусыһы. 1991. — №№ 1, 3, 4, 5, 7—12.

Южноуральский археографический сборник. Выпуск 1. Уфа, 1973. 406 с.; Выпуск 2. Уфа, 1976. 392 с.

*Ҡушымта I*

# БАШҠОРТОСТАН МӘҒАРИФ ХАЛЫҠ КАМИСАРҘЫҒЫ ЭРГӘҺЕНДӘГЕ ҒИЛМИ МӘРКӘҘҘЕҢ ХӘРЕФ ВӘ ИМЛА ЛАИХӘҺЕ

Башҡортостан йөмһүриәтендә үҙ яҙыуҙарын ғәрәп хәрефдәре мән яҙыусы халыҡтарҙың мәктәп дәреслектәрендә һәм ваҡытлы вә даими характердағы бүтән әдәбияттарында ла хәреф вә имла башбаштаҡтығы бумаһын өсөн Башҡортостан мәғариф халыҡ камиссарҙығы эргәһендәге ғилми мәркәз юғарыла мәҙкүр халыҡтарҙың имла вә хәрефдәре мәсьәләһендә түбәндәге ҡарарға килде.

## I

### Хәреф һәм шәкел мәсьәләһендә

Хәреф мәсьәләһендә ике ағын булыб, бер ағын ғәрәп хәрефдәрен ташлаб, аның урнына латин хәрефдәрен алыу яғында булһа ла, ул сураттә бер халыҡтың күптәннән өйрәнеп килгән яҙыуын таштау арҡаһында килеп сығасаҡ уңайһыҙҙыҡтарҙың ғәйәттә ҙур булырын иғтибарға алыб һәм аның өсөн хәҙерге момент уңайһыҙ әле тиб ғилми мәркәз Башҡортостан өсөн ғәрәп хәрефдәрен ғәмәлдә үҙ көсөндә ҡалдыра.

## I

Ҡуляҙмаҙа ла, баҫмаҙа ла, әсасән баш хәрефтәр шәкле генә истиғмал ҡылыныр. Хәрефләрҙең урта, ахыр һәм ялғыҙ тигән бүтән шәкелдәре кәрәкмәгәндектәре өсөн ташланыр. Лакин башҡорт халҡыҙың хәҙерҙекһеҙ булыуын иғтибарға алыб башҡортса яҙылған китаптарҙы башта иҫке хәрефтәр мән баһып, башҡа яҙмаларын да тәдрижи рәүештә ғәмәлгә татбик ителер. Татарса яҙған яҙмаҙарҙа, теләһәләр, хәҙерге көндән ғәмәлгә татбик ителергә мөмкин.

Башҡорт шиүәһе өсөн тауышһыҙ хәрефтәрҙең (йәғни урыҫса әйткәндә, согласные звукиҙың) шәкеле былар була:

| | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|
| ر | ذ | د | ث | ت | پ | ب |
| گ | ک | ق | غ | ش | س | ژ |
| ی | ه | و | ن | م | ل | ڭ |
| 27 хәреф | ۋ | ف | ز | ح | ج | ڭ |

Татар шиүәһе өсөн тауышһыҙ хәрефтәр шәкеле былар:

| | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|
| د | خ | چ | ج | ت | پ | ب |
| ق | غ | ش | س | ژ | ز | ر |
| ن | م | ل | ڭ | گ | ک | ف |
| 26 хәреф | | ڭ | ی | ه | ۋ | و |

Һәр ике шиүә өсөн дә тауышты хәрефтәрҙең (йәғни урыҫса әйткәндә, гласные звукиҙың) ғәләмәттәре ошо:

| | | |
|---|---|---|
| و | ە | ا |
| ۇ | ی | ۋ |

1) ا ҡалын өҫт باش، بالا، بارا (бара, бала, баш) күүек;

2) ە нәҙек өҫт بەرە، یەشە، تەن (тән, йәшә, бәрә) күүек;

3) و оҙон (тулы) өтөр کول، بول، هوذ؛ قول، بول، هوذ (һуҙ, бул, ҡул; һүҙ, бүл, күл) күүек;

4) ۆ ҡыҫҡа (наҡыҫ) өтөр کۆل، تۆر، بۆر؛ قول، تور، بور (бор, тор, ҡол; бөр, төр, көл) күүек;

5) ی оҙон (тулы) аҫт قی، تی، هی (һый, тый, ҡый; کی، تی، هین һин, ти, кей) күүек;

6) ئ ҡыҫҡа (наҡыҫ) аҫт کیتاپ تشی، کشی تشی (кеше теше, китап тышы) күүек.

*1-се иҫкәрмә.* Элифбабыҙҙа ی һәм و хәрефтәре һәр береһе икешәр ауазға (йәғни звукка) ғәләмәт булыб күренһәләр ҙә, аларҙың ҡай урында тауышты ۆ һәм ئ икәнен вә ҡай урында тауышһыҙ واو һәм یا икәндерен айырыуҙың тариҡы был:

1) һүҙ баштарында килгәндә, йәки тауышты хәреф артындан вә я алдындан килгәндә йәки ике тауышты хәреф уртаһында килгәндә

ي һәм و хәрефтәре һәр ваҡытта ла тауышһыҙ хәреф хисабтаныб يا һәм واو булыб уҡылаҙар: يق йыҡ, ياق яҡ, ئاى ай, قويان ҡуян күүек һәм واق ваҡ, ئاو ау, قوواق ҡууаҡ күүек.

2) Тауышһыҙ хәреф артындан килһәләр ي һәм و хәрефтәре һәр ваҡытта ла тауышты хәреф хисабтаныб ئو һәм ئى булыб уҡылаҙар: بير бир, تيمه теймә, كيل кил һәм يوق юҡ, توق туҡ, ئول ул күүек.

*2-се иҫкәрмә.* Ҡалын ا хәрефе уңдан һәм һулдан ҡуша торған һыҙыҡ ҡуйылмай эштәнер.

يا хәрфен ئى дән һәм واو хәрфен ئو дан айырыу өсөн يا мән ئى гә һәр береһенә хас башҡа-башҡа ғәләмәт табарға һәм шулай уҡ واو мән ئو ға ҙа һәр береһенә хас айырым ғәләмәт табарға тырышылыр.

2

Телебеҙҙә тауышты ауаҙҙар (гласные звуки) унау булһа ла аларҙың хәрефтәре бары алтау ғына булғанлығы өсөн ҡалын һүҙҙәрҙе нәҙек һүҙҙәрҙән айырыуға ҡалын һүҙҙәр алдынан ошондай бер ( ٫ ) ҡалынлыҡ ғәләмәте яҙылыр.

Тәнбиһ: « قىر، بار » бар, ҡыр һәм تورۇغۇز тороғоҙ һүҙҙәре күүек эсендә ط йәки ق йәки غ хәрефтәре булған һүҙҙәрҙең алдындан ҡалынлыҡ ғәләмәте яҙылмаҫ, аның кәрәге юҡ. Ул ғәләмәт булмаһа ла, был һүҙҙәр ҡалын уҡылырға тейеште.

3

Үҙҙәрендә ҡалын хәрефтәр булмаған сит һүҙҙәрҙе ҡалынайтыр өсөн дә ошо ( ١ ) ғәләмәт ҡуйылыр: ٫كورس курс күүек.

4

Нәҙек өҫт ـە, оҙон өтөр ۇ, ҡыҫҡа өтөр ۆ, оҙон аҫт ې һәм ҡыҫҡа аҫт ێ хәрефтәре һүҙ баштарында килгәндә ئە، ئۇ، ئۆ، ئې، ئێ шәкелдәрендә алларындан бер һәмзә ҡуйыб яҙылырҙар: ئەلەم әләм, ئۇراق ураҡ, ئۆرسۆق орсоҡ күүек. Алай бумаһа ул хәрефтәрҙе тейештеһенсә уҡыб бумаясаҡ. Мәҫәлән, ئۇل ул тигән һүҙҙе һәмзәһеҙ ۇل шәкелендә яҙһаҡ, аны واقت ваҡыт һүҙендәге тауышһыҙ واو вау хәрефе күүек ۇل

вл тиб уҡыясаҡтар, ئيل ил тигән һүҙҙе һәмзәһеҙ генә يل шәкелендә яҙһаҡ, аны يراق йыраҡ һүҙендәге тауышһыҙ يا күүек итеб يل ел тиб уҡыясаҡтар. Шуның өсөн был тауышты хәрефтәрҙе һүҙ баштарында алларындан һәмзә ҡуйыб яҙыу гәрәк.

5

Ошо 4-се маддәҙә мәҙкүр хәрефтәргә эйәртеб, ҡалын өҫт « ا » хәрефен лә һүҙ башында килгәндә алдындан һәмзә ҡуйыб ئا шәкелендә яҙыу гәрәк.

6

Телебеҙгә урыссадан йәки ғәрби Аурупа телдәреңдән кергән сит һүҙҙәрҙә ق ҡ һәм غ ғ хәрефтәре яҙылмаҫтар. Гәзитә, граждан, камисар күүек һүҙҙәрҙең غەزيتە، عراژدان، قاميسار ғәзитә, граждан, ҡамисар тиб яҙыу хата.

7

Тауышты хәрефтәрҙең береһе лә бер ваҡытта ла яҙылмай ҡалмаҫтар. Бер һижале (бер иҙекте) һүҙҙәрҙә һәм ябыҡ иҙек (һижа) мән беткән һүҙҙәрҙә тауышты ە хәрефе яҙылмаҫ тигән истиснаҙар булмаһҡа тейеш.

## II

## Имла мәсьәләһе

1

Телебеҙҙең төп һүҙҙәре лә һәм аңа ситдән кергән бүтән һүҙҙәр лә һөйләшкәндә ҡалай ишетелһәләр яҙыуҙа ла шулай ишетелгәнсә яҙылырҙар — فاژيعا фажиға, تەبيعەت тәбиғәт; سەعيت Сәғит, مەجيت Мәжит, ٻسوت сут, سوديا судья күүек.

2

Бер һүҙҙә ҡушыб яҙыу мөмкин булған хәрефтәрҙе ҡушыб яҙыу гәрәк, айырыб яҙыу хата.

## 3

Дән, дан, ҙең (нең), ы, кә, гә, ҡа, ға, не, да, ла, лә, кән, гән, ҡан, ған, ләр, дәр, лар, дар, һә, һа, сә, са, ҡай, кәй, келт, ғылү күүек телебеҙҙәге һәммә суффикс — ялғауҙар, төп һүҙҙәргә ҡушылыб яҙылырҙар ئۇشتەلدەن — өҫтәлдән, ذەكيذنگ Ҙәкиҙең, كيتابى китабы, قاذانغا Ҡаҙанға, وەليذى Вәлиҙе, ئورالدا Уралда, ئۇيذە өйҙә, قالغان ҡалған, ئۇشتەلدەر өҫтәлдәр, كلهە килһә, دوشتقاى дуҫтҡай, يەشكەلت йәшкелт күүек.

## 4

«Вә, һәм, йәнә, дәхи, тағы, беләй, менән (мәй), генә, ғына» һүҙҙәре вә «һәм» мәғәнәһендәге «ҙә (лә), ҙа (ла)» даттары үҙҙәренә айрым бер һүҙ хөкмендә булғанлыҡтары өсөн башҡа һүҙҙәрҙән айрым яҙылырҙар, ҡушыб яҙыу хата.

Бүтәндәр өсөн миҫал китермәһәк тә мәсьәлә асыҡ. Әммә «һәм» мәғәнәһендәге ҙә, тә (лә), ҙа, та (ла) өсөн миҫал был: «кейеҙ өйҙә янды» тимәк, был һүҙҙән нәмә аңдарга гәрәк? «Өйҙә кейеҙ янды» тиб аңдайыҡмы? Әллә «һәм кейеҙ өй янды» тиб аңдайыҡмы? Илтибас бар. Мона шул илтибасты бетерер өсөн, морат «һәм кейеҙ өй янды» булғанда, ул һүҙҙе: «كيذ ئۇى ذە باندى » кейеҙ өй ҙә янды, тиб «ҙә»не « ئۇى өй»ҙән айрып яҙыу гәрәк. Әгәр морадын «өйҙә (өй эсендә) кейеҙ янды» булһа, ул ваҡытта «كيذ ئۇيذە ياندى кейеҙ өйҙә янды» диб «ҙә»не «өн»гә ҡушыб яҙ.

## 5

Һандарҙы яҙыу өсөн бөтөн ер йөҙөндә мәғлүм вә мәҡбүл булған ошо: 1, 2, 3, 4, ... шәклендәге ғәрәп рәҡәмдәре йөртелер. Бу көнгәсә ҡулланылыб килгән: ١،٢،٣،٤ шәклендәге төрөк рәҡәмдәре ташталыр.

Кәмисийә күҙеңдән үткәреб проект төҙүсе Сәғит Рәмиев. 1923 йыл, 10 декабрь.

**Кәмисийә ағзаҙары**[112]

[112] Башҡортостан Үҙәк дәүләт тарих архивы. Фонд Р-798. № 1283.

# ДӨРӨҪ ЯҘЫУ ҠАҒИҘӘЛӘРЕ

(Башҡорт АССР-ы Верховный Советы Президиумының
1950 йылдың 23 ноябрь Указы менән раҫлана)

## Айырым хәрефтәр яҙылышы

1. А—а хәрефе һүҙҙәрҙең ҡалын ижектәрендә, Ә—ә хәрефе нәҙек ижектәрендә яҙыла: ҡала, афиша, тәҙрә, әҙ, сәғәт, мәғәнә, вәғәҙә.

2. О—о хәрефе ике өндө белдерә:

а) башҡортса һүҙҙәрҙә ҡалын һуҙынҡы ирен өнө булған «о» өнөн: он, болон, ҡоролош;

б) рус әҙәби теле аша ингән һүҙҙәрҙәге ҡалын һуҙынҡы «о» өнөн: комсомолец, колхоз, совхоз.

3. Ө—ө хәрефе башҡортса һүҙҙәрҙә нәҙек ижектәрҙә яҙыла: көн, өлгө, Өфө.

4. Беренсе ижектәрендә «о—ө» өндәренең береһе булған һүҙҙәрҙең ҡалған ижектәрендә «а—ә», «у—ү» һәм «и» өндәренең береһе килмәһә, был һүҙҙәрҙең бөтә ижектәрендә лә «о—ө» яҙылышы һаҡлана: оҙон—оҙонлоғо, төҙөлөш—төҙөлөшөнөң.

Әгәр ҙә бындай һүҙҙәрҙең ҡалған ижектәрендә «а—ә», «у—ү», «и» өндәренең береһе килһә, һуңғы ижектәрҙә «ы—е» яҙыла: тойоуы, тоймауы, төҙөүе, йөрәге.

5. У—у хәрефе ҡалын ижектәрҙә, Ү—ү хәрефе нәҙек ижектәрҙә яҙыла: матур, курс, аудитория; бүләк, һүҙ.

6. Һүҙҙең уртаһында йәки аҙағында килгән тартынҡы ирен өнө—ҡыҫҡа әйтелешле «у—ү» өндәре башҡортса һүҙҙәрҙең ҡалындарында «у», нәҙектәрендә «ү» хәрефе менән бирелә: ауыл, һыу, хайуан; әүәләү, рәүеш.

7. Башҡорт әҙәби теленә рус теле аша ингән һүҙҙәрҙәге «и» хәрефе, әйтелешкә эйәртеп, бүтән хәрефтәр менән алмаштырып йәки төшөрөп яҙылмай: Украина, производство, станция.

8. Ы—ы хәрефе ике өндө белдерә:

а) башҡортса һүҙҙәрҙә ҡыҫҡа әйтелешле «ы» өнөн: ихтыяр, зыян, ыласын, ысын, ырҙын;

б) рус әҙәби теле аша ингән һүҙҙәрҙә оҙон әйтелешле «ы» өнөн: музыка, промышленность.

9. Э—э хәрефе башҡортса һүҙҙәрҙә «э» өнө ишетелгән урындарҙа һүҙ башында ғына, ә рус әҙәби теле аша ингән һүҙҙәрҙә рус теле орфографияһы буйынса яҙыла: эл, элек, электричество, аэростат, поэма.

10. Е—е хәрефе башҡортса һүҙҙәрҙә ике өндө белдерә:

а) һүҙ башында килгән «йэ» өнөн: ел, еләк, еүеш;

б) ижек уртаһында һәм аҙаҡтарында «э» өнөн: бел, беҙ, кейем, бейе, тейен.

11. Рус әҙәби теле аша ингән һүҙҙәрҙәге Е—е хәрефе рус теле орфографияһы буйынса яҙыла: Европа, поезд, телефон.

12. Ё—ё хәрефе рус әҙәби теле аша ингән һүҙҙәрҙә генә яҙыла: ёлка, щётка.

13. Тамыр йәки нигеҙ һүҙҙәрҙә килгән «ы—е», «о—ө» хәрефтәре һүҙ үҙгәреше ваҡытында төшөрөп ҡалдырылмай, бөтә урындарҙа яҙыла: урын — урыны; исем — исеме; айыр — айырымланған; онот — онотолдо, онотолған; бойор — бойороҡ, бойоролдо; йөрө — йөрөгән; ауыл — ауылы, ауылдан; синыф — синыфтан; ғилем — ғилеме.

14. Тамыр йәки нигеҙҙәрендә «о—ө», «ы—е (э)» өндәренең береһе әйтелмәгән һүҙҙәргә ялғауҙар ҡушылғанда ла «о—ө», «ы—е» яҙылмай:

а) осра — осрау, осраған, осраҡлы; йомшаҡ — йомшартыу, йомшарыу; бөҙрә — бөҙрәләнеү, бөҙрәләнгән;

б) ҡаршы — ҡаршылау; аҡрын — аҡрынайыу, аҡрыная; япраҡ — япраҡланыу, япрағы; күкрә — күкрәү, күкрәй.

15. Тамыры «ҡ—к» өндәренең береһенә бөтөп, аҙағына һуҙынҡы өн ялғанғанда, «ҡ—к» өндәре «ғ—г» өндәре менән сиратлашмай торған һүҙҙәрҙә «о—ө», «ы—е» хәрефтәре ул һүҙҙәрҙең тамырында ла, шулай уҡ уларға ялғауҙар ҡушылғанда ла яҙылмай:

а) йолҡ — йолҡа, йолҡоу, йолҡто, йолҡор; өрк — өркә, өркөү, өркөр, өрктө;

б) ҡырҡ (һан) — ҡырҡынсы, ҡырҡар, ҡырҡлап; ҡырҡ (ҡылым) — ҡырҡыу, ҡырҡа, ҡырҡты, ҡыр-ҡыр; ҡурҡ — ҡурҡыу, ҡурҡыныс, ҡурҡты, ҡурҡытыу; халҡ — халҡы, халҡ-ара, халҡтыҡы; ирк — ирке, иркле; күрк — күрке, күркле; һелк — һелкеү, һелкә, һелкте; милк — милке, милкенең.

16. Һүҙҙең аҙағына «и» ялғап сифат яһағанда, һуңғы ижек алдындағы «ы—е» төшөп ҡала: синыф — синфи, ғилем — ғилми.

17. Аҙаҡтары тартынҡы өндәрҙең береһенә бөткән һүҙҙәрҙәге рак — рәк ялғауҙары алдына «о—ө», «ы—е» хәрефтәре һәр ваҡыт яҙыла: төҙ — төҙөрәк, аҙ — аҙыраҡ, күп — күберәк, сос — сосораҡ, алыҫ — алыҫыраҡ.

18. Ю—ю хәрефе башҡортса һүҙҙәрҙә «йу—йү» өндәре ишетелгән урындарҙа яҙыла: юкә, юл, юғары, юн, Ҡәюм, ә рус әҙәби теле аша ингән һүҙҙәрҙә рус теле орфографияһы буйынса яҙыла: бюро, революция.

Иҫкәрмә. Юн (юныу), юн (юнле) һүҙҙәрен бер-береһенән айырыу өсөн, һуңғыһы «ь» менән яҙыла (юн, юнь).

19. Я—я хәрефе башҡортса һүҙҙәрҙә «йа» ишетелгән урындарҙа, ә рус әҙәби теле аша ингән һүҙҙәрҙә рус теле орфографияһы буйынса яҙыла: яр, ярыш, аяҙ, тай — тая, соя, лекция, октябрь.

20. Й—й хәрефе түбәндәге урындарҙа яҙыла:

а) һүҙ һәм ижек баштарында «о—ө», «ы, ә» өндәре алдынан: йомғаҡ, район, бойор, йөрө, йыл, йыйылыш, быйыл, уҡыйыҡ, йәйәү, кейәү, йәшел;

б) һүҙ уртаһында — ижек башында «е» алдынан: кейем, кейеҙ, эшләйек, бейейек;

в) һүҙ һәм ижектәр аҙағында: йәй, көй, май, майҙан.

21. Рус әҙәби теле аша ингән һүҙҙәрҙә «б» һәр ерҙә һаҡлана. Әйтелешкә эйәртеп, «п» менән алмаштырып яҙылмай: клуб, гардероб, герб.

22. В—в хәрефе башҡортса һүҙҙәрҙә һүҙ башында, ә рус әҙәби теле аша ингән һүҙҙәрҙә рус теле орфографияһы буйынса яҙыла: ваҡ, ваҡыт; вагон, совхоз.

23. Рус әҙәби теле аша ингән һүҙҙәрҙәге «д», әйтелешкә эйәртеп, «т» менән алмаштырып яҙылмай: отряд, завод, доклад, метод.

24. Һүҙ аҙағында килгән «ҡ—к» өндәре, һүҙҙәрҙең үҙгәреүе менән, ике һуҙынҡы араһында ҡалғанда, «ғ—г» хәрефтәренә әйләндереп яҙылалар: тоҡ—тоғо, күлдәк—күлдәге.

25. Н—н өнөнә бөткән һүҙҙәрҙән һуң «ғ—г»,«к—к» өндәренең береһе менән башланған ялғау ҡушылһа йәки һүҙ килһә—«н» өнө «ң» булып ишетелә, ләкин һәр ваҡыт «н» хәрефе яҙыла: борон—боронғо, һуҙын — һуҙынҡы, түбән — түбәнге, күтәрен—күтәренке.

26. Н—н өнөнән һуң «б», «м» өндәренең береһе килһә, «н» өнө «м» булып ишетелә, ләкин «н» яҙыла: ун бер, килгәнмен.

27. Тамыр йәки нигеҙ һүҙҙәрҙең аҙағында һуҙынҡы өн һуңында килгән «п», һүҙҙең үҙгәреүе менән, ике һуҙынҡы араһында ҡалһа, «б» хәрефе менән яҙыла: китап — китабы, толоп — толобо, принцип — принцибе, тип — тибы.

Иҫкәрмә. Типик, принципиаль кеүек һүҙҙәр был ҡағиҙәгә буйһонмайҙар.

28. Ҫ—ҫ хәрефе ижек аҙағында һәм һуҙынҡыларҙан һуң килгән ижек башында яҙыла: баҫҡыс, ҡыҫҡа, арыҫлан, һоҫа, уҫаҡ, таҫыл.

29. Һ—һ хәрефе түбәндәге урындарҙа яҙыла:

а) һүҙ башында: һыйыр, һарыҡ, һурпа, һәм, һаман;

б) һүҙ уртаһында тартынҡыларҙан һуң килгән ижек башында: аҡһаҡ, туҡһан, бурһыҡ, анһат;

в) ялғауҙар башында: барһа, алһа, йәшәһен, ҡараһыу.

Иҫкәрмә. Ҡайһы бер ҡылымдарҙа һәм көнсығыш телдәренән ингән исемдәрҙә һуҙынҡыларҙан һуң да «һ» яҙыла: яһау, Баһау, Бәһиә, баһа һ. б.

30. Ц—ц, Щ—щ, Ч—ч хәрефтәре рус әҙәби теле аша ингән һүҙҙәрҙә генә яҙыла: социализм, революция, комсомолец; Щорс, плащ, забойщик; Чапаев, почта, учреждение.

31. ъ билдәһе ҡалын тартынҡы өндө үҙенән һуң йәки алда килгән һуҙынҡы өндән айырып әйтеүҙе белдереү өсөн ҡулланыла: ҡулъяҙма, маъмай, алъяпҡыс, съезд.

32. ь билдәһе ике функцияла ҡулланыла:

а) үҙенән алдағы тартынҡы өндөң нәҙеклеген белдереү өсөн: роль, культура, Харьков, Горький;

б) нәҙек тартынҡы өндө үҙенән һуң йәки алда килгән һуҙынҡы өндән айырып әйтеүҙе белдереү өсөн: көньяҡ, тәьмин, мәсьәлә, Ильяс, Ильин, Мөьминә.

33. Тамыр йәки нигеҙ һүҙҙәрҙә килгән бер иш ҡуш тартынҡылар һүҙҙең бөтә урындарында ла яҙылалар: металл, класс, аппарат, ссуда.

34. Аҙаҡтарында бер иш ҡуш тартынҡылар килгән һүҙҙәргә ялғауҙар ҡушылғанда, ҡуш тартынҡыларҙың береһе төшөрөлә: металл—металлы ил, металы яҡшы, металға бай ил, килограмм—килограмы.

Иҫкәрмә. Яңғыҙлыҡ исемдәр был ҡағиҙәгә буйһонмайҙар.

35. «Ист», «ст», «сть» формаһында бөткән һүҙҙәрҙә «т» хәрефе, тамыр йәки нигеҙҙәрҙә генә һаҡланып, ялғауҙар ҡушылғанда, төшөрөлә: власть — совет власе, артист — артистәр, промышленность — промышленносе.

36. Аҙаҡтары «зд» формаһында бөткән һүҙҙәрҙә «д» тамыр йәки нигеҙҙәрҙә генә һаҡланып, ялғауҙар ҡушылғанда, төшөрөп яҙыла: съезд — съезы, поезд — поезға.

Иҫкәрмә, «дт» формаһында бөткән һүҙҙәрҙә «т» төшөрөлмәй — ялғауҙар ҡушылғанда ла яҙыла: Кронштадт-Кронштадтта.

## Исемдәр яҙылышы

37. Ике тамыр йәки нигеҙ һүҙҙәрҙән тороп, бер генә төшөнсәне аңлатҡан исемдәр—кеше, ҡала, ауыл, ҡош, үлән һәм башҡаларҙың исемдәре, география атамалары, хайуандарға бирелгән ҡушаматтар ҡушып яҙылалар. Бындай һүҙҙәрҙе ҡушҡанда, йәнәш килгән ике һуҙынҡының береһе төшөрөлә, ике һуҙынҡы араһында килгән «ҡ—к» өндәре «ғ—г» өндәренә әйләндерелеп, әйтелгәнсә яҙыла: Аҡ иҙел—Ағиҙел, Ҡара ҡош — Ҡарағош, Стәрлетамаҡ, Аҡҡайын, Биктимер, Гөльямал, Бибинур, аҡҡош, ашъяулыҡ, ысынбарлыҡ, Аҡтырнаҡ, Еҙтырнаҡ.

38. Ике һүҙҙән тороп, беренсе һүҙе бер үк нәмәнең төрлө сифатын белдереп йәки предметтарҙың береһен икенсеһенән айырып килгән ҡушма исемдәр айырым яҙыла: Яңы Ҡалмаш, Иҫке Ҡалмаш, аҡ ҡурғаш, ҡара ҡурғаш; таш күпер, ағас күпер.

39. Ике йәки бер нисә һүҙҙән тороп, һуңғы һүҙе зат ялғауы менән килгән ҡушма исемдәр айырым яҙыла: ҡара һауыты, тәҙрә ҡапҡасы, ҡала баҡсаһы.

40. Уртаҡ бер төшөнсәне белдереү өсөн, йәнәш ике һүҙҙән торған исемдәр дефис аша яҙыла: инженер-техник, ер-һыу.

41. Ике аралағы сикте белдерә торған ҡушма исемдәр һыҙыҡ аша яҙыла: Өфө — Мәскәү поезы.

42. Һүҙҙәрҙең беренсе ижектәренән ҡыҫҡартып яһалып, бер һүҙ рәүешендә йөрөтөлә торған ҡушма исемдәр бергә яҙыла: райком, партком, Башгосиздат, колхоз, совхоз.

43. Һүҙҙәрҙең беренсе хәрефтәренән торған ҡушма исемдәр, хәрефтәр араһына нөктә ҡуйылмайынса, бергә яҙыла: СССР, ВКП(б), ВЛКСМ, МТС.

44. Башҡорт әҙәби теленә рус әҙәби теле аша ингән исемдәр үҙҙәренең тамыр йәки нигеҙ өлөштәрендә рус телендәгесә яҙылалар, ә һүҙ яһағанда һәм үҙгәрткәндә, уларға ҡушыла торған ялғауҙар башҡорт теленең грамматика төҙөлөшөнә буйһоналар:революция — революцияның, идея—идеялы, идеялылыҡ.

45. Электән башҡорт теленә инеп, формалары һәм әйтелештәре үҙгәргән исемдәр халҡ телендә әйтелгәнсә яҙылалар: өçтәл, мәк, кәбеçтә, толоп, карап, пинжәк һ. б.

46. Башҡорт әҙәби теленә ғәрәп, фарсы телдәренән инеп үҙләшкән исемдәрҙең уртаһында һәм аҙағында, һүҙҙең ҡалын йәки нәҙек әйтелеүенә ҡарамаçтан, һәр ваҡыт «и» яҙыла: Ғәли, Фатима, Маһира, сифат, синыф, Маһи.

47. Сания, Суфия, Зәкиә кеүек исемдәрҙең аҙаҡтарында, ҡалын әйтелгәндәрендә — «я», нәҙек әйтелгәндәрендә «ә» яҙыла.

### Сифаттар һәм рәүештәр яҙылышы

48. Ике йәки өс һүҙҙән торған ҡушма сифаттар һәм рәүештәр айырым яҙыла: аҡһыл күк, бер юлы, һәр ваҡыт, бер ни тиклем.

49. Ҡара-ҡаршы мәғәнәле ике һүҙҙән йәки ҡабатланып килгән һүҙҙәрҙән торған сифаттар, рәүештәр дефис аша яҙылалар: арлы-бирле, аҡлы-ҡаралы, берәм-һәрәм, юл-юл, буй-буй.

50. Башҡорт әҙәби теленә ғәрәп, фарсы телдәренән инеп үҙләшкән сифаттар аҙағында «и» яҙыла: әҙәби, ғилми, фәнни.

### Ҡылымдар яҙылышы

51. Исем ҡылым аҙаҡтары һәм «у—ү» өндәренең береһенә бөткән бойороҡ ҡылым аҙаҡтары «ыу—еү».

«оу—өү» формаһында яҙыла: барыу, килеү, тойоу, йөрөү, йыу, ыу, ҡыу, тыу.

52. Нигеҙ ҡылым аҙағында йәки уртаһында килә торған «л» өнө яҙыуҙа бер ваҡытта ла төшөрөлмәй: кил — килтер, тул — тултыр, ултыр — ултырып.

53. Ярҙамлыҡ ҡылым «ине», сифат ҡылым формаһындағы хәбәр ҡылым аҙағында килгәндә, ҡушып яҙыла. Был ваҡытта хәбәр ҡылым аҙағындағы «п» төшөрөлә, ярҙамлыҡ ҡылым башындағы «и» өнө «й»гә әйләнә: барғайны, килгәйне (барған ине, килгән ине).

Иçкәрмә. Бүтән һүҙҙәр һуңында килгәндә, был ярҙамлыҡ ҡылым айырым яҙыла: бар ине, яҡшы ине, эшләй ине.

54. Ҡабатланып әйтелгән ҡылымдар дефис аша яҙылалар: бара-бара, әйтә-әйтә, йөрөй-йөрөй.

## Ярҙамлыҡ һүҙҙәр яҙылышы

55. Йыйнау-бәйләү теркәүестәре, сикләү, конкретлау киҫәксәләре уҡ — үк, ғына — генә, ҡына — кенә һ. б. айырым яҙылалар: килде лә китте, барғас уҡ, ул ғына, шулай ҙа баһа.

Иҫкәрмә. 1) Түбәндәге һүҙҙәрҙә «үк» киҫәксәһе ҡушып яҙыла: әйҙүк, берүк, иртүк.

2) Иркәләү мәғәнәһендә килгәндә, ҡына — кенә, ғына — генә киҫәксәләре ҡушып яҙылалар: балағынам, әсәйгенәм, атҡынам.

56. Үтенеү, икеләнеү, һорау киҫәксәләре ҡушып яҙылалар: килсе, торсо, йөрөсө; баралыр, ҡайтҡандыр, эшләйҙер; ҡайттымы? эшләнеме?

Иҫкәрмә. Һорау киҫәксәһе һуңында килгән «ни» алмашы айырым яҙыла: ҡайттымы ни? эшләнеме ни?

## Ялғауҙар яҙылышы

57. Бөтә ялғауҙар ҡушып яҙылалар.

58. Ялғауҙарҙың ҡалынлығы йәки нәҙеклеге тамыр йәки нигеҙ һүҙҙәрҙең һуңғы иҗектәренә ҡарап билдәләнә; һуңғы иҗек ҡалын булһа — ҡалын ялғау, нәҙек булһа — нәҙек ялғау яҙыла:

а) ҡала — ҡалалар, ҡая — ның, ауыл — дан, ағас — ты, тау —ҙа, завод — тар, клуб — ҡа, партия — ның, комиссия — нан, идея — лар, семья — быҙ, самолет — ҡа, пулемет — тар, актер — ҙың, отчет — ты, баланс — баланста;

б) бүлмә — бүлмәләр, шағир — ҙәр, тәртип — тәртибе, химик — тәр, классик — классигебеҙ, ударник — тәр, большевик — большевиктар, актив — кә, коллектив — кә, пионер — ҙәр, орден — ле, коммунизм — коммунизмгә, ленинизм — ленинизмдең, коммунист — коммунистар, комсомолец—комсомолецтар.

Иҫкәрмә. 1) Рус әҙәби теле аша ингән, бер генә нәҙек иҗектән торған һүҙҙәрҙең ҡайһы берҙәренә ҡалын ялғауҙар ялғана: литр — литрлы, метр — метры, темп — темптар, тип — типтар, цех — цехтан, текст — тексҡа, цифр — цифрға. Был бер иҗекле һүҙҙәр ҡушма һүҙҙәр составында килгәндә лә үрҙәге ҡағиҙә һаҡлана: сантиметр — ы, прототип — тар.

2) Әгәр рус теле аша ингән һүҙҙәрҙең йәки фамилияларҙың һуңғы иҗеге «е» өнө менән башланһа, ялғау һуңғы иҗек алдындағы иҗектең ҡалын йәки нәҙек (йомшартылған) өнгә бөтөүенә ҡарап ялғана: боец — боецтар, поезд — поезда, разъезд — разъездың, Юлаев — Юлаевҡа, курьер — курьергә, ателье — ательенан, рельеф — рельефте, Юрьев — Юрьевте, Ғәлиев — Ғәлиевкә, армеец—армеецтар.

59. Рус әҙәби теле аша ингән һүҙҙәрҙең һуңғы өнөн йомшартып килгән «ь» билдәһе тамыр йәки нигеҙ һүҙҙәрҙә генә һаҡланып, ялғауҙар ҡушылғанда, төшөрөлә. Бындай һүҙҙәргә һәр ваҡыт нәҙек

ялғауҙар ҡушыла: председатель — председателе, секретарь — секретарҙең, ноябрь — ноябрҙә, декабрь — декабргә, апрель — апрелдән, токарь — токарҙар, лагерь — лагере, промышленность — промышленносе.

60. «ск» формаһында бөткән ҡала исемдәренә ялғауҙар ҡушылғанда, аҙаҡтарына «и» өҫтәп, «ски» формаһында яҙылалар: Минск — Минскигә, Омск — Омскиҙән.

61. Аҙаҡтары «нг», «оск», «иск», «уск», «нк», «амп» бөтөмдәренең береһенә бөткән һүҙҙәр, килеш, зат, күплек менән үҙгәргәндә, аҙаҡтарына «ы—е» ҡушып яҙыла: лозунг — лозунгылар, лозунгының, лозунгыға; киоск — киоскылар, киоскының, киоскыға; банк — банкының, банкыға, банкыһы, банкылар; митинг — митингегә; штамп, штампыһы, штампылар.

Иҫкәрмә. Аҙаҡтары «мп» һәм «кт», «укт» формаһында бөткән һүҙҙәр был ҡағиҙәгә буйһонмайҙар: темп — тар, эш темпы, продукт — тар.

62. Беренсе хәрефтәре менән генә әйтеп йөрөтөлгән ҡыҫҡартма ҡушма һүҙҙәргә килеш һәм күплек ялғауҙары, уларҙың тулы әйтелештәренә ҡарап түгел, ҡыҫҡартып әйтелеүҙәренә ҡарап килә, һәм һүҙ менән ялғау араһында дефис ҡуйыла: СССР-ҙа МТС-тан, Башҡорт АССР-ында, Дәүләкән МТС-ынан.

63. Цифрҙар һуңында килгән рәт һаны ялғауҙары дефис аша «сы», «се», «сө» формаһында яҙыла: 5-се, 6-сы, 3-сө.

64. Рим цифрҙары һәм датаны белдергән ғәрәп цифрҙары һуңында рәт һаны ялғауы яҙылмай һәм дефис та ҡуйылмай: 1940 йыл 15 июнь, V бүлек.

65. «В» өнөнә бөткән фамилияларҙа фамилия бөтөмдәре һәр ваҡыт «ев», «ов» формаһында яҙыла: Бикбаев, Ғәлиев, Иванов, Арсланов.

66. Аҙаҡтары «ий» йәки «и»гә бөткән исемдәргә зат ялғауҙары «ем», «ең», «ебеҙ», «егеҙ», «е» формаһында килә: гений — генийе, Горький — Горькийебеҙ.

67. Рус әҙәби теле аша ингән һүҙҙәрҙән аҙаҡтары ҡалын әйтелешле «к» йәки «г» өнөнә бөткән һүҙҙәрҙә төбәү килеш ялғауы «ка» формаһында килә: Башторгка, блокка.

## Ҙур хәрефтәр яҙылышы

68. Ҙур хәрефтәр менән башлап яҙылалар:

а) һөйләмдең беренсе һүҙе, яңғыҙлыҡ исемдәр, шиғырҙарҙың юл башындағы беренсе һүҙе;

б) бер нисә һүҙҙән ҡыҫҡартып, беренсе хәрефтәре йәки өндәре менән әйтеп йөрөтөлә торған яңғыҙлыҡ исемдәр: ВКП(б), ВЛКСМ;

в) бер нисә һүҙҙән ҡыҫҡартып, беренсе хәрефтәре менән әйтелгән уртаҡлыҡ исемдәрҙең һәр бер хәрефе: МТС.

Иҫкәрмә. Һүҙҙәрҙең беренсе өндәренән ҡыҫҡартып яһалған уртаҡлыҡ исемдәр бәләкәй хәреф менән яҙылалар: вуз, рик.

г) бер нисә һүҙҙән торған яңғыҙлыҡ исемдәрҙең беренсе һүҙе: Башҡорт педагогия институты, Борай ауыл советы;

Иҫкәрмә. 1) Бер нисә һүҙҙән торған яңғыҙлыҡ исемдәрҙең үҙҙәренең эсендә тағы яңғыҙлыҡ исемдәр булһа, улар ҙа ҙур хәреф менән башлап яҙыла:

«Совет Башҡортостаны» гәзите, Яңы Хәлил ауылы.

2) Партия һәм хөкүмәт юғары (Бөтә Союз, республика, өлкә) органдары исемдәренең (Верховный Совет, министерстволар, суд һ. б.) һәр бер һүҙе ҙур хәреф менән башлап яҙыла: ВКП(б) Үҙәк Комитете, СССР Верховный Советы Президиумы, ВКП(б)-ның Башҡортостан Өлкә Комитеты, Башҡорт АССР-ы Верховный Советы, Башҡорт АССР-ы Министрҙар Советы, РСФСР Верховный Суды, Совет Армияһы, Башҡорт АССР-ы Мәғариф Министерствоһы.

д) сифат урынында килгән яңғыҙлыҡ исемдәр: Стаханов методы (стахановский метод);

е) ике нөктәнән һуң килгән тура телмәрҙең, шулай уҡ диалогтарҙа һыҙыҡтан һуң килгән һөйләмдәрҙең беренсе һүҙҙәре.

69. Халҡ, тел, ай, көн исемдәре бәләкәй хәреф менән яҙылалар: рус халҡы, рус теле, башҡорт теле, октябрь айы, йома көн.

*Ҡушымта III*

## БАШҠОРТ ӘҘӘБИ ТЕЛЕНЕҢ АЛФАВИТЫ ҺӘМ ОРФОГРАФИЯҺЫ

(Башҡорт АССР-ы Верховный Советы Президиумының 1981 йылдың 23 октябрь Указы менән раҫлана)

### I. Алфавит һәм орфография принциптары

1. Башҡорт әҙәби теленең алфавиты рус графикаһы нигеҙендә төҙөлгән. Рус алфавитындағы бөтә хәрефтәр үҙ яҙылышынса рус алфавитындағы тәртиптә алынған. Башҡорт теленең һ һәм ә өндәренән башҡа үҙенә хас өндәре рус алфавитындағы әйтелештәре яҡын булған өндәр өсөн ҡулланылған хәрефтәрҙән сығып, түбәндәгесә яһалған: **ғ, ҙ, ҡ, ң, ҫ, ү, ө.**

Һ һәм ә өндәре өсөн шул уҡ һ, ә хәрефтәре алынған.

2. Башҡорт теленең орфографияһы башҡорт әҙәби теленә нигеҙләнә.

3. Башҡорт теленең орфографияһы рус әҙәби теленән ингән һүҙҙәрҙең фонетик, морфологик һәм график үҙенсәлектәрен иғтибарға алыу нигеҙендә төҙөлә.

## § 1. Алфавит

Башҡорт теленең алфавиты 42 хәрефтән тора.
Уларҙың урынлашыу тәртибе:

| Баҫма хәрефтәр | Хәрефтәр исеме | Баҫма хәрефтәр | Хәрефтәр исеме | Баҫма хәрефтәр | Хәрефтәр исеме |
|---|---|---|---|---|---|
| Аа | а | Ҡҡ | ҡы | Фф | эф |
| Бб | бэ | Лл | эл | Хх | ха |
| Вв | вэ | Мм | эм | Һһ | һы |
| Гг | гэ | Нн | эн | Цц | цэ |
| Ғғ | ғы | Ңң | эң | Чч | че |
| Дд | дэ | Оо | о | Шш | ша |
| Ҙҙ | ҙы | Өө | ө | Щщ | ща |
| Ее | е | Пп | пэ | ъ | ҡалын айырыу билдәһе |
| Ёё | йо | Рр | эр | Ыы | ы |
| Жж | жэ | Сс | эс | ь | нәҙеклек һәм нәҙек айырыу билдәһе |
| Зз | зэ | Ҫҫ | ҫе | | |
| Ии | и | Тт | тэ | Ээ | э |
| Йй | й | Уу | у | Әә | ә |
| | | | | Юю | йу |
| Кк | ка | Үү | ү | Яя | йа |

## § 2. Алфавиттағы хәрефтәрҙең бүленеше

Һуҙынҡылар: **а, е, ё, и, о, ө, у, ү, ы, э, ә, ю, я.**
Тартынҡылар: а) яңғырау: **б, в, г, ғ, д, ҙ, ж, з, й, л, м, н, ң, р;**
б) һаңғырау: **к, ҡ, п, с, ҫ, т, ф, х, һ, ц, ч, ш, щ.**
Махсус билдәләр: **ъ, ь.**

# II. Һуҙынҡылар яҙылышы

## § 3. А — а

**А — а** һүҙҙәрҙең ҡалын ижектәрендә яҙыла: *ат, арба, сана, афиша, машина, магазин, гараж, лампа, ҡара, ҡала, парта, таҡта, ағас, алма, баҡса.*

## § 4. Е — е

А. **Е** — **е** хәрефе башҡорт һүҙҙәрендә ике төрлө функция үтәй:

а) һүҙ башында **йә** тигән ике өндө белдерә: *ел, ең, еҙ, еләк, еҫ, ем, еүеш;*

б) ижек уртаһында һәм ижек аҙағында э өнөн белдерә: *бел, беҙ, һеҙ, теҙ, кей, кейеҙ, кейем, теймә, әрсе, бейе, тейен, эйе.*

Б. Рус әҙәби теленән ингән һүҙҙәрҙә **е** хәрефе рус орфографияһы нигеҙендә яҙыла: *Европа, Енисей, техника, цех, трест, поезд, герой, телефон, тема, система.*

## § 5. Ё — ё

**Ё** — **ё** хәрефе рус әҙәби теленән ингән һүҙҙәрҙә генә яҙыла: *ёлка, щётка.*

## § 6. И — и

А. **И** — **и** хәрефе бер ижекле һүҙҙәрҙә һәм нәҙек ижек янында нәҙек өндө, ә ҡалын ижек янында ҡалын өндө белдерә:

а) *ил, бит, кисә, киле, нигеҙ, ниәт, исем, кәмит;*

б) *сиҡан, сираҡ, синыф, ижад, тарих, Шафиҡ.*

Б. Башҡорт теленә рус әҙәби теленән ингән һүҙҙәргә **и** рус орфографияһы нигеҙендә яҙыла: *тир* (ата торған урын), *кит* (диңгеҙ хайуаны), *биолог, кино, станция, вафли, Украина.*

## § 7. О — о, Ө — ө

А. **О** — **о** хәрефе ике өнгә билдә булып йөрөй:

а) төп башҡорт һүҙҙәрендә ҡалын һуҙынҡы ирен өнө булған **о** өнөнә: *он, ос, оло, ҡолон, болон, һоло, ҡорос, боронғо, ҡоролош, ҡоролошо;*

б) рус әҙәби теленән үҙләштерелгән һүҙҙәргә ҡалын һуҙынҡы **о** өнөнә: *завод, производство, пароход, агроном, профком, трактор, доктор, мотор, фронт, совет, кино, фото, район.*

Б. **Ө** — **ө** хәрефе башҡорт һүҙҙәрендә нәҙек ижектәрҙә яҙыла: *көн, төн, көндөҙ, көсөргәнеш, бөгөн, төтөн, Өфө, өлгө, төлкө, төрлө, өмөт, төҙөлөш.*

В. Беренсе ижектәрендә **о** йәки **ө** өндәре булған төп башҡорт һүҙҙәренең башҡа ижектәрендә **а, ә, у, ү** һәм **и** өндәренең береһе килмәһә, бөтә ижектәрендә лә **о** — **ө** яҙылышы һаҡлана: *оҙон, оҙонлоғо, оҙонлоғоноң; төҙө, төҙөлөш, төҙөлөшөнөң.*

Әгәр ҙә бындай һүҙҙәрҙең ҡалған ижектәрендә **а, ә, у, ү, и** өндәренең береһе килһә, уларҙың һуңғы ижектәрендә **ы, е** хәрефтәре яҙыла: *тойоуы, ҡоралы, төҙөүе, мөмкинлеге, һөжүме.*

## § 8. У — у, Ү — ү

А. **У — у** хәрефе ҡалын ижектәрҙә яҙыла: *ур, уҙ, ут, Урал, уйһыу, ултырыш, уңыш, усаҡ, уяу, буйлы, буҫтау, дуҫ, ҡуҙаҡ, суртан, турғай, матур.*

Б. **Ү — ү** хәрефе нәҙек ижектәрҙә яҙыла: *үлән, үр, үт, үткер, бүҙәнә, бүлмә, бүләк, дүрткел, күлдәк, күңелле, күл, күн, һүҙ.*

В. Шул уҡ у — ү хәрефтәре һүҙ уртаһында һәм аҙағында ирен тартынҡыһын да белдерә һәм башҡорт телендәге ҡалын һүҙҙәрҙә у, нәҙек һүҙҙәрҙә ү менән бирелә:

а) *ауыл, дауыл, тауар, тауыш, яуын, һыу, быу, хайуан;*

б) *әүен, рәүеш, әүәләү, кәүҙә, кейәү.*

Г. Исем ҡылым ялғауы **-ыу — -еү, -оу — -өү** рәүешендә яҙыла: *барыу, килеү, ҡайтыу, күреү, йонсоу, тойоу, йөрөү, йөҙөү.*

## § 9. Ы — ы

**Ы — ы** хәрефе башҡорт һүҙҙәрендә ҡалын ижектә, ә рус әҙәби теленән ингән һүҙҙәрҙә рус теле орфографияһы нигеҙендә яҙыла: *ылаҫын, ырғаҡ, ырҙын, ихтыяр, хыял, ҡыяр, шыма, зыян, музыка, Сызрань.*

## § 10. Э — э

**Э — э** хәрефе башҡорт һүҙҙәрендә э өнө ишетелгән урындарҙа һүҙ башында ғына, ә рус әҙәби теленән ингән һүҙҙәрҙә рус теле орфографияһы нигеҙендә яҙыла:

а) *эл, элек, эш, эшсе, элемтә, эре, эркет, эйә, эйәләшеү;*

б) *электр, экран, экскурсия, аэростат, поэма.*

## § 11. Ә — ә

**Ә — ә** хәрефе һүҙҙең нәҙек ижектәрендә яҙыла: *әрем, әрәмә, бәке, бәләкәй, әйт, әйтелеш, тәҙрә, мәғәнә, мәл, мәрәкә, ҡәләм, Ғәлимә, сәғәт, Бәләбәй, мәҡәл, мәҡәлә, мәрмәр, бәрхәт, бәрәкәт, әһәмиәт, вәғәҙә.*

## § 12. Ю — ю

**Ю — ю** хәрефе йу ишетелгән урындарҙа һәм рус теленән ингән һүҙҙәрҙә рус орфографияһындағыса яҙыла:

а) *юл, юҡ, юрған, юлдаш, юғары, юйғыс, Юлай;*

б) *юстиция, юрист, юбилей, июнь, июль, резолюция, компьютер, Люксембург, бюллетень, бюро, меню.*

## § 13. Я — я

**Я — я** хәрефе башҡорт һүҙҙәрендә йа ишетелгән урындарҙа, ә рус әҙәби теленән ингән һүҙҙәрҙә рус теле орфографияһы нигеҙендә яҙыла:

а) *яр, ял, яй, ярыш, аяҙ, аяҡ, таяҡ, маяҡ;*

б) *тай — тая, ҡуй — ҡуя;*

в) *якорь, Рязань, Галя.*

# III. Тартынҡылар яҙылышы*

## § 14. Б — б

А. **Б — б** хәрефе б өнө ишетелгән урындарҙа яҙыла: *бысаҡ, бәке, беше, балаҫ, быяла, бойҙай, балан, бала, быйыл.*

Б. Рус әҙәби теленән ингән һүҙҙәрҙәге б һәр ерҙә һаҡлана: *багажник, бакен, герб, клуб, лаборант, обсерватория, штаб.*

## § 15. В — в

**В — в** хәрефе башҡорт һүҙҙәрендә һүҙ башындағы ирен тартынҡыһы у — ү урынына, ә рус әҙәби теленән ингән һүҙҙәрҙә рус теле орфографияһы нигеҙендә яҙыла:

а) *ваҡ, ваҡлыҡ, ваҡиға, ваҡыт, ватан, вәғәҙә, Вәли;*

б) *велосипед, вагон, венгр, вокзал, автомобиль, автор, архив, Кавказ.*

## § 16. Г — г

**Г — г** хәрефе башҡорт һүҙҙәрендә нәҙек ижектәрҙә генә, ә рус әҙәби теленән ингән һүҙҙәрҙә ҡалын ижектәрҙә лә, нәҙек ижектәрҙә лә яҙыла: *гөл, өлгөр, һиҙгер, түгел, һигеҙ, тигеҙ, география, бригада, зоология, грамматика, лозунг, флаг, газ, гектар, гараж, митинг.*

## § 17. Ғ — ғ

**Ғ — ғ** хәрефе ҡалын ижектәрҙә лә, нәҙек ижектәрҙә лә яҙыла: *ағас, һағыҙ, сәғәт, ҡәнәғәт, мәғәнә, ғәҙәт, ғүмер, ғәжәп, ғәфү, яға, саған, бағана, Ғәлим, Ғәлимә.*

## § 18. Д — д

А. **Д — д** хәрефе ҡалын ижектәрҙә лә, нәҙек ижектәрҙә лә яҙыла: *Дим, дала, дана, дары, дауа, даға, донъя, дым, доктор, ҡондоҙ, көндөҙ, падишаһ.*

Б. Рус әҙәби теленән ингән һүҙҙәрҙәге д һәр ерҙә һаҡлана: *отряд, завод, команда, метод, доклад, медик, педагог.*

---

* Яҙылышы бөтә урында ла бер төрлө булған хәрефтәр бында бирелмәне.

## § 19. Ҙ – ҙ

**Ҙ** — **ҙ** хәрефе түбәндәге урындарҙа яҙыла:

а) ижек башында: *гә-ҙәт, ҡы-ҙыл, я-ҙылыш, ку-ҙәнәк, Хәми-ҙә, Әхмә-ҙи, ҙур, ҙурайыу;*

б) ижек аҙағында: *яҙ, күҙ, көм-бәҙ, күҙ-лек.*

## § 20. Й – й

**Й** — **й** хәрефе түбәндәге урындарҙа яҙыла:

а) һүҙ һәм ижек башында **о, ө, ү, ы, ә** алдынан: *йомғаҡ, йөрө, бойор, бөйөр; йүгән, йүкә, йүн, Йүрүҙән; йыл, йыйылыш, быйыл, уҡыйыҡ; кинйә, йәй, йәйәү, кейәү, йәшел;*

б) һүҙ уртаһындағы ижек башында **е** алдынан: *кейем, кейеҙ, эшләйек, кейенәм, бейейек;*

Иҫкәрмә: **и** өнөнә бөткән төп башҡорт һүҙҙәренә ялғау ҡушҡанда **е** алдынан **й** яҙылмай: *ти — тиелгән, ни — ниең, етди — етдиерәк.*

в) һүҙ һәм ижек аҙағында: *йәй, үрсей, көй, ай, айлыҡ, кейҙе, майҙан, быйма, уҡыйбыҙ, эшләйбеҙ;*

г) ижек уртаһында: *әйт, ҡайт.*

## § 21. К — к, Ҡ — ҡ

А. **К** — **к** хәрефе нәҙек ижектәрҙә лә, ҡалын ижектәрҙә лә яҙыла: *кул, кулдәк, күк, кәм, куп, икмәк, әлек, көмөш, тәүлек, кадр, техника, блок, клуб, комбайн.*

Б. **Ҡ** — **ҡ** хәрефе башҡорт телендәге ҡалын **ҡ** өнөнә билдә итеп алына һәм ишетелгән бөтә урында яҙыла: *ҡамыш, ҡанат, ҡаплан, арҡан, ҡом, ҡойҡа, ҡул, тоҡ, ҡәләм, ҡалын, ҡыҙыл, ҡош, ҡәмәр, ҡәҙерле, ҡояш, аҡҡош, ҡәйнә, ҡырмыҫҡа, ҡаушырыу, ҡамасау.*

В. Һүҙ аҙағында килгән **к** — **ҡ**, һүҙҙәрҙең үҙгәреүе менән ике һуҙынҡы араһында ҡалғанда, әйтелешкә эйәртеп, **г** — **ғ** хәрефтәренә әйләндереп яҙыла: *кулдәк — кулдәге, итек — итеге, техник — техниги, балыҡ — балығы, тоҡ — тоғо.*

## § 22. Л — л

Тамыры **л** өнөнә бөткән, шулай уҡ уртаһында **л** өнө килгән ҡылымдарҙа **л** хәрефе төшөрмәй яҙыла: *кил — килтер, тул — тултыр, ултыр — ултырып.*

## § 23. Ң — ң

**Ң** — **ң** хәрефе тартынҡы **ң** өнөнә билдә итеп алына: *аң, таң, аңра, миңрәү, һаңғырау, саң, киң, аңҡау, тәңкә, яңғыҙаҡ, еңгә, мәңге, өйәңке, ҡараңғы, ыңғырашыу.*

## § 24. П — п

А. **П — п** хәрефе **п** өнө ишетелгән урындарҙа яҙыла: *иптәш, ҡуп, мәктәп, парта, пальто, полюс, поляк, практика, тапҡыр, япраҡ, япма.*

Б. Тамыр йәки нигеҙ һүҙҙәрҙең аҙағында һуҙынҡы өндән һуң килгән **п** һүҙҙең үҙгәреүе менән ике һуҙынҡы араһында ҡалһа, әйтелешкә эйәртеп, **б** хәрефе менән яҙыла: *китап — китабы, толоп — толобо, мәктәп — мәктәбе, принцип — принцибы, тип — тибы, тап — табы, ҡуп — ҡубәйеү.*

## § 25. Ҫ — ҫ

**Ҫ — ҫ** хәрефе ижек аҙағында һәм һуҙынҡыларҙан һуң килгән ижек башында яҙыла: *арыҫлан, ҡыҫҡа, баҫҡыс, баҫым, иҫке, бүҫкә, һоҫа, ҡыҫала, уҫаҡ, таҫыл, киҫәк, күҫәк.*

Иҫкәрмә: Ҡайһы бер ҡылымдарҙа һәм көнсығыш телдәренән ингән исемдәрҙә һуҙынҡыларҙан һуң **һ** яҙыла: *яһау, Баһау, Бәһиә, баһа* һ. б.

## § 26. Һ — һ

**Һ — һ** хәрефе түбәндәге урындарҙа яҙыла:

а) һүҙ башында: *һыйыр, һарыҡ, һайыҫҡан, һаман, һепер, һеңле, һәм, һурпа;*

б) һүҙ уртаһында тартынҡыларҙан һуң килгән ижек башында: *аҡһаҡ, бурһыҡ, туҡһан, ҡиҡһән, апһын, типһен, ҡауырһын, анһат;*

в) ялғауҙар башында: *барһа, алһа, ашаһа, белһен, йәшәһен, ҡараһыу, балаһы, кәмәһе, бирәһе, киләһе.*

## § 27. Ц — ц

**Ц — ц** хәрефе башҡорт теленә рус әҙәби теленән ингән һүҙҙәрҙә генә яҙыла: *пицца, мотоцикл, цех, целлюлоза, целлофан, цирк, циркуль, концерт.*

## § 28. Ч — ч

**Ч — ч** хәрефе башҡорт теленә рус әҙәби теленән ингән һүҙҙәрҙә генә яҙыла: *чинар, учреждение, почта, чех, чек, чемпион, форточка.*

## § 29. Щ — щ

**Щ — щ** хәрефе башҡорт теленә рус әҙәби теленән ингән һүҙҙәрҙә генә яҙыла: *плащ, щётка, Щедрин, Щербаков, щит, щи, борщ.*

## § 30. ъ — ь

А. **ъ** билдәһе алдағы ҡалын тартынҡы йәки һуҙынҡы өндө айырып әйткәнде белдереү өсөн ҡулланыла: *ҡулъяулыҡ, алъяпҡыс, донъя, съезд, подъезд, маъмай, даръя.*

Б. **ь** билдәһе ике осраҡта ҡулланыла:

а) алдағы тартынҡы өндөң нәҙеклеген белдереү өсөн: *калька, кальций, портфель, роль, Харьков, Горький, асфальт;*

б) тауышты өҙөп, алдағы нәҙек тартынҡы йәки һуҙынҡы өндө айырып әйткәнде белдереү өсөн: *көньяҡ, бирьяҡ, мәсьәлә, Ильяс, Ильин, тәьмин, Мөьмин.*

# IV. Һүҙҙәр һәм ялғауҙар яҙылышы

## § 31. Ябай һүҙҙәр яҙылышы

А. Тамыр йә нигеҙ һүҙ эсендә баҫымлы **-о-/-ө-, -ы-/-е-** һуҙынҡылары булһа, ялғау ҡушҡанда төшөрөп ҡалдырмай яҙыла:

а) *онот- — онотолған, онотоу; йөрө- — йөрөтөлгән, йөрөтөү;*

б) *синыф — синыфы, синыфына; урын — урыны, урынында; исем — исеме, исемендә; хәреф — хәрефе, хәрефенә; бер — береһе, береһенән* һ. б.

Ләкин һуңғы ижектәге шул уҡ баҫымлы **-о-/-ө-, -ы-/-е-** һуҙынҡылары сифат яһаусы **-и** ялғауы ҡушылғанда һәм *ирек, бүрек, халыҡ, милек, холоҡ* һүҙҙәренә эйәлек ялғауы ҡушылғанда төшөп ҡала:

а) *синыф — синфи, ғилем — ғилми* һ. б.

б) *ирек — ирке, бүрек — бүрке, халыҡ — халҡы, милек — милке, холоҡ — холҡо.*

Б. 1. Тамыр һүҙ эсендәге асыҡ ишетелмәй торған баҫымһыҙ **-о-/-ө-, -ы-/-е-** һуҙынҡылары **-р-** алдына тура килгәндә яҙылмай: *аңра, аҫрау, биҙрәү, бөҙрә, бөкрө, бысраҡ, иңрәү, йоҙроҡ, йомро, кәкре, күкрәк, кәпрәйеү, кәпрән, ҡойроҡ, мөңрәү, осрау, сепрәк, сүпрә, тетрәү, тоғро, томра, төпрә, тупраҡ, тызрайыу, тыҡрыҡ, тәҙрә, уғры, әкрен, әүрәү, япраҡ, яурын* һ. б.

Ләкин шул уҡ **-р-** алдынан килгән **-о-/-ө-, -ы-/-е-** яһалма һүҙҙең нигеҙендәге баҫымлы ижектә торһа, яҙыуҙа улар һаҡлана: *бойор- —бойороҡ, айыр- — айырым, төкөр- — төкөрөк, йүткер- — йүткерек* һ. б.

2. Аҙағы **-рҡ/-рк, -лҡ/-лк** ҡуш тартынҡылары менән бөткән һүҙҙәргә ялғау ҡушҡанда, һуңғы **-ҡ/-к** өндәре **-ғ/-г** менән сиратлашмаһа, ҡуш тартынҡылар араһында бер ваҡытта ла **-о-/-ө-, -ы-/-е-** хәрефтәре яҙылмай:

а) *ҡырҡ (40) — ҡырҡынсы; ҡырҡ- — ҡырҡа, ҡырҡыу, ҡырҡты; ҡурҡ- — ҡурҡа, ҡурҡҡан, ҡурҡыу; һарҡ- — һарҡыу, һарҡа, һарҡҡан; күрк — күрке, күркле, күркәм* һ. б.

б) *ҡалҡ- — ҡалҡа, ҡалҡытыу, ҡалҡыр; йолҡ- — йолҡа, йолҡто, йолҡор; һелк- — һелкеү, һелкә, һелкте* һ. б.

3. Аҙағы **-ыш/-еш, -ош/-өш** менән бөткән һүҙҙәрҙән **-ай/-әй** ялғауы ярҙамында ҡылым яһалғанда, һуңғы ижектәге **-ы-/-е-, -о- /-е-** төшөп ҡала: *аңыш — аңшайыу, бәлеш — бәлшәйеү, кәүеш — кәүшәйеү, салыш — салшайыу, ҡыйыш — ҡыйшайыу* һ. б.

В. Тартынҡы өнгә бөткән һүҙҙәргә **-раҡ/-рәк** ялғауы ҡушылғанда, ялғау алдына **-о-/-ө-, -ы-/-е-** хәрефтәре ҡуйып яҙыла: *төҙ — төҙөрәк, оҙон — оҙонораҡ, аҙ — аҙыраҡ, алыҫ — алыҫыраҡ, күп — күберәк.*

Г. 1. Һүҙ эсендәге **-нг-/-нғ-, -нк-/-нҡ-** һәм **-ңг-/-ңғ-, -ңк-/-ңҡ-** ҡуш тартынҡыларында **-н-, -ң-** хәрефтәренең яҙылышы түбәндәгесә билдәләнә:

Әгәр ул **-н** өнөнә бөткән нигеҙҙән **-ге/-ғы, -ке/-ҡы** ялғауҙары менән яһалған һүҙ булһа, **-н-** менән яҙыла: *алдын — алдынғы, борон — боронғо, түбән — түбәнге, бошон- — бошонҡо, ҡоторон- — ҡоторонҡо, тартын- — тартынҡы* һ. б.

Нигеҙ һүҙҙең эсендә булһа, **-ң-** менән яҙыла: *диңгеҙ, зәңгәр, ҡараңғы, ҡорсаңғы, мәңге, саңғы, сәңгелдәк, һаңғырау, тәңкә, өйәңке* һ. б.

2. Аҙағы **-ң-** менән бөткән оҡшатыу һүҙҙәренән **-ғыра** ялғауына ҡушып яһалған ҡылымдарҙа һәм шул ҡылымдан яһалған исемдәрҙә **-г-** хәрефе һаҡлана: *яңғыра-, сыңғыра-, ҡыңғырау* һ. б.

Ғ. Һүҙ эсендә йәки аҙағында **-н** өнөнән һуң **-б, -м** өндәренең береһе килһә, **-н** өнө **-м** булып ишетелә, ләкин яҙғанда **-н** яҙыла: *ун бер, барғанмын* һ. б.

1. Башҡорт теленә рус яҙма теленән ингән һүҙҙәрҙең тамыр һәм нигеҙ өлөштәре рус орфографияһы нигеҙендә яҙыла: *революция, идея, океан, клуб* һ. б.

2. Башҡорт теленә инеп, фонетик яҡтан үҙләшеп бөткән рус һүҙҙәре башҡортса әйтелешендә яҙыла: *дисәтинә, калуш, карап, караүат, кеүәҫ, көршәк, матрас, милтә, мисәт, перәник, пинжәк, сажин, ялыу, кәнфит, кәрзин, кәстрүл, кукуруз, минут, элиф, бумазый, лампасый, эшләпә, ыҫмала* һ. б.

## § 32. Ҡушма һүҙҙәр яҙылышы

А. **Ҡушып яҙыу.** Үҙ-ара грамматик мөнәсәбәттәрен юғалтып, берәй нәмәгә йәки бер бөтөн төшөнсәгә атама булып киткән, бер һүҙ берәмегенә әүерелгән ҡушма һүҙҙәр ҡушып яҙыла.

1. Тәүге һүҙе анығлаусы мәғәнәһен юғалтып, икеһе бергә бер атама булып киткәндә:

а) *айғолаҡ, айыуғорт, ағалтын, йыланбалыҡ, сүмесбаш; аҡбалыҡ, аҡҡош, аҡтамыр* (үлән), *аҡһаҡал* (ырыу уҙаманы), *аҡһөйәк* (юғары ҡатлам кешеһе), *алабуға, алабута, билбау, ҡарабойҙай, ҡарағалпаҡ* (халыҡ исеме), *ҡарағас, ҡарағат, ҡарағош, ҡыҙылғанат, сәмрегош, терегөмөш, тораташ, хужабикә, һынташ, янартау, ярғанат, бишбармаҡ* (аш), *осҡат* (ағас), *һигеҙгүҙ* (һөйәк), *меңьяпраҡ* (үлән), *өсмөйөш* (геометрик фигура) һ. б.

б) *көньяҡ, төньяҡ, аръяҡ, бирьяҡ.*

Иҫкәрмә: Шул уҡ **яҡ** менән килгән һүҙҙәрҙең ҡалғандары, ике аралағы грамматик мөнәсәбәт һәм һәр береһенең үҙ баҫымы һаҡланған өсөн, айырым яҙыла: *арғы яҡ, бирге яҡ, аҫ яҡ, өҫ яҡ, ос яҡ, төп яҡ, үр яҡ, түбән яҡ, уң яҡ, һул яҡ, арт яҡ, ал яҡ, ян яҡ* һ. б.

2. Эйәлек мөнәсәбәте менән яһалып та, аҙағындағы эйәлек ялғауы юғалған булғанда: *балғалаҡ (бал ҡалағы* урынына), *гөлйемеш, китапхана, ҡолонҡойроҡ* (үлән), *ҡулъяҙма, ҡулъяулыҡ, һабантуй, һабантурғай* һ. б.

3. Ике һүҙ араһындағы мәғәнә мөнәсәбәте юғалып, бер һүҙ берәмегенә әүерелгәндә: *барыбер, быйыл, бөгөн, берүк* (мәҫәлән, *берүк кешегә әйтмә,* ләкин *бер үк кеше)* һ. б.

4. Исем менән сифат ҡылымдан йәки **-ыш** ялғаулы исем ҡылымдан яһалған атама булғанда: *елғыуар, һыубаҫар, йөҙйәшәр, илгиҙәр, юлбаҫар, урынбаҫар, көнбайыш, көнсығыш, көнкүреш* һ. б.

5. Туғанлыҡ-ҡәрҙәшлек атамалары: *ҡәйенбикә, ҡәйенһеңле, ҡайнаға, олатай, өләсәй* һ. б.

6. Кеше исемдәре һәм хайуан ҡушаматтары: *Алмабикә, Алсынбикә, Аҡйегет, Әхмәтғәли, Миңлеғәли, Шәрифйән, Аҡбаш* (һыйыр), *Аҡтүш, Еҙтырнаҡ, Ҡарағолаҡ, Ертыңлар, Күлүртлар, Тауҙытауғаһуғар* (әкиәт батырҙары).

7. Руссаға оҡшатып яһалған терминдар: *өҫҡорма, тәүшарт, үҙидара, үҙйөрөшлө, тәүтормош, үҙҡиммәт, үҙешмәкәр, ысынбарлыҡ, ярымсүл, ярымутрау* һ. б.

8. Бергә яҙылған ҡушма һүҙҙәр үҙ-ара түбәндәгесә ялғана:

1) Уларҙың икенсе өлөшө айырым йөрөгәндә **е-** хәрефе менән башлап яҙылған булһа, ҡушма һүҙ эсендә дөйөм ҡағиҙәгә буйһоноп, **-йе-** итеп яҙыла: *Аҡйегет, Гөлйемеш, Баййегет, Меңйетәр.*

2) Тәүге өлөшөнөң аҙағындағы йәки икенсе өлөшөнөң башындағы **ҡ-/к-** өндәре һуҙынҡы уртаһында ҡалһа, әйтелештәгесә **-ғ-/-г-** итеп яҙыла: *Ағиҙел, ҡарағалпаҡ, ҡарағош, терегөмөш, Ҡарағолаҡ.*

3) Тәүге өлөшөнөң аҙағындағы һуҙынҡынан һуң **-р, -л, -у, -ҙ, -й** өндәренең береһе килеп, икенсе өлөшө **ҡ-/к-** менән башланһа, **ҡ-/к-** әйтелештәгесә **-ғ-/-г-** итеп яҙыла: *ярғанат, ҡыҙылғанат, балғалаҡ, елғыуар, һигеҙгүҙ, айғолаҡ.*

4) Урталағы йәнәшә килгән ике һуҙынҡының береһе төшөп ҡала: *Ҡариҙел, олатай, ҡарағас* һ. б.

Б. **Айырып яҙыу.** Икеһе бергә теүәл бер төшөнсә белдерһә лә, үҙ-ара грамматик мөнәсәбәттәрен юғалтмаған, бер һүҙ берәмегенә әүерелмәгән, һәр береһе үҙ баҫымы менән әйтелгән ҡушма һүҙҙәр айырып яҙыла.

1. Тәүге һүҙ аныҡлаусы мәғәнәһен һаҡлағанда йәки бер нәмәне икенсеһенән айырып килгәндә:

а) *бала саҡ* (мәҫәлән, *бәхетле бала саҡ), аҡ ҡурғаш, ҡара ҡурғаш, ҡара ҡарға, суйыр таш, һоро күмер; тимер юл, таш күмер; баш*

*мәҡәлә, баш ҡала, баш һүҙ, баш бала; ялан аяҡ, ялан баш, ялан күлдәк; артлы ултырғыс, ҡойроҡло йондоҙ;*

б) *аҡһыл күк, алма сыбар* (ләкин ат ҡушаматы: *Алмасыбар*), *бурлат ҡыҙыл, сейә ҡыҙыл, тимер күк, ҡара йәшел, алһыу ҡыҙыл* һ. б.

2. Ике һүҙҙең һәр береһе үҙ мәғәнәһен һәм ике араларғы мәғәнә мөнәсәбәтен һаҡлағанда:

а) *ат ҡараусы, бала ҡараусы;*

б) *кеше йәнле, ҡаты бәғерле, ҡуш йөрәкле, үҙе йөрөмәле, әсе телле; ҡара эсле, бер ҡатлы, үҙ аллы, үҙ белдекле, үҙ һүҙле; аяҡ өҫтө, аяҡ үрә, баш түбән, йөҙ түбән;*

в) *ҡаҙау һурғыс, шәкәрватҡыс, баш ҡатырғыс, йөрәк әрнеткес, ҡот осҡос, иҫ киткес, хәл иткес; һыу һаҡлағыс, газ үткәргес;*

г) *ғәфү итмәҫлек, хайран ҡалырлыҡ, түҙә алмаҫлыҡ;*

ғ) *тиҙ йөрөүсән, эш һөйөүсән;*

д) *бер көнлөк, биш йыллыҡ* (план), *ете йыллыҡ, өс айлыҡ;*

ҙ) *көн элек, көн элгәре;*

е) *кем уҙарҙан, кем еңерҙән, ас ҡарындай, ерле юҡҡа;*

ё) *быуындан быуынға, өйҙән өйгә* һ. б.

3. Ике һүҙ араһындағы мөнәсәбәт грамматик форма (эйәлек ялғауы) менән бирелгәндә: *айыу көпшәһе, ат ҡуҙғалағы, ҡайын еләге, сүл бүреһе; ишек алды, күҙ ҡараһы, ҡаҙ үләне, ҡара һауыты, тәртә төбө* (бау); *бесәй табаны* (үлән), *күгәрсен күҙе* (сәскә), *кәзә мөгөҙө* (емеш), *кәзә һаҡалы* (үлән), *әнә ҡарағы* (бөжәк).

4. Тәүге өлөшө **бөтә, күп, бер, тәү, һис, һәр** кеүек һүҙҙәрҙән булғанда:

а) *бөтә Башҡортостан, бөтә донъя, күп милләтле, күп миллионлы, күп һанлы; бер ҡалып, бер милләт, бер туған, бер тигән;*

б) *бер ауыҙҙан, бер күңелдән, бер рәттән, бер тауыштан, бер фекерҙән, бер һүҙҙән, бер ыңғайҙан, бер ыңғай, бер юлы; бер килке, бер яҡлы, бер һүҙһеҙ, бер туҡтауһыҙ; тәү тапҡыр, тәү башлап, һис булмаһа, һис һүҙһеҙ, һис шикһеҙ; һәр ваҡыт, һәр йылы, һәр көн, һәр яҡлап;*

в) *бер кем, бер нәмә, бер нисә, бер үҙе, һис бер, һис бер ҡайҙа, һис бер нәмә, һис бер кем, һәр бер, һәр кем, һәр нәмә, һәр ҡайһыһы.*

5. Икенсе өлөшө **алды, арты** кеүек ярҙамлыҡ исемдәрҙән булғанда: *һайлау алды, ял алды, баҙар арты, байрам арты* (көн) һ. б.

6. Ҡушма һандар: *ун бер, ун биш, ун туғыҙ, егерме алты.*

7. Үҙ-ара **да-дә** теркәүесе менән бәйләнеп, ҡатып ҡалған һүҙҙәр: *ал да гөл, һин дә мин* һ. б.

В. **Һыҙыҡса аша яҙыу.** Бер үк йәки бер иш һүҙҙәрҙе ҡабатлау юлы менән яһалған ҡушма һүҙҙәр һыҙыҡса аша яҙыла.

1. Бер үк һүҙ: а) *буй-буй, ваҡ-ваҡ, матур-матур, тимгел-тимгел, төрлө-төрлө, юлаҡ-юлаҡ, саҡ-саҡ, бер-бер;*

б) *илай-илай, көйшәй-көйшәй; туҡтап-туҡтап, әҙләп-әҙләп.*

2. Бер иш һүҙҙәр: а) *ағай-эне, аң-белем, баш-тояҡ, бәлә-ҡаза, ир-ат, йәш-елкенсәк, ҡайғы-хәсрәт, талаш-тартыш, тел-әҙәбиәт, туған-ырыу, физика-математика, эшсе-крәҫтиән, юҡ-бар, төньяҡ-көнсығыш;*

б) *кәкре-бөкрө, аллы-гөллө, күкле-йәшелле, эреле-ваҡлы; ингән-сыҡҡан, килгән-киткән, күргән-белгән, ҡаҡҡан-һуҡҡан, ҡасҡан-боҫҡан, тапҡан-таянған;*

в) *айырым-асыҡ, көс-хәл* (менән), *ярым-ярты; ваҡытлы-ваҡытһыҙ, белер-белмәҫ, уҡыр-уҡымаҫ, эшләр-эшләмәҫ; йәйен-ҡышын, көнө-төнө; аллы-артлы, арлы-бирле, аҫлы-өҫлө, иртәле-кисле, уңлы-һуллы, яҙлы-көҙлө, килделе-киттеле, ағалы-энеле, аталы-уллы, абына-һөрөнә, бата-сума; ҡасып-боҫоп, өҙөп-йолҡоп;*

г) *ул-был, уға-быға, унан-бынан, унда-бында;*

ғ) *аһ-зар, ай-һай* һ. б.

3. Төп һүҙ менән уның эйәрсене:

а) *ҡыйыш-мыйыш, ҡырлы-мырлы, салыш-солош, тишек-тошоҡ, һыныҡ-мыныҡ, ярты-йорто;*

б) *алпан-толпан, ашыҡ-бошоҡ, һирәк-мирәк, әрәм-шәрәм, эштер-өштөр, берәм-һәрәм* һ. б.

4. Эйәреп килгән **ара** ярҙамлыҡ иседе: *икәү-ара, үҙ-ара, район-ара, халыҡ-ара һ. б.*

5. Эйәреп килгән **фәлән, маҙар** кеүек һүҙҙәр:

а) *кеше-фәлән, күстәнәс-фәлән; эт-маҙар, бүре-маҙар;*

б) *күрһә-фәлән, уҡыһа-фәлән* һ. б.

6. Эйәреп килгән **ни** һәм **нитеү** һүҙе:

а) *арбаһы-ние, тауышы-ние;*

б) *уйлап-нитеп, оялып-нитеп; алһа-нитһә, күрһә-нитһә* һ. б.

7. Ҡушар йөрөгән атамалар: *генерал-майор, дизель-мотор, Премьер-министр, штаб-квартира.*

8. Сәйәси фирҡә һәм йүнәлештәрҙең, улар эсенә ингән кешеләрҙең ҡушар атамаһы, ошо атамаларҙан яһалған шартлы сифаттар:

а) *социал-демократия, анархо-синдикализм;*

б) *социал-демократик* һ. б.

9. Ҡатмарлы үлсәү берәмектәре: *киловатт-сәғәт, тонна-километр* һ. б.

10. Көсәйтеү киҫәксәһе менән килгән ҡатмарлы һүҙҙәр: *ап-аҡ, бәп-бәләкәй, йәп-йәшел, кәп-кәкре, нап-насар, тап-таҡыр, төп-төҙ, күм-күк; сем-ҡара, дөм-ҡараңғы, өр-яңы, көпә-көндөҙ.*

11. Ике өлөшө лә бер үк һүҙҙән торған һүҙбәйләнеше араһындағы грамматик форма юғалғанда: *үҙ-үҙен, бер-береһен* һ. б.

12. Ҡабатланған бер үк һүҙ грамматик форма менән бәйләнһә лә, ике һүҙ дөйөм бер мәғәнә алғанда:

а) *асыҡтан-асыҡ, буйҙан-буй; берҙән-бер, берен-бере, үҙенән-үҙе;*

б) *батырҙарҙың-батыры, матурҙарҙың-матуры, зәһәрҙең-зәһәре;*

в) *ҙурайғандан-ҙурая, ҡыҫҡарғандан-ҡыҫҡара, көсәйгәндән-көсәйә, ҡыҙғандан-ҡыҙа;*

г) *күҙгә-күҙ* (ҡарап), *ҡулға-ҡул* (тотошоп) һ. б.

13. Ике сик араһын белдергән һүҙҙәр һәм һандар һыҙыҡ аша яҙыла: *Өфө — Мәскәү поезы, 1976 — 1980 йылдар, 4—5* метр һ. б.

## § 33. Яңғыҙлыҡ исемдәр һәм атамалар яҙылышы

А. 1. Ер-һыу атамаларының диалекталь фонетик үҙенсәлектәре әҙәби телгә үҙгәртелмәй алына: *Атауҙы* (күл), *Һаттыҡ* (ауыл), *Сұртанды* (күл), *Үләнде* (күл), *Таҙлар* (ауыл) һ. б.

2. Ер-һыу атамаларының төп атама өлөшөнә ингән бөтә һүҙҙәр ҡушып яҙыла: *Атсабар* (ауыл), *Баламйәбеш* (тау), *Биштәкә* (ауыл), *Бүралған* (тау), *Һыйырғасҡан* (тау), *Алайғыр* (ауыл).

3. Ике үҙ аллы атаманан ҡушарлап яһалған ер-һыу атамаларының һәр өлөшө ҙур хәреф менән һыҙыҡса аша яҙыла: *Ҡолтай-Ҡаран* (ауыл), *Еҙем-Ҡаран* (ауыл), *Ҡаран-Ҡуңкас* (ауыл), *Ҡыпсаҡ-Асҡар* (ауыл), *Ҡаңны-Төркәй* (ауыл) һ. б.

4. Ер-һыу атамаһына аныҡлаусы булып килгән һүҙҙәр ҙур хәреф менән айырым яҙыла: *Оло Эйек, Кесе Эйек* (йылғалар), *Беренсе Этҡол, Икенсе Этҡол* (ауылдар), *Иҫке Ҡаратаулы, Яңы Ҡаратаулы, Үрге Йәркәй* (ауылдар) һ. б.

Ләкин аныҡлаусы үҙ мәғәнәһен һәм баҫымын юғалтып, аныҡланыусыһы менән бергә бер бөтөн атама яһауҙа ҡатнашһа, ҡушып яҙыла: *Һарығамыш* (ауыл), *Ҡараяҡуп* (ауыл) һ. б.

5. Төп атамаға эйәреп килгән терминдар бәләкәй хәреф менән айырым яҙыла: *Урал тауы, Һаҡмар йылғаһы, Салауат Юлаев проспекты, Эй урамы, Пушкин бульвары* һ. б.

Ләкин шул терминдар эйәлек ялғауын юғалтып, төп атама менән ҡушылһа, бергә яҙыла: *Ҡарауылтау, Ямантау, Стәрлетамаҡ, Арҡауыл, Яңауыл, Ағиҙел, Аҡкүл, Уралтау* һ. б.

Иҫкәрмә: *Аҡ диңгеҙ, Ҡара диңгеҙ, Ҡыҙыл диңгеҙ, Һары диңгеҙ* кеүек рус теленән алынған атамалар айырым яҙыла.

Б. 1. Төрлө ойошма атамаларының һәм башҡа яңғыҙлыҡ исемдәрҙең төп өлөшө ҙур хәреф менән, уға эйәреп килгән терминдар бәләкәй хәреф менән яҙыла: *Өфө дәүләт нефть техник университеты, Белорет металлургия комбинаты, Өфө ғилми үҙәге, Башҡортостан фәндәр академияһы һ. б.*

2. Шартлы исемдәр тырнаҡ эсенә алына: *«Ирәндек» магазины, «Ҡарлуғас» ательеһы* һ. б.

Ошо иҫәптән гәзит, журнал, китап, әҫәр исемдәре, төрлө машина һәм башҡа нәмәләрҙең шартлы атамалары ла ҙур хәреф менән яҙылып, тырнаҡ эсенә алына: *«Ағиҙел» журналы, «Башҡортостан» гәзите, «Ҡан» романы, «Союз-5» карабы, «Ромашка» кәнфите* һ. б.

Был атамалар **исемендәге** тигән һүҙ менән килһә, тырнаҡ ҡуйылмай: *Мостай Кәрим исемендәге башҡорт гимназияһы, Салауат Юлаев исемендәге хоккей клубы һ. б.*

Тырнаҡ эсенә алынған һүҙҙәрҙең ялғауы тырнаҡ тышына сығарылмай: *«Башҡортостан ҡыҙында» сыҡҡан мәҡәлә, «Ысын кеше тураһындағы повесты» уҡыным.*

3. Төрлө машина йәки техник ҡорамалдың шартлы атамаһын түгел, маркаһын белдергән билдәләр тырнаҡ эсенә алынмай яҙыла: *ГАЗ-69 машинаһы, Т-34 танкыһы, Ил-18 самолеты* һ. б.

## § 34. Ярҙамлыҡ һүҙҙәр яҙылышы

А. 1. Йыйыу, бәйләү теркәүесе һәм көсәйтеү киҫәксәһе булып йөрөгән **ла-лә, ҙа-ҙә, да-дә, та-тә** айырым яҙыла; был киҫәксәләр, ялғау кеүек үк, сингармонизм законына буйһона, йәғни нәҙек һүҙҙән һуң нәҙек, ҡалын һүҙҙән һуң ҡалын була: *һин дә мин, бар ҙа ал, эшләй ҙә ашай; Юлай ҙа, Шәрип тә килгән; тауышы ла сыҡмай, бөтәһе лә бында* һ. б.

Иҫкәрмә: Ҡәнәғәтлекте белдергән **әлдә** һүҙендәге дә ҡушып яҙыла: *әлдә килдең әле, әлдә ямғыр яуманы.*

2. Сикләү, конкретлау киҫәксәләре булып йөрөгән **уҡ-үк, ғына-генә, ҡына-кенә** шулай уҡ айырым яҙыла; был киҫәксәләр сингармонизм законына буйһоноп, нәҙек һүҙҙән һуң нәҙек, ҡалын һүҙҙән һуң ҡалын итеп яҙыла: *алғас уҡ, әйтеп үк; ул ғына, һине генә, саҡ ҡына, өс кенә* һ. б.

Иҫкәрмә: 1) Түбәндәге һүҙҙәрҙә **уҡ-үк** ҡушып яҙыла: *әйҙүк* (түрҙән уҙ), *берүк* (әйтмә);

2) Иркәләүҙе аңлатҡанда, **ғына-генә, ҡына-кенә** ҡушып яҙыла: *балағынам, күҙгенәм* һ. б.

3. Көсәйтеү, раҫлау киҫәксәһенең тулы формаһында һәр компонент үҙенә башҡа айырым яҙыла: *күргән дә баһа, ямғыр ҙа баһа, эт тә баһа, асҡан да баһа, килә лә баһа, осло ла баһа;* ҡыҫҡа формаһы ҡушып яҙыла: *алған даһа, эшләй ҙәһә* һ. б.

4. **Икән, иһә, ине** ярҙамлыҡ ҡылымдары айырым яҙыла: *бармы икән, бар икән; ул иһә, яҡшылыҡ иһә, йә иһә, ала ине, килер ине.*

Б. 1. Үтенеү, ялыныу киҫәксәләре булып йөрөгән **һана-һәнә, сысе, со-сө** ҡушып яҙыла: *барһана, әйтһәнә; бирсе, торсо, йөрөсө.*

2. Икеләнеү киҫәксәһе булып йөрөгән **лыр-лер, ҙыр-ҙер, дыр-дер, тыр-тер** ҡушып яҙыла: *баралыр, күргәндер, эшләйҙер* һ. б.

Һорау киҫәксәһенән һуң килә торған **ни** алмашы айырым яҙыла: *бирҙеме ни, беләме ни* һ. б.

## § 35. Ялғауҙар яҙылышы

А. Ялғауҙар бөтәһе лә ҡушып яҙыла.

Б. Башҡорт теленең үҙ һүҙҙәрендә ялғауҙың ҡалынлыҡ-нәҙеклеге нигеҙгә ҡарап билдәләнә, йәғни нигеҙе ҡалын һүҙгә ҡалын ялғау

ҡушыла: *арба — арбаны, ҡолон — ҡолонға, ҡыш — ҡыштың, туҙ — туҙҙың;* нигеҙе нәҙек һүҙгә нәҙек ялғау ҡушыла: *бесәй — бесәйгә, ит — иттән, дөгө — дөгөнөң, сүл — сүлдәр.*

В. Рус әҙәби теленән үҙләштерелгән һүҙҙәрҙең ялғауы ҡалынлыҡ-нәҙеклек йәһәтенән түбәндәгесә билдәләнә:

1. Йомшаҡ тартынҡыға бөткән һүҙҙәргә:

а) Аҙағы **-ль, -нь** менән килһә йәки ике тартынҡы менән бөтөп, һуңғыһы йомшаҡ булһа, нәҙек ялғау ҡушыла: *июль — июлдә, фестиваль — фестивалгә, автомобиль — автомобилде, нуль — нулде, гениаль — гениаллек; июнь — июндә, поршень — поршендән, шампунь — шампунгә, пристань — пристандәр; Рязань — Рязангә, Сызрань — Сызрандә; ферзь — ферзде, нефть — нефтте, Пермь — Пермдә, верфь — верфте* һ. б.

б) Аҙағы **-рь, -сь, -чь, -шь** менән килһә, ҡалын ялғау ҡушыла: *секретарь — секретарға, лагерь — лагерҙа; перепись — переписта; картечь — картечты; тушь — тушҡа, гуашь — гуаштың.*

Ялғау ҡушҡанда һүҙ аҙағындағы **-ь** билдәһе һәр ваҡыт төшөп ҡала.

Иҫкәрмә: Аҙағы **-сть** менән бөткән һүҙҙәргә, һуңғы **-ть** төшөрөп ҡалдырылып, ҡалын ялғау ҡушыла: *ведомость — ведомоста, власть — власы, часть — часҡа, повесть — повестың.*

2. Һуҙынҡы, ҡаты тартынҡы йәки **-й** менән бөткән рус һәм сит тел һүҙҙәренә ҡалын ялғау ҡушыла: *лупа — лупаны, какао — какаоға; жюри — жюриҙы, пони — лониҙы, такси — таксиҙа, мари — мариҙар, коньки — конькиға, Сочи — Сочиға; желе — желенан, атташе — атташела, каноэ — каноэға, Улан-Удэ — Улан-Удэла, предприятие — предприятиела, ателье — ательенан, Приморье — Приморьела, меню — менюҙы, интервью — интервьюнан, идея — идеяны; кий — кийҙы, калий — калийҙан, кафетерий — кафетерийҙа, юбилей — юбилейға, мавзолей — мавзолейҙа, музей — музейҙа, адыгей — адыгейҙар, Алтай — Алтайҙа, командир — командирға, вазелин — вазелинға, аппетит — аппетитлы, гибрид — гибридтар, алюмин — алюминдан, щит — щитҡа, приз — призға, кит — киттың, миф — мифты, факел — факелға, факультет — факультетта, дуэт — дуэттың, актер — актерҙар; парашют — парашютлы, приют — приютта, снаряд — снарядтан, пункт — пункттан, оттиск — оттискынан, статист — статисҡа, лабиринт — лабиринтта, резерв — резервҡа, конгресс — конгресҡа, интеллект — интеллектты, фильтр — фильтрлы, цилиндр — цилиндрҙа, регистр — регистрға, министр — министрҙы; ритм — ритмлы, цифр — цифрға, негр — негрҙан, серб — сербтар, люкс — люкста; рейд — рейдҡа, сейф — сейфта, бассейн — бассейндың, дюйм — дюймда; вальс — вальсҡа, асфальт — асфальтта, вольт — вольттың, пульс — пульсы, фильм — фильмды, рельс — рельстан.*

3. Рус телендәге **-ев, -ин** формалары менән яһалған башҡорт фамилияларына, нигеҙе нәҙек булһа, нәҙек ялғау, нигеҙе ҡалын булһа, ҡалын ялғау ҡушыла: *Исмәғилевте, Ғәлиевкә, Әхмәтшингә; Байышевтан, Юлдашевҡа, Мостафиндың, Сафинды* һ. б.

Г. Ғәрәп-фарсы телдәренән үҙләштерелгән һүҙҙәрҙең һуңғы ижеге **-и-** менән килеп, унан алдағы ижеге ҡалын булһа, ҡалын ялғау ҡушыла: *ғалим — ғалимды, ғашиҡ — ғашиҡтар, тарих — тарихта, мәғариф — мәғарифта, шаһит — шаһитты, Ҡадир — Ҡадирға, Шафиҡ — Шафиҡты, Харис — Харистан, Камил — Камилға.*

Ғ. 1. Аҙағы **-ск, -нг, -нк** менән бөткән һүҙҙәргә ялғау ҡушҡанда, ике араға **-ы-** ҡуйып яҙыла: *отпуск — отпускыла, диск — дискыны, пропуск — пропускыға; лозунг — лозунгылар, лозунгыһы; митинг — митингыға, митингыһы; танк — танкыны, танкыһы; банк — банкыла, банкыһы* һ. б.

Шул уҡ **-ск** менән бөткән ҡала исемдәренә ялғау ҡушҡанда **-и-** өҫтәп яҙыла: *Омск — Омскиға, Минск — Минскиҙа.*

2. Аҙағында **-сть, -ст, -фт, -зд** торған һүҙҙәргә ялғау ҡушҡанда, һуңғы **-т, -ть, -д** төшөп ҡала: *трест — треҫка, солист — солисы, атеист — атеистың, текст — текста; власть — власҡа, волость — волоста; ландшафт — ландшафы, шрифт — шрифы; поезд — поезға, подъезд — подъезға.*

Ә яңғыҙлыҡ исемдәрҙә **-т** һаҡлана: *Кронштадт — Кронштадтта, Шмидт – Шмидтты, Брест — Брестҡа.*

3. Һүҙ аҙағындағы ҡуш тартынҡының береһе ялғау ҡушҡанда төшөп ҡала: *кросс — кросҡа, металл — металы, грамм — грамдың, грипп — грипптан, ватт — ватты.*

Ә яңғыҙлыҡ исемдәрҙә аҙаҡтағы ҡуш тартынҡы һаҡлана: *Донбасс — Донбасста, Томас Манн — Томас Манндың.*

4. Аҙағы **-пп, -кк** менән бөткән һүҙҙәргә һуҙынҡы менән башланған ялғау ҡушҡанда, тороп ҡалған бер **-п** һәм **-к** башҡа һүҙҙәрҙәге кеүек үк, **-б, -г** хәрефенә күсә: *грипп — грибы* һ.б.

5. Аҙағы **-и, -у, -ю(у)** менән бөткән сит һүҙҙәргә, һуңғы өн һуҙынҡы итеп түгел, дифтонгылаштырып әйтелгән өсөн, **-ҙ** менән башланған ялғау ҡушыла: *такси – таксиҙар, таксиҙа; Баку — Бакуҙан, Бакуҙың; меню — менюҙан, менюҙы* һ. б.

Шул һүҙҙәрҙең аҙағы **-и** менән бөткәндәренә эйәлек ялғауы ҡушҡанда, араға **-й-** ҡуйып яҙыла: *йөк таксийы, католиктар руханийы.*

6. Аҙағы ҡаты **-к, -г** менән бөткән сит һүҙҙәргә **-к** менән башланған ялғау ҡушыла: *барак — баракка, металлург — металлургка* һ. б.

Д. Ҡыҫҡартылған һүҙҙәргә ялғау тулы әйтелешенә түгел, ҡыҫҡа әйтелешенә ҡарап ҡушыла; һүҙ менән ялғау араһында һыҙыҡса ҡуйыла: *РФ-ның, БР-ҙа, АҠШ-ҡа.*

Е. 1. Цифрҙарға ялғау һыҙыҡса аша ҡушыла: *5-се, 6-ға, 10-ды.*

2. Рим цифрҙарынан һәм датаны белдергән ғәрәп цифрҙарынан һуң рәт һанын белдергән ялғау яҙылмай: *X синыф, V бүлек, 1973 йыл, 9 декабрь.*

3. 1) Ҡылым яһаусы **-ла** ялғауы бер урында ла дүрт бәғәләш законына* буйһонмай, гел бер вариантта ғына йөрөй: *ҙурлау, матурлау, ғырлау, тығырлау (тығырлаҡ), дуңғырлау (дуңғырлаҡ); суҡанлау, ырғанлау, сыпранлау.*

2) Һүҙ эсендә лә дүрт бәғәләш законы һаҡланмай: *бөрләгән, аҡсарлаҡ, төйләгән, тәгәрлек, үңлек.*

3) Үҙе бер бөтөн булып ныҡынған **-ылда** ялғауы, борондан ҡатып ҡалған айырым һүҙҙәр генә шул законға яраҡлашҡан көйө ҡала: *ахылдау, шаҡылдау, ғырылдау; урындыҡ, ҡарындыҡ* һ. б.

## V. Ҙур хәрефтәр яҙылышы

Ҙур хәреф менән башлап яҙыла:

1. Һөйләм башындағы һүҙҙәр.

2. Яңғыҙлыҡ исемдәр һәм ҡушаматтар: *Өфө, Урал, Рәшит Ниғмәти, Әсхәл Әхмәт-Хужа, Аҡъял батыр; Юпитер, Галактика; Аҡтырнаҡ, Ҡарағолаҡ* һ. б.

Иҫкәрмә: Ҡояш, ер, ай һүҙҙәре күк есеме булараҡ атап әйтелгәндә ҙур хәреф менән, башҡа ваҡытта бәләкәй хәреф менән яҙыла: *Ерҙең барлыҡҡа килеүе, Ҡояштағы таптар,* ләкин *ҡояш сыҡты, ер йәшәрҙе.*

3. Төрлө ойошма һәм предприятиеларҙың бер нисә һүҙҙән торған атамаһындағы тәүге һүҙ: *Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты, Башҡорт дәүләт академия драма театры, Башҡорт дәүләт медицина университеты* һ. б.

Иҫкәрмә: Бер нисә һүҙҙән яһалған иң юғары дәүләт органдарының, иң мөһим халыҡ-ара ойошмаларҙың, шулай уҡ ил-дәүләттәрҙең ҡатмарлы атамаһындағы һәр атама һүҙ ҙур хәреф менән башлап яҙыла: *Башҡортостан Республикаһы, Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте, Берләшкән Милләттәр Ойошмаһы* һ. б.

4. Илдәге юғары вазифа атамалары һәм хөрмәт исемдәре: *Дәүләт Думаһы, Башҡортостан Республикаһы Президенты, Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы — Ҡоролтай Рәйесе, Башҡортостан Республикаһы Премьер-министры, Советтар Союзы Геройы* һ. б.

5. Илдәге байрам, танылҡлы дата һәм мөһим ваҡиғаларҙы белдергән атамаларҙың тәүге һүҙе: *Белем көнө, Апрель конференцияһы, Яңы йыл байрамы* һ. б.

Дата менән аталған байрам исемендәге һан цифр менән бирелһә — ай исеме, һүҙ менән бирелһә — икеһе лә ҙур хәреф менән яҙыла: *8 Март байрамы — Һигеҙенсе Март байрамы.*

6. Бер нисә һүҙҙең хәрефенән ҡыҫҡартып яһалған атамалар: *РФ, БР, БМО, БДПУ* һ. б.




**М. Ғ. Ҡулаев төҙөгән әлепейҙең титул бите**



-19-

Бърьнсь укъу.

Jър, кун, ҫъу, диңгеҙ, jълға, тау, таш, урман, туғаj, дөнjа.

Ҡъш, jәj, jаҙ, коҙ.

Jамғър, ҡар, бөрсаҡ, төман, буран, рашҡъ, бөлөт, иjаҙ, ҫъуъҡ, ҫауа, ъҙҙъ, jълъ, ҡөjаш, аj, jөндөҙ.

Кышь.

Кышьнын башъ бар, каүҙаҫъ, икь ҡулъ, икь аjағъ бар.

Баштън алjағъ — бит, артjағъ сыкак, jанjағъ — сика, өҫ jағъ — туба.

Бит тубаҫън сас ҡаплаj; битта икь jаңаҡ бар, икь күҙ, морөн, ауъҙ бар. Күҙләреҙын ур jағъ маңнаj, ауъҙҙын тубан jағъ ыjак.

Икь сикала икь ҡөлаҡ бар.

Баш бълан каүҙа араҫънда муjън.

Каүҙаһын ур jағъ кукьрак, тыjлар,

М. Ғ. Ҡулаевтың әлепейенән өҙөк

həjləp ytəʙeđ: 1) qara tal, 2) kəzə talь (козлява), 3) qьrsьn talь (quʙatal) həm 4) qьđьl tal (şiluga).

Q a r a t a l. Ul ʙeđđə 9 mitr samahь ʙejeklegendə lə yƀə. Unьꞑ orloƣo, ʙaşqa tɵrlɵ taldarđьqь hьmaq, uƀaq orloƣona ʙik oqşap, şunьqь kevek suqtarь la ʙula. Tamьrđarь la tərən kitməj, tirə jaqqa tarala. Qara taldьꞑ haʙaƣь ƣəđəttə kəkre ʙulьp, ese qьvьş, ɵlpɵhɵ đur ʙula. Вьl da ʙaşqa taldar hьmaq ike ɵjlɵ ʙula. Ata səskələrđeꞑ, atalьq aƣzalarđьꞑ tɵptərendə· ʙələkəj genə səskə hьvь havьttarь (нектарник) ʙulьp, unda hər vaqьt şьjьq qьna səskə hьvđarь ʙula. Ul ʙal qorto həm kyʙələktərđe oşo səskə hьvđarь menən yđenə tarta. Unь hurьrƣa kilgən kyʙələk həm qorttar, şul aƣastьꞑ orloqtarь torƣan saꞑdarьna ʙujalьp sьƣalar. Şul saꞑdarđь ikense aƣastarđaƣь inəlek aƣzalarьna ʙarьp joqtoralar. Вьl eştə jel də ʙik đur jarđam itə. Şulaj itep tal orloqlana. Qajhь vaqьt ʙer tɵrlɵ taldьꞑ saꞑь, ikense tɵrlɵ saꞑdьꞑ inəlegenə eləgep orloqlanьv, ike tɵrlɵ saꞑ qatnaşьv səʙəʙe menən jaꞑь ikense ʙer tɵrlɵ tal kilep sьƣa. Taldarđьꞑ xəđerge kɵndə ʙik kyp tɵrlɵ ʙulьvьnьꞑ səʙəʙe, fən ƣalimdəre ʙьna şundaj orloqlanьvđan kyrələr. Qara taldarđьꞑ ata həm inə səskələre alqalarƣa jьjnalƣan ʙulalar. Qara tal jaqtьlьq jaratьvsan, şunlьqtaꞑ, unь asьq jerđə, jaqtь urьnda yƀterergə kərək. Ul ʙaşqa taldar hьmaq tɵptən yrep həm haplap yƀevđe jarata. Unьꞑ ʙer ʙotaƣьn alьp dьmlь jergə qađap qujhaꞑ ul şəpləp yƀə ʙaşlaj. Unь yƀtergəndə ƣəđəttə oşo jul menən fajđalanьp yƀterələr. Qara tal aƣasь jeꞑel, jomşaq həm jeꞑel ʙɵgɵlɵvsən ʙulƣanlьqtan duƣa, qьrşav kevek nəmələr jahavƣa kitə. Sovittar Sojuzьnьꞑ qajhь ʙer tɵʙək-tərendə taldь duƣa ʙɵgɵr ɵsən sənsep yƀterələr.

K ə z ə t a l ь. Вьl ʙik ere ʙulmaj, kyʙerək urmanda ʙaşqa aƣastarđьꞑ kylətkehendə yƀep, kylətkegə sьđamlь. Unьꞑ

38

Ә. Йәрмөхәмәтовтың «Урман тураһында» (Башҡортостан дәүләт нәшриәте, Өфө, 1934 йыл) китабынан өҙөк

## TƟP HƟNƏR

Rivolytsejənan təvlə Aqquƶanьꞑ eşe xalq arahьnda ukazhьđ mullalьq itev, quştanlьq jahav ine. Şunьꞑ' arqahьnda ul yđ ƣөmөrөndə вajtaq qьna xəl jьjьp alƣan. Inde şunь yƀterergə, yrsetergə genə kərək ine. Aqquƶa өsөn aвajhьđđan rivolytsejə вulьp kitep, вajaƣь ujđь вarlьqqa sьƣarьv məs'ələhe juqqa sьqtь. Xəđer inde şul xəlen пьƣьtьp alьv өsөn вytən saralar kyrergə kərək вuldь.

Ađьq razvirstkahь alьƀ Tamjan-Qataj tirəhendəge qaraꞑƣь avьldarđь la eləkterep alьp kitte. Bьl Aqquƶanьꞑ da alƣь kөn өsөn ujlap qujƣan matur xejaldarьn jemerep, iđep taşlanь. Ləkin his вer tөrlө вuldьra almaƣas, ul вisələre menən kəꞑəşep, вer nisə jomanan huꞑ „sovitsь" вulьrƣa qarar вirđe.

Avьlda вer keşeneꞑ də jađьv-hьđьv eşe menən jynle tanьşlьƣь вulmaƣanlьqtan fajđalanьp, ul sovittьꞑ sikritarь вulьp aldь. Ul şunьꞑ arqahьnda yđeneꞑ вajlьƣьn, aƣaj-enelərenen də „vaq-tөjək-

Ғөбәй Дәүләтшин. Хикәйәләр. Башгиз, Матур әҙәбиәт секторы. Өфө, 1935

## ЙӨКМӘТКЕҺЕ

Икенсе сығарылышҡа инеш һүҙ . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 6
Касим Закирович Ахмеров . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 9
Инеш . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 12
I. Төрки халыҡтарында яҙыу. Революцияға тиклем башҡорт яҙыуы. Ғәрәп алфавиты . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 28
II. Башҡорт әҙәби теленең ғәрәп графикаһы нигеҙендә төҙөлгән алфавиты һәм орфографияһы . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 50
III. Башҡорт әҙәби теленең латин графикаһы нигеҙендә төҙөлгән алфавиты һәм орфографияһы . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 62
IV. Башҡорт әҙәби теленең рус графикаһы нигеҙендә төҙөлгән алфавиты һәм орфографияһы . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 85
Һығымталар . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 122
Резюме . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 126
Әҙәбиәт . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 130
Ҡ. З. Әхмәровтың хеҙмәттәренең библиографияһы . . . . . . . . . . . . . . . 136
Башҡорт яҙыуы тарихы буйынса әҙәбиәт исемлеге . . . . . . . . . . . . . . . 149
Ҡушымта . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 151

*Научное издание*

*Ахмеров Касим Закирович*

**Из истории башкирской письменности**

*(на башкирском языке)*

Төҙөүсеһе *Р. Н. Кәримова*
Мөхәррире *Ә. Й. Илекәева*
Биҙәлеш мөхәррире *А. Р. Мөхтәруллин*
Рәссамы *С. М. Ефименко*
Техник мөхәррире *А. М. Кәлимуллина*
Корректорҙары *Ф. Н. Харрасов, З. М. Камалова*

Баҫырға ҡул ҡуйылды 17.09.12. Формат $60\times84^{1}/_{16}$. Мәктәп гарнитураһы. Офсет ысулы менән баҫылды. Шартлы баҫма таб. 10,69. Шартлы буяу отт. 11,16. Иҫәп-нәшер таб. 8,71. Тиражы 1500 дана. Заказ 1.0035.12.

КИТАП

К.З. Әхмәров

Башкорт яҙыуы тарихынан